# Ағиҙел

**Өфө,**
**сентябрь**
**2009**

**9 (1038)**

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Роберт БАЙЫМОВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаçары),*
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ,
Фәнил ҠОҘАҠАЕВ,
Ноғман МУСИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире),*
Әмир ЮЛДАШБАЕВ.

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип),*
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир),*
Харис Сәғитов *(баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаçары)*,
Зилә Йәнбәкова, Сәлимә Байгилдина *(корректорҙар),*
Рәйсә Камалетдинова, Ләйсән Ишембәтова *(компьютерҙа йыйыусылар),*
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе),*
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар).*

Журнал Башҡортостан Республикаһының Матбуғат һәм киң мәғлүмәт министрлығында
1992 йылдың 10 декабрендә теркәлде.
Таныҡлыҡ № 646.

---

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баçырға ҡул ҡуйылды 01.09. 2009. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70x100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баçылды.
Шартлы баçма табаҡ 15,6. Иçәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 4 192 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0106.09.

---

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel.pressarb.ru.

---

Баçма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль
агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке
Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

---

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты»
дәүләт унитар предприятиеһында баçылды.
(450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в ГУП РБ «Уфимский полиграфкомбинат»
(450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, пр.Октября, 2).

---

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р /с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

©«Ағиҙел», 2009 (9, 1038)

# БЫЛ ҺАНДА:

ШИҒРИӘТ

**Риф Мифтахов**. Сабыйҙар бишеге өҫтөндә. Поэма. ................5
**Рәмил Йәнбәк**. "Уйҙар урап алды ҡабаттан..." Шиғырҙар. ....20

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Камил Зиганшин.** Джамбо, Африка! Сәйәхәтнамә. Башы. .....28

СӘХНӘ ӘҪӘРҘӘРЕ

**Хәкимйән Зарипов.** Ҡуш йөрәкле егеттәр. Комедия. ...............54

*Стәрлетамаҡ яҙыусылар ойошмаһына — 25 йыл*

**Кәбир Аҡбашев**. Тынғыһыҙ ижад усағы. .....................................69
**Салауат Рәхмәтулла**, **Тимер Ниәтшин**, **Кәбир Аҡбаш**, **Рәшит Заһиҙуллин**, **Земфира Муллағәлиева**, **Асия Басирова**, **Рәйлә Нәҙерғолова**, **Рәшиҙә Шәмсетдинова**, **Әҡсән Хәлилов**, **Рима Ғәлимова**, **Рита Фәтҡуллина**, **Кәрим Булат**, **Фәрит Әхмәтов**, **Артур Булатов**, **Ғәлиә Ғәлиәскәрова**, **Рәсим Шәфи-Рәхмәт**. Шиғырҙар.
**Флүрә Сәлимова**. Ерҙе һатмағыҙ! Уйланыу; **Әмир Ҡотлозаманов**. Фәрештә. Хикәйә; **Риф Дәминев**. Һуҡ бармаҡлы бейәләй. Хикәйә-хәтирә; **Рауил Галин**. "Йырла, улым..."; **Тимербулат Мөхәмәтҡолов**. Аптырамай. Уймаҡ хикәйәләр.

ӨМӨТЛӨ ҠӘЛӘМ

**Малик Ильясов.** Мөхәббәт кәмәһе. Уймаҡ хикәйәләр. ......113

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Айһылыу Вахитова**. Боҙҙар булып аҡтарылыр күңел. .................118

БЕҘҘЕҢ ЮБИЛЯРҘАР

**Рәсих Ханнанов**. "Әй буйына ҡайтам әле..."
*(Ризван Хажиевҡа 70 йәш).* ..........................................................123

БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

**Ирек Кинйәбулатов**. Ярһыу ғүмер, ярһыу ижад
*(Ғәзим Шафиҡовтың тыуыуына 70 йыл).* ....................................127

ӘҘӘБИ МИРАҪ

**Ғәли Ибраһимов.** Кинйә. Тарихи роман. III китап.
Бүгәсәү батша һанаты. Дауамы. ....................................................131

ПУБЛИЦИСТИКА

**Фәнил Күзбәков**. Милли мәғариф: төп бурыс —
шәхес тәрбиәләү. ..........................................................................171
**Әхмәт-Гәрәй Йәнгәлин**. Һуңғы башҡорт ханы йәки
Аҡай —Ҡараһаҡал яуына яңы ҡараш. Башы. ...............................177

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:


ПОЭЗИЯ

**Р.Мифтахов.** На колыбеле (поэма), Рамиль Янбек *(стихи)*.

ПРОЗА

**К.Зиганшин.** Джамбо, Африка! *(записки путешественника*). *Начало.*

СЦЕНИЧЕСКИЕ ПРОИЗВЕДЕНИЯ

**Х. Зарипов.** Бравые ребята *(комедия)*.

*Стерлитамакской писательской организации - 25 лет*

**К.Акбашев.** Очаг творческого вдохновения.
**Салават Рахматулла, Т.Ниатшин, Кабир Акбаш, Р.Загидуллин, З.Муллагалиева, А.Басырова, Р.Надергулова, Р.Шамсетдинова, А.Халилов, Р.Галимова, Р.Фаткуллина, Карим Булат, Ф.Ахметов, А.Булатов, Г.Галиаскарова, Расим Шафи-Рахмат** *(стихи)*. **Ф.Салимова.** Не продавайте землю! *(раздумье)*; **А.Кутлузаманов**. Ангел *(рассказ)*; **Р. Даминов**. Солдатские варежки *(рассказ-воспоминание)*; **Р.Галин.** Спой, сынок...; **Т.Мухаметкулов**. Его не удивишь *(миниатюры)*.

ПРОБА ПЕРА

**М.Ильясов.** Лодка любви *(миниатюры)*.

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

**А.Вахитова.** Душа как весенний водоворот.

НАШИ ЮБИЛЯРЫ

**Р.Ханнанов.** "Вот вернусь я к Ай реке..." *(70 лет Ризвану Хажиеву)*.

НАШ КАЛЕНДАРЬ

**И. Киньябулатов.** Беспокойная жизнь пылкого творца *(70 лет со дня рождения Газима Шафикова)*.

ЛИТЕРАТУРНОЕ НАСЛЕДИЕ

**Г.Ибрагимов.** Кинзя. Послы Пугачева *(исторический роман. III книга)*. *Продолжение.*

ПУБЛИЦИСТИКА

**Ф.Кузбеков.** Национальное образование: главная задача - воспитание личности.
**Ахмет-Гарей Янгалин.** Последний башкирский хан или новый взгяд на восстание Акай – Карасакала. *Начало.*

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА


---


**Телефондар:**

Баш мөхәррир – 277-76-88 (факс)

Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип – 274-89-65

Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре –277-87-73

Проза бүлеге – 277-87-50

Бухгалтерия – 277-78-90 (факс)

- Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.
- Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.
- Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.
- Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.

*Шиғриәт*



**Риф**
**МИФТАХОВ**

# САБЫЙҘАР БИШЕГЕ ӨҪТӨНДӘ

**ПОЭМА**

## I
## *Тәүге ауаз*

*Илаһи минуты*
*Донъяның…*
*Был тауыш тылсымлы,*
*Гонаһһыҙ,*
*Иң бөйөк музыка –*
*Тыңлағыҙ:*
*Әйтерһең, һибелә*
*Тәңкәләр.*
*Әйтерһең, һөйләшә*
*Сәскәләр.*
*Әйтерһең, яҙ килгән –*
*Гөрләүҙәр:*
*Әйтерһең, көмөштәй*
*Шишмәләр*
*Бишектән сылтырап*
*Үтәләр…*
*Был ауаз йәшәүгә*
*Тантана:*
*Кеше һәм кешелек*
*Донъяла*
*Шул тәүге ауаздан*
*Башлана.*

*Ул килә көньяктан,*
*Төньяктан,*
*Көнсығыш, көнбайыш –*
*Һәр яктан.*
*Сабыйҙар тауышы*
*Булмаһа,*
*Мәғәнә бармы ни*
*Донъяла!*
*Уларҙың илауы –*
*Бер илһам.*
*Көләүе – яғымлы*
*Йондоҙҙан.*
*Ер шары сәскәһе –*
*Сабыйҙың*
*Тылсымлы, гонаһһыҙ*
*Тауышын*
*Ишеткән саҡтарҙа,*
*Кешеләр,*
*Өндәшә выжданым,*
*Намыҫым:*
*Ҡай ерҙә, ҡай илдә*
*Тыумағыҙ,*
*Аҡ тәнле йә ҡара*
*Булмағыҙ,*
*Таҡырмы, ташлымы*

---

*Риф Мифтахов 1939 йылдың 17 сентябрендә Ишембай районы Кинйәбулат ауылында тыуған. Байтаҡ проза һәм шиғри йыйынтыҡтар авторы. Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Ғәлимйән Ибраһимов исемендәге премия лауреаты.*

*Ҡәләмдәшебеҙҙе 70 йәшлек юбилейы менән ҡотлайбыҙ!*

*Юлығыҙ,*
*Телегеҙ, динегеҙ,*
*Йолағыҙ*
*Ниндәйен – барыбер –*
*Туктағыҙ:*
*Берүк, һуң булмаһын –*
*Уйлағыҙ,*
*Киләсәк хаҡына*
*Тыңлағыҙ:*
*Бишеккә – сабыйҙар*
*Тирбәлгән –*
*Иң хәтәр ҡоралдар*
*Төбәлгән.*
*Төбәлгән ер, һыу*
*Төбөнән.*
*Һауанан, диңгеҙҙәр*
*Төбөнән.*
*Сабыйға, әсәгә –*
*Һәр кемгә*
*Өс тонна ут-йәҙрә*
*Һәр кемгә*
*Ҡороска ҡойолған,*
*Ҡоролған,*
*Секундлыҡ осошҡа*
*Ҡуйылған:*
*Иң мәхшәр ҡороткос*
*Көс менән*
*Сабыйҙар бишеге*
*Өҫтөнән…*
*Ҡоралға ҡоралдар*
*Өҫтәлә,*
*Хиросима хәҙер*
*Эргәлә…*
*Бишектә талпынған*
*Сәскәне*
*Көл итһә ғәрәсәт*
*Мәхшәре:*
*Юғалыр сабыйҙар*
*Ауазы,*
*Әсәнең мөләйем*
*Ҡарашы,*
*Атаның ҡеүәтле*
*Тауышы,*
*Болонда ҡолондар*
*Сабышы.*
*Ҡоштарҙың таңдарҙа*
*Һайрауы,*
*Урамда сәскәләр*
*Байрамы,*
*Сылтырап шишмәләр*
*Ағыуы,*
*Елпелдәп усаҡтар*
*Яныуы…*
*Йәшәүҙең бишеге –*
*Ер шары*
*Үҙе һуң булырмы,*
*Ҡалырмы?!*
*Юҡ, әле һуң түгел*
*Торорға:*
*Донъяның маньягын*
*Тыйырға,*
*Һәләкәт сәсергә*
*Шыуышҡан*
*“Першинг” шәүләһен*
*Ҡыуырға!*
*Донъяла берләшһә*
*Кешеләр,*
*Һәр төрлө ҡоралдан*
*Көслөләр!*
*Балалар хаҡына*
*Ер шарын*
*Ололар аҡылы*
*Ҡотҡарһын!*
*Балалар ораны*
*Еремдә:*
*Ул һөйләй Ленинград*
*Телендә.*
*Дахау, Хиросима*
*Көлөндә*
*Яңынан терелеп,*
*Яңғырай һәр ерҙә*
*Бөгөн дә…*
*Ҡанһырай йөрәгем*
*Минең дә…*

## II
## Ленинград

Бөйөк Ватан һуғышында 900 төүлек буйына блокада ғазабын кисергән ленинградтарға, Ленинград балаларына.

*Туғыҙ йөҙ көн,*
*Туғыҙ йөҙ төн…*
*Нимәгә тиң?!*
*Нимәгә тиң?!*
*Һора уны*
*Яраланған,*
*Ҡара янған*
*Ағастарҙан*

*Йә таштарҙан;*
*Дары, ҡором*
*Күмер япҡан*
*Ҡара ҡарҙан,*
*Урамдарҙан!*
*Һора уны,*
*Болан кеүек,*
*Сапҡан килеш*
*Һәләк булған*
*Трамвайҙарҙан;*
*Аҙыҡ эҙләп,*
*Морон терәп,*
*Боҙға туңған*
*Турғайҙарҙан,*
*Яраланған,*
*Тик ҡоралын*
*Ташламаған*
*Һалдат төҫлө,*
*Көнө-төнө*
*Поста ҡалған*
*Заводтарҙан;*
*Уты, ҡото*
*Бергә туңған,*
*Тынды ҡурған*
*Йорт-ҡуранан.*
*Һора уны*
*Телһеҙ ҡалған*
*Музейҙарҙан,*
*Йәнһеҙ ятҡан*
*Күперҙәрҙән…*
*Юҡ, үҙенән*
*Һора уны*
*Һин ҡабаттан:*
*Ҡаһарманлыҡ*
*Ҡалаһынан –*
*Ленинградтан!*
*Туғыҙ йөҙ көн,*
*Туғыҙ йөҙ төн…*
*Нимәгә тиң?!*
*Нимәгә тиң?!*
*Уның хаҡын*
*Баһаларҙар:*
*Һыу юлында,*
*Заводтарҙа,*
*Тупһаларҙа,*
*Бер аҙымға*
*Хәле етмәй,*
*Ауған ҡарттар;*
*Ризыҡ һорап*
*Тилмереүсе*
*Ас балалар.*
*Һора уны*
*Төпрәләргә,*
*Кәбәктәргә*
*Ағас оно*
*Ҡуша-ҡуша*
*Икмәк һалған*
*Гороханан;*[1]
*Шул икмәкте*
*Бер умырып*
*Ҡабырға тип,*
*Өндәрендә*
*Һаташҡандан.*
*Һора уны*
*Әсәһенең,*
*Ағаһының,*
*Һеңлеһенең*
*Әжәленә*
*Шаһит ҡалған,*
*Көндәлеккә*
*Фашизмға*
*Хөкөм яҙған*
*Ун өс йәшлек*
*Татьянанан.*[2]
*Һора уны*
*Алты йөҙ ҙә*
*Ҡырҡ меңләптән*
*Ятып ҡалған*
*Һәр бер йәндән…*
*Улар әйтмәҫ!*
*Тик шаһит бар:*
*Һора уны*
*Шул тамуҡтан*
*Иҫән ҡалған*
*Тереләрҙән:*
*Улар әйтер*
*Тамаҡтағы*
*Төйөрҙәрен*
*Йота-йота…*
*Ҡаһармандар –*
*Тере шаһит*
*Ленинградтар!*

---

[1] *Анна Горохова – Ленинград блокадаһында төрлө нәмәләрҙән икмәк бешерә. Уның хаҡында “Комсомольская правда” гәзите яҙып сыҡты.*

[2] *Татьяна Савичева – әсәһенең һәм бөтә туғандарының аслыҡтан үлеүен яҙып бара. Уның көндәлеге Пискарев зыяраты мемориалына яҙып ҡуйылған.*

*Туғыҙ йөҙ көн,*
*Туғыҙ йөҙ төн…*
*Нимәгә тиң?!*
*Нимәгә тиң?!*
*Һора уны*
*Батырлыҡтың*
*Һин үҙенән!*
*Тыуғайны ул*
*Яғалашып*
*Әжәл менән;*
*Дошмандарға*
*Нәфрәт булып*
*Тыуғайны ул*
*Әҙәмдәрҙең*
*Түҙеменән;*
*Ун дүрттәге*
*Малайҙарҙың,*
*Етмештәге*
*Бабайҙарҙың*
*Хеҙмәттәге*
*Еңеүенән.*
*Был батырлыҡ*
*Ҡойолғайны*
*Ышаныстан*
*Һәм өмөттән,*
*Йәшәү тигән*
*Бейеклектән,*
*Кеше тигән*
*Бөйөклөктән.*
*Ҡойолғайны*
*Утта янмаҫ*
*Берҙәмлектән –*
*Ленинград*
*Күкрәгенән!*
*Тыуған ил, тип*
*Туғыҙ йөҙ көн,*
*Туғыҙ йөҙ төн*
*Бергә типкән*
*Ленинградтар*
*Йөрәгенән!*

### III

## Бәләкәй әсирҙәр

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Европа илдәренең меңәрләгән балалары фашист концлагерҙарында яфаланды. Бик күптәре ҡот осҡос шарттарҙан – яҙаларҙан, аслыҡтан, һыуыҡтан – һәләк булды. Иҫән ҡалғандары – вәхшилектең тере шаһиттары.

*Ровенсбрюк,*
*Дахау,*
*Маутхаузен,*
*Майданек,*
*Бухенвальд,*
*Освенцим…*
*Әйткәндә уларҙың исемен*
*Тамаҡҡа тығыла һәр һүҙем.*
*Әйтерһең, мин үҙем лагерға*
*Яҙаға ябылған кеүекмен…*

*Йәнемдә тырнағы әжәлдең:*
*Аслыҡтың,*
*яҙаның,*
*йәберҙең.*
*Тәнемдә өткәндәй ялҡыны*
*Ут тирмәне – крематорийҙың.*

*Меңләгән әсирҙәр һөйәге*
*Табаным аҫтында шығырҙай.*
*Күп телдә көнөн дә, төнөн дә*
*Тотҡондар ҡолаҡҡа шыбырҙай:*
*Бар унда бығауҙар өҙөргә*
*Өндәгән ир-аттар һүҙе лә,*
*Бар унда өҙөлә-өҙөлә*
*Әйтелгән ҡатын-ҡыҙ өнө лә –*
*Күҙ йәшле саҡырыу түҙергә…*

*Баҫҡан ер һығыла,*
*уйыла,*
*Туҡтағыҙ, был нимә тағы ла?..*
*Балалар тауышы… Һәр бер өн*
*Таш булып тамаҡҡа тығыла.*

*Бәләкәй тотҡондар – лагерҙа…*
*Эҫелә,*
*һыуыҡта,*
*ямғырҙа*
*Балалар күргәнен яҙырға*
*Ниндәй көс, ниндәй һүҙ табырға?*

*Нәк оло кешеләй,*
*буй-буйлы*
*Әсирҙәр күлдәге һәр кемдә.*
*Аяҡта – ағастан башмаҡтар…*
*Малдарға баҫҡандай, һандарҙы*
*Ҡыҙҙырып баҫҡандар – ун йәшлек,*
*Өс йәшлек – һәр бала тәнендә.*
*Бәләкәй әсирҙәр ҡарашы…*
*(Әйләнмәй әйтергә телем дә.)*
*Донъяға һыймаҫлыҡ ҙур ҡайғы*
*Уларҙың һулыған йөҙөндә.*

*Аслыҡтан шешенгән күҙҙәрен*
*Баҡҡандар ҡайҙалыр алыҫка…*
*Елдәрҙә бәүелгән йәндәрҙә*
*Бәддоға ҡәһәрле был йортҡа –*
*Был йортто яһаған фашисҡа!*
*Бәддоға язаға – ҡамсыға –*
*Язалар башлығы фашисҡа!*
*Бәддоға ут-крематорийға –*
*Кешене яғыусы фашисҡа!*

## IV

## *“Үлтермә, үләнкәй...”*

“Лагерҙа беҙҙе йәш буйынса ике төркөмгә бүлделәр: тәүгеһендә – өс йәштән биш йәшкә, икенсеһендә – биш йәштән ун биш йәшкә тиклемге балалар ине... Лагерҙа немец телендә генә һөйләшергә ҡушыла, үҙеңсә һөйләшһәң, туҡмайҙар йә карцерға ябалар. Карцерҙа үтә ҡурҡыныс – ҙур ҡомаҡтар йөрөй! Йә тубыҡтан һалҡын һыуҙа тораһың... Беҙ лагерҙа эшләй торғайныҡ. Ниндәйҙер юлға таш түшәтәләр ине... таштар араһынан үлән өҙөп ашаған хәтерҙә. Тик үләндәрҙе лә йәшеренеп, урлап ҡына өҙә инек, күрһәләр – яза көтә... Күптәр аслыҡтан иҫен юғалта торғайны...”

Совет Армияһы тарафынан ҡотҡарылған Освенцим, Майданек тотҡондары Людмила Корлева, Олег Безлюдов, Валя Булахова хәтерләүҙәренән.

*Нисек һуң белгәндәр үләндәр?*
*Хатта бит таштарҙы тишкәндәр.*
*Моғайын, уларҙы үҫтергән*
*Лагерҙа түгелгән күҙ йәштәр.*

*Күтәрел,*
*үләнкәй,*
*балаға*
*Бер генә булһа ла ҡабырға,*
*Һин аҙыҡ – көтөлгән бер танһыҡ –*
*Әҙ генә аяҡҡа баҫырға.*
*Хәлһеҙҙе тотмайҙар лагерҙа:*
*Бер хөкөм – олоға, сабыйға.*
*Ни тора хәсискә – фашиска*
*Әсирҙе атырға, аҫырға,*
*Оҙатырға крематорийға.*
*Аслыҡтан алйыған күҙ менән*
*Төҫмөрләп, ҡыяҡҡа эйелгән*
*Баланың иңрәүен ишетеп,*
*Ҡалтырай шикелле йәш үлән:*

*“Үләнкәй, һин мине үлтермә,*
*Ашағым, йәшәгем бик килә.*
*Ҡайтырға теләйем өйөмә,*
*Теләйем әсәйҙе күрергә,*
*Үлтермә, үләнкәй, үлтермә...”*

*Еп кеүек неп-нескә бармаҡтар*
*Өҙҙөләр үләнде тиҙ генә.*
*Ҡабалар ҡабалан, һаҡсының*
*Салынмай ҡалһын тип күҙенә...*
*Үләкһә эҙләгән ҡоҙғондай*

*Күҙәткән берәүһе һиҙенә:*
*– Арбейтен! Ха, тере! Мистфи!..[1] –*
*Килә лә, һүгенә-һүгенә,*
*Ҡырҡ бишле итеген ултырта*
*Биш йәшлек әсирҙең эсенә…*

*Ҡыяктар ян-яҡҡа һибелә,*
*Ә бала тамшана бер генә…*
*Ә фашист мәйеттең ауыҙына,*
*“Фрессе!”[2] тип аҡыра-аҡыра,*
*Йолҡолған үләнде тыға ла*
*Икенсе баланы саҡыра:*
*– Кәрәкме?.. Мә, һиңә ҡабырға…*
*Шул ваҡыт, ынтылғас алырға,*
*Тондора бар көскә сабыйға.*

*Ә унан, килгәнсе аңына,*
*Ботонан тоҡ һымаҡ өҫтөрәп,*
*Ырғыта ҡараңғы карцерға.*

*Ҡалғандар, нәк оло кешеләй,*
*Теш ҡыҫып*
*(тик хәлһеҙ себештәй),*
*Эшенә тотона: улар бит*
*Ер соҡой,*
*йөк тарта,*
*таш түшәй…*

*Сәнскеле сыбыҡтар аҫтында –*
*Лагерҙа – урынын һайламай*
*Үҫеүсе йәш үлән әйткәндәй:*
*“Өҙ ҙә ҡап бер нигә ҡарамай…”*

*Әй, рәхмәт, аҙыҡһың, танһыҡһың,*
*Тик бында, эш бүлеп эйелеп,*
*Үлән дә ҡабырға ярамай.*
*Бер ергә йыйылыу, серләшеү,*
*Үҙ туған телеңдә һөйләшеү –*
*Ярамай, ҙур гонаһ – берләшеү.*

*Язаһы билдәле:*
*йә ҡамсы, йә пуля,*

*Йәки “газ”…*
*Башкиҫәр фашисҡа*
*Ят нәмә ҡыҙғаныу, шикләнеү…*
*Тик һин үҫ,*
*үләнкәй,*
*лагерҙа*

---

[1] *“Эшләгеҙ! Их, йолҡоштар! Быҫраҡ хайуандар!” мәғәнәһендә.*
[2] *”Аша! Тығыл!” мәғәнәһендә.*

*Йәшерен булһа ла ҡабырға*
*Ризыҡһың – көс өҫтә быуынға*
*Тағы бер, тағы бер аҙымға!*

*Ашағы, йәшәге бик килә,*
*Ниңә һуң беҙ тейеш үлергә?*
*Әсәйҙе һағындыҡ күрергә,*
*Атайҙар тейеш бит килергә...*

*Саҡ ҡына түҙергә, саҡ ҡына*
*Ярҙам ит,*
*үләнкәй,*
*һин беҙгә...*

*Таштарҙан баш сөйгән күгүлән*
*Әйткәндәй: "Тик яман күҙҙәргә*
*Эләкмә, тиҙерәк өҙ генә..."*

*Бер бала, йәшенеп, эйелә,*
*Тик шунда палачтың ҡулынан*
*Малайҙың ғүмере өҙөлә...*

*Ҡыяктар ян-якка һибелә,*
*Тарата уларҙы ел генә...*

## *Хуш, Эльжуня!*

Фашистар, концлагерҙарҙағы хәлһеҙ балаларҙың һуңғы ҡанын һурып, фронттағы немец һалдаттарына оҙаталар.

*Аһ-зарҙар барагы – ревирҙар.*[1]
*Ыңғраша бәләкәй әсирҙәр.*
*Һыуынан сығарған балыктай,*
*Яталар тартышып – хәлһеҙҙәр.*

*Вәхшиҙәр тапкандар сараһын:*
*Һура ла уларҙың саф ҡанын*
*Яралы һалдатка – палачка –*
*Фронтка оҙата – йәшәргә*
*Ғүмере хаҡына баланың.*

*Майһыҙ шәм шикелле һүнәләр*
*Әсирҙәр аслыктан, ғазаптан.*
*Ә хәсис йылмая, көй көйләй:*
*"Бөгөн дә ун литр таҙа ҡан*
*Һауылды "ҡыҙыл һөт" урыҫтан,*
*Венгрҙан,*
*поляктан,*
*француздан...*

[1] *Ревир – концлагерҙағы дауахана ролен үтәүе урын (шул уҡ барак).*

*Бәләкәй кәзәләр – милләттәр –*
*Һанаһаң арталар утыҙҙан…*
*Бер-ике,*
*бер-ике,*
*бер-ике,*
*Таралыр донъяға беҙҙең дан!..”*

*Ҡәбәхәт!*
*(Уҡыусым, ғәфү ит,*
*Ярһыуҙан ҡысҡырҙым –*
*түҙмәнем.)*
*Һәр тамсы ҡан өсөн, бәдбәхет,*
*Үҙеңдең ҡан менән түләрһең!*

*…Майданек тотҡоно Эльжуня*
*Ревирҙа иң һуңғы төш күрә:*
*Янында атаһы – йылмая,*
*Әсәһе аҡ ҡалас бешерә.*

*Варшава нурҙарҙа – таң ата,*
*Сирендәр хуш еҫтәр тарата.*
*Эльжуня, иркә ҡыҙ, тик ята,*
*Тор, тиеп ҡурсағын уята,*
*Торҙомо, шиғырҙар ятлата.*

*Ҡурсағы тыңламай, ҡуй инде,*
*Һүҙ әйтмәй, ҡымтый ҙа иренде,*
*Ҡарәле, үпкәләп ҡуймаҡсы…*
*Кил әле, үбәйем үҙеңде…*

*Был нимә? Ялпылдай-ялпылдай*
*Ҙур ялҡын уларға яҡынлай.*
*Әсәһен, атаһын һәм уны –*
*Бөтәһен бер юлы ут ялмай…*

*Эльжуня һаташып уянды,*
*Өнөмө, төшөмө – буталды.*
*Керпеген күтәрер хәле юҡ –*
*Ҡарая яңынан күҙ алды…*

*Өнөндә булды бит:*
*фашистар*
*Атаһын, язалап, аттылар.*
*Дуҫтарын һатмағас, әйтер тип,*
*Майданек баҙына әсәһен*
*Һәм уны, ҡамсылап, яптылар…*

*Освенцим,*
*ҡара күк төтөнөң –*
*Ҡан-тире,*
*һөйәге кешенең.*

*Ниңә һин,*
*ниңә һин,*
*ниңә һин*
*Төш түгел,*
*өн инең,*
*өн инең?!*
*Аҙағы булһасы тиҙерәк*
*Һаташыу һәм хәтерләүҙәрҙең...*
*“Йәшә, балам, йәшә...”*
*Эльжуня,*
*Һуңғы тапкыр һинән үтенә*
*“Газ”ға ингән сакта әсәйең...*
*Ҡалдырмасы әсәй!*
*Нишләйем?*
*Һинең менән бергә йәшәйем...*
*Бөтә кәсөн йыйып, бәүелеп.*
*Ер иҙәнгә ташлай кәүҙәһен.*

*Юҡ, Эльжуня башка ҡуҙғалмаҫ,*
*Фашист-ҡатил ҡанын һуралмаҫ...*

*Оҙаҡламай инеп алырҙар,*
*Утын һымаҡ утка яғырҙар...*
*Ә әлегә –*
*күрә башҡалар –*
*Уң ҡулында кескәй ҡағыҙ бар:*
*“Була соби раз Эльжуня,*
*Умирала сама.*
*Бо ей ойцец в Освенцими,*
*На Майданке мама...”*

*Уҡынылар ошо һүҙҙәрҙе*
*Поляк ҡыҙы яҙған шиғырҙан.*
*Ҡалған юлдар ҡыҙыл тамсыларҙан –*
*Ҡан эсендә йөрөп юйылған...*

*Хуш, Эльжуня! Мәңге юғалмаҫ*
*Һуңғы һүҙең һуңғы һулышта:*
*Һаҡланыр ул ләғнәт, хөкөм булып*
*Фашизмға – үлем, һуғышҡа!*

## ***Фажиғә***

1945 йыл, 6 август. Иртәнге 9 сәғәт 15 минутта Америка Ҡушма Штаттары Японияның 390 мең кеше йәшәгән Хиросима ҡалаһына атом бомбаһы ташлай.

*Хиросима, Хиросима, әйт, ни булды?*
*Ҡайҙан һуң ябырылды был мәхшәр ҡойоно?*
*Урамың, йорттарың, юлдарың –*

*Бары ла ялҡында дөрләйҙәр бер юлы.*
*Секундтар эсендә дауыллы ут булды.*

*Дөрләйҙәр ағастар, тотошлай баҡсалар,*
*Бамбуктар, розалар һәм хризантемалар.*
*Аң-аҡыл юғалткан ир-аттар ауалар,*
*Ҡатындар, ҡан илап, факелдай яналар,*
*Ярҙамға саҡырып ҡысҡыра балалар…*

*Быяла, таш-кирбес һәм тимер шытырлай,*
*Күлдәктәр, ҡаш-сәстәр, керпектәр сытырлай.*
*Бөрөшөп яткандар – янғандар өндәшмәй,*
*Саҡ ҡына шыуышҡан, шылышҡан һыу һорай,*
*Тик берәү берәүгә боролмай, ҡул һуҙмай.*

*Һанһыҙ Освенцим мейесе яна бергә –*
*Таш ирей, кешегә нисек һуң түҙергә?!*
*Минуттар эсендә әйләнде күмергә*
*Йөҙәр мең япондар, йөҙәр меңдәре*
*Дусарҙар ғазапҡа – шәм кеүек һүнергә.*

## *“Шаһитмын!”*

Атом бомбаһының шартлауын 12 йәшендә кисергән Масао Нагая һөйләй:

*1*

*О, ул көн, о, ул төн,*
*Әллә төш, әллә өн…*
*Күрҙем ут-әжәлдең*
*Балыҡтай ҡурғанын*
*Әҙәмдәр кәүҙәһен.*
*Беҙ, ғәҙәттәгесә,*
*Иртәнге сәғәттә*
*Атай менән икәү*
*Сыҡҡайныҡ ул көндө*
*Ҡаланың ситенә.*
*Эләктек тамуҡҡа:*
*Аҡты ер өҫтөнән*
*Дауыллы ут-йылға.*
*Ташланы ул беҙҙе*
*Ялҡынға – упҡынға…*
*Аңыма килгәндә:*
*Тирә-яҡ эргәмдә*
*Ыңғыраша һәр бәндә.*
*Сосолоп төшкәндәр*
*Тиреләр – таҫмалай*
*Һуҙыла тәндәрҙә…*
*(Ә мине һин, яҙмыш,*
*Ахыры, яҡланың –*
*Ышыҡҡа ташланың:*
*Бик яман янһам да,*

*Мин тере ҡалғанмын).*
*– Атайым, ҡайҙа һин?!*
*О-о-о бында, нишләйһең?!*
*Ҡуптылар сәстәре –*
*Эйелеп, һаҡ ҡына*
*Башына тейгәйнем…*
*Танығас, йәненән*
*Сыҡты ҡан, бер шыңшыу:*
*– Һыу, ҡы-ҙым, һ-ы-у…*
*(Шул секунд яҙһасы*
*Бер йотом һыу булыу!)*
*– Табырмын, саҡ ҡына*
*Түҙ, түҙ, атаҡайым…*
*Тик үҙем шул мәлдә*
*Һыҙлауҙан, ҡайғынан*
*Аңым юғалтҡанмын…*
*Артабан күргәнде*
*Нисек һуң һөйләргә?..*
*Бер аҙҙан көс-хәлгә*
*Ҡуҙғалдым үҙәккә*
*Әсәйҙе эҙләргә.*
*Хиросима өҫтөн*
*Ҡаплаған ут-төтөн,*
*Ә урам-йорттарын –*
*Меңләгән, меңләгән*
*Мәйете кешенең:*
*Бөрөшкән, бүрткән,*
*Күҙ-ҡолаҡ, ауыҙҙан*
*Ҡараһыу ҡан киткән.*
*Түҙгеһеҙ тирә-йүн*
*Янған ит еҫенән.*
*Бына ул беҙҙең өй:*
*Тик кирбес өйөмө*
*Эсендә, тышында…*
*Тауыш бир, әсәйем,*
*Һин бит, һин ошонда…*
*Эйеләм, ни күрәм –*
*Таш хризантема:*
*Дуҫтары бүләге*
*Әсәйҙең, атайҙың*
*Баҫалҡы туйына.*
*Шул саҡта һөйәккә –*
*Бармаҡҡа күҙ һалам…*
*Ярһып, илап, әрнеп*
*Таштарҙы аҡтарам*
*Һәм… әсәйҙе табам.*
*– Әсәйем, әсә-к-әй-е-ем!!! –*
*Ҡосаҡлап кәүҙәһен*

*Алайым тигәйнем…*
*Күтәрҙем ҡулыма*
*Күмер һәм көлдәрен.*
*– Ниңә мин үлмәнем!!! –*
*Ҡысҡырҙым тилереп,*
*Ҡайҙалыр йүгереп…*
*Әсәйҙең көлдәрен*
*Таратты ел өрөп…*

2

*Әжәлдән ҡалһаҡ та,*
*Тик бер һүҙ ҡолаҡта –*
*Лейкемия…*[1] *Шул мәлдән*
*“Атом-нур” әҙәрләй,*
*Беҙ ҡайҙа барһаҡ та.*
*Яңғыҙым, күрһәтмәй,*
*Күпме йәш ағыҙҙым.*
*Тормошҡа сыҡһам да,*
*Үтте шик-ҡурҡыуҙа*
*Һәр бер көн, һәр аҙым.*
*Дөрөҫкә булған ул*
*Бар шигем, ҡурҡыуым:*
*Дүрт йәштә таптылар*
*Улымдың ҡанында*
*Пикадон*[2] *ағыуын…*
*Ҡыҙарып һүнеүсе*
*Ҡояштай байыны:*
*– Китмәсе, улғынам,*
*Күтәрмәҫ әсәйең*
*Был тиклем ҡайғыны…*
*Һуңғы минутҡаса*
*Ҡалған ғүмеремдең,*
*Өн-ораны булып,*
*Киткән өс йөҙ меңдең*
*Һорауҙары өтөр:*
*Беҙ “хатаһы”*[3] *кемдең?..*
*Хата түгел – атом!*
*Ана шуға, халҡым,*
*Уяу бул һин, уяу!*
*Ҡырҡ биштәге кеүек,*
*АҠШ тигән “дуҫың”*
*Яңы Хиросима*
*Илде яһамаһын!*
*Уяу бул һин, халҡым!*

---

[1] *Лейкемия – атом бомбаһы шартлағандан һуң таралған ауырыу, ҡан рағы.*
[2] *Пикадон – атом бомбаһы шартлауын (пика – йәшен, дон – күкрәү) япондар шулай атай.*
[3] *Хиросималағы Тыныслыҡ паркында атом бомбаһы ҡорбандарына ҡуйылған һәйкәлгә: “Тыныс йоҡлағыҙ, хата ҡабатланмаҫ!” – тип яҙылған.*

## Торналар

Һәр йылдың 6 авгусында Хиросиманың Тыныслыҡ паркына килгән ололарҙың, бигерәк тә балаларҙың, ҡулындағы ҡағыҙҙан яһалған мең әр торналар Йәшәү һәм Именлек символын кәүҙәләндерә. Торналар атом фажиғәһен кисергәндәргә — "хикабучя"ларға ебәрелә.

***Ҡыҙ:***

*– Ҡағынған-талпынған елдәрҙә-күктәрҙә*
*Ҡағыҙҙан яһалған бәләкәй торналар.*
*Улар бит ғүмере – дауамы: кемдәрҙе*
*Ҡырҡ биштә яндырҙы атомлы бомбалар.*

***Малай:***

*– Бүләккә ҡанатлы өмөттәр – күрһендәр,*
*Юҡ, "хикабучя"лар яңғыҙ түгелдәр:*
*Ҡоштарҙы ҡоштарға ҡушҡандай, ҡушылһын*
*Йөрәккә – йөрәктәр, күңелгә – күңелдәр.*
*Беҙ улар янында, яҡында – белһендәр!*

***Бергә:***

*– Осһондар илдәрҙән илдәргә торналар!*
*Осмаһын илдәрҙән илдәргә бомбалар!*
*Асығыҙ күктәрҙең ишеген – дуҫлыҡҡа!*
*Ябығыҙ – үлемгә, ябығыҙ, ололар!*
*Балалар хыялын аңлағыҙ, ҡитғалар!*

**V**

## Һинең ҡулда!

*Быуындарҙы быуын алмаштыра,*
*Быуаттарҙы – быуат... Бер туҡтауһыҙ.*
*Мәңгелектән мәңгелеккә йөҙә*
*Йәшел бишегебеҙ – Ер шарыбыҙ.*

*Йыһан тажы – Ҡояш, гөлләмәһе –*
*Ай, йондоҙҙар – ғаләм тынлығында.*
*Тормош гөлө – Ҡош Юлына сығыр*
*Сабый йоҡлай Әсә ҡосағында.*

*Ер,*
*Әсә һәм*
*Бала...*
*Бик һаҡ ҡына*
*Тағы киләм улар ҡаршыһына.*
*Гүйә, киләм донъя яҙмышына,*
*Өндәшергә Кеше намыҫына:*
*Берҙән-берең,*
*Кешем,*
*ғәзиз ерең*
*Офоҡтарҙан ашып хозурлана.*

*Бер ҡараһаң – ҡарҙар йым-йым яна,*
*Бер ҡараһаң – гөлдәр тулҡынлана.*
*Иҫең китер уның ҙурлығына:*
*Ни һыймаған сикһеҙ күкрәгенә.*
*Ә бит үҙе Йыһан киңлегенән*
*Ғаләмдә бер зәңгәр нөктә генә.*
*Хазинанан ғына хасил булған,*
*Ел-болоттар йыуған ошо "нөктә",*
*Күҙ ҡараһы кеүек һаҡлар өсөн,*
*Бәхет бишегең ул – мәңгелеккә.*

*Мең, миллион йыллыҡ эҙең ерҙең*
*Ҡуйынында тере –*
*юғалмаған.*
*Таш быуаттан атлап һин бит бөгөн*
*Күккә –*
*ҡанат,*
*айға –*
*тамға һалған!*
*Һауаң,*
*һыуың һәм*
*икмәгең булған*
*Бөйөклеккә илткән Ерең – Аллаң*
*Яраланған...*
*Әгәр үҙ-үҙеңдән –*
*Даһи аҡыл менән эҙләп тапҡан*
*Водород,*
*нейтрон,*
*атомдарҙан –*
*Ҡоралыңдан,*
*Кешем,*
*ҡоткармаһаң:*
*Нимә ҡалыр бөйөк ижадыңдан?!*
*Нимә ҡалыр бөйөк хыялыңдан?!*

*Гел йәшәүҙе раҫлап әйләнә Ер:*
*Унда ҡалҡа башаҡ, гөл һәм имән.*
*Йән алмаһын Әсә бүләк итә,*
*Тормош өсөн, өҙөп йөрәгенән.*

*Яңғыраһын ғаләмдә һәр мәлдә*
*Бәхетле тауыштар һәр илдә.*
*Көлһөн Ҡояш, Ай һәм йондоҙҙар*
*Сабыйҙар бишеге өҫтөндә!*



**Рәмил**
**ЙӘНБӘК**

# “УЙҘАР УРАП АЛДЫ ҠАБАТТАН...”

***

*Тын тарлыға. Һауа етмәй миңә.*
*Асайымсы барлыҡ тәҙрәләрҙе.*
*Үпкәләргә тулды селтер һауа,*
*Яҙғы таңдың сафлыҡ еле бәрҙе.*

*Төн буйына йоҡо бирмәйенсә*
*Талап сыҡҡан зарлы уйҙарымды*
*Оҙатайым таңғы елгә ҡушып.*
*Юҡҡа ғына, беләм, аҙарындым:*

*Килер бәләләрҙән йола алмам,*
*Кемдәргәлер улар төшөр инде.*
*Ебәрмәһә оло афәттәрен,*
*Хоҙайыма, тимен, шөкөр инде.*

*Яһалғастин, тубы, мылтыҡтары*
*Берәүҙәрҙең ҡыйыр ғәзиз йәнен.*
*Йылдар үткән һайын, әллә ниңә*
*Кешелеккә ышанысым кәмей.*

*Баш етмәҫлек яһап ҙур асыштар,*
*Йыһандарға осоп барып етә;*
*Тик үҙ-ара кеше һыйышалмай,–*
*Ерҙең йәме, Ерҙең кәре китә.*

---

*Рәмил Йәнбәк Күгәрсен районының Дауыт-Ҡайып ауылынан. Республика 1-се интернат-мәктәбен, БДУ-ны тамамлай, матбуғатта эшләй. Әлеге көндә “Ағиҙел” журналының баш мөхәррир урынбаҫары.*

*Бар кешелек түгел.*
*Тик бер өйкөм*
*Иманһыҙҙар донъя бүлешәләр.*
*Нәфселәрен толпар итеп менеп,*
*Тибешәләр, боғаҙ өҙөшәләр.*

*Зиһен арта, аҡыл кәмей төҫлө –*
*Етеүеме әллә ахрызаман?*
*Алла ҡәһәрләйме бәндәләрен?*
*Шундай тормош беҙгә, ахры, таман.*

*Тын тарлыға. Һауа етмәй Ерҙә.*
*Асайыҡсы Йыһан тәҙрәләрен.*
*Күңелдәргә сап-саф иман тулһын,*
*Ярлыҡаһын Аллам бәндәләрен.*

## Мыжыу

*Ялыҡтым ығы-зығынан,*
*Машина тауышынан;*
*Бағана төп-төҙ тороуҙан,*
*Юлдарҙың ауышынан.*

*Ялыҡтым телевизорҙы*
*Зарури ҡарауҙарҙан;*
*Филдән – себен, ә сәүектән*
*Арыҫлан яһауҙарҙан.*

*Маҡтайһы ерҙә, түрәмдең*
*Ялҡытты тиргәүҙәре;*
*Мал таба белмәйһең, тиеп*
*Ҡатындың игәүҙәре.*

*Ялҡытты күңелдең һаман,*
*Мин йәш, тип һаташыуы.*
*Ҡыҙҙарҙың һүнгән йөрәкте*
*Дөрләтеп маташыуы.*

*Сей елкәгә тейә инде*
*Тейенә алмау аҡсаға;*
*Йәй буйына соҡсоноуҙар*
*Ус аяһы баҡсала.*

*Үҙәккә үтә: батшалар*
*Сафсата һатҡан һайын;*
*Хоҙай ҡарын яуҙырмаһа,*
*Төнөн сыҡмаһа айым.*

*Иртәнсәк баштар сатнауы*
*Тәкәтемде ҡоротто.*
*Тағы нимә тип мыжырға?*
*Ҡалғандарын оноттом.*

## Был ҡай саҡ була?

*Имсәк ташлатҡан балалай,*
*Айырылғанбыҙ хыялдарҙан.*
*Һелкеп ташлап, күҙ асҡанбыҙ*
*Күргән ҡаза-зыяндарҙан.*

*Йорт-ҡуралы, маллы булдыҡ,*
*Дүрт тәгәрмәс – ихатала.*
*Әммә арта ҡан баҫымы,*
*Көн ашалы сырхата ла.*

*Бала-саға башлы-күҙле,*
*Ә ейәндәр – күңел күрке.*
*“Ҡыйыш тейәү” онотолдо,*
*Ҡайтмай ҡалыу – хәҙер көлкө.*

*Тал сыбығы кәләшкәйҙәр*
*Инде көҙгө күркә ҡәҙәр.*
*Үҙебеҙҙән бот май сығыр,*
*Ҡорһаҡтарҙы ҡыҫһаҡ әгәр.*

*Диван менән телевизор –*
*Дуҫтарҙың иң яҡындары.*
*Кәрәк беҙгә эҫе мунса,*
*Һыраның тик һалҡындары.*

*Шулай бына ыңғыр-шыңғыр*
*Барышыбыҙ алға тура.*
*Төшөнөүе ауыр ләкин:*
*Былар һуң, тим, ҡай саҡ була?*

## Үлсәү

*Һиҙмәй ҡалдым яҙмышымда*
*Лотерея отҡаным:*
*Үлсәү икән – ныҡ төшөндөм –*
*Бар тормоштоң тотҡаһы.*

*Шуға хәҙер һәр нәмәгә*
*Үлсәү тотоп ҡарайым.*
*Үлсәп сыҡтым бөтә өйҙө,*
*Һәм үлсәүле һарайым.*

*Тирләп-бешеп эшләмәйем:*
*Тамсы тирем һанаулы.*
*Ауыр күтәреп былай ҙа*
*Бил биртенде анау йыл.*

*Саҡ сырхаһам, дарыу ҡабам.*
*Ихластан. Көсләп, тимә.*

*Улай ҙа услап йотмайым,*
*Берәмләп – үлсәп кенә.*

*Мөхәббәттән баш юймайым,*
*Һөйәм хәҙер самалап:*
*Күстем Ығыш Бибинурға*
*Ут бөрсәһе Саранан.*

*Телемде көскә ҡуҙғатып,*
*Һүҙ әйтәм үлсәп кенә.*
*Үҙ алдыма бәхәсләшәм*
*Йыйылыш үткәс кенә.*

*Бөрсөп-бөрсөп тәғәмләнәм,*
*Бармаҡсала – хәмерем.*
*Үлсәүһеҙ йәшәүҙә булған*
*Тормоштоң бар йәбере.*

*Үткән көндәр, айҙарымды*
*Яҙмыш бабай үлсәйҙер.*
*“Шундай көнгә ҡалған, бахыр”, –*
*Тиеп кемдер үсәйҙер.*

## Әсәйем мираҫтары

*Тыуғанымдан алып берҙән-берем,*
*Иң яҡын кешем бит һин, әсәй.*
*Инселәгән изге дүрт мираҫың*
*Йөрәк түркәйемдә гел йәшәй.*

*Наҙлынан да наҙлы, гәлсәрҙәй саф*
*Үҙ телеңде миңә биргәнһең.*
*Ошо телдә бишек тирбәлдереп,*
*Үҫ, башҡортом,балам, тигәнһең.*

*Тыуған ерҙең изге төҫө булһын*
*Һин ҡалдырған атай нигеҙе.*
*Иҫтә түгел яугир атайымдың*
*Ни ятҡан ҡулы, ни йөҙө.*

*Ҡарҙай ап-аҡ, шишмәләй пак намыҫ –*
*Өсөнсөһө һинең мираҫтың.*
*Был мираҫың утка, һыуға һалды,*
*Нахаҡ һүҙҙәр, ялған тыңлатты.*

*Төп мираҫың, әсәй, һөйөү булды –*
*Күкрәк һөтөң менән күскәндер.*
*Балаларым шуға, һиңә оҡшап,*
*Һөймәлекле булып үҫкәндер.*

*Башҡорт булып атай нигеҙендә*
*Намыҫлы һәм һөйөп йәшәргә…*

*Заманалар бик-бик шомландыра.*
*Ни ҡылырға миңә?*
*Нишләргә?*

*Әсәйемдән ҡалды дүрт мираҫ…*

***

*Киткең килһә, ирекһеҙләп тотмам*
*Һәм көнләмәм тойғоң, хисеңдән.*
*Булаһылар булған – төҫө уңған,*
*Киселәһе инде киселгән.*

*Һиңә һөйөүемде, быҒау һалып,*
*Кисә төндә яптым зинданға.*
*Әрһеҙләшеү – әрем көүек әсе,*
*Әрһеҙ һөйөү – бары зыянға.*

*Сынйыр сәйнәп шашты мөхәббәтем,*
*Онтамаҡсы булып төрмәне.*
*Ыңғырашып яттым эстән генә,*
*Күҙемә лә йоҡо кермәне.*

*Таң алдынан бөттө түҙемдәрем.*
*Таң алдынан астым йоҙаҡты.*
*Хыянатсыл күкрәгемде ташлап,*
*Һөйөү ҡасты, күккә олғашты.*

*Киткең килһә, кит һуң. Ихтыярың.*
*Йөрәк, һыҡтап, һиңә һарылмаҫ.*
*Ҡапҡа асылғандай булды…*
*Бәлки…*
*Мәңгелеккә тиеп ябылмаҫ…*

## Төшөнөү

*Тик һин генә, һин төшөнә алдың*
*Минең*
*Һарһылдатып көлөү серенә:*
*Күҙ йәш аша көлөү йөрәк илап,*
*Һыя алмағанда тиремә.*

*Ҡайғы-хәсрәттәргә батып бөтөп,*
*Сапсынғанда сығыр юл тапмай –*
*Быяла күҙ, вайымһыҙ бер йәндәр,*
*Эстән үсәп, ҡулын сәпәкләй.*

*Тыя алмай сөбөр күҙ йәштәрен,*
*Һөйләй ҡалһаң эске ыҙаңды,*
*Шыбыр-шыбыр ғәйбәт таратырҙар, –*
*Йәнәһе лә, йәлләй, ҡыҙғанды.*

Мина тыңҡысланған ялан кеүек
Урап алған тормош мөхите.
Сөсөләнеп юха борғолана,
Үҙе сәсә ағыу-хөсөтөн.

Улар кеүек алан-йолан килеп,
Ҡуян булып боҫоп йәшәргә
Кәрәклеген беләм дә ул.
Ләкин
Тыуғайным бит күкрәп йәшнәргә?!

Шуға үрһәләнә йәнекәйем,
Бәргеләнә шуға йөрәгем.
Көлөп илау – йәшәү рәүешем,
Илап көлөү – минең терәгем.

Тик һин генә быға төшөнә алдың…

## Бәхет килде

Бәхет килде.
Баҫып килде
Минең хәсрәт, һағышымды;
Яҙмыш бүләгенән ташҡан
Минең шатлыҡ тауышымды.

Бәхет килде бармаҡ янап,
Ҡанап торған йөрәгемде,
Һулҡылдаған күкрәгемде
Килде яулап, мең ҡат ямап.

Ҡыуаныстан шашма, тине,
Һис тә хаттин ашма, тине.
Мин килгәндә һирәк-һаяҡ,
Ярһыуҙарың ташла, тине.

Мине, тине, өркөтмә һин,
Юҡһа юлың онотормон.
Ҡалып хәсрәт утрауында,
Һин үҙең бит ут йоторһоң.

…Аңламаным бәхетемдең
Минән ниңә тарһынғанын:
Шатлыҡ барҙа ҡыуанамын,
Ҡайғы килһә ҡайғырамын.

Үҙем һаман моңаямын,
Бәхет юҡ, тип ҡаңғырамын.

## Урталыҡ

Тормош шауы инмәй ҡолаҡтарға,
Яңылыҡтар инмәй күңелгә.
Әллә йәнем тәндән күсә микән,
Сикһеҙ күккә микән үрелә?

Хыялдарҙың ташлап китеүенә,
Риза булмаһам да, күнгәйнем.
Хистәр толпарына нуҡта һалып,
Тулҡын-тулҡын ялын үргәйнем.

Тымыҡ ҡына, тыныс ҡына бер күл
Булһын күңел, һүнһен, тигәйнем.
Хәҙер бына, вайымһыҙ һин, тиеп,
Мәреүәтһеҙ, тиеп тиргәймен.

Тулҡын яллы хис толпары етмәй,
Тулҡындары етмәй йылғаның;
Йөрәкһенеү етмәй ал таңдарҙа,
Ҡан-тамырға ярһыу тулғаны.

Мин иртәрәк, ахры, нуҡталаным
Хистәремде, күңел, ваҡытты.
Һиллектәрҙә ҡыйҙым үҙ-үҙемде,
Һиллектәрҙән туйҙым.
Ялҡытты.

Йөрәгемә тағы елдәр өрә,
Ҡапҡастарын нисек ябырға?
Битарафлыҡ менән ярһыулыҡтың
Урталығын нисек табырға?!

## Беренсе апрель шиғыры

Иртән тороп таба шыжлатайыҡ,
Иң моңло көй ерҙә ошолор.
Сәй яһайыҡ эҫе генә итеп:
Әллә нишләп таңға өшөнөм.

Шул өшөүҙән осто йоҡоларым,
Уйҙар урап алды ҡабаттан.
Ниңә икән Хоҙай бәндәләрен
Гелән уйланырға яралткан?!

Уйланырға, әрнеп һыҙланырға
Яҙмыш ебәргән Ул кешегә.
Шатлыҡ-ҡыуанысҡа түҙеп була,
Һағыштарҙан кеше күшегә.

*Яҙмыш ғали йәнәптәре хужа,*
*Ул өйрәтә тәртип, әҙәпкә.*
*Үҙебеҙ ҙә уға япһарабыҙ*
*Гонаһтарыбыҙҙы, ғәҙәттә.*

*Беренсе апрель бөгөн, алдау көнө –*
*Шаяртырға бөгөн ярай ҙа:*
*Ялған һөйләмәйҙәр көндәгесә,*
*Ә ғәп-ғәҙел итеп алдайҙар.*

*Иртән тороп таба шыжлатайык,*
*Ошо – иң моңло көй кешегә.*
*Сәйҙәр эсә-эсә серләшәйек әле:*
*Әллә ниңә йәнем өшөгән.*

## Өмөт

*Барлык ғүмер, ахры, – көтөп йәшәү:*
*Көн дә, көн дә ниҙер көтәһең.*
*Өмөттәрең күп сак бушка сыға,*
*Көтөктәр ҙә булып бөтәһең.*

*Бала сакта ҙурайыуҙы көттөм,*
*Ниндәй алһыу ине хыялдар.*
*Эшләр эштәр менән аймылыштым*
*Шул хыялды ғына тыялмай.*

*Көттөм, көттөм…*
*Өҙөлөп көттөм Уны*
*Илаһи ҙа яҙғы таңдарҙа.*
*Һукмактарҙы яҙлыктырып яҙмыш,*
*Һемәйергә икән яҙған да.*

*Дон Кихоттың ел тирмәне менән*
*Алышканы төҫлө тормошом.*
*Ғәҙеллекте яклап етемлектән,*
*Ялған менән күпме һуғыштым.*

*Бер семтем дә үҙгәрмәне донъя.*
*Күп тә калмай ғүмер һүтәһе.*
*Ә барыбер йәндә өмөт йәшәй,*
*Ә барыбер ниҙер көтәһең…*

*Сәсмә әҫәрҙәр*

**Камил**
**ЗИГАНШИН**

# ДЖАМБО[1], АФРИКА!

## СӘЙӘХӘТНАМӘ



*Камил Фәрухша улы Зиганшин — радиоэлемтә һәм банк системаһында мул тәжрибә туплаған белгес, эшҡыуар. С. Злобин, Э. Володин, А. Толстой исемендәге әҙәби премиялар лауреаты. Республиканың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре. 1993 йылдан БР Ҡырағай йәнлектәрҙе яҡлау фонды рәйесе.*

*Бала сағынан уҡ тәбиғәтте ярата, сәйәхәт менән мауыға. Заманында ул хатта геология разведчигы, кит аулау матросы, тайға һунарсыһы булып та эшләй. Әҙиптең бөтә китаптары ла фаунаға һәм флораға гуманистик ҡараш менән һуғарылған.*

*Ҡәләмдәшебеҙ һуңғы йылдарҙа алыҫ ҡитғаларға сәйәхәт ҡылырға ла форсат тапты. Шунан алған тәьҫораттарын “Ағиҙел”гә тәҡдим итә. Яҙмалары уҡыусыларыбыҙҙа оло ҡыҙыҡһыныу уятыр, тип уйлайбыҙ.*

*Сәфәр сәхифәләренән фотолар — авторҙыҡы.*

Бөгөн ҡыштың һуңғы көнө, ә юҡ, ғәфү итегеҙ, йәй аҙағы — беҙ Ер шарының көньяғына юлыҡтыҡ бит.

Джамбо, Африка! (Кения — Көнсығыш Африканың Һинд океаны ярындағы республика. Майҙаны — 583 мең кв. км, халҡы — 32 млн).

Джамбо, Найроби! (Найроби — Кенияның баш ҡалаһы, диңгеҙ кимәленән 2000 метр бейеклектә урынлашҡан. «Найроби» масай телендә «һалҡын сығанаҡ» төшөнсәһен бирә)

Беҙгә Кения менән Танзанияның (Кенияға көньяҡтан күрше ил. Майҙаны 945,1 кв. км, халҡы 37 млн, баш ҡалаһы Додома. 1970 йылға тиклем Дар-Әс-сәләм тип йөрөтөлдө) алты милли паркына сафари (сәфәр, сәйәхәт) ҡылырға тура киләсәк. Программа һуш китмәле! Африканың иң бейек нөктәһе Килиманджаро вулканына менәбеҙ, аҙаҡ иһә Занзибар тропик утрауында ял итмәксебеҙ. Масай ҡәбиләләренең йәнтөйәге — ҡыр йәнлектәренә һәм ҡоштарға иң бай төбәк, быны белеү ҙә күңелдәрҙе ифрат

---

*[1] Джамбо — суахили телендә “сәләм” тигәнде аңлата (артабан аңлатмалар — йәйә эсендә.* ***Ред. иҫкәрмәһе****).*

елкетә. Бында европалылар өсөн климат та кинәндергес: йыл әйләнәһенә +20 – 26 градус булһын әле!

Туғыҙ урынлыҡ «Тойота» вездеходы багажнигын һәлмәк рюкзактар менән тынҡыслап, ил уртаһындағы Накуру исемле милли паркта елдерәбеҙ. Найробиҙан Накуруға (экватор һыҙығына йәнәш) 250 километр икән.

Беҙҙе ике кени кешеһе оҙатып бара. Кәүҙәгә ябыҡ водитель харап теремек, үҙе телгә бөткән. Ҡаршымдағы гид, киреһенсә, буйға елле, өндәшмәҫ кенә әҙәм. Тора-бара уй яралды: былдай гид беҙгә ни бысағыма? Мәгәр унын урынына водитель – дәүләтен, үҙҙәрендәге ҡош-ҡорт донъяһын биш бармағылай белә булып сыҡты. Дөрөҫ, командабыҙҙа инглизса нығыраҡ һупалаған Антон водителдең оҙон-оҙаҡ монологтарын тәржемәләй. Шөкөр, апаруҡ аңлашыла, кәрәкле генә мәғлүмәттәрҙе хәтер һандығына һеңдерәбеҙ.

Асфальт түшәлгән юлдан баш ҡалаға ынтылабыҙ. Күк көмбәҙе ҡара-һоро саңтуҙан менән ҡапланған. Аграр Африкала цивилизацияның былдай зәхмәтен күреү нисектер сәйерһендерә, эсте бошора. Иртә булыуға ҡарамаҫтан, ҡала халҡы уянғайны инде. Автомобилдәргә йәнәштән кем йәйәү, кем велосипедта эшкә ашыға. Ике тәгәрмәсле арба һөйрәгән ишәктәр ҙә күренә. Ошо хәрәкәтте ағас баштарынан эре-эре марабул маймылдары күҙәткән төҫлө.

Ҡалаға яҡынлашҡан һайын транспорт ағымы уғата тығыҙлана һәм автомобилдәрҙән өс рәтле тығын хасил була. Баяраҡ артта ҡалған йәйәүлеләр уҙа башлай, гүйә, улар беҙгә йәлләүес ҡараштарын ташлай. Ярты сәғәттән һуң ғына тығын бер аҙ һирәкләнә төшә, һәм вездеходыбыҙ ҡала үҙәгенә илтеүсе урамға борола.

Сәләм, Найроби! Затлы офистар, быялалары нур бөрккән банктар... Архитектураң буйынса һин Европа ҡалаларына тартым да кеүекһең, тик бына бысраҡлығың ғына...

Кенияла бала-саға өсөнсө синыфҡа тиклем суахили телендә уҡый, дүртенсенән инглизсаға күсәләр. Суахили – эсперанто һымағыраҡ яһалма тел икән. Шуға күрә лә күпселек ике телдә лә иркенләп аралаша. Суахили лөғәтен ғәрәптәр – ҡара тәнле аборигендар менән сауҙа итер өсөн уйлап тапҡан. Шуғаса халыҡ тиҫтәләрсә һөйләштә аралашҡан. Тора-бара суахили – яғымлы көйгә тартымыраҡ тел – Африканың байтаҡ өлөшөнә тарала. Банту ҡәбиләһе һүҙҙәренән тыш, был лөғәттә ғәрәп, француз, испан, инглиз терминдарын йыш ишетергә мөмкин. Гид беҙҙе иҫкәртә: аҡ тәнлеләр өсөн Найроби тыныс ҡала һаналмай, бында хатта көпә-көндөҙ бандиттарҙың һөжүменә дусар булыуың ихтимал. Былдай «реклама»нан һуң, әлбиттә, ҡала менән танышырға теләк кәмене. Офистар, ҡупшы магазиндар артта ҡалды, инде ярлы-ябаға йәшәгән шөкәтһеҙ ҡаласыҡтарҙы уҙып китәбеҙ. Алда ҡуйыраҡ үҫемлектәр ҡаплаған түмәләстәр ҡаршылай, алыҫтан үркәсле һырттар төҫмөрләнә.

Юлыбыҙ көнбайышҡа – Рифт Вэлли тип аталған тектоник убылға тартыла: өс мең метр бейеклектәге вулкан конустары араһында эреле-ваҡлы егермеләп күлдәр теҙмәһе йәйрәй.

Тирә-йүндә ауылдар шәйләнә. Өйҙәре ҙур түгел, бетон блоктарҙан йә тәбиғи таштан һалынған. Ихаталарҙа быҙауҙар баҡырыша. Нәҡ беҙҙәге ише! Тик һыйырҙарының килбәте башҡасараҡ – май бөргән янбаштары ҡабарынҡы ғына. Юл ситтәрендәге асыҡлыҡтарҙа, туғайҙарҙа һарыҡтар утлай.

Бер генә колеялы тимер юлды әллә нисәмә тапҡыр аша уҙҙыҡ. Рельстарын тутыҡ, шпалдар араһын ҡый үләне баҫҡан. Моғайын, поездар бик һирәк йөрөйҙөр. Накуруға етәһе утыҙ-ҡырҡ саҡрым аралыҡ айырата ауырға төштө. Асфальт соҡор-саҡырлы, урыны менән ярты тәгәрмәс батырлыҡ. Быныһы ла бәлә, әммә юлдың тарлығы бәкәлгә нығыраҡ һуға: бер-берењә юл бирер өсөн машиналар ныҡ

ҡына ситкә ҡайырылырға тейеш. Параллель рәүештә яңы автомагистраль һалынып ята. Шуғамылыр, иҫке юлды ҡараған хужа юҡ.

***

«Вейтер Вуск» («Һыу боланы») отелендә урынлаштыҡ. Тыштан хөртәмеш күренһә лә, ҡунаҡхананың эсе ярайһы уҡ уңайлы вә зауыҡлы, йыһаздары ла заманса. Антиквар әйберҙәр ҙә һөйкөмлө генә. Биҙәлештә африканса ҡыҙғылт-көрән семәрҙәр өҫтөнлөк итә.

Еңелсә бышлығып өсөнсө ҡатҡа күтәрелгәс, диңгеҙ кимәленән 2000 метр самаһы бейеклектә икәнебеҙҙе аңланыҡ. Төшлөктәге ҡояш нурҙары өҫтәлдәге ҡалаҡ-сәнскеләрҙе шул тиклем ҡыҙҙырған, хатта ҡулға алырлыҡ та түгел. Уларҙы салфетка менән ҡаплағас, һыуынғанын бер килке көтөп торҙоҡ.

Аш-һыуҙары арыу. Команда докторы Вячеслав Малоярославцев бигерәк тә ҡәнәғәт. Уға үҙе эре, үҙе һутлы ананастар бигерәк оҡшаны. Ә ҡарбуздары сөсө. Тәмһеҙ тойолдо, етмәһә, үҙҙәре ваҡ ҡына бит әле. Үҙебеҙҙең ҡарбузға етәме һуң, тип һағышлы ғына һөйләндем мин ахырҙа.

## Бында арыҫландар көрмәкләшә

Сәғәт 15.00-дә Накуруға ҡуҙғалабыҙ. Был парк «тәбиғи ҡаҙандың төбө»н биләй, тирәстәре ҡаялы урмандар менән ҡаймаланған. Уртала Накуру — милли паркка исем биргән йәйенке, мәгәр һай күл.

Хикмәтле итеп ҡоролған ҡапҡа аша үтәбеҙ. Ҡыҙыҡ та: ғәләмәт дәү носорогтар һөҙөшөр өсөн теш-мөгөҙҙәре менән текәшкән. Хаҡтар, минеңсә, ғәҙел, йәнә илһөйәрҙәрсә: Кения граждандары 4 доллар түләһә, сит ил сәйәхәтселәре 40 доллар биреп билет ала.

Тропик урманда ҡапыл ғына үҙе йыуан, үҙе ауыш йөнтәҫ ағас буйлап ашыҡмай, мәгәр ҡупырым ғына атлаған арыҫландар төркөмөн шәйләйбеҙ. Йөрәк жыулауы тиҙ үтә, һәм беҙ вездеходыбыҙ көпләмәһен ике рычаг ярҙамында йәһәт кенә ҡалҡытабыҙ ҙа фотоаппаратыбыҙҙы шылт-мылт эшкә егәбеҙ. Ата арыҫлан һәм инәләре шул тиклем зыянһыҙ, һөйкөмлө тойола башлай, эргәләренә барып, арҡаларынан һыйпағы килде хатта.

Шул саҡ күҙ ҡырыйым менән генә уң яҡта ҡыуаҡтар һелкенгәнен күрәм, унда көрәнһыу яҫы, йөнтәфи һаҡал һелкенгән кеүек. Тағы бер әзмәүерҙәй арыҫлан даһа ! Вәт, шымафый! Кеше менән лыҡа тулы “Тойота”ға иғтибар ҙа итмәй, ҡәрҙәш януарҙар көтөүе эргәһенә ыңғайлап, бер һикереүҙә ағас олонона сытырман йәбеште лә өҫкә үрмәләй башланы. Беҙгә хәтәр алыштың шаһиты булырға яҙған икән: инә арыҫландар ҙа, урындарынан ҡалҡынып, ике йыртҡыстың көс һынашыуын алаҡандап күҙәтмәксе. Тегеләр иләмһеҙ ырылдап, ҡоростай тырнаҡлы елле тәпәйҙәре менән бер-береһен дөмбәҫләргә керешмәһенме! Алдан һөжүм итеүсенең позицияһы бигүк йәтеш түгел: ҡолап төшмәҫ өсөн ул өсаяҡлап ауыш олонға йәбешергә, тик алғы уң тәпәйе менән генә сапсынырға мәжбүр.

Һөҙөмтәлә дыуамал арыҫлан сигенергә мәжбүр булды, күрәһең, быға тәү тапҡыр ғына дусар ителмәйҙер. Был үсле ғырлап әрәмәгә сумғайны, инәләре һин дә мин тәпәйҙәрен һәлендереп, ҡабат ағас өҫтөнә һуйҙайышып яттылар. Машинанан ни бары ун метрҙа ғына бит әле үҙе. Шунда водитель һүҙҙәренә ҡолаҡ һалдым. Уның әйтеүенсә, арыҫландар кеше ултырған машинаға ыжлап та бирмәй, имеш. Мәгәр машинаһыҙ әҙәмгә ташланыуҙары һәм “батыр”ҙы ботарлап ташлауҙары бик тә ихтимал. Һәр хәлдә, ундай фажиғәләр булғылай, ти.

Урман буйлап тегеләй ҙә былай әллә нисәмә саҡрым елдергәс, йәйенке күлдең һөҙәк ярына төштөк тә тағы фотоһунарға керештек. Зәңгәр һыу яҭкылығында

ярға йәнәш оҙонса ҡыҙғылт таҫма булып... ундарса мең фламинго ғәскәре мәж килә. Һомғол ҡоштар туҡтауһыҙ ҡаңғылдай, өҙләкһеҙ ҡанат елпелдәтә, оҙон суҡыштарын һыуға тыға. Береһе талпынып осоп китә, икенсеһе тулҡын сирылтып күл өҫтөнә төшә. Ҡоштарҙың ошолай биниһая эркелеүен тәү тапҡыр күреүем. Ғәжәп тамаша!

Тәбиғәт мөғжизәһен туйғансы күҙәткәс, ыуылйып төрлө үлән ҡаплаған сахранан төпкәрәк ынтылдыҡ. Ҡайҙа ғына баҡма – ҡырағай хайуандар көтөүҙәре. Аҡ-ҡара тимгелле зебра көтөүенең уртаһынан уҡ уҙабыҙ. Бындағылар мин ошоғаса зоопарктарҙа күргәндәрҙән күпкә еллерәк тәһә. Аптырарһың: ҡабырғаларында – һыҙаттар, ҡырҙан ҡараһаң – бер иш кеүек, яҡындан иһә һүрәттәре һис тә бер-береһенә оҡшамаған.

Арыраҡ һомғол антилопалар, боландар өймәкләшеп семтенә. Алыҫта ҡара яу һымаҡ эре буйволдар утлай. Харап күмәк – ярты мең генә баш булыр. Эргәләренә яҡынлашҡас, ара-тирә һәлмәк мөгөҙҙәрен һелккеләп, ғәмһеҙ генә ҡарап ҡуйған булалар. Йәнәһе, һеҙ кем дә беҙ кем...

Әйтәгүр, ҡарамаҡҡа тыныс, сабыр тойолһалар ҙа, улар Африканың иң көслө һәм ҡурҡыныс кейек-януарҙары иҫәбендә: фил, арыҫлан, носорог, леопард, буйвол... Һуңғыларының үгеҙҙәре, бигерәк тә унда-бында тайшанып, темеҫкенеп йөрөгән алабармандары айырыуса һөмһөҙ. Йәғни, нәҡ шундай холоҡ-фиғелдәре өсөн көтөүҙән ситкә тибәрелгәндәре. Был һынамыштың дөрөҫлөгөнә иртәгәһенә үк инандыҡ... Соҡор ситендәге типһәндә кесе яраu итергә самалағайныҡ, яҡындағы тәпәш тау аръяғынан тәүҙә һин дә мин йөрөгән өс үгеҙҙең берәүһе ҡапыл ер һөрөрҙәй итеп башын аҫҡа эйҙе лә, алғы тояҡтары менән сапсынып, имәнес мөгөҙҙәрен беҙҙең яҡҡа һондо. Ярай әле, «Тойота»быҙ был диуананан яҡынераҡ ине – йомолдоҡ кирегә, юғиһә, кем белә?

Шулай, кәрәк-кәрәкмәгәнгә машинанан төшмәүең хәйерле, хатта был тыйыла ла. Беҙ килерҙән бер нисә көн генә алдараҡ вайымһыҙ инглиз туристы зебралар фонында фотоға төшөргә уйлаған һәм арыҫландың һөжүменә дусар булған. Моғайын, үҙ малына ҡул һонорға маташа тип иҫәпләгән теге һәм меҫкенгә бындағы биләмәләргә кем хужа икәнлекте уҫал рәүештә таныҡҡан.

...Бейек үлән араһынан һерәйгән леопардты тәүҙә осҡор күҙле водителебеҙ күреп ҡалды. Ҡымшанмайыраҡ торҙо, мәгәр үҙенә табан «Тойота» ыңғайлау менән, “йөрөйһөгөҙ шунда бимазалап” тигәндәй, ҡабалан-ҡарһалан ҡуйы сытыр араһына боҫто.

Эйе, ҡырағай хайуандарҙың күплегенә хайран ҡалаһың. Беренсе сәбәбе – Кенияла, уға күрше Танзанияла күптән инде һунарҙың тыйылыуында. Браконьерҙарға яза ҡаты, уларҙы оҙаҡ ваҡытҡа иркенән мәхрүм итеү ҡаралған. Икенсенән, ҙур-ҙур көтөүҙәрҙе һыйындыра, туйындыра ала икән, тимәк, бындағы климат та уңай, ере лә ифрат уңдырышлы. Өҫтәүенә, бөтә йәнлектәрҙең дә көр, һау-сәләмәт икәнлеген тоҫмалларға мөмкин.

Юл сатында аҡ носорогтар ғаиләһе осраны. Һис арттырмайым, инәләре ике тонна, быҙауҙары өсәр центнер тартыр. Яй, ауыр ҡыбырлайҙар, гүйә, тарих төпкөлөнән терелеп сыҡҡан йән эйәләре. Һәлмәк томшоҡтары йәтеш кенә һөңгөләй, сурайып сыҡҡан, тулҡын-тулҡын булып май бөргән тиреләре ҡалын. Ә юҡ, аҡ тиһәләр ҙә, быларҙың төҫө һорғолт таһа. Ҡарар күҙгә зыянһыҙ, йоҡомһораған һымаҡ дәү мәхлүктәр инде. Сей үләнде кинәнеп көйшәй-көйшәй, ашыҡмай ғына эргәбеҙҙән аҙымлайҙар, беҙгә лә, машинаға ла диҡҡәттәре юҡ. Битарафлыҡтары нисектер йәнде үртәгәндәй хатта. Рәхәтләнеп фотоға төшөрәбеҙ, былар ашаныуын ғына белә. Мыштыр фотомодель эше, йә тегеләй, йә былай борғоланып ала бит әле үҙҙәре.

Режим талабына ярашлы, сәғәт алтыла парк биләмәһенән сығып китәбеҙ. Өс сәғәт дауамында беҙгә ҡырағай йәнлектәрҙең иҫ китмәле донъяһын күҙалларға, елкенеүле хистәр даръяһына сумырға насип итте. Ҡайтышлай фламинголар осошона ҡабат һоҡландыҡ. Даръя өҫтөнә киске шәфәҡ алдынан ҡараштар иңләмәҫлек, елгә туҡтауһыҙ елберҙәгән ҡыҙғылт ебәк япма йәйгәндәр тиһеңме! Әлеге күренеш айырата мөғжизәлерәк, хикмәтлерәк, ирекһеҙҙән тыныңды үлсәберәк алаһың, күкрәктәргә шағиранә кисерештәр тула. Түҙмәнек, ҡабат күлгә һыпырттыҡ. Мин билдән һыуға төштөм, мөғжизәне мөмкин тиклем яҡындан фотокадрға тынҡысларға теләнем. Шул саҡ меңәрләгән күркәм ҡош тубы, утлы өйөрмә һымаҡ, һауаға талпынды һәм тотош күкте ҡапланы. Бызмырлап торған йылымыс һыуҙан һөҙәк, ылымыҡлы ярға менеп баҫҡайным, фламинголар тулҡын-тулҡын булып, өйөрөлөп-сөйөрөлөп, алһыу ялҡын һымаҡ аҫҡа ҡаҙалды. Тиҙҙән һауа ғәскәре ҡабат элекке хәленә ҡайтып, үҙҙәре генә белгән рәттәргә бүленешкән һымаҡ урынлашып, орсоҡтай оҙон суҡыштары менән ылымыҡта соҡонорға тотондо. Ә бит һыу тел ҡамаштырғыс зәһәр, бер уйлаһаң, унда йән эйәләренә сыланырға ярамай кеүек, шуға ҡарамаҫтан, ҡош-ҡортҡа аҙыҡ запасы бөткөһөҙ.

Бер көндә ике йөҙ кадр сыртлатырға өлгөрҙөм. Оло ҡәнәғәтләнеү менән йоҡоға талам... Алда әле сәйәхәтебеҙҙең тағы егерме көнө бар. Әллә ниндәй мөғжизәләргә юлығырбыҙ кеүек. Бирһен Хоҙай!

***

Таң атты. Төнө буйы яуған ямғырҙан һуң Накуру ҡалаһы йоҡоһонан уяна. Урамдарға йәйәүлеләр, велосипедсылар һибелә, һирәкләп автомобилдәр ҙә йөрөштөрә. Йорт буйволдары баҡырыша, әтәстәр ҡысҡырыша.

Кисә беҙ парктың төньяҡ яртыһын гиҙҙек, бөгөн көньяғы менән таныша башламаҡсыбыҙ. Унда юл ҡаялы һырттарға йәнәш — ҡурсаулыҡтың тәбиғи сиге аша һуҙылған. Унда, көнбайыш тарафтарҙа, өйкөм-өйкөм әрәмәләр, ағаслыҡтар йәйрәгән. Буйвол, боландар өсөн ошонан да уңайлыраҡ төйәк табылмаҫ, тип уйлағайныҡ та, был тирә бушлыҡ булып сыҡты. Алты километрҙай уҙғайныҡ, юл тирәләй бабуиндар төркөмөн күрҙек. Эргәләренән үтә башланыҡ, маймылдарыбыҙ, һүҙ ҡуйышҡан кеүек, һорғолт-ҡыҙғылт осаларын ҡуйып, арҡаларына боролмаһынмы! Күпереп торған көрәнһыу йөнтәфиҙәр алан-йолан ҡаранған да кеүек. Инәләренең һыртында — һөймәлекле сабыйҙары. Әһә, тәүҙә парлы, һуңынан күмәк буйволдар, төптәрәк антилопалар күҙгә салына. Бәләкәй генә урман ауыҙында ике тупаҫ, тоҡос ҡына, түбәнән йыуанайып үҫкән ҡуш мөгөҙлө жираф маңлайын шәйләйем. Шул яҡҡа боролғайныҡ, бәй, унда жирафтың ике иптәше лә бар икән.



Кәүҙәгә, ай-бай, елле былар. Юҡҡа ғынамы ни донъялағы һөтимәрҙәр араһында ҙурлыҡ буйынса жирафтар —

дүртенсе урында! Эреләренең ауырлығы тоннанан аша, бейеклеге алты метрға етә. Муйын тигәнең ғәжәби оҙон, әммә умыртҡалары, барса һөтимәр хайуандарҙыҡыса – етәү. Шунса юғарылыҡҡа ҡаны күтәрелһен өсөн дә Хоҙай жирафтарҙан буй-һынды, ҡалҡыу килбәтте йәлләмәгән, хәлбүки.

Фотоаппаратыбыҙҙы онотоп, тәүҙә оҙаҡ ҡына һоҡланып күҙәттек. Элек мин, жирафтарҙың төрткөләре һап-һарылыр, тип уйлай инем, баҡһаң, көрән ҡатыш буҙ төҫтә икән. Төрлө-төрлө формалағы тимгелдәрҙең сит-мите асыҡ беленә, муйын буйлап бер тотам ҡарағусҡыл-көлһыу шырт ялы ялтырай. Уртаса оҙонлоҡтағы ҡойроғо сөм-ҡара ҡыл бумалаһын хәтерләтә. Хәрәкәт нисегерәк һуң әле! Юҡ-юҡ, улар атламай, бәлки, янтая-бәүелә талғын ғына йөҙә. Машинабыҙ менән эргәләренә үк барғас, жирафтар тораташтай турайып ҡатты, шулай ҙа беҙҙе һағайыулы күҙәтеүҙән дә туктаманылар. Тыныс маҡсатта йөрөүебеҙҙе аңлағандай, тирә-йүнгә берәм-һәрәм таралыштылар ҙа һонолоп япраҡ мырта башланылар. Моғайын, был зирәк хайуандар ерҙәге үлән көйөп бөткәс кенә ағас япраҡтарын ялмарға керешәләрҙер, тигән уй ҙа биләне күңелде бер килке.

Ирektәге жирафтарҙы тәүләп күреүем. Африкалағы хайуандар араһында улар миңә иң һөймәлекле тойолдо. Бешкән ҡарағат емешеләй ҡара күҙҙәре ҡуйы керпектәр менән ҡаймаланған, уларҙан йылылыҡ, берсә ҡанһыҙ, ҡомағай һунарсыларға рәнйеш тә һирпелгәндәй. Карабиндан күпләп сәпәйҙәр шул бисараларҙы. Етмәһә, оялмай-нитмәй ҡорбандары янында, моторҙары өс йөҙ ат көслө джиптарына терәлеп, фотоға төшәләр: йәнәһе, күр, ул – мәргән, ҡуш йөрәк, ул ниндәй "ҡаһарманлыҡ" ҡылған! Туң йөрәк улар!

Алдағы болонда йәнә бер үҙе ҙур, үҙе камил һынлы йән эйәһенә хайран ҡалдыҡ. Ҡаурыйҙары мамыҡтай ҡабарған. Аяҡтары оҙон, кәрле, эре генә, үлсәп кенә баҫып хәрәкәтләнә, ҡолас буйы муйынын ныҡлап сөйһә, бейеклеге 2,5 метрға етә. Алпамыша ҡош! Эйе, эйе, страус был.

Күлде көньяҡ ярынан урап, парктың көнбайыш тарафындағы быжырмаҡлы туғайҙарына йүнәлдек. Ҡайҙа баҡма – болан, зебра, буйвол көтөүҙәре, араларында томшоҡ өҫтөнә оро үҫтергән ҡабан сусҡалары йырбандай. Әйтергә кәрәк, Рәсәй ҡабандары ике тапҡырға эрерәк, беҙҙәгеләрҙең тиреһе беше, йөнө ҡуйы, ҡаҙыҡ тештәре лә оҙон.

Мәғлүм ки, Төньяҡ Американы үҙләштергәндә лә Европа уҙамандары кейекфәләнден күплегенә ғәжәп ҡылған. Ә хәҙер һуң? Бизондар ҡырылып бөткән тиерлек. Шөкөр, Көнсығыш Африкала милли парктар бихисап, һәм уларҙа рәхимһеҙ браконьерлыҡҡа ҡаршы аяуһыҙ көрәш алып барыла.

Төшкө аштан һуң беҙҙе Накуру уртаһынан парктың үҙәк ҡапҡаһына әйҙәнеләр. Ҡапҡаға яҡын ғына мөһабәт һарайҙы хәтерләткән павильон урынлашҡан. Арлы-бирле йышылған йыуан бүрәнә терәүҙәр өҫтөнә йәйелгән япма инде. Ер иҙән. Эстә – һәндерәләр, уларға төрлө ағастарҙан ҡырып-юнып яһалған йәнлек һындары: фил, арыҫлан, буйвол, кескәй генә антилопалар, кеше буйлыҡ жирафтар... Ҡыҫҡаһы, паркта нимә ҡыбырлай, шыуыша йә оса – барсаһы ошонда.

Өҫтәлдәрҙә иһә – маскалар, масай ҡәбиләһе бысаҡтары, ҡалҡандар, уҡ-һаҙаҡ, һөңгөләр. Стена буйҙарында ла әйбер туп-тулы.

Әлеге "салон"ды биш-алты һатыусы хеҙмәтләндерә, береһе – хужа. Әгәр кемдер һатыусынан хаҡты төшөрөүен һораһа, быныһы хужаға йүгерә, шунан өсәүара баҙар ойошторалар. Сәмсел һатып алыусының салон ҡуйған хаҡты өс-дүрт тапҡырға кәметеүгә өлгәшеүе ихтимал. Мин үҙем ҡара ағастан эшләнгән ике леопардлы булдым. Һүҙ ҙә юҡ, ағастан сувенирҙарҙы һоҡланғыс яһай африкандар. Мәҫәлән, сәфәребеҙ аҙағында Танзанияның мәҙәни үҙәгендә миңә бөтөн бер ҡара

ағас киҫкәһенән берәмтекләп, шул тиклем нескә яһалған ике йөҙ антилопаны күрергә насип итте.

Йәнә масайҙарҙың оҙонса һелкәүес һымағыраҡ йола “ҡапҡаны”на ҡыҙыҡтым. Уның өҫкө өлөшөнә масай алиһы юнылған, уртала – фил, иң аҫта – тропик урман, йыртҡыстар, һунар күренеше. Бигерәк ҡупшы, нәзәкәтле лә бит, хужа менән хаҡына ғына килешә алманыҡ. Аҙаҡ үкендем, сөнки ошоға оҡшаш ҡалҡандарҙы осратһам да, улар тегенеһенән күпкә ҡайтыш, хаҡтары иһә ҡиммәтерәк ине.

Алыш-биреш бөткәс тә (иң ҙур әйберҙе – Африка барабанын Вячеслав һатып алды һәм бала саҡ хыялын тормошҡа ашырҙы), йылмаяҡ ҡатын-ҡыҙҙар ҡарашы оҙатыуында кире ҡалаға ҡайттыҡ. Гид һөйләүенсә, Накурула миллионлап кеше йәшәй, ә беҙ, ике йөҙ меңдән артмаҫ, тип ныҡышабыҙ. Кения кешеләренең фантазияға бай, ә бына арифметиканан килделе-киттелерәк икәненә инанғайныҡ инде. Хәйер, маҡтаныуҙа ла илһөйәрлек рухы сағыла торған.

Ҡалалағы ҡоролмалар, бер, ике, өс ҡатлы өйҙәр тәртипһеҙ урынлашҡан. Затлыраҡ торлаҡтар бетон ҡойма менән уратылған, етмәһә, өҫтәренә быяла ватыҡтары ҡатырылып ҡуйылған. Күрәһең, хәлле кешеләргә ҡараҡтар тынғылыҡ бирмәйҙер.

Иғтибар иттем: күҙлек кейгән әҙәм юҡ тиерлек. Ә беҙҙә... һәр дүртенсебеҙ – күҙлекле. Ә күпме кеше линза йөрөтә?!

Ҡала баҙарында Непал һатыусыларының Кения һатыусыларынан ныҡ айырылыуын тойҙом. Непалдар менән сағыштырғанда, һуңғылары төлкө, ә юҡ, бурҙай кеүегерәк. Сауҙа рәттәренә кереүең була – уратып та алалар, һәр береһе үҙ тауарын танауыңа тығып килә. Берәй нәмәһен алдырмайса, улай ғына түгел, йомшағыраҡ бәндәнең барлыҡ кеҫә аҡсаһын һурмайса ебәрмәйҙәр. Һыҡмыр әҙәмдәрҙе илата яҙалар: еңенән тартҡылайҙар, һыйпайҙар, өҙләкһеҙ лығырҙайҙар: “Гуд прайзе”. Ығы-зығыһыҙ йәшәгән халыҡ... сауҙа өлкәһендә ҡырҡа үҙгәрә лә ҡуя.

Доктор менән иртәрәк уяндыҡ та экваторҙа ҡояш ҡалҡҡанын кинәнеп күҙәттек. Сәғәт алтыла ҡара бәрхәттәй күк көмбәҙендә таныш түгел йондоҙлоҡтар емелдәшһә, тиҙҙән офоҡ көл һипкәндәй асыла төштө, һоро тулҡын көнбайышҡа шылышты, көнсығыш офоҡ иһә ҡыҙара барҙы, аҙаҡ баш осонда зәңгәрлек балҡыны. Таң кеүек таң, ләкин бындағыһы йылдың 365 көнөндә лә бер иш: ун ике сәғәт төн, шунса ваҡыт – көн... Бер төрлөлөк ялҡытып та ҡуйһылай.

Йыуынған саҡта эксперимент яһап, үҙебеҙҙең ысынлап көньяҡ ярымшарҙа икәнлегебеҙгә нығыраҡ инанабыҙ. Былай иттек: раковинаға һыу тултырҙыҡ та бөкөһөн алдыҡ – һыу сәғәт уғы буйынса әйләнеп ағып бөттө. Ә бит төньяҡта һыу сәғәт уғы йөрөшөнә кире һарҡый. Экваторҙа иһә һыуҙар бөтөнләй өйөрөлмәй, тура ғына аға.

## Ҡолаһыңмы – бөттөң...

Иртәнге ризыҡты хәрбиҙәрсә ашығыс ҡына ҡапҡылап, икенсе милли паркка – Найваши тарафтарына елдерәбеҙ. Быныһы Накуру паркынан йәмлерәк, бейек кенә йәм-йәшел түмәләстәр уратымындағы “ҡаҙан”да. Үҙәгендә ярайһы тәрән, сөсө һыулы тоноҡ күл.

Юлда ике тәгәрмәсле арба һөйрәгән оҙон ҡолаҡлы ишәктәрҙе уҙып китәбеҙ. Ығыш ҡына арбаға «PETROLIUM» тип яҙылған, тышы сағыу буялған ике йөҙ литрлыҡ мискә тейәгән, ә ишәк йүгәнен ялан аяҡлы, һәләмә кейемдәге ҡартлас тотоп атлай. Ниндәй контраст!

Зебралар, һирәк-мирәк жирафтар күренә. Шәп! Тимәк, Кенияла ҡыр хайуандары ҡурсауһыҙ урындарҙа ла йәшәй.

Шыйыҡ ағаслыҡ күпселек майҙанды ҡаплаған. Ара-тирә шыршы, ҡарағай

урмандары осраштыра. Беҙҙекеләрҙән айырмалы, бындағы шыршыларҙың йәйеге өҫтәнерәк башлана, ә ҡарағайҙарҙың энәләре ҡуйыраҡ һәм оҙонораҡ. Ылыҫтары ҡойолмай тиерлек, төптәрендә йәшел сирәм үҫә.

Найваши әҙ-мәҙ Урта Рәсәй күлдәрен сырамыта, тик ярҙары япраҡлы үлән менән түшәлгән, һары таждарын баҙратып лилиә сәскәләре күҙ яуын ала. Әйтерең бармы, күл мөхитендә ҡоштарҙың 450 төрөн осратырға мөмкин. Мәгәр бындағы төп ымһындырғыс хайуани зат, әлбиттә, – бегемот (гиппопотам). Хәтһеҙ оҙон моторлы кәмәлә яй ғына түп-түңәрәк, диаметры километрҙан ашмаған күлебеҙ бәләкәйерәк боғаҙ аша төп күл менән тоташа, имеш. Һаҙматтағы шешмәк төмөҙдәрҙән йыш-йыш аҡ селәндәр һиҫкәнеп оса.

Күҙҙәр талғансы күлгә ҡарайбыҙ. Офоҡта, гүйә, күк йөҙө даръяға уҡмашҡан кеүек.

Лилиәләр араһында ҡапыл ғына моронына йәшкелт сырмалсыҡ ураған бегемот пәйҙә була. Тын алыр өсөн башын ҡалҡытҡандыр. Һауаны ярайһы тиҙ һулайҙыр, бер генә кадрға баҫырға өлгөрҙөм. Йыраҡтараҡ йәнә ике бегемотты шәйләнек, улар ҙа ике-өс секундҡа ғына шөкәтһеҙ танау тишектәрен ҡалҡыта һалып сумдылар. Боғаҙ аша уҙышлай яҡындараҡ ҡош баҙарының шаһиты булдыҡ: йөҙҙәрсә пеликан, беҙ танымаған бүтән ҡанатлы дуҫтар һаҙыматта ирәүән ҡыймылдаша, уларҙан да арыраҡ һыу боландары утлай. Уңды ла, һулды ла өйрәктәр йырмаслаған эҙҙәр беленә. Бегемоттар ҡайҙа? Моторист кәмәне тамыр-томор араһына йүнәлткәс кенә мораҙыбыҙға ирештек: "һыу һыйырҙары" араһында ҡошсоҡтар уйнаҡлай. Ҡәнәғәтһеҙлек кисерептерме, әле бер, әле икенсе "гиппо" быхылдарға, шөр ебәртерлек үкерергә, шаптырҙап әйләнергә-тулғанырға кереште. Өҫкә күтәрелгән мәлендә яҫы ҡабырғаларынан биҙрәләп түккәндәй һыу ҡойола. Утыҙ метрҙай арауыҡта әйләнеп йөрөп, "фотоһунар" ойошторабыҙ. Ҡағиҙәне боҙоп, бәғзеләребеҙҙең тыйыуына ҡарамаҫтан, рулевой күпселеккә буйһондо һәм кәмәне ун биш метрға уҡ яҡынлатты. Һөтимәрҙәр төркөмөнән иң еллеһе кинәт экскаватор сүмеселәй алһыу ауыҙын асып, алдынан тулҡын иштереп, өс тонналыҡ торпедалай беҙгә уҡталмаһынмы! Дәү уртында ике яҡлап оҙон тештәре ыржайған. Кәмәсе ашығып газға баҫҡайны, ҡапыл ғына ситкә ҡыҙыу йомолған кәмәнән саҡсаҡ ҡолап төшмәнек. Ҡоланың – бөттөң тигән һүҙ. Элегерәк ошондай хәүефле сәфәрҙә кәмәсе-кениец юлдашыбыҙҙың ағаһы ҡанһырап йән биргән. Ғәжәп, шундай килбәтһеҙ, уҫлаптай ауыр йән эйәһе һыуҙа йылдам, еңел генә йөҙһөнсө! Йәшермәйем, күптәребеҙҙең ҡото бот буйына китте, Петр исемле иптәшебеҙ генә шөрләмәйенсә, ҡурҡыу ҡатыш һоҡланыу ауаздары яңғыратып, фотоаппаратын эшкә екте.

Найваши паркынан таныш юл буйлап Найробиға ҡайтабыҙ һәм, әллә ни тығынға эләкмәйенсә, ҡала ситендәге атаҡлы Карнивор ресторанына инәбеҙ. Ысынлап та, уны Африкала иң яҡшы ресторан тип маҡтарлығы бар. Ә, онотоп барам: ҡалаға яҡын бик ҙур, түбәләре яҡтылыҡ үткәрмәй торған материал менән көпләүле теплицаларҙы күрҙек, имеш, әле. Төндәрен ҡеүәтле фонарҙар менән яҡтыртып, "көн" хасил итәләр һәм экспорт өсөн гүзәл гөлләмә үҫтерәләр унда.

... Ресторан үҙенә күрә аулаҡ тәбиғәт мөйөшөн хәтерләткәндәй: Кенияның ҡырағай хайуандары һындары, тәрбиәле тупраҡта үҫтерелгән үлән, ҡыуаҡтар. Ашхана уртаһында – тиҫтәләгән ит ҡурғыстар, унда шештәргә кейҙерелгән әллә нисәмә окорок шыж-быж ҡыҙҙырыла. Һәр ҡурғыс эргәһендә аҡтан кейенгән ашнаҡсы өлтөрәй, бынан уҡ ҡунаҡтар йөрөрлөк сирәмле террасалар һуҙылып китә.

Төш күптән ауған, ә беҙ иртәнсәктән бирле ризыҡ ҡапмағанбыҙ. Эстә бүреләр олой, һәр беребеҙ ярты һарыҡты йыпырырға әҙер – шундай теләк менән ултырышабыҙ өҫтәл артына. Өҫтәлгә тәмләткесле блюдо ҡуйылғайны, бер официант быу

бөркөп, һары майҙары тамсылап торған йоҙроҡтай буйвол ҡурҙағын ташыһа, биш минуттан икенсеһе һутлы кәзә итен таратты, өсөнсөһө йүгергеләй, дүртенсеһе...

Иң ҡыҙығы — ярты сәғәттән ошо уҡ "конвейер" ҡабатлана, әйҙә, клиент буйтым туйып, ҡәнәғәт китһен. Мин иһә икенсе «дистанция»ла төшөп ҡалдым, ә төркөмөбөҙҙән Парашютист һәм Колонизатор ҡушаматлы дуҫтар бишенсе блюдоны ла хушһынып һеңдерҙе.

Ҡушамат тигәндәй, аңлатма бирәйем әле. Хикмәт шунда: ошондай экспедицияларҙа һәр кемдең холҡо-фиғеле асыҡлана һәм, ғәҙәттә, уларға тәғәйен генә ҡушамат сәпәлә. Был юлы мин, һонтор, яшыҡ булғанға күрә, Масай булып киттем; Николай Рундквисты — мул тәжрибәле, үткер ҡарашлы етәксебеҙҙе — Командор, футболсы улын Бегемот тип йөрөтә башланыҡ; ҡарамаҡҡа ябай, зирәк бизнесмен Антон Кашин, аҙым һайын африкандарҙы тәртипкә өйрәтергә маташҡаны өсөн, хаҡлы рәүештә Колонизаторға әйләнде; Өфөнән күҙ врачы Вячеслав Малоярославцев — Доктор, өҙләкһеҙ мәҙәк һөйләүсе, ниндәй генә мәлдә лә дуҫ-иштәргә яурынын ҡуйырға әүәҫ, унан бигерәк, ярым-ярты асылған парашюты менән километрҙай бейеклектән һауа шыйлатып-шыҡыйып, ергә апаруҡ ҡаҙалып та йән бирмәгән Сергей Сиамков, эйе, эйе, Парашютист үҙе инде. Ә-ә, Петр Захаровмы? Тайлаҡ айыуҙай мыҡты, бер ботлоҡ телеобъектив ҡумтаһын елтерәтеп кенә йөрөткән юламан — Эм-Фе булыр (Модный фотохудожник, йәнәһе).

Командор, Парашютист, Доктор, Эм-Фе, Бегемот вә Масай... Командор әйтмешләй, бына тигән «ватага», юҡ, ул ғына ла түгел, " ауандар (иҫәрҙәр) ватағаһы".

Минән башҡа бөтәһе лә ит эргәһенә спиртлы эсемлеккә заказ биргән. Аҙағыраҡ, Килиманджаро типһәнендә донъяны минән күберәк гиҙгән Командорҙың кәңәшенә ҡолаҡ һалмағаныма ныҡ ҡына үкендем: "Африкала европеец көн һайын йөҙ грамм виски кәгергә тейеш, араҡы булһа, бигерәк тә яҡшы..." Ә ниңә үкендем? Был хаҡта — һуңыраҡ, сабыр итегеҙ. Әле иһә беҙ туймаҫтай булып тығынабыҙ — ҡорһағың ғына түҙһен. Бигерәк тә Колонизатор тырыша. Килтергән бер блюдоға тәүҙә устарын ыуғылап һоҡлана, шунан керешә, әйтерһең, берәйһе ҡушҡан да, был шуны мотлаҡ үтәргә тейеш.

Нисек кенә ымһындырмаһын, экзотик һуғым ҡәҙимге тана йә һарыҡ итенән һиҙелерлек ҡайтыш. Бигерәк тә крокодил итенән күңел ҡайтты. Татлыраҡ кеүек, тәлмәрйен тәме итә. Эйе ләһә, деликатес артынан сабыулауҙың кәрәге юҡ та кеүек, ни генә тимә, кешелек үҙ тарихында былай ҙа планетаның фаунаһын аҡтыҡ сиккәсә кимереп бөтөп бара бит.

... Найробиҙан көньяҡтараҡ асфальт ҡырсын юлға алмашына. Һикерәндәп барыуҙың тынҡысланған ашҡаҙанды эшләтеүгә файҙаһы бар, әлбиттә. Дүрт сәғәт һуҙымында юлда бөтәһен дә ҙур тиҙлектә ҡыуып етәбеҙ, уҙып китәбеҙ. Дөрөҫ, машиналар ҙа әллә ни йыш осрамай. Руль артында ҡатындар йә ҡыҙҙар — бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Танзания яҡынайған һайын тауҙар бейегәйә, урмандар ҡалыная. Офоҡта бер-бер артлы ослопай түбәләр төҫмөрләнә, ҡайһыһы Килиманджаро икән, тип баш ватыуың була, улары артҡа күсә бирә. Ниһайәт, ысын масай ауылдарын күрәбеҙ. Һәм — о, мөғжизә! — милли кейемдәге аборигендар осрай. Быға тиклем тап иткән Кения кешеләре нигеҙҙә европаса кейенгән: ирҙәрҙә — күлдәк-салбар, куртка, ҡатын-ҡыҙҙарҙа — блузка һәм юбка.

Масайҙармы? Улар — ярым ҡырағай ҡәбиләләр, Көнсығыш Африка халҡының күпселеген тәшкил итә. Цивилизацияға баш бирмәйсә, натураль йәшәү образына йәбешеп яталар. Малсылыҡ менән шөғөлләнәләр, бай масайҙар меңәрләгән баш малға эйә. Ошоғаса ҡырағай йәнлектәрҙе күп аулағандар. Ҡайһы бер урындарҙа

йәшертен генә эуонто йолаһы – үҫмер масайҙы ир ҡорона баҫтырыу ойошторола. Хәтәр! Буласаҡ ир япа-яңғыҙы арыҫлан менән алышырға бурыслы. Шуныһы: мылтыҡ бирелмәй, бары тик ҡулына буйвол тиреһенән ҡатырылған ҡалҡан һәм осона легионер ҡылысындай бысаҡ беркетеүле һөңгө генә тотторола. Арыҫландар гелән ырғылып һөжүм яһай, шул саҡта егет, ҡалҡан менән көпләнеп, йылп итеп кенә лыпын ята һәм аҫтан рәхимһеҙ януарҙың йөрәгенә ҡаҙай. Хоҙай аралап, йәтешләп сәнсә алһа әле...

Термит иләүҙәре һерәйеп ҡаршылай. Күптәре ағастарҙы уратып өйөлгән. Тәү күргән иләүҙәр ҡыҙғылтыраҡ тойолғайны, Танзанияға етәрәк ер төҫөндәге ҡараһоролары ла осрай башланы. (Өс метрҙай булыр, Танзанияла биш метрға етә!) «Башнялары» өсәү йә дүртәү, шулар аша вертикаль вентиляция каналдарын да эшләргә онотмай икән эре ҡырмыҫҡа заты.

Бәғзе термит иләүҙәре хижиналарға яҡын – егерме метрҙай ғына арала. Вәт әй! Аптырарһың да, сөнки бөжәктәр кеше йәшәгән хижиналарҙың ағас терәүҙәрен мөнйәп бөтөрә, шунлыҡтан йыш ҡына торлаҡ тигәнең серек өйөмөләй ҡыйшайып ауа. Шул уҡ ваҡытта масайҙар ауылдарынан алыҫтараҡ урынлашҡан термит ояларын оло үрт һалып яндыра. Сәйер был ҡылығы аборигендарҙың!

Кенияның көньяғы таулыраҡ, Амбосели милли паркына етәһе егерме километрлап арауыҡта өҫтәлдәй тигеҙ, ҡаулан ҡаплаған ер ярғысланып, саңдауға әйләнеп бөткәйне. Был тирә, ғөмүмән, контраслы: әле генә ярым сүллектән елдерәһең, тиҙҙән һутлы япраҡтар ялпылдаған даланы уҙаһың, бара биргәс, һирәк ағастар, энәле ҡыуаҡлыҡтар үҫкән саваннаға инәһең.

Алда саң болото күтәрелде. Ҡойон уйнайҙыр, тиһәк, меңәрләгән антилопаны (гну) гепардтар өйөрө баҫтыра икән. Баҫтырыш нисек тамамланғандыр – аңғарманыҡ, сөнки ҡырҡа ғына ҡапма-ҡаршы яҡҡа ҡайырылдыҡ. Гепардтар ифрат хәстәрлекле, тиҙәр. Арыҫландарҙан айырмалы рәүештә, улар тәүҙә көтөйҙәрен туйындыра, шунан ғына үҙҙәре балаларының ҡалдыҡ-боҫтоғона хушһына.

Үҫә төшкән гепардтарҙы инәләре үҙ аллы ризыҡ табырға өйрәтә: алдарына ботон зәғифләгән антилопаны һала – әйҙә, тәүҙә йәнен ҡыйығыҙ, шунан кинәнерһегеҙ.

Һо-о, филдәр ҙәһә! Ғаиләләргә бүленеп күләгәлә йөрөйҙәр, шуға көтөүҙәрендә бик дәүҙәрен дә, тәнәйҙәрен дә шәйләргә мөмкин. Яҡындағы ҡалҡыулыҡта юлбарыҫтар ирәбеләнеп ята.

Шыйыҡ болоттар өйөрмәһендә мөһабәт вулканды күргәс, тәндәр зымбырлап ҡуя. Үҙе, кәнде үҙе – Африкала Килиманджароише бүтәнсә аҡ башлы вулкан юҡ. Бейеклеге – 5895 метр, йәғни Европалағы иң ҡалҡыу ослопайлы Эльбрустан 253 метрға ҡалҡыуыраҡ. Водителебеҙ сос, йылғыр, һанһыҙ юлдарҙан, кейек тападыларынан нисек тә яҙлыҡмай, бихисап фил, антилопа, буйвол көтөүҙәрен урап-салып, кәрәк урынға – артезиан скважинаһына еткерҙе.

Баштары ялтас ҡырылған, өҫтәренә кофта-юбка кейгән масайкалар ҡул насосы менән ҡоҙоҡтан һыу һурҙыра. Егерме литрлыҡ канистрҙарҙы тултырып, һыңар ҡулдары менән генә тотоп баштарына ултырталар ҙа һин дә мин атлап, ә юҡ, йөҙгән һымаҡ бәүелә-сайҡала атлап китәләр.

Кәңәшмә уҙғарабыҙ: йә кемпингҡа (автотуристар лагеры) барырға, йә тәүҙә масай ауылына һуғылырға. Унһы алыҫ түгел, ике саҡрымда ғына. Көн киҫкә ауышһа ла, икенсе варианты һайланыҡ.

Ауыл нисектер ҡотһоҙ тойолдо. Эргә-тирәһендәге үләнде кәзәләр мыртып бөткән, шуға тупраҡ яланғас, ара-тирә генә ҡыуаҡлыҡтар күҙгә салына. Ауылды оло донъянан метр ярым бейеклектәге балсыҡ ҡойма айыра, уның инмәле-сыҡмалы өс уйымы бар. Берәүһенән – мәктәпкә, парта урынына яҫы таш түшәлгән алаңғыртҡа кереп була. Ҡойма тирәләй балсыҡ, ҡыйыҡтары әҙ-мәҙ генә ауыш



егермеләп хижина. Ауыл уртаһында — майҙансыҡ, унынһы бер иле зәһәр туҙан. Ара-тирә эре ағастарҙың сайҡалыуы бында ҡасандыр шыр урман булғанлығын раҫлай. Майҙан менән өйҙәр араһында дағаға оҡшатып ҡоролған кәзә арандары, улары шырт энәле боҡтарҙы өҫтө-өҫтөнә һалып әтмәләнгән. Ҡура ҡапҡалары хеҙмәтен ҡәҙимге һайғауҙар үтәй — бөтәһе лә уңайлы һәм ябай.

Үҙе староста, үҙе уҡытыусы икән буйһыу, таҡыр башлы яшыҡ масай — яурынына сөм-көрән туҡыма ураған утыҙ йәшлек кенә ирекәй. Уны үҙе һымаҡ ҡаҡ һөйәк ике ҡартлас оҙатып йөрөнө. Аяҡтарында — автопокрышканан киҫелгән сандали. Ҡыҫҡа ғына әңгәмәнән һуң староста беҙгә ауылды күрһәтергә ризалыҡ бирҙе. Етмеш долларға.

Хижиналарҙы ҡарауҙан башлайбыҙ. Стеналары тиҙәк ҡатыш һыланған ситән инде. Эстә ҡараңғы, ус аяһындай ғына тәҙрәсектән яҡтылыҡ һарҡылмай ҙа тиерлек. Бындай ҡараңғыла масайҙар һауыт-һабаларын, кейем-һалымын нисек таба, этем белһен. Моғайын, бесәй күҙгә әйләнеп бөткәндәрҙер. Тар ғына бүлмәләре, етмәһә, тас ҡалма, һауаһы ла саңлы. Беҙҙең ҡарамаҡҡа тормош шарттары үтә лә ҡуңалтаҡ, ләкин аборигендар үҙҙәрен бәхетле тоя.

Уңарсы майҙансыҡҡа арҡаларына бәпестәрен сырмаған тиҫтәләгән йәш бисәсәсә йыйналышты. Байрамса кейенгәндәр, баштан-аяҡ төрлө төҫтәге биҙәүес таҡҡандар. Урталай теленгән ҡолаҡ ярпылары яурындарында һәлберәй, быны күргәс, йәнә иҫ китә яҙҙы. Тағы?.. Йә Хоҙай, ирле ҡатындарҙың урта тештәрен махсус сүкеп һуралар икән дәһә. Мин инде сәсһеҙ түбәләрен, танауҙары аша беркетелгән тимер дүңгәләктәрҙе әйтеп тә тормайым.

Мәгәр нәҡ ошондай «күркәм» зат оҡшай, күрәһең, масай ирҙәренә. Башҡа көфөр уй һуға: Рәсәй абышҡалары түшәгенә шундай масайканы һалһаң, теге меҫкен ил сигенәсә үк йүгереп ҡасмаҫ микән? Ҡыҙыҡ, масай ирҙәре беҙҙең гүзәл затты нисегерәк ҡабул итер ине? Улар ҙа йән-фарман һыпыртмаҫ тимә.

«Супермоделдәр»гә етебеҙ ете яҡтан һаҡ ҡына яҡынлашҡайныҡ, былар дәртләнеп, рәткә баҫып тороп милли йырҙарын геүләтергә керешмәһенме! Ә биш-алты масай бер ритмда ғына һикерәндәп бейергә, башҡа ир-ат быларҙы ҡеүәтләп һеүләргә тотондо. Иң аҙаҡ бер масайҙың таяҡсаны таҡта киҫәгендә кире-мире быраулап, ут ҡабыҙғанына шаһит булдыҡ. Баҡһаң, таяҡсаны таҡта ситендәрәк өйрөлтөргә кәрәк икән. Таҡталағы махсус улаҡ буйлап ышҡыуҙан ҡыҙған урынға һауа ағылырға тейеш. Бынһы — мотлаҡ һәм ут ҡабыҙыуҙың бөтә ғилләһе шунан ғибәрәт. Егерме секундта уҡ соҡорсанан нәҙек төтөн күтәрелеп, осҡон баҙлағайны, масай егете йәһәт кенә кипкән тиҙәк онтағы һипте һәм тынын өрҙө. Осҡондан — ялҡын тоҡанды, аборигенға унда ҡыу үлән, ваҡ сытыр ғына өҫтәргә ҡалды. Минут һуҙымында усаҡ ләүкене, ә бит был ғына ваҡыт эсендә күптәр шырпы менән дә ут тоҡандыра алмай.

Шулай итеп, этнографик коллекцияма йәнә яп-ябай ут табыу ҡорамалы өҫтәлде. Ундай әйберҙәре 1971 йылдан бирле, йәғни Сихотэ-Алин һыртында удегейҙар менән промысла һунарында саҡта йыя башлағайным.

Әйткәндәй, масай ауылында бала-саға ифрат күп. Һәр хижина ишегенән ҡарасман малайҙар һәм ҡыҙыҡайҙар бөзерәйешеп беҙҙең команданы күҙәтә ине.

Урман асыҡлығында урынлашҡан кемпингка энер-меңерҙә генә килеп еттек. Гид менән водителебеҙ киске аш яраштыра, ҡалғандарыбыҙ йәтешләп урынлаша.

Ҡапыл мине биҙгәк тота башланы. Һауа температураһы плюс 20 градус, ә мин... өшөйөм. Йылыныр өсөн тәүҙә свитер, шунан ҡышҡы курткамды (Килиманджаро һыртында минус 15 була, тигәнгә махсус алғайным) кейәм, тик барыбер ҡалтыранам. Аптырағас, йоҡо тоғона сумып, палаткаға инеп ятам. Артымса Доктор инә, таблеткалар йоттора, файҙаһы теймәй. Төн уҙғансы эс китеүҙән саванна ҡыуаҡтары араһына кәмендә ун тапҡыр ғына сыҡҡанмындыр. Иртәнсәк еңелсә генә тамаҡ ялғап, иптәштәрем филдәрҙе фотоға төшөрөргә юлланды. Ике сәғәттән ҡыуанышып ҡайтып инделәр. Юлдары уңған, хатта егермеләп фил араһында бер көтөү арыҫландарҙың серем итеүенә тап булғандар.

Эстә бер нәмә ҡалманы, хәлһеҙлек йонсота. Кескәй автобуста сик буйына табан һелкенәбеҙ: төш мәлендә Танзанияның туристик агентлығы вәкилдәре менән осрашмаҡсыбыҙ. Ыҙалайым ғына, ҡоҫам. Аһ-зарымды артыҡ яр һалып белгертмәҫ өсөн ваҡыт-ваҡыт шыптыр тоҡсайға башымды тығам. Паспорт контролен уҙғанды яҙа-йоҙа ғына хәтерләйем. Артабан Аиш отеленә оҙаҡ ҡына барҙыҡ, буғай. Бындағы отель дә уңайлы булып сыҡты. Эргә-тирәһе зауыҡлы ландшафт менән уратылған, ҡайҙан да болоттар солғанышындағы һырттың ҡарлы "эшләпәһе" күренә. Галет сәйнәштереп, дарыулы сәй генә һемерәм дә ҡабат койкаға ауам. Сырхауҙы еңер өсөн... бер төн! Иртәгә — тауға артылыу: шәбәймәһәм, ғүмерем буйына үкенәсәкмен.

Таң һарыһынан артыҡ әйберҙәребеҙҙе һаҡлау камераһына ҡабалан-ҡарһалан ҡуйғас та, автобусҡа тейәлешәбеҙ. Тиҙҙән Килиманджаро паркының ҡыуышҡа оҡшатып эшләнгән үҙәк ҡапҡаһына етәбеҙ.

Диңгеҙ кимәленән 18 000 метр өҫтәрәк йөрөйбөҙ икән. Һүнгән вулканға күтәрелеү өсөн иң ауыр, әммә тирә-йүнде ус төбөндәй күрһәтмәле маршрут — Магаме тигәне һайланды.

## Магаме маршрутында

Теркәү пунктында АҠШ, Германия, Канада туристарынан сират хасил. Тейешле документацияны теүәлләп, рөхсәт алғансы, носильщиктар рюкзагыбыҙҙы көмөштәй ялтыр тышлы тоҡтарға тултырып, биштәрләп ҡуйған. Ҡағиҙә булараҡ, иртәнсәк тоҡтарына тыҡҡас, юлда улар һинең рюкзагыңа ҡағылмай ҙа, кисен кемпингта ғына ҡулға тотторалар.

Ете кешелек төркөмгә егермеләп оҙатыусы танзан беркетелгәйне. Һәр кемгә — икешәр носильщик, күмәгебеҙгә бер ашнаҡсы, гид һәм лидер, йәғни артылыш етәксеһе. Тәүгеләре, рюкзагыбыҙҙан тыш, палаткалар, һауыт-һаба, баллондары менән газ плитәләре, һыу, аҙыҡ-түлек йөкмәп алған. Алты көнлөк... Туҡталыштарҙа оҙатыусылар палаткалар, аш өҫтәлдәре ҡора, ултырғыстар ипләй, ҡулдарҙы йылы һыу менән сайындыра. Рәхәт булып китә шул саҡта. Ни тиһәң дә — өшәнес. Үҙебеҙҙең индә — ыҡсым рюкзактар, уларҙа — һыу, фото-видеоаппараттар, кипкән паек, башҡа ваҡ-төйәк. Төш етәрәк маршрутҡа баҫабыҙ. Командор тәртип ҡуя: 30 минут атлайбыҙ ҙа 10 минут ял итәбеҙ. Тропик урман ҡуйы, дымһыу, әҙәм үткеһеҙ шырлыҡтары осрай.

Ике сәғәт дөйөм режимда барҙым, һуңғараҡ «сығынлай» башламаһаммы! Кәүҙәгә ҡураныс ҡына танзан эргәмдән тотам да китмәй. Ике-өс мәртәбә ымлап та ҡараным, йәнәһе, бар, борсолма, ҡыуып етермен әле. Ә ул ҡулдарын йәйә, ярамай, беҙ иң артта бит, тимәксе.

Көсөргәнештән, хәлһеҙлектән, бөркөүлектән маңлайҙан тир аға, тора-бара күкрәгемә аҫҡан брезент сумка еүешләнеп ҡарая. 18 километр уҙғас, урман шыйыҡлана төшә, һәм беҙ һикәлтәнән ҡаялы моронға күтәреләбеҙ.

3 мең метр бейеклектәбеҙ. Ағастар бөтөнләй һирәк, уның ҡарауы — ҡыуаҡтар бихисап. Йәшелгә буялған таҡта аласыҡта парк хеҙмәткәрҙәре имза һалдырып, һәр беребеҙҙе журналына теркәй. Ташлы, тар ғына типһәндә ҡуналҡаға туҡтайбыҙ. Мин һаман аҙыҡҡа үрелмәйем, ашау тураһында уйлау менән үк укшырға тотонам.

Дауа булмаҫмы тип, егерме грамдай виски эсәм, һөҙөмтә юҡ. Ашҡаҙанға етмәҫ борон уҡ борхоп кире сыға. Көсәнеп, саҡ ярты стакан сәй һемерәм дә: «Иртәгә һауығасаҡмын! Тейешмен!» — тигән өмөт менән йоҡларға ятам. Төнө буйы йөнтәфи йыртҡыстар менән алышып, һаташып сыҡтым. Теге януарҙың башын таш менән төйгәс кенә бер аҙ әүен баҙарына сумам.

Иртәнсәк, ысынлап та, үҙемде кәйефле, шаҡтай сәләмәт тойҙом. Шатлығымдан масайҙарса үрле-ҡырлы һикереп, юлдаштарымды ҡосағыма ҡыҫам. Иртәрәк ҡыуанғанмын, хәйерһеҙ, аҙ ғына ҡапҡылағайным, йәнә ҡыуаҡ артына йүгерергә тура килде.

Маршрутты дауам итерҙән алда кисәге хеҙмәткәрҙәр беҙҙән йәнә пост журналына ҡул ҡуйҙыртты. Маладис, беҙҙе контролдән һис тә ысҡындырмайҙар.

Төн уҙғансы йыйған ҡеүәтем өс армытҡа ғына етте. Көсөмдө артыҡ исрафламаҫ өсөн лидер артынса ташлы һуҡмаҡтан ул ҡайҙа баҫа, шунда баҫып атланым. Һаман тирләйем, лысма һыумын. Бейеккәрәк менгән һайын һауаның шыйыҡлана барыуы ла үҙен һиҙҙертә. Алыҫтан ғына вулкан итәктәре һөҙәк һымаҡ ҡына күренә, яҡынайҙыңмы — яланғас ҡаялар берсә күккә олғашҡан, берсә упҡынға тәгәрәгән кеүек. Үҫемлектәр донъяһы бик ныҡ ярлылана. Әйткәндәй, минең һымаҡ хәсрәт юлаусылар өсөн дүрт километр һайын маршруттан ситтәрәк «Туалет» тигән күрһәткес ҡаҙалған.

Сираттағы бейек киртләстә — Шир Кемп (4 мең метр) ҡуналҡаһы. Бындағы базальт платоһында таштарҙы лишайник мүге генә арлы-бирле сыбарлата. Тағы регистрация үткәс, буш ҡуналҡа майҙансығына ыңғайлайбыҙ.

Африка ҡитғаһының иң бейек нөктәһе платонан конус һымағыраҡ йәйенке боҙлоҡтар, бормалы тарлауыҡтар аша эргәлә генә кеүек күҙаллана. Ике сәғәттә менеп тә етерһең кеүек, гәрсә был — алдаҡкыс хис. Иллюзия... Ғәмәлдә болот ҡунмаҫ осона аяҡ терәр өсөн кәмендә ике көн кәрәгәсәк, тиҙәр. Көнбайышта, ул да яҡында кеүек, асылда алтмыш километрҙа, Меру вулканы аныҡ төҫмөрләнә. Уның текә итәктәренә һылашып, аҡ һарыҡ бәрәстәреләй болоттар йөҙә. Ундағы плато беҙҙекенән тәпәшерәк — 4565 метрҙа икән. Киске шәфәктә Меруның ҡарағусҡыл конусы алһыу офоҡҡа йәбештереп ҡуйылғандай. Һанда-һаяҡ унда ҡар яуғанын күрергә мөмкин.

Бында ла миңә айырым палаткала ҡунырға насип итте. Дуҫтарым, Масай тиҙерәк һауыҡһын тип, ҡыҫталышып йоҡлай. Ә мин... бер-ике тәғәм ҡаптыммы... Уф, ҡуй инде, ҡуй! Бер уртлам ғына сәй йоҡкайным, тағы уҡшыным, тамам бәлтерәйем. Шуныһы ғәжәп: һыуһамаған кеүекмен бит әле. Күп тирләүҙән тоҙһоған организм ҡаҡшай, хатта умыртҡа һөйәктәрем тырт-мырт иткәндәй. Быныһы яҡшы, әлбиттә. Ашҡаҙаным да эшләп китһә... Ләкин ул, ҡороғор, ҡарыша, аскорбинканы ла ҡабул итмәҫкә маташа.

Ҡояш байыу менән кинәт һыуытып ебәрмәһенме! Курткамды кейеп, базальт ҡырсынташ өйөмөнә ултырам да моңһоуланып күккә бағам.

Ҡараһыу күк йөҙөндә таныш булмаған йондоҙлоҡтар мәрйендәй баҙрай. «Южный крест» хаҡында күпме китапта уҡығаным булыр: ошо йондоҙлоҡ атаҡлы Магелланға ла, Кук тигән диңгеҙсегә лә, Васко де Гамма кеүек сәйәхәтсегә лә маяҡ һымаҡ юл күрһәткән. Хәҙер бына Башҡортостан турисы йондоҙлоҡҡа тамаша ҡыла. Мөғжизә бит был!

Йоҡо биләүендә аңҡы-тиңкә таң аттырам. Төнгө ял миңә кәр өҫтәмәне, киреһенсә... Тамаҡ хаҡында уйларға ла ярамай, тимәк, ике көнлөк артылышты еңеп булмаясаҡ. Эх-ма! Үкенестән йөрәк өҙгөләнә. Имгәкләп палатканан сыҡтым да Командорға әйттем: һеҙгә бәлә булмағайым, миңә кире «тунҡанлау» фарыз. Николай минең теләгемде баш оҙатып йөрөүсебеҙгә еткерҙе, ул иһә хуплап һәм аңлап ҡабул иткән был фекерҙе. Шунда уҡ рация аша ҡотҡарыу службаһы менән элемтәгә индем. Килештек: Кили тигән киртләскә етеүемә машина киләсәк һәм мине Аруши ҡалаһы дауаханаһына илтәсәк. Яңғыҙыма ғына төшөргә рөхсәт юҡ, оҙатыусы билдәләнеләр.

Түбәнлеккә еңелерәк хәрәкәтләндем. Тәүҙә, ниңә былай иттем әле, тип тә уйлаған булдым әле. Хыялым — өҫтә, ә мин аҫҡа атлайым. Туҡта, айырылышыу мәлен һөйләргә кәрәк тәһә.

Мине, «айыҡ тормош яҡлы» Масайҙы, бөтәһе лә оҙатып ҡалды. Һәр кем үҙенсә йыуатҡан була, кәңәш-төңәш бирә, ә минең үкереп илағым килә. Тик нишләйһең инде, түҙәһең. Хуш, ҡар боҙҙарың нур бөркҡән Килиманджаро! Һине «Африканың кендеге» тип ололайҙар. Кендек булмай, чуртым бул — барыбер донъялыҡта 6000 метр бейеклектәге типһәнеңдә бер бейермен әле... Масайҙар кеүек иңкәйә биреп... Хоҙайым ғына насип итһен!

Шулай, өс километр араны яраһы уҡ еңел үттем, тик ҡапыл быуындарым йомшарғанын тойҙом. Артабан бәүелә-сайҡала атлайым, башта бер генә уй: «Күк курткалы юлдашыңдан күҙ яҙлыҡтыра күрмә, Камил! Бирешмә, һин заманында сал тайгаларҙы гиҙгән промысловик инең бит».

Ҡояш байырҙан ике сәғәт алдараҡ саҡ Килиға еттек. Ҡыҙыл тәреле, һөттәй аҡ джип көтөп торған, тиҙҙән ҙурлығы буйынса Танзанияның икенсе иҫәптәге Аруши ҡалаһына елдерәбеҙ. Аруши шуныһы менән үҙенсәлекле: ҡала Африканың геометрик үҙәгендә урынлашҡан.

Лабораторияға анализдар бирелгәс, кеҫә телефонынан Мәскәүҙәге страховой компанияға шылтыраттым, хәлемде аңғарттым. Дөрөҫ эшләнем, дауалау сығымдарын ҡапларға тейештәр. Ә медсестра ҡыҙ урыҫса белгән әхирәтенә шылтыратҡайны, уныһы таксиҙа килә һалып та етте. Анна исемле сибәркәй БМО-ның Танзания вәкиллегендә легал-офицер хеҙмәтендә икән. Уганда илселегендәге режимды етәкләгән түрәләрҙең енәйәтен тикшерә, бәлә-ҡазаға тарығандарға хәйриә ярҙамы ойоштора. Быға тиклем Анна Рәсәйҙә ике йыл эшләгән. Урыҫ телен апаруҡ өйрәнгән.

Хәл-әхүәлемде һорашып, мин әйткәндәрҙе рәхмәт яуғыр Аннушка түкмәйсәсмәй табиптарға аңлатып торҙо. Тегеләр минең һүҙҙәремде анализ һөҙөмтәләре менән сағыштырып, рецепт тултырҙылар. Сабырлығымды юйып, һорай ҡуйҙым: «Әйтегеҙсе, зинһар, миңә ниндәй зәхмәт ҡағылған?» — «Аҙыҡтан ағыуланыу...». Сәйер, нимәнән һуң? Бөтәбеҙ ҙә бер иш туҡландыҡ. Дөрөҫ, мин спиртлы эсемлек йотманым. Крокодил итенәнме? Ихтимал. Нисектер еңелсә еҫләнгән һымағыраҡ ине түгелме шул бәдбәхет?

Дарыухананан аптекарь биргән таблетка-фәләндәрҙе алғас, Аннушка мине Имнала отеленәсә оҙата килде: турагентство үҙ иҫәбенә иптәштәрем ҡайтҡансыға тиклем буш бүлмә әҙерләткән.

Бер урынлыҡ. Эйе, эйе, хәҙер Танзанияның Аруша ҡалаһында шәхсән медкарточкам (№ K1117) һаҡлана, тик уны ҡабат файҙаланырға яҙмаһын берүк. Һүҙ ыңғайында: бында медицина ярҙамы арыу ойошторолған, артыҡ ҡиммәт тә түгел. Поликлиникала халыҡ та аҙ, күрәһең, танзандар беҙҙең ағай-энегә ҡарағанда һирәгерәк ауырый. Китер сағында Анна визиткаһын бирҙе һәм хәл-әхүәлемде белгертеп шылтыратыуымды үтенде.

Төнгә ҡарай отелдә галет ҡушып сәй эстем. Шәбәйәм һымаҡ. Йоҡлар алдынан бик ныҡ асыҡҡанымды тоям — быныһы ла яҡшыға. Ресторан ябыҡ булғанға,

урамға сығып, попкорн – ҡатҡан һоло иҙелмәһе һатып алып ҡайттым да, тамшанып, валсығына тиклем ашап ҡуйҙым. Ашҡаҙаным хәҙер бимазаламаҫ әле, тигән ышаныс менән койкаға ауҙым. Эх, иртәрәк һөйөнгәнмен... Таңғы дүрттәрҙә һул ҡабырғам төртөп-төртөп ауырта, маңлайымды һалҡын тир еүешләй башланы. «Нимә эшләргә? Тиҙ ярҙам саҡыртһам?..» Шөрләйем, кәрәкмәй, мәйтәм, кем белә, эсәк-ҡарыныңды скальпель менән ярыуҙары ла ихтимал. Полисымды алып, яңынан Мәскәүгә шылтыратам. Теге оста Илдар – яҡташ булып сыҡты, Стәрлетамаҡ егете – яуап бирҙе. Уға сәләмәтлегем торошон бәйнә-бәйнә тасуирланым да кәңәш һораным. «Мин врач та ул, тик... меңдәрсә саҡрымдан диагноз ҡуя алмайым», – тине был. Өйрөлтөп-сөйрөлтөп эсемде ыуырға ҡушты, әгәр еңеллек һиҙмәһәм, мотлаҡ ашығыс ярҙам саҡырыу кәрәклеген иҫкәртте. Бәй, массаж мөғжизә тыуҙырҙы: һыҙланыуҙарым кәмегәс, ярты сәғәттән бөтөнләй баҫылды. Эй, рәхәт булып китте бер заман! Гүйә, яңынан тыуҙым донъяға. Күрәһең, геркулес күпсегән дә берәй еремә тығылғандыр.

Әсе һабаҡ алғанғамы, диетаны һис боҙманым, һыуҙа бешкән рис, галетлы сәй менән генә хушһындым. Бер уйлаһаң, анһат ҡотолдом. Ишеткәнем бар: серле сир-сорҙан нисәмә европалының йәне ҡыйылған, ҡыйыла Африкала. Икенсенән, бындағы инфекцияларға ҡаршы үҙебеҙҙә яһатҡан прививкаларҙың да файҙаһы тейгәндер.

Иртәгәһенә көҙгөгә ҡарап, уғата хафаландым. Былай ҙа осло танауым нескәргән, оҙонайған кеүек, сикәләрем һурыҡҡан, күҙ төптәрем эскә батҡан – бөтөнләй бапаҡ, концлагерь әсире ҡиәфәтенә ингәнмен.

Төш етәрәк иркенерәк ҡыбырлай башлағайным, прогулкала йөрөп әйләнергә йөрьәт иттем.

Урамдары таҙа ғына, әллә ни еҫтәр ҙә аңҡымай. Торлаҡ биналары йыйнаҡ, күп ҡатлы түгел. Шәхси мөлкәт менән муниципаль сектор контрасһыҙ ғына бергә төйнәлгән. Ә бит Килиманджаро паркына яҡын биҫтәлә ҡыйыш-мыйыш өйҙәр, тутыҡ тимер, полиэтилен менән көпләнгән келәттәр ҡайһылай күп. Тыҡрыҡтарҙа сүп-сар өйөмө туҙышып ята, һаҫыҡ, ҡайҙа ла фәҡирлек, антисанитария.

Арушала мәктәптәрҙең күплеге хайран ҡалырлыҡ. Күп өлөшө оҙонса, шау быяла биналарҙа белем ала балалар. Үҙҙәрен бөхтә тоталар, шуныһы: һәр синыфтың формаһы үҙенә бер төрлө тауарҙан тегелгән. Мин күргән ҡыҙҙар зәңгәр кофтала, аҡһыл юбкала ине, малайҙар шундай уҡ төҫтәге шорты һәм күлдәктә «көтөү» булып йөрөй. Шат ауаздар яңғырап тора.

Икенсе көнө шундай көтөү мине йәмһеҙ мажаранан ҡотҡарҙы.

...Былай булды. Кеше һирәк йөрөштөргән ҡала ситендә прогулкаға сығып, ябай африкандарҙың көнитмешен күҙәтәм: былар ағас үрсентеһен нисегерәк ултырта, сәскәне нисек сәсә, өйҙәре ниндәй материалдан һалынған... Көтмәгәндә мине масай кейемендәге биш егет ҡамап алды. Ҡыланыштары, ажар ҡараштары әйтеп тора: был һөмһөҙҙәрҙе минең аҡса янсығым ымһындыра.

Тап шул мәлдә яҡындағы тыҡрыҡтан портфелдәрен болғай-болғай өс ҡыҙыҡай килеп сыҡты. Талаусылар аҙаны, уҡыусылар эргәгә яҡынлашты. Форсаттан файҙаланып, тыҡрыҡтан оло урамға табанымды ялтыратмаммы!

Дөйөм алғанда, танзандар тыныс, танышмаҡлы халыҡ, күп осраҡта үҙҙәрен елбәҙәк, эскерһеҙ тота. Европалының «джамбо» тип сәләмләүе була, тештәре ҡарҙай аҡланып, ауыҙҙары йырыла, күҙҙәре осҡонлана. Ләкин бында күрше илдәрҙән миллионлаған ҡасаҡ һыйыныуын онотмайыҡ, өҫтәүенә, халыҡтың тормош кимәле лә түбән. Тәбиғи ки, урлашыуҙар, талауҙар, юл баҫыуҙар булғылап тора икән.

Урындағы халыҡтың йөҙө-килбәте европалыларға тартым, ләкин тәндәре ҡарағусҡыл, түбә сәстәре бөҙрәләнеп үҫә. Кистәрен пактан кейенеп, ғаиләләре менән ғибәҙәт ҡылырға костелдарға йүнәлә. Мәсеттәр ҙә бар.

Костелда күңелле музыка уйнатыла, килеүселәр хор менән йырлай, йырҙы

бүлдереп, священник вәғәз һөйләй. Дүрткел костелдың әллә ни йыһазы юҡ: ҡола ялан дүрт стена, тар ғына оҙонса тәҙрәләр, залда бер юлы биш йөҙләп диндар ултырмалы ныҡлы ағас эскәмйәләр. Берҙән-бер культ йыһазы — священник мөнбәренән өҫкәрәк стенаға беркетелгән тәре, уныһы дүрт метрҙай булыр. Мин бер службаға индем, табыныусыларҙың үҙ-ара рухи тартылыуына, һәммәһенең дә яҡтырған, нисектер инсафланған сырайҙарына ҡарап торҙом.

Крайҙың климатына һаман һоҡланып туймайым. Экваторҙа ла үҙенде ирәүән тойсо! Моғайын, төбәктең диңгеҙ кимәленән мең — мең ярым метрға өҫтәрәк ятыуынандыр был. Йыл әйләнәһенә 22 — 26 градус йылылыҡ. Образлы әйткәндә, Рәсәйҙең июль айы бында тотош йыл буйына һуҙыла.

Эңерҙә Аннанан звонок килде. Һаулығым менән ҡыҙыҡһына. Әңгәмә һуңында битәрләп алды. Эй әҙәпһеҙлек, ниңә кисә шылтыратманым үҙенә? Ниндәй күркәм ҡатын! Иртәнсәк бәйләнешкә инеп, һаулығымдың яҡшырыуын белгертеп, хәстәрлеге өсөн рәхмәт әйттем, үҙ сиратында, Анна ихлас күңелдән кофе эсергә саҡырҙы. Ризалыҡ бирмәү йәпһеҙ, такси саҡыртып, Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының Танзаниялағы вәкиллегенә ҡыуҙырттым. Вәкиллек — мөһаббәт комплекс: тотош кварталды биләгән өс ҡатлы корпустары бер-берсһенә япмалар менән тоташҡан, майҙаны киң, скверҙары, клумбалары, фонтандары харап күңелгә ятышлы. Бында гуманитар йүнәлештә мең (!) хеҙмәткәр эшләй икән.

Ҡойма менән уратылған комплекс ҡапҡаһын көнө-төнө ҡораллы ҡарауыл һаҡлай.

Анна мине аулаҡ кафеға алып инде һәм ҡуйы, хуш еҫле кофе менән һыйланы. Ул Рәсәйҙәге үҙгәрештәр, эшем, ғаиләм менән ҡыҙыҡһынды. Яҙыусы ла икәнемде белгәс, автографлы китаптарымды ебәреүҙе һораны, сайтыма (www.ziganshin) инеп, Алыҫ Көнсығыш йәнлектәренә арналған “Щедрый Буге”, “Боцман” тигән повестарымды уҡырға вәғәҙәләне. Аннушкабыҙ ҡасандыр Приморьены күргән, уны Уссури кейектәре ҡыҙыҡһындыра икән. Мәгәр ул Танзанияға ғашиҡ һәм был крайҙы Европа кешеләре өсөн йәшәүгә бик йәтеш тип иҫәпләй. Әйтәгүр, уңайлы климат, сәйәси климат та тыныс, халҡы эскерһеҙ... Унынса, Кенияла тормош сетереклерәк, етмәһә, тәбиғәт шарттары ла хөртөрәк. Анна менән ризалаштым, тик Кенияла тәртиптең аҡһамауын иҫләнем. Эйе, унда «иртәнге аш 8-ҙә» тиһәләр, нәҡ шул мәлгә өҫтәлең әҙер булыр, 12-лә ҡайҙалыр барырға теләһәң, минутҡа ла һуңламай машина көтөп торасаҡ. Танзандарға иһә бындай теүәллек етешмәй. Мәгәр бында милли колорит — аҙым һайын. Халыҡ ғәҙәти милли кейемдә, күберәген йәйәү йөрөй, юлға ниңәлер ҡулдарына гелән оҙон ғына нәҙек таяҡ тотоп сығалар. Ә-ә, таяҡтарҙы ҡуш яурынына арҡыры ҡуйып, ҡулдарын терһәктән бөгөп таяҡҡа һалалар ҙа йәлп-йөлп кенә атлауҙарын беләләр.

Эргәләренән уҙғанда мотлаҡ сәләмләп ҡул болғайҙар.

## Аҫылташтары күҙҙе ҡамаштыра

Диетик иртәнге аштан һуң дарыуҙар ҡапҡылап, номерҙа ятам. Асыҡ тәҙрә аша оркестрға ҡушылып, күмәк шайлап башҡарған йыр ҡолаҡҡа салына. Ҡара, оло урам тулып, байрам колоннаһы уҙып бара. Быны тигеҙһеҙ сафтар паркка боролдо һәм түңәрәк сәхнәне уратып алды. Ағас ботаҡтары аша йүнләп күренмәгәс, тамаша ҡылыр өсөн эргәләренә ыңғайланым. Ҙурҙан биш сатыр ҡоролған, төпкөһөндә ҡала етәкселеге вәкилдәре ултырышҡан. Беренсе рәттә — мэр һәм уның урынбаҫарҙары. Күләгәлә торғанымда эргәмә европаса кейенгән танзан яҡынлашты ла инглизса өндәште. Арлы-бирле мин дә яуап бирҙем. Чиновник мине терһәгемдән иҙләп кенә аймап, мэрияныҡыларға ҡаршы ҡуйылған ҡәнәфигә урынлаштырмаһынмы. Бындай иғтибарҙан битемә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе. Миңә бындай хөрмәт араларында берҙән-бер европалы булғанға күрһәтелгәндер, тим. Бер ауыҡтан үҙемдең художестволы үҙешмәкәрлек конкурсына эләккәнемде һиҙендем. Африка

барабандары дөңгөрҙәүе аҫтында һәүәҫкәрҙәр сиратлап ул йырлай, ул бейей. Шундай елкенеп сығыш яһайҙар, хатта ваҡыт-ваҡыт йырлап-бейеп ҡәҙимге тамашасылар ҙа ҡушылып китә. Был инде халыҡты оторо ҡуҙғытып ебәрә, шунан дөйөм шау-шыу башлана. Ирҙәр аҙыраҡ, күберәген урта йәштәге ҡатын-ҡыҙ бейей. Бейеүҙәрендә әллә ни хәрәкәт тә юҡ кеүек, ләкин пластика тигәнең — ғәләмәт. Бейемәгәндәре һис юғы теҙҙәрен уйнаҡлата, ҡулдарын болғай. Мин дә түҙмәйем, ритмға әҫәрләнеп, ҡыймылдарға керешәм, һо-ой, тип бармаҡ сыртлатҡандай итәм. Смотр ахырында френчҡа төрөнгән ҡолғалай һонтор, ҡаҡса кәүҙәле мэр, шунан ярандары һүҙ алды. Берәүһе минең яҡҡа эйәк ҡағып, маҡтаған кеүек мөңгөрләгәйне, күп кеше хуплау йөҙөнән шартлатып ҡул сапты. Иң аҙаҡ жюри рәйесе смотрҙа еңеүселәргә ҡупшы дипломдар тотторҙо. Һәүәҫкәрҙәр уны ғорурланып, ҡәҙерләп күкрәктәренә ҡыҫты. Тағы шуныһы: тамаша барышында рауза төҫөндәге костюм кейгән йәш егеттәр халыҡҡа бушлай һыу, попкорн өләшеп йөрөнө. Миңә лә һонғайнылар, итәғәтле генә баш тартам: рәхмәт, һоло ҡатырмаһы арҡаһында ҡорһағымды ҡабат Илдар өйрәткәнсә һыларға тура килмәгәйе...

Отелдең тәүге ҡатында — милли кухнялы өс ресторан, сувенир лавкалары, солярий бассейны. Йәнә ювелир магазины сауҙа итә. Ашарға төшкән һайын шунда инеп, бер килке аҫылташтарға, бигерәк тә танзанит тигәненә һоҡланып ҡарайым. Вәт хазина, исмаһам! Берсә күк, берсә зәңгәрһыу, ә электр яҡтыһында йымылдаҡ ҡыҙғылт нур ҡараштарҙы иркәләүсе наҙ һирпкәндәй. Бындай кристалдар донъяның бер генә нөктәһендә — Килиманжаро итәгендә табыла, тиҙәр, запасы кәмей бара, шуға ярашлы, хаҡы ла ҡимәтләнә. Ғаилә бәхете, етеш тормош символы һанала икәнен белгәс, хаҡына ҡарамай, муйынға таҡмалы берәүһен һөйөклө ҡатыным Татьянаға бүләк итергә инселәнем.

Килиманджароға сәйәхәт ойошторған турагентствонан, һөйөнөскә күрә, артылышта абынған мин меҫкенде онотмай, хәлде белешеп, шылтыратып торалар. Бөгөн иһә мине Көнсығыш Африка халыҡтарының мәҙәни мираҫы һаҡланған Үҙәккә махсус экскурсияға әйҙүкләнеләр. Уның да бөтә ҡаралтыһы ҡала ығы-зығыһынан ҡойма менән кәртәле. Асыҡ һауала — ысын масай хижиналары, араларында милли кейемдәге африкандар “донъя көтә”, ары-бире йөрөштәрә. «Ауыл»ға инеүселәрҙе ике барабансы, бер бейеүсе ҡаршылай. Барабандары ағас олононан өңөлгән, әйтерһең, ике яҡҡа рупор тарбаҡланған, ә береһе йоҡа ғына иләнгән тире менән тығыҙ итеп көпләнгән. Хижиналарҙа — һунар кәрәк-ярағы, аш-һыу әйберҙәре. Ихатала — һыйыр, кәзә дәүмәле муляждар, алыҫтараҡ ҡырағай йәнлектәр, улары ла тәбиғи төҫтәргә буялған — тере тип торорһоң. Быуала — бегемот, ярында — фламинголар тубы. Ике ҡатлы бинала бөтә ҡәбиләләрҙең дә кейем-һалымы, кәсептәре, ҡорамалдары менән танышырға мөмкин.

Үрҙә телгә алғанса, меңдәрсә йәнлектең ағастан юнылған кескәй фигуралары ла ҡуйылған, хаҡтары апаруҡ: 10 долларҙан 300 долларғаса. Мәгәр һәр һын — бына тигән сәнғәт емеше! Ҡарт һөнәрмән ҡара ағас киҫкәһенә 200 Гранд антилопаһын ырыған һәм уларҙың бер-береһенә бик тә нескә итеп тоташҡанына ғәжәп ҡылаһың. Әҙәм балаһының оҫталығы сикһеҙ шул.

Тәҙрәмдән Килиманджаро һерәйеп күренә. Иртәнсәк тау эргәһендә болоттоң әҫәре лә юҡ ине, төшкә табан конустар «тун» ябынғандай тойола. Шунан ҡаяларҙы йәшен ата, ҡойонло ямғыр яуырға тотона. Төн уртаһында «теткеләнгән» тун тоноҡлана, юғала бара.

Ташлы ҡаялар, биттәрен йыуғандай, ирәбеләнеп ҡала... Иртәгәһенә иһә бөтәһе лә яңынан ҡабатлана.

Бер саҡ отелгә, ҡыҙыҡһыныпмы, масайҙар килеп инде. Ҡыҙыл йә күкшел «ашъяулыҡ» ябыныуҙарынан, ялан аяҡтарынан йә резина сандалиҙарынан танылулы ғыналар.

Былар бассейн тирәһендә аунашҡан ҡаймаҡтай аҡһыл тәнле европалыларға

мөкиббән аптырай: күләгәгә боҫаһы урынға, ҡояшта ҡыҙынып яталарсы?! Аҡылға бер төрләрәк түгелме бынауҙар? Эйе ләһә, күпме ваҡыт әрәм итеп, тәнең балауыҙ һөрткәндәй халәткә ингәнсе ҡыҙынаһың — ә ике аҙнанан уҡ кире элекке төҫөнә ҡайтаһың.

Сәғәт унда Колонизатор шылтыратты: "Масай, беҙ аҫта..." Төк-төк әйберҙәремде аймап, лифтҡа тыздыйтам. Береһе эшләмәй, икенсеһе буш түгел. Әҙәм күтәргеһеҙ йөгөм менән аҫҡа төшәм. Команда мине вестибюлдә көтөп торған.

Йөҙҙәре ҡыҙарған, ирендәре ярылған, танауҙары ҡабарған, уның ҡарауы, күҙҙәре бәхет осҡондары сәсә. Сәселер ҙә, Африканың иң бейек нөктәһенән урап ҡайтҡандар бит! Ҡосаҡлашып күрешәбеҙ. Һәр кемде ҡотлайым. Оҙатыусылар минең хәлде һораша, Килиға бергә менә алмауға үкенә.

Отелдән турагентство офисына һыпырттыҡ. Бынан тура Нгоро-Нгоро паркына һуҡтырырға, ыңғайҙан Лейк Маньярҙы ҡарарға, ә Серенги паркына бармаҫҡа килештек. Ошоғаса алты паркты ҡыҙырҙыҡ, башҡаһында әллә ни фәтеүә булмаҫтыр, тип уйланыҡ. Уның ҡарауы, атаҡлы Занзибарға һауаларҙан осоп ҡына күреп ҡайтырға форсат тәтей.

Агентство менеджеры ике парк ҡарау, йәнә аэропортҡа юл өсөн һәр кемгә алтышар йөҙ доллар түләү һалғайны, бер аҙ һатыулашҡас, 350-гә кәметте. Маршрут өсөн һәүетемсә иҫәпләшеп, ныҡлап тамаҡ туйҙырҙыҡ та Импалалағы миңә таныш отелгә елдерҙек. Әлегә хуш, Килиманджаро!

Ҡурғаштай тоноҡ асфальт, базальт конустары һерәйешкән тау үңерҙәрен һайлап, еңелсә кәкерсәкләнеп, алға тартыла. Конустар араһына масай ауылдары һибелешкән, алыҫтан ҡарағанда, хас та ҡарағай бәшмәктәре инде. Саваннала зебралар утлай, һонтор жирафтар ҡыймылдай. Хижиналар тирәләй һыйырҙар, кәзәләр ялмана. Өс-дүрт ауылға, ҡағиҙә буларак, юлға яҡынырак ҙур тәҙрәле, спорт майҙансыҡлы мәктәп асылған . Ана, уҡыуҙар бөткәндер, уҡыусылары ары-бире таралыша. Танзания — фәҡир генә ил, мәгәр бында аҙым һайын балалар хаҡында хәстәрлектең шаһиты булаһың.

Танзан күперҙәре... әкәмәт! Улар йылға аша күперҙе төҙөмәй, бәлки, төшөрә. Эйе, асфальт полотноны алдан уҡ өҫтөнән һыу-һүл ағырлыҡ итеп һалалар. Тиҙ ҙә, осһоҙға ла эшләнә был.

Утыҙ саҡрымдай барғас, һирәк урманлы битләүҙәге кемпингта урынлаштыҡ. Уңайлы ҡуналҡа — дизайн, комфорт! Ағас ботаҡтары араһында ҡош оялары бигерәк күп. Оялар — йомро, уйымдары аҫта бит әле. Ирекһеҙҙән уйлап та ҡуяһың: нисек сепейҙәре йә иһә йомортҡалары ҡолап төшмәй.

## Нгоро - Нгоро паркында

Бөгөнгө эңер иҫ китмәле матур, гүйә, күктә лә, офоҡта ла тәбиғәттең барса буяуҙары алмашынып тора. Йәл, рәссам түгелмен...

Иртүк Нгоро - Нгоро паркына ҡуҙғалабыҙ. Ул — кратерҙа, арҡырыға һуҙымы 18 километр, тәрәнлеге 610 метрға етә. Ҡырластары урыны менән бейеккә 2000 метрҙан да аша. Дәү вулкан бынан өс миллион йылдар элек урғылып, лавалары менән тирә-йүнде шулай сыбарлаған. Ҙурлығы, тәбиғәте буйынса ҡабатланмаҫ мөғжизә, торғаны бер ожмах инде. Олдувай тарлауығында археологтар бик боронғо әҙәми зат һөлдәләрен таба, хатта, кешелектең бишеге — ошонда, тип фаразлаусылар ҙа бар.

Йәнә шуныһы: бында бихисап йән эйәләре өсөн тәбиғи резервация хасил булған. Ҡош-ҡорт, оло ерҙән айырылып, бары тик ошонда ғына тыуа, үлә.

Оҙон үркәсте менгәс, кратерҙы ҡаймалаған ҡыразда туҡталабыҙ. Йәһәннәм төбө күкһел быуға сорналған. Тәндәр зымбырлап ҡуя... Тағы ун саҡрымдай үткәйнек, вентилятор ҡайышы өҙөлөп, джипыбыҙ шып туҡтай. Йәтеш урын,

ҡаршылағы кратерҙа – свайҙарға ултыртылған туристар өсөн ҡунаҡ хижинаһы. Былдай хозурлыҡта бер тәүлек йәшәүең өсөн кеҫәңдән 945 долларҙы сығарып һалаһың.

Ауылдан тирә-яҡ ландшафт һоҡланғыс күренә. Текә ҡыраздарҙан ағастар өҫкә үрмәләгән кеүек, аҫта кратер күле көҙгөләй ялтырап ята. Һутлы үләнгә бай болондарҙа һорғолт нөктәләр йырбандай, улары – мал көтөүҙәре. Террасала саҡта үҙәңдә аҡ осалы бөркөттәр менән бер кимәлдә ҡанат ҡаҡҡандай хис итәһең.

Ишеге шар асыҡ ресторанға йүнәләбеҙ. Әкиәти король һарайына индекме, тип ҡалдыҡ тәүҙә. Һәр биҙәк, һәр ҡаралты күҙҙе иркәләй, нәзәкәтле кисерештәргә тарыта. Елле генә түңәрәк өҫтәл, ҡупшы күн ҡәнәфиҙәр, камин, гәлсәр люстралар, ҡиммәтле шарап вә коньяк... Залдағы кескәйерәк өҫтәлдәрҙә – яңы өҙөлгән сәскәләр. Шуныһы: был байлыҡты бер кем һаҡламай, рәхәтләнеп ҡапшап ҡара, фото-видеоға төшөр – берәү ҙә тыймай. Персонал аҫтараҡ айырым ауылда йәшәй, бында тәғәйен сәғәттәрҙә генә хеҙмәткә күтәрелә икән.

Вентиляторға яңы ҡайыш килтергәнсе, Африка ҡояшында ҡыҙынырға ҡарар итеп, күләүек ярына сисенешеп сыҡтыҡ. Ярты сәғәтлек кенә «ванна» бигерәк тә Фотохудожнигыбыҙҙы эшлектән сығарҙы: иртәгәһенә ҡорһағына һыҡҡылар сығып, тотош тәне һыуҙа бешеккән креветкаға оҡшап ҡалды. Ғөмүмән, экваторҙа ҡояшта ҡыҙыныуҙың ямаҡай бөтөүе ихтимал. Бер аҙналай Петр хатта Занзибарҙың океан ярында ла футболкаһын сисмәй йөрөнө.

Ур-ра, ҡайыш килтергәндәр, кәптергәндәр, тимәк, сәйәхәт дауам итә. Кратер ҡыразынан биш километрҙай ер уҙғас, Магди күле йылҡылдаған шарлауыҡҡа түбәнләнек. Күлдең киң генә сайында ике-өс мең баш алһыу фламинго мыжғый. Кратерҙың урман-ҡыуаҡ ҡаплаған иңкеүҙәренән бер нисә йылғасыҡ сорлап аға. "Ҡаҙан" төбөнә еткәс, ағымдары йыуашлана һәм инештәр уралып-суралып һыуҙарын күлгә ҡоя. Бәғзе йылғасыҡтар тап-таҙа, үтә күренмәле, ә берәүҙәре бурълаҡ, күрәһең, өҫтәрәк мал һуғарыу урындары барҙыр. Мал тигәндәй, тәүҙәрәк уларҙы берәм-һәрәм генә осраҡҡайныҡ, һаҡҡыуҙараҡ эре көтөүҙәргә тап булғылай башланыҡ. Өркмәй-нитмәй, ирәбе генә йөрөүҙәрен әйтсе.

Төшөп етеүгә, бер аҙ кәйеф боҙолдо: кратер төбөндә тиерлек ытырғаныс гиеналар ҡыймылдаша... Ниңә Хоҙай быларҙы шөҡәтһеҙ итеп яралтҡандыр: артҡы тәпәйҙәре тоҡосораҡ, шырты ҡырылғандай тупаҫ моронло, үткер тешле бәләкәс ауыҙ, ҡара йәки ҡыҙғылт төк менән сыбарланған ҡарпан ҡолаҡлы йәмһеҙ йөнтәфиҙәр – шабаш! Еҫтәре лә алама, етмәһә. Алты гиена. Йәне сыҡмаған буйволды өҙгөләйҙәр. Теге бахыр тырпырап ята ҡабырғаһында. Ызғыра...

Беҙҙең машина яҡынлашҡанды күреп, яуыздар, етмәһә, тештәрен ыржайтып маташа. Ҡанлы морондарын сөйгәндәр, йөндәре ҡабарған. Буйвол торорға аҙаплана, ләкин артҡы һанына көсө етмәй. Былдай бәғерһеҙ тамашаны оҙаҡ ҡарап булмай – әсенеп, ары ҡуҙғалдыҡ. (Ҡурсаулыҡта ҡырағай йәнлектәр ыҙғышына ҡыҫылырға ярамай.) Һуңғы йәнтәслим тауыштары ҡыуып етә ҡорбандың. Бынау яуыздарға осрай күрмә. Ғәҙәттә, улар дәү үләкһә менән туҡлана, тиҙәр. Эре-эре һөйәктәрҙе шытырлатып онтайҙар, ашҡаҙандары шуға яраҡлашҡан. Боҙолған емтеккә айырыуса тамшаналар, аҙаҡ хатта – ташҡа үлсәйем! – үләкһә ятҡан тупраҡты ла йыпырып ҡуялар. Харап ҡурҡыныс, вәхшилек, аснакәтлек, мәгәр тәбиғәт өсөн кәрәкле аномалия был.

Түмәләстә арыҫландар өйөрөнә яҡынлайбыҙ. Ыжлап та бирмәйҙәр. Ә ҡайтышлай ата менән инәнең ҡарығыуын шәйләнек. Дөрөҫ, ғишыҡтары оҙаҡҡа һуҙылманы, арланы ышыҡҡа йәшенә һалды. Ояла беләме әллә мәхлүк?

Төнө буйы йәшен гөрһөлдәне, ялағай ялтланы, шыйырып ямғыр яуҙы. Беҙҙең

кемпинг (исеме ҡытайсараҡ – «МТО Ва МБУ») һаҙыматлы урында булғанғамы, иртәнсәк тирә-яғын күнегелгән буръяҡ еүешләгәйне. Урыны менән батҡаҡ һылашҡан, йөрөүе уғата йәпһеҙ.

Бөгөнгө сафари – Маньяр күле сайҡалған LAKE MANYARD паркына. Былыһы уңайлыраҡ һәм бөхтәрәк. Юл-һуҡмаҡтар ситенә күрһәткестәр ҡаҙалған, беседкалар, ваҡ күперҙәр, күҙәтеү, ял майҙансыҡтары, туалеттар бик тә гармониялы ҡоролған. Тропик урман апаруҡ ҡуйы. Алаңғырттарҙа елле-елле баобабтар үҫә. Бәғзеләре аушайған башня кеүегерәк. Олондарының диаметры ете, буйҙары ун дүрт метрға еткәндәрен белдек.

Хайуандар бихисап паркта. Айырата сыбар болан, антилопа күп, ҡабан бәрәстәре лә хәтһеҙ. Иҫәүәндәре ҡабалан-ҡарһалан юлға сығып, ниңә сабабыҙ әле, тигәндәй уйланып баҫҡандай, шунан һорауға яуап тапмаған ише, ашанты эҙләп туғайҙа темеҫкенергә тотона. Шыпырт ҡына ҡултыҡҡа – бегемот (гиппопотам) төйәгенә яҡынлайбыҙ: ҡайҙа һеҙ, күп тонналы өрәктәр? Ләкин һыу өҫтөндә түңгәктәрҙән, дымҡыл бүрәнәләрҙән башҡа һис ул-был күренмәй. Ах-ах, бер түңгәк ҡыбырларға итә. Эйе, ҡапыл түңгәк тигәнебеҙ дәү албаҫтыға әйләнмәҫме: арҡаһы көмрө, йыуантыҡ оса һәм йәйенке баш. Уныһы суғырмаҡлы, етмәһә, өҫтөнән төп-төҙ ҡолаҡтар тырпайған. Бойороҡто үтәгән һымаҡ, башҡа "түңгәк"тәр ҙә бер юлы һелкенеште. Барлығы өс тиҫтә "гиппо"ны һананыҡ. Йайлап ҡына ылымыҡлы утрауға шылышты ла берәм-һәрәм ҡабаҡҡа танк һымаҡ үрмәләне былар. Юҡ, бер юлы түгел, алдағыһы менеп, һуҙылып ятҡас, ике-өс минуттай ваҡыттан һуң ғына арттағыһы үрләй! Быҙауҙары юҡ-юҡта инәләренең елененә ынтыла. Ара-тирә һиҫкәндергес мөңрәү, дөрөҫөрәге, гөрһөлдәү ишетелә, Африкала бүтән ҡыр хайуандарының ундай уҡ ауаз сығарғанын (хәйер, филдәрҙе яҡындан күрмәгәнбеҙ) әлегәсә ишеткән дә юҡ.

Сафариҙа саҡта ирекһеҙҙән үҙеңде йәнлектәр мөхите, тәбиғәт донъяһы менән бер бөтөн кеүегерәк хис итә башлайһың. Парктың флораһы йәмле, төрҙәргә һәм төҫтәргә ифрат бай. Йә, бынауы «атлай торған ағас»ҡа нисек иҫең китмәҫ! Олоно ҡыйшайып үҫә, өҫтән аҫҡа... тамырҙары һәлберәй. Инде остары тупраҡҡа тейҙеме, шытым бирә, ҡарт олон серей, ситтәрәк йәп-йәш үрсенте баш ҡалҡыта.

Бына яҡындан термит иләүҙәрен ҡапшап, ентекләп ҡарарға форсат тыуа: сынъяһау төҙөлөш шедевры! Термиттар «замок»тарын тупраҡ ярмаһын шайыҡтары һәм тиҙәктәре менән шыйыҡлап йәбештерә, ҡора икән. Ябай ғына конустан тора-бара әллә нисә метрға олғашҡан пирамида хасил була: ҡабырғанан конустары, үҙ-ара тоташҡан террассалары, каналдар, галереялары һәм вентиляция көпшәләре бар. Ҡыҫҡаһы, күп башнялы ҡоролма, үҙе бер "монодәүләт". Иң бейеге – уртала, кәмендә биш метрға ослайған. Ер, йәғни тупраҡ ниндәй, иләү ҙә шул төҫтә. «Һарай» эсендәге «батша тәхете»ндә "батша менән батшабикә" йәшәй. «Хеҙмәтсе» термиттар был бүлкәтте һәр саҡ таҙа тота. Тар ғына улаҡтарҙан инәләр өҙлөкһөҙ һалған күкәйҙәрҙе ташып, бүтән термиттар шуларҙы баҫырға ултыра. Тыумыштан тома һуҡыр булыуға ҡарамаҫтан, «оҫта» термиттар иләүҙе туҡтауһыҙ төҙөй, һылай, киңәйтә. Иң ғәжәбе: оя һайын аҡһымға бай бәшмәк үҫтереүсе термиттар – айырым синыф бар.

Килбәте буйынса тәү ҡарамаҡҡа термиттар ҡәҙимге ҡырмыҫҡаларға тартым, ләкин нәҙекәйбил түгелдәр һәм төҫтәре аҡһылыраҡ. Ҙурлыҡҡа бер сантиметр самаһы. Төп аҙыҡтары – муртайған сыбыҡ-сабыҡ, япраҡ ҡапырығы. Хижиналарға ла ингеләйҙәр һәм, уяу булманиһәң, ағас ҡаралтыны тәләфләй.

Күл ярының махсус ҡулайлаштырылған ышығында тамаҡ ялғарға туҡтайбыҙ. Өҫтәлдәр, эскәмйәләр, һыулы раковиналар, һабын ҡуйылған, бәҙрәф тә яҡында.

Аштан һуң халыҡ күләгәләргә ятты, мин иһә күлдә сайынырға уйлағайным да, һыуы эҫе, өҫтәүенә, һелтеле икән.

Ҡайнар һыу урғылған сығанаҡҡа үтә алманыҡ, сөнки төнгө яуым-төшөмдән йылғасыҡ ярайһы күтәрелеп, ажарланып аға. Кискә табан ташҡын ҡайтымһаҡланыр ҙа ул, тик беҙҙең уны көтөргә әмәлебеҙ генә юҡ.

Парктан сығып китешләй юл тирәләй оҙон томшоҡтары менән үлән йолҡоп йөрөгән филдәр төркөмөн тап иттек. Кәүеш ауыҙҙарына тынҡысланған үлән, айһай, һутлылыр, тегеләр кинәнестән дәү дегәнәк япрағылай ҡолаҡтарын шап та шоп ҡайсылай. Иҫтәре лә китмәй беҙгә саванна "карап"тарының.

Йәнә батҡаҡлы кемпингта ҡундыҡ, асыҡ һауалағы ресторанда туйындыҡ. Ит ашағы килә лә бит, юҡ, ҡәһәрең. Бер ашнаҡсыны көскә күндереп, ауылдан дүрт әтәс һатып алдырттыҡ та ҡуҙҙа ҡурып көйшәнек. Хыялдарҙың тормошҡа ашыуы уңайы менән бында популяр һаналған "Килиманджаро", "Сафари" һыраларын һемерҙек. Тәмле былай. Эскә тейеүенән ҡурҡып, мин артыҡ мауыҡманым, ҡаласыҡты әйләнеп сығырға булдым.

## Йәшәү ҡалыбы үҙҙәренсә...

Ларектар, тәғәмханалар араһынан бер аҙ барыу менән асфальт бөттө лә ҡуйҙы. Башланды... Тар ғына бысраҡ тыҡрыҡтар, ҡул осондағы материалдарҙан арлыбирле әтмәләнгән өйҙәр башланды... Бер квартал үткәйнем, ҡала баҙарына барып төртөлдөм. Бындағы әрпешлекте һөйләп тә тораһы түгел. Шулай ҙа буш ҡайтҡым килмәне — Виктория күлендә тотолоп киптерелгән бесәй тешле балыҡ һатып алдым. Йәнә ҡара ағастан ырылған леопардҡа ҡыҙыҡтым. Осһоҙға, биш долларға ғына, эйә булынды. Масай уҡ-һаҙағына ла ымһынғайным да, әйберем (әйбер тигәндәй, Мәскәүгә осҡан самолетта теге масай һунарсыларын, уларҙың илаһтарын кәүҙәләндергән панно 79 ярсыҡҡа йәнселде) күплеген иҫләгәс, ниәтемдән көскә төңөлдөм. Уҡ башаҡтарының ҡабырғалары кәкерсәк итеп һуғылғайны.

Мин ҡайтҡас, тарамышлы әтәс итен ҡабат сәйнәштерҙек. Әйтергә кәрәк, масай кухняһын нәзәкәтле тимәҫһең, бары тик европаса ҡыландыралар ғына. Урындағы аштан банан телемдәре ҡушып ҡыҙҙырылған кәзә итен, Африка картуфын, йәнә папайя емешенән ҡыуылған араҡыны ғына яманламаҫ инем. Аҙыҡ-түлек хаҡтары сама менән беҙҙәгенә яҡын.



Әтәс менән оҙаҡ мыштырлауҙы әйтмәнем бит әле. Эйе, һәр беребеҙҙән ни бары унар доллар йыйып, әллә өс сәғәт маташтырҙылар. Түҙҙек, көттөк, ни тиһәң дә, ике аҙна һуҙымында африкандарҙың үҙҙәре һымағыраҡ, артыҡ иҫ китмәгән кешеләй бағa башланыҡ тормошҡа. Ә урындағы төп халыҡ ике принцип буйынса йәшәй.

Беренсеһе — «акуна матата». Һүҙмә-һүҙ тәржемәләһәк, "ноу проблем" тигәнде аңлата. Ләкин масайҙар өсөн уның фәлсәфәүи мәғәнәһе киңерәк:

ябай ғына итеп йәшә, борсолма, уфтанма: тормошта сисеп булмаҫтай проблемалар юҡ һәм уларҙы үҙең уйлап сығарма. Икенсеһе – «поле, поле», беҙҙеңсә – “яй ғына, ашыҡмай ғына”. Йәнәһе, ашыҡмай ғына донъя күт, ҡарһаланма, һәр мәлдең рәхәтен күреп, шул рәхәтлекте һуҙып йәшә.

Минеңсә, ярайһы аҡыллы һәм фәһемле тормош принциптары. Үҙем, әлбиттә, ғүмерҙә лә ундай ҡағиҙә менән йәшәмәнем, йәшәмәм дә.

... Төндә йәнә йәшен йәшенләне, күк дерелдәне, ер ҡалтыранды, ҡойоп ямғыр яуҙы. Был юлы һыу беҙ ҡунған ҡабаҡтың өҫкө өлөшөнә хәтлем күтәрелде. Ул-был хәлгә тарымаҫ өсөн көпләүле ашханаға күсендем. Аш өҫтәлдәрен бер-береһенә терәттем дә өҫтөнә полиэтилен йәйеп, тоғом эсенә сумдым. Маладис, Масай!

Иртәгәһенә Арушаға килеп, турагентство офисында ҡалған әйберҙәребеҙҙе алып, үҙебеҙ яратып өлгөргән Импала отелендә һуңғы тапҡыр төшкө аш менән һыйландыҡ та аэропортҡа елдерҙек. Уныһы Аруша – Килиманджаро араһының урталығында урынлашҡан. Тикшереү үткәндә күп йәпле, күп функциялы швейцар бәкемде тартып алдылар. Үҙемдең асығауыҙлығым – багажға тыҡһам ни булған! Самолеттан Килиманджаро түбәһе күренмәне, Африка “кендеге” ҡуйы болоттар ҡосағында ине.

Самолет Занзибар утрауына яҡынлаша. Күңелдә күңелле һүҙҙәр ҡайнаша:

*Мы живем на Занзибаре,*
*В Калахаре и Сахаре;*
*На горе Фернандо По,*
*Где гуляет гиппопо...*

Фернандо По тигәнен тапаныҡ инде. Хәҙер сират һиндә, Занзибар. Ҡаршыла ете илгиҙәрҙе!

Занзибар[1] борондан ҡәнәфер плантацияһына бай һәм уны экспортлау буйынса донъяла беренселекте бирмәй. Мускат өрөгө, корица ла күпләп етештерелә, шуғамылыр, Занзибарҙы “тәмләткестәр утрауы” тип тә атайҙар.

Аэропорттан беҙҙе оҙаҡ ҡына бер-ике ҡатлы Стоун Таун (Ташҡала) тигән хакимиәт үҙәгенә алып барҙылар. Фәҡирлекте күреп, тәүҙә кәйефем боҙолдо: ошондай йәмһеҙ төбәктә ял итергә тура килерме икән ни? Шөкөр, ҡаланың уртаһы ғәрәп стилендә һалынған икән. Бында таҙалыҡ, йыйнаҡлыҡ һиҙелә, уңда ла, һулда ла – боронғо йорттар, ашханалар, ыҡсым ғына ҡунаҡханалар, сувенир лавкалары. Яр буйы – урта быуаттарҙан ҡалған Форт, таштары юнып һалынған.

Ҡала баҙарынан алыҫ та түгел, йәнәш кенә тиерлек католиктар костелы менән мосолман мәсете әйҙүкләй кеүек. Береһенең көмбәҙендә – тәре, икенсеһендә – ярым ай; гүйә, улар “илаһ бер...” тигәнде символлаштыра. Ләкин паства һәм мәхәллә лидерҙары үҙенекен ҡайыра, күрәһең, хакимлыҡ дилбегәһен бушатҡылары килмәй.

Занзибарҙа хәҙерге цивилизацияны тоймауың, бер яҡтан, яҡшы ла кеүек. Төкөрөп тә бирмәйҙәр, XIX быуаттағыса йәшәп яталар. XXI быуатҡа аяҡ баҫҡаныбыҙҙы бары тик тар урамдарҙа саҡ-саҡ һыйып йөрөгән автомобилдәр генә хәтерләтә.

Әйберҙәрҙе номерға бикләп, океан менән күрешергә ашҡынабыҙ. Күк йөҙөндә болот әҫәре лә юҡ, ни генә тимә, йылдағы 365 көндөң 360-ы ҡояшлы була!

---

[1] *Х быуатта утрауҙа ислам солтанаты ойошторола. 1832 йылда Оман солтан хатта бында үҙенең резиденцияһын урынлаштыра. 1963 йылда Занзибар бойондороҡһоҙлоҡ яулай, ә 1964 йылда үҙ ирке менән Танзанияға ҡушыла.*

Причалдарҙа арҡыс-торҡос елкәнле кәмәләр сайҡала, ҡабырғаларына бәүелсәктәр беркетелгән. Кәмәләр араһында һөттән аҡ яхталар сағыуыраҡ төҫмөрләнә. Тулҡын ярға тығыҙлаған ҡомлоҡта малай-шалай осоҡланып футбол тибә. Кәүҙәләре тура, беләктәре тарамышлы – ҡарап тороуға күркәм үҫмерҙәр. Был йәһәттән ҡатын-ҡыҙҙары ир-егеттәрҙән ҡайтышыраҡ. Һынамыш ярала күңелдә: Рәсәйҙә ҡатын-ҡыҙ ир-аттан ул төҫкә, ул буйға ярайһы килбәтлерәк. Ниңә? Ҡитғалар араһында шундай айырма булыуы ҡыҙыҡ.

Һинд океаны гәүһәр ебәктәй наҙлы тулҡына. Йәнгә рәхәт, тәнгә сихәт, зиһендән бөтә уй-ғәм томандай тарала.

Бер нисә йыл инде мин "һыу аҫты һунары" менән шөғөлләнәм. Көпшәле маскамды кейеп, аяҡтарымды ишкестәргә тығып, риф буйлап йөҙәм: һыу аҫтында картуф шытымылай аҡһыл, энә күҙәнәгендәй мыр күп. Ә мин тоноҡ һыуға сумам тип ашҡынған булам бит әле. (Хорватияның Адриатика тәрәнлектәрендә һыу егерме биш метрға саҡлы үтәнән-үтә күренә.) Йәйғор нурҙарын үҙҙәренә һеңдергән балыҡтар, эркет төҫөндәге медузалар йырбандаша.

Эңерҙә бөтә төркөм менән "тулҡын тыңларға" ыңғайлайбыҙ. Юҡҡа өмөтләнгәнбеҙ... Тотош яр геүләп тора: унда ла, бында ла ҡуҙлы ут ялпандай. Диңгеҙ әкәм-төкәмдәрен ҡуралар, шуны һаталар, ашаналар, йырлайҙар. Беҙ кемдән кәм? Бамбук сыбыҡтарға теҙеп өтөлгән йә ҡауырһын тәрилкәләргә һалынған тәғәм һайлап алабыҙ ҙа иҫәпләшергә ниәтләнәбеҙ. Беҙгә шундуҡ хаҡын әйттеләр, ләкин аҡса алманылар... «Аҙаҡ түләрһегеҙ, ашап-эсеп, ял иткәс...» Ай-һай, хәйлә тоҡсайҙары! Табын тамам – мут африкандар хаҡты икеләтә күтәрмәһенме! Бәхәс ҡуба, тегеләр яғы ярһып-ҡыҙып үҙҙәренекен тылҡый. Антон ҡәтғи сабырлыҡ һәм логик итәғәт менән тегеләрҙе һораған хаҡтарын утыҙ процентҡа кәметеүгә күндерҙе. «Колонизатор" ҡушаматын юҡҡа ғына таҡмағанбыҙ үҙенә! Ләкин кәйеф көрлөгө шиңгәйне инде беҙҙә.

Иртәгәһенә оҙон көн Стоун Таундың иҫке кварталдарын айҡаныҡ. Иғтибар иттек: һәр өй хужаһы ишеген ғәзиз күрә, уларҙы киң, тос ағастан семәрләп яһай, бронза ҡулсалар менән биҙәй. Сувенир магазиндарының береһендә, аҙ ғына сауҙалашып, Африка стилендә һоҡланғыс акварель төшөрөлгән киндер алдым.

Ҡасандыр ҡолдар һатылған баҙарға индек. Хәҙер бында – музей. Гид оҙатыуында таш зиндандарҙы байҡап сыҡҡас, күңелдәргә юшҡын һылашҡандай булды. Европа колонизаторҙары ҡара тәнле африкандарҙы Көньяҡ һәм Төньяҡ Америкаға ҡол рәүешендә һатып ебәрер алдынан ошонда интектергән. Хәҙер ана шул ҡол һатыу буржуйҙарының нәҫелдәре, беҙ – демократ, тип түштәрен һуға һәм россияндарҙы нисек йәшәргә кәрәклеген өйрәтә.

Ер аҫты казематтарының түшәме тәпәш, иңкәймәйенсә йөрөп тә булмай. Ер иҙән йырынға табан ауыш, сөнки... кешенең тәбиғи ҡалдыҡтары шунда аҡҡан. Бер тотҡонға бер квадрат метр ғына тура килгәнен уйлаһаң, сәстәр үрә тора. Бынан йөҙ, ике йөҙ йыл элек майҙан уртаһындағы дүрткел соҡорҙа тере "тауар"ҙы алыпһатарҙарға күрһәткәндәр. Ҡот осҡос әшәкелек!

Иҫәпләүҙәренсә, ҡол сауҙаһынан «Ҡара континент» генофондының ҡырҡ процентҡа яҡын кешеһе кәмегән. «Яңы донъя»ға ғына Африканан егерме миллион мәсбух оҙатылған. Ә бит шуларҙың өстән бер нисбәте Атлантик океан аша йөҙгән караптар трюмында тонсоҡҡан, аслыҡтан, сыбыртҡылауҙан, зәхмәттән һәләк булған, ә бизнес туҡтамаған, сөнки ул тауҙай табыш килтергән. Кешелеккә ҡаршы оятһыҙ, мәрхәмәтһеҙ енәйәт, цивилизацияның яман шеше был. Ә бит ҡолдарҙы һатып алыусыларҙың иң күбеһе Америка ҡитғаһына Көнбайыш Европанан күсеп барған әҙәмдәр була. Дөрөҫ, Рәсәй тарихы ла ҡол һатыу күренештәрен хәтерләй, мәгәр тотҡондарҙы былай уҡ ыҙалатмағандар. Крепостной хоҡуҡ та

беҙҙә Европала ҡол сауҙаһын бөтөрөүҙән байтаҡ алдараҡ тыйыла.

«Африка иле» ресторанының террасаһында киске ашҡа йыйналдыҡ. Гүйә, Ҡояш алтынһыу ҡултыҡҡа баҙрап сума... Илерткес музыка, елкендергес бейеүҙәр, сал ҡунған бөҙрәбаш негрҙың гитара сиртеүе, ауыҙ гармунсығында уйнауы түшәккә ауғансы яңғырап торҙо.

Көндөҙ ҡатырға ҡумталар, киндер тоҡтар, паралон төргәге, бау-маҙар хәстәрләп, бөтә әйберҙәремде тәфсилләп төйнәп ҡуйҙым. Юғиһә, Арушанан Занзибарға осҡанда бер ағас антилопамдың мөгөҙөн һындырҙылар. Аэропортта йөк тейәүселәр багажды теләһә нисек бырaҡтыра шул.

Төндә Доктор менән икебеҙҙе ваҡ ҡына ҡырмыҫҡа яуы яфаланы. Ярты сәғәт һайын ут ҡабыҙып, түшәкте, эс кейемдәрен һелккеләргә тура килде. Ғөмүмән, Африкала «москит болоттары», фәлән дә төгән тигән уйҙырмалар ысынбарлыҡҡа тура килеп бөтмәй. Башҡортостанда ундай ғына серәкәй, күгәүендәр күберәктер ҙә. Беҙҙең сәйәхәт, бәлки, москиттарҙың бигүк шашынмаған миҙгеленә лә тура килгәндер. Һәр хәлдә, карауат остарына эленгән балдахиндар ошо икеләнеүгә ҡеүәттер.

... Иртәнге сәғәттә утрауҙың Нунгва тигән төньяҡ тарафына юлланабыҙ. Стоун Таундан илле километрҙай барҙыҡ. Йәнә балаларҙың һәм мәктәптәрҙең күплегенә диҡҡәт бирәбеҙ. Арыу кейенгәндәр, ҡәнәғәт йылмаялар, сырайҙары яҡты. Тимәк, Занзибарҙың да киләсәге өмөтлө, яҡты. Шул уҡ ваҡытта төҙөлөп бөтмәгән йорттарҙың күплеге лә иғтибарҙы тарта. Материктағынан айырмалы, бындағы өйҙәр балсыҡ менән һыланып, уртаса ҙурлыҡта төҙөлә. Оло ярҙа иһә күп ҡаралты ситәнде саман һымаҡ һылауҙан ғибәрәт. Кәрәк ергә барып еткәнсе, машинабыҙҙы бер нисә тапҡыр чек-поинт полицияһы туҡтатты. Салонды арлы-бирле ҡарайҙар, водителдең документтарын тикшерәләр һәм аҙаҡ, вазифаларын төшөндөргәндәй: “Һеҙҙең хәүефһеҙ сәфәрегеҙ өсөн”, – тиҙәр.

Водителебеҙҙең ялҡытҡыс юлдан йоҡомһорап китеүен күрһә, Колонизатор быға көтөлмәгән һораүҙар биргеләй: “Роджерс, белһәң, әйт: Йыһанға тәү башлап ҡайһы илдең космонавы осҡан?”

– Америка кешеһе, – ти теге. Бына шулай, янкиҙар аң-зиһенде томалауға маһир инде ул. Һөҙөмтәлә үҫеш юлына баҫҡан илдәрҙең күбеһендә “американдар – һәр йәһәттән лидерҙар” тигәнерәк ҡараш хөкөм һөрә. Африкандар, ана, Икенсе Бөтә Донъя һуғышында Америка еңгән, Рәсәй ҙә әҙ-мәҙ алышҡан, тип иҫәпләй. Нәҡ ошо юҫыҡта, йәғни кешелек йылъяҙмаһында үҙебеҙҙең хәләл ҡаҙаныштарыбыҙҙы лайыҡлы күрһәтергә беҙгә американдарҙан өйрәнергә күптән ваҡыт, миңеҫә.

Отелгә етәрәк өс километр аралыҡта юл бигерәк алама – машинаң, нервың ғына сыҙаһын. Базальт ҡырсынташ шығырлаһа йә джипты дөңкөтһә, бәғер өҙөлгәндәй була. Урындағы властар һәм туризм бизнесы юлдарға кем хужа икәнен һаман һанламай, күрәһең. Таныш күренеш...

Отель тигәнең бунгало тип аталған аласыҡтарҙан хасил. Командабыҙ өсөн дүрт бунгалоға заявка биргәйнек, улары пляжға табан һуҙылған иңкеүҙә булып сыҡты.

Харап оҙон пляжда иһә ҡом крахмал өше йәбешкән. Тәнгә бер һылашһа, ҡулың менән йыуып төшөрмәйсә кейенер әмәл юҡ. Әл дә пейзаж кинәндерә. Бер яҡтан уны океан йыуа, икенсе яҡтан ғәләмәт ҡаялар, кокос пальмалары йәмләй... Йәнә һыуҙың һалҡынса икәнлеге лә беленде, ни бары 27 градусҡа етә. Был яҡшыға, сөнки артыҡ йылымыста йөҙөү хәлде тиҙерәк ала.

Киске тамаҡҡа ресторан директоры төрлө төҫтәге диңгеҙ ҡыҫалалары өйөмөн бешертте. Ете әзмәүер саҡ мөнйөп бөттөк.

## Тыуған көн – алыҫта ла байрам

Көңгөр-ҡаңғыр ләпелдәүҙән шуны төшөнәм: иртәгә, йәғни 15 мартта, шешлек планлаштырыла. Әйтеп һалдым: «Ағай-эне, иртәгә минең (паспорт буйынса, ғәмәлдә 14 февралдә донъя күргәнмен) – тыуған көнөм. 57 йәш тула! Әсе-мәсене мин ҡуйырмын». Тегеләр белгән икән: “Шуға шешлек әҙерләтәбеҙ ҙә инде, Масай туған”,– тимәһендәрме!

Отелдә итальяндар күпселекте тәшкил итә. Һыу инеүҙәре мәрәкә. Билдәренә тиклем генә һыуға инәләр ҙә торалар, эй лығырҙайҙар, аҙаҡ сумып та тормай кире сығалар.

Пляжды эңерҙән «эләктерҙек». Тулҡын ҡаҡҡан ерҙән өс метр ғына ситтәрәк официанттар өҫтәлдәр, һөйәнмәле ултырғыстар теҙҙе. Доктор ҡурғыста бына тигән балыҡ (дорада) һәм өлөш (барракуда) әҙерләне. Әмәле үҙенсә. Балыҡты тимер селтәргә һалырҙан алда фольгаға төргән. Күмерләнмәй, үҙ һутында шулай тәмле итеп бешә. Һуңғараҡ “король ҡыҫала”ларын ауыҙ иттек, ун литр шарап һыймалы бутылде бушаттыҡ. Тоҙло ел иҫкән, ҡыйғас ай күҙ ҡыҫҡан мәлдә ейгән әлеге ябай ғына ризыҡтар һәммәбеҙгә лә харап тәмле тойолдо.

Ҡотлауҙарҙан иреп киттем, бөтәбеҙ ҙә үҙебеҙҙе йәшәргәндәй хис иттек. Иптәштәр сәғәт 11-ҙәрҙә йоҡоға таралышҡас, күрше отелдең барында Колонизатор менән индустар, австралиецтар йәнәшәһендә оҙаҡ ҡына ултырҙаш булдыҡ. Рәсәй намыҫын яҡлап, беләк шаҡарыуҙа (армрестлинг) уң усым менән дүрт Австралия кешеһен еңеүгә өлгәштем, ләкин буйы ике метрлыҡ йәш мексиканецҡа бирешергә тура килде. Иртәгәһенә төшкә табан Колонизатор менән ярҙан саҡрым самаһы алыҫлыҡтағы риф-утрауға йөҙөп сыҡтыҡ. Йөҙөп барышлай һайыраҡ урында һигеҙаяҡ төркөмөнә төртөлдөк тә ҡурҡыштан саҡ ҡысҡырып ебәрмәнек. Тәүләп күргәс ни, теге нәмәләр бөгәрләнгән йыландар йомғағылай шул. Йәшкелт бөртөксәләр, һары мыр менән ҡапланған һәрмәгестәрен күргәс кенә йәнгә йылы йүгерҙе. Нисәү ине икән һигеҙаяҡтар? Әйтеүе ҡыйын, меңләп кенә булғандыр.

Утрау – үҙе бер әкиәти ожмах. Ярында мең-мең йылдар тулҡындар һөжүменән хасил мөғжизәле – береһе арка һымаҡ, икенсеһе аттың аҙау тешеләй “башня”лар теҙелгән. Һайҙағы таш ҡырыйҙары ғәләмәт үткер, хатта аяҡтарҙы ҡанатҡансы сыйып бөттөк. Көскә бер уялағы ҡомлоҡҡа күтәрелеп, ласталарҙы сисеп, ҡояш эҫеһенә иҙерәп ял иттек. Ҡолас йәйеп... Пальма япраҡтары ҡыштырлауын, тулҡын сайпылыуын тыңлап...

Пальмалар осонда сәтләүектәре өлгөрә. «Һаҡ булығыҙ! Кокос сәтләүеге ҡойола!» тигән иҫкәртеү яҙылған таҡтасыҡты шәйләп, асығыраҡ урынға шылышабыҙ. Килограмдай ауырлығы менән берәйһе, йә икәү-өсәүһе бер юлы өҙөлөп төшһә, халыҡ әйтмешләй, булыр: бөттө баш, ҡалды муйын һерәйеп...

Отелгә табан яңғыҙым йөҙҙөм, Колонизатор боғаҙ аша түтәнән һыҡтырырға атланы. Океан яғынараҡ тартылғанмындыр, бер заман мәрйен рифының һыу аҫты түмәләсе өҫтөнә барып сыҡҡанмын. Таш кеүек ҡатҡан мәрйен үҫентеләре араһында ниндәй генә йән эйәһе ары-бире йөҙмәй, әйтерһең, мәңге хәрәкәттәге ҡуласа, бәҫен юймаҫ өҙләкһеҙ йәнһүрәт! Ирекһеҙҙән үҙеңде ят планетаға баҫҡандай, бала сағыңа яланаяҡ ҡайтҡандай хис итәһең.

Фантастик донъя! Мәгәр сит даръяларҙа сирҡанып йөҙгәнсе, үҙебеҙҙең сөсө йылғаларҙа ирәбе йөҙөүең артығыраҡ һымаҡ. Моғайын, көньяҡ даръяларҙың мәхлүҡтәре күп булғанға, уларҙан үҙеңде нисектер бүгә төшкәндәй тойғанғалыр. Эйе, зоопарктағы кисерештәрҙе тайга шырлығында януар күргән саҡтағы кисерештәргә сағыштырыу урынһыҙ бит ул.

Командабыҙҙа тормоштоң африканса принциптары (акуна-матата, поле-поле) хәҙер ныҡлап хөкөм һөрә, хатта иртәгә самолетҡа билет килтерәсәктәрен дә, Стоун Таун аэропортына ҡәҙәр беҙҙе илтәсәк машинаға заявка бирергә кәрәклекте лә онотабыҙ. Кемдер иҫкә төшөргәс кенә, тиҙҙән тыуған илгә ҡайтасағыбыҙ хаҡында уйлашабыҙ. Унда иһә «акуна» ла, "матата" ла көтмәй.

Экватор эңерен һуңғы тапҡыр күҙәтер өсөн һәммәбеҙ ҙә ярға уҡталдыҡ. Ана, иреү зөбәржәттәй баҙрап, уртаҡ ҡояшыбыҙ офоҡҡа ҡарайып сурайған вулкандар теҙмәһенә һалыулай. Аяҡ остарынаса сайпылған ҡултыҡ һыуҙарын еңелсә сирылтып, елкәнле кәмә уҙып бара... Ҡояш нурҙары бөләңгертләнә бара, мин, көн артынан ҡалмаҫҡа тырышҡандай, һалҡынса тоҙло һыуҙы баҫалҡы сәсрәтеп, ҡомда бер минутлыҡ ҡына табан эҙҙәремде ҡалдырып йүгерәм, гүйә, бәхетле мәлемде оҙонайтырға теләйем.

...Занзибар утрауынан Дәр-әс-Сәләмгә осабыҙ. Ул Танзанияла иң эреләр иҫәбендә, ҡасандыр илдең баш ҡалаһы һаналған. (Хәҙер – Додома).

Ике километр бейеклектән океан матурыраҡ, сихрийерәк күренә. Һыу аҫты утрауҙары, ҡом бархандары, мәрйен армыттары, балыҡ эркеүҙәре ярайһы асыҡ төҫмөрләнә. Ғәжәби картина!

Бына ҡала ла күренә. Ихаталары йәйенке тәпәш биналар, иң бейектәре өс йә дүрт ҡатлы ғына. Улары, моғайын, офис йә банк-маҙарҙыр. Асфальт түшәлгән урамдар һирәк, күбеһендә ябай ҡырсынташ, буғай. Ҡала тиһәң, хәтере ҡалыр, торғаны бер гигант ауылға оҡшаш Дәр-әс-Сәләм.

Ни бары 13 минут ҡына осҡанбыҙ. Моғайын, бынан да ҡыҫҡараҡ авиалиния юҡтыр донъяла.

Куахери[1], Танзания !

Джамбо, Доха!

Һаумы, Мәскәү!

Сәләм, Башҡортостан!

Именме, Өфөм! (Дөрөҫ, мин был сәләмемде ике көндән һуң ғына күндерәсәкмен.)

Ғүмер буйы иҫләрлек тәьҫораттар менән ҡайтылды сәйәхәттән. Шуларҙың бер шәлкемен әле һиңә лә тәҡдим иттем, хөрмәтле уҡыусы. Килиманджароның түбәһенә үк артыла алмауым ғына йәл. Хәйер, Кили һырты мине "Кил, Камил!" тип әле лә үҙенә саҡырып торғандай.

Африка нимәһе менән әйҙәй һуң үҙенә? Был һорауға түбәндәгесә яуаплайым: ҡабатланмаҫ тәбиғәте һәм дә унда йәшәгән халыҡтарҙың характерлы этномәҙәниәте менән.

Африканан ҡайтҡас ҡына ғәзиз планетабыҙҙың ысынлап та йомро, йәнә еребеҙҙең ул тиклем үк ҙур түгеллегенә инандым. Әйҙәгеҙ, дуҫтар, бишегебеҙҙе бәләҡазаларҙан һаҡлайыҡ, килер быуындарға имен-аман ҡалдырайыҡ.

**Руссанан Сабир ШӘРИПОВ тәржемәһе.**

[1] *Куахери – "хуш, һау бул" мәғәнәһендә.*

*Сәхнә әҫәрҙәре*



**Хәкимйән**
**ЗАРИПОВ**

# ҠУШ ЙӨРӘКЛЕ ЕГЕТТӘР

**КОМЕДИЯ**

*Ике шаршауҙа*

**ҠАТНАШАЛАР:**

**Хажибәк Усманов** — *40 — 45 йәштәрҙә.*
**Гөлшәкәр** — *35–40 йәштәрҙә, Хажибәктең ҡатыны.*
**Наҙгөл** — *Гөлшәкәрҙең бер туған һеңлеһе, ауылда клуб мөдире.*
**Аҡсура** — *Наҙгөлдөң һөйгән егете, гармунсы.*
**Фәрхәт** — *ысын исеме — Әбүбәкер. Оҙон буйлы, ҡыҙыл пинжәктә.*
**Ҡәнзәфәр** — *ысын исеме — Зөфәр. Ҡыҫҡа буйлы, ҡыҙыл салбарҙа.*
**Амнист** — *үҙ исеме менән йөрөй. Шаҡмаҡлы костюмда.*
**Зәйнәп** — *ауыл хакимиәте башлығы.*

**Ваҡиға беҙҙең көндәрҙә бара.**

**Беренсе шаршау**

**Сәхнәнең артҡы өлөшөндә, ҡалҡыулыҡта, тармаҡтарын төрлө яҡҡа йәйгән ҡуштирәк. Талғын ғына иҫкән елгә япраҡтары елберҙәй, әйтерһең дә, улар бер-береһе менән һөйләшә, бер-береһе менән серләшә.**

**Ҡуштирәккә арналған йыр яңғырай.**

*Күк Иҙелкәй тыуған илем,*
*Йәшел хәтфә ҡырҙарым.*
*Һағынырмын Ҡуштирәкте,*
*Мөхәббәтем йырҙарын.*

*Ҡуштирәгем, Ҡуштирәгем,*
*Миндә мәңге ҡалырһың.*
*Ҡуштирәгем, Ҡуштирәгем,*
*Минең өсөн янырһың.*

*Бейек-бейек оса икән*
*Ҡуштирәктән бөркөттәр.*
*Ошо ерҙә үҫә икән*
*Ҡуш йөрәкле егеттәр.*

**Йыр көсәйгәндән-көсәйә бара. Ҡуштирәк юғала. Сәхнәлә — бөгөнгө коттедждың ҙур ғына залы.**

**Ишектә ҡыңғырау. Йыр өҙөлә. Диванда — өйҙөң хужабикәһе Гөлшәкәр менән уның ире Хажибәк.**

---

*Хәкимйән Зарипов 1929 йылдың 18 октябрендә Миәкә районының Ҡаран ауылында тыуған. Белеме буйынса юрист. Күренекле драматург.*
*Ҡәләмдәшебеҙҙе 80 йәшлек юбилейы менән ихлас ҡотлайбыҙ.*

**Гөлшәкәр.** Кем икән?

**Хажибәк.** Кем булһын, йыйыштырыусы килгәндер... Аҡса һорарға.

**Гөлшәкәр.** Ас.

**Хажибәк** (*ишек асырға сыға, уның тауышы*). Бәй, Наҙгөл... Ин, әйҙә!.. Нишләп улай сит кеше һымаҡ ишек төбөндә баҫып тораһың?.. Уҙ, әйҙә!.. Түрҙән уҙ!..

**Гөлшәкәр.** Наҙ-гөл?!

**Хажибәк** (*тауышы*). Ҡаршы ал!

**Гөлшәкәр**. Әйҙә-әйҙә!.. Залға үт!

**Наҙгөл аҡрын ғына залға үтә, иҫәнләшеп тә тормайынса диванға ауа, үкһеп илай.**

**Гөлшәкәр.** Туҡтале, ни булды?.. Әллә...

**Хажибәк.** Бәхетһеҙлеккә тарымағанһыңдыр бит?

**Гөлшәкәр**. Һөйлә!..

**Наҙгөл** (*илауҙан туҡтарға тырышып*). Ауылға газ индерәләр... *(Көслөрәк илап ебәрә.)*

**Гөлшәкәр.** Эй, йүнһеҙ... Шуға илайҙармы ни?.. Кеше ҡурҡытып... Шатланырға кәрәк!

**Хажибәк.** Ауылдар яңыра, асфальт юлдар һалына, ә һин, балдыҙкайым, илайһың.

**Гөлшәкәр.** Әллә ниҙәр уйлап бөтөрҙөм. (*Хажибәккә.*) Бар әле, сәй ҡуйып ебәр!

**Хажибәк.** Сәйен дә ҡуйырбыҙ... (*Кухня яғына китә.*)

**Гөлшәкәр.** Һөйләп ебәр инде, ауылда иҫәндәрме?

**Наҙгөл**. Иҫәндәр ҙә ул...

**Гөлшәкәр.** Әллә үҙеңә бер-бер хәл булдымы?

**Хажибәк** (*кухнянан сығып*). Газ инмәйенсә беҙҙең ауыл ғына тороп ҡалғайны түгелме? Элекке заман булһа, “Социализм плюс газификация всей деревни равняется коммунизму” тип оран һалыр инем дә...

**Гөлшәкәр.** Етте һиңә! Эшеңдә шулай оран һалһаң, күрһәтерҙәр һиңә коммунизмды!

**Хажибәк**. Ҡурҡыр тиһеңме?

**Гөлшәкәр**. Сәйеңде ҡара! (*Хажибәк кухняға китә.)* Һе, батырайып алған... Ҡулыңды йыу. Таҫтамал шунда.

**Наҙгөл.** Ярай... (*Ванна яғына китә.*)

**Наҙгөл инә. Хажибәк сынаяҡтар алып сығып, сәй яһай башлай**.

**Гөлшәкәр** (*Наҙгөлгә*). Тынысландыңмы?

**Наҙгөл.** Тынысландым тиергә, иң мөһимен һөйләмәнем бит әле.

**Гөлшәкәр.** Һөйлә. Апайыңа бөтәһен дә һөйлә. Нимә булды?

**Наҙгөл.** Ҡуштирәкте киҫергә булдылар.

**Гөлшәкәр**. Ҡуштирәкте?!

**Наҙгөл**. Торба юлына тура килә, тиҙәр.

**Гөлшәкәр.** Шулай ҙа була икән, ә?

**Наҙгөл.** Соҡор ҡаҙа башланылар инде...

**Хажибәк.** Минеңсә, шундай тәҡдим индерергә кәрәк, тыңлағыҙ!.. Әйтәйек, төп магистралдән траншея туп-тура Ҡуштирәккә килеп төртөлдө, ти...

**Гөлшәкәр.** Шунан нимә була инде?

**Хажибәк.** Тыңлап бөт. Төртөлдө бит инде...

**Гөлшәкәр.** Нимә төртөлдө?

**Хажибәк.** Уф, Алла... Апайың һөйләп бөткәнде көтмәй, ауыҙға һуғып тик тора ул.

**Гөлшәкәр.** Ярай, ярай... “Аҡыллы” фекереңде әйтеп бөт, тыңлайыҡ.

**Хажибәк.** Ҡуштирәккә килеп төртөлгәс, торбаларҙы тотаһың да бөгәһең... Эше лә бөттө!

**Гөлшәкәр.** Аҡыллы һүҙ әйтә, тип торам...

**Хажибәк өҫтәлгә ҡаты ғына һуға ла кухняға инеп китә.**

**Наҙгөл**. Апаҡайым... Ҡуштирәк минең өсөн бик тә, бик тә ҡәҙерле...

**Гөлшәкәр.** Бөтәбеҙ өсөн дә... Беҙҙең әсәй һуғыш алдынан тыуған. Ҡуштирәкте ошо уңай менән ҡартай ултыртҡан. Һуғышта ятып ҡалған ауылдаштарыбыҙ хөрмәтенә лә!

**Наҙгөл.** Бөтә байрамдар Ҡуштирәк эргәһендә үтә ине. Өйләнешкәс, Өфө йәштәре Салауат һәйкәленә килә, беҙҙең ауылда – Ҡуштирәк эргәһенә... Фотоға төшәләр... Аҡсура менән тәү тапҡыр шунда таныштыҡ...

**Гөлшәкәр.** Уратып үтергә лә булмаймы икән?

**Наҙгөл.** Нисек?

**Гөлшәкәр.** Ауылдың икенсе башынан үткәргәндә?..

**Наҙгөл.** Ҡыйбатҡа төшә...

**Гөлшәкәр.** Нисек?

**Наҙгөл.** Траншея ете саҡрымға оҙая.

**Гөлшәкәр.** Оҙайһа ни... Расходын күтәрер инек әле. Күп тигәндә бер-ике меңдер инде.

**Наҙгөл**. Илле мең доллар кәрәк.

**Гөлшәкәр**. Шулай уҡмы?

**Наҙгөл.** Шулай шул!

**Кухнянан Хажибәк сыға**.

**Хажибәк.** Ассоциация плюс газификация равняется чему?

**Гөлшәкәр.** Балдыҙыңды яратаһың икән, аҡса тап.

**Хажибәк.** Аҡса? Табабыҙ уны. Яратҡан балдыҙ өсөн аҡса түгел, доллар ҙа табабыҙ. (*Кеҫәһен аҡтарған була.*) Күпме кәрәк? Биш меңме?.. Ун меңме?..

**Гөлшәкәр.** Илле мең доллар!

**Хажибәк** (*лап итеп ултыра*). Илле мең доллар?!.

**Наҙгөл**. Табып булырмы, еҙнә?

**Хажибәк ишара менән генә ниҙер аңлата.**

**Гөлшәкәр.** Ауыҙыңа һыу уртланыңмы?

**Хажибәк.** Мишәйт итмә!.. Чапай уйлай...

**Гөлшәкәр.** Чапай түгел, малай һин! Кәрәкмәгәндә эшкинмәгәндәргә, юҡ юбилейҙы бар итеп, спонсорҙар табаһың. Ә бер тыуған балдыҙыңа...

**Хажибәк** (*яҡтырып китә, йылмая*). Стоп!

**Гөлшәкәр.** Нимә стоп?

**Хажибәк**. Спонсор тинеңме? Башыма бер уй килде...

**Ҡатынын да, балдыҙын да берәм-берәм ҡосаҡлай**.

**Гөлшәкәр.** Шаярма әле...

**Хажибәк.** Шаярырға кәрәк. Шаярып башлаған эштең ахыры хәйерле була. Йәле, балдыҙ, теге шаярып йырлаған таҡмаҡты әйттер әле!

*Изге ерем — Ҡуштирәгем,*
*Яҙмыш шунда бәйләнә.*

**Наҙгөл.**

*Ярһып тибәсе йөрәгем,*
*Еҙнәм, башым әйләнә.*

**Хажибәк.**

*Эшҡыуарҙар — спонсорҙар*
*Маллы ерҙә әйләнә.*
*Барып сыҡһа минең хәйлә,*
*Эштәр беҙҙең көйләнә.*

**Наҙгөл.**

*Ҡуйсы, еҙнәм, еҙнәм, ҡуйсы,*
*Бер ҙә ятмай күңелем.*

**Хажибәк.**

*Балдыҙҡайым, һин бит йырсы,*
*Йондоҙҙан юҡ кәм ерең.*

**Наҙгөл**.

*Изге эшкә ниәтләндем,*
*Шуға йөрәгем яна.*

**Хажибәк**.

*Аферистар — хәстрүштәр*
*Үҙҙәре килеп ҡаба.*

**Гөлшәкәр.** Шәп уй килде, тиһең инде?

**Хажибәк.** Пәйғәмбәребеҙҙең пәйғәмбәрҙәре уйлап сығара алмаҫ!.. Балдыҙҡайым! Һин хәҙер Ғәрәбстан яҡтарынан килгән вәкил, йәғни консультант булаһың.

**Наҙгөл.** Кәрәкмәй, еҙнә!

**Хажибәк.** Кәрәк! Газ индереү буйынса аҙ-маҙ ғына һуҡалай башланың бит инде. Ниндәй генә һорау бирһәләр ҙә, үҙ файҙаңа яуап бирәһең.

**Гөлшәкәр.** Шулай ҙа булғас, Ғәрәбстан яҡтарынан килеүҙең ни кәрәге бар?

**Хажибәк.** Кәрәк шул! Ҡайҙа нефть — шунда газ! Донъялағы иң бай ил — Ғәрәбстан. Һәр өйҙөң ишек алдына скважина ҡуйылған. Эшләмәйенсә генә счетчик буйынса аҡса алып яталар. Ассоциацияларының хужаһы Солтанбәкме, Нуриәхмәтме, шуның дүртенсе ҡатынының бишенсе ҡыҙы Наҙгөлхан булаһың. Иң юғары дәрәжәле белгес... Газ индереү буйынса консультацияға килгәнһең. Урындағы ландшафтты тикшереп йөрөйһөң.

**Гөлшәкәр.** Нимә ул ландшафт?

**Хажибәк.** Һинең башың етмәй... Ваҡытлыса спонсорҙарҙан аҡса алаһың да проценты менән ҡайтарып бирәһең. Килештекме?

**Гөлшәкәр.** Ышандылар, ти. Әллә һин уларҙы Наҙгөл тиклем генә белмәй тип уйлайһыңмы?

**Хажибәк.** Ҡайҙан белһендәр, ти. Хәҙер бит бөтәһе лә буталды. Юғары белемле инженерҙар грузчик булып, йәшник ташый. Ә грузчиктар врач, экстрасенс булып эшләй.

**Кейенә башлай**.

**Гөлшәкәр.** Ҡайҙа китергә булдың?

**Хажибәк.** Радиоға! Был изге уй-хәбәремде реклама аша бөтә донъя тыңлаясаҡ!

**Гөлшәкәр.** Алды, ти, һинең ул хәбәреңде радио! Көт!

**Хажибәк.** Көтөп тораһы юҡ, аҡсаң ғына булһын, хәҙер үк хәбәр итәләр. "Радио-бер", "Радио-ике", "Радио-өс"! Бөтәһе лә коммерция радиолары. Иғландарҙы иғлан итеп кенә йәшәйҙәр!..

**Наҙгөл.** Еҙнә... Ә был криминаль эш түгелме?

**Хажибәк.** Ауыл файҙаһына бөтә эштәр ҙә изге!

**Гөлшәкәр.** Ә үҙең кем булмаҡсыһың инде?

**Хажибәк.** Слуга!.. Слуга двух господ! Ассоциация башлығы Солтанбәктең дә, уның дүртенсе ҡатынының бишенсе ҡыҙы Наҙгөлхандың да ҡәбергәсә тоғро хеҙмәтсеһе Хажибәк булам. Пока! (*Сығып йүгерә.*)

**Пауза.**

**Наҙгөл.** Башҡайҙарым ғына харап булмаһа ярар ине. Әллә миллиондары-миллиардтары менән сәсрәп китһенме донъяһы?

**Гөлшәкәр.** Сәсрәмәй торһон әле. Дөрөҫөн генә әйткәндә, мин еҙнәнден тапҡырлығына таң ҡалам. Депутат итеп кенә ҡуяһы бар үҙен.

**Наҙгөл.** Ҡалай шәп әйтте еҙнәм: ауыл файҙаһына бөтә эштәр ҙә изге.

**Гөлшәкәр.** Ауыл файҙаһына ла...

**Наҙгөл.** Аҡсурам иҫтәлегенә лә.

**Гөлшәкәр.** Улай тимә. Ул бит иҫән. Хат-хәбәре булмау әле шулай тип әйтергә хоҡуҡ бирмәй, һеңлем.

**Наҙгөл.** Иҫән булһын инде. Ул төн күҙ алдымдан китмәй. Үҙе менән гармунын да алғайны. Ҡуштирәккә ҡарап аҡрын ғына йырланы.

**Музыка. Аҡрын ғына тәҙрә ҡорғаны күтәрелә. Яҡтылыҡ Ҡуштирәккә төшә. Унда ауыл йәштәре шау-гөр килеп йырлай-бейей. Аҙаҡ Ҡуштирәк төбөндә Наҙгөл менән Аҡсура ҡала. Бер аҙ тынлыҡтан һуң, Аҡсура үҙе гармунда уйнап, үҙе йырлай.**

*Яҙҙар килгәс, ҡоштар ҡайта*
*Илкәйҙәрен һағынып.*
*Ҡанаттарын ҡаға-ҡаға,*
*Һайрай улар талпынып.*

*Аҡҡош булаһым килә,*
*Ҡуштирәккә ҡунып ҡына*
*Һине күрәһем килә.*

*Осраштыҡ беҙ һинең менән*
*Ҡуштирәк эргәһендә.*
*"Яратам" тигән һүҙҙәрең*
*Ҡалды шул йөрәгемдә.*

**Наҙгөл.** Ниндәй йыр был, Аҡсура?

**Аҡсура.** Үҙем дә белмәйем... Көй-моң йөрәгемдән үҙенән-үҙе ағыла... Бәлки...

**Наҙгөл.** Айырылышыуҙың көнө-сәғәте еткәнгә, буғай, тип әйтмәксе булдыңмы?!

**Аҡсура.** Эйе, шулай, һөйөклөм!.. Айырылышыу еңел түгел икән.

**Наҙгөл.** Миңә лә ауыр... Өҫтәүенә әллә ниндәй сихырлы көй-моңоң йөрәгемде киҫә... Ҡулымдан килһә, аҡҡош булыр инем дә ошо Ҡуштирәктән осоп, һине оҙата барыр инем.

**Аҡсура** (*Наҙгөлдө ҡосаҡлай*). Ул тиклем дә борсолмайыҡ әле, Наҙгөл. Ике йыл ваҡыт үтер ҙә китер.

**Наҙгөл.** Ә Чечня һуғышына оҙатып ҡуйһалар?

**Аҡсура.** Яҙмыштан уҙмыш юҡ, һөйөклөм.

**Наҙгөл.** Унан иҫән-имен ҡайтыусылар һирәк.

**Аҡсура.** Һин гел генә изге теләктәр телә.

**Наҙгөл.** Теләрмен.

**Аҡсура.** Рәхмәт.

**Наҙгөл.** Ә һин яйы-форсаты сыҡҡан һайын хат яҙып торорға вәғәҙә бир.

**Аҡсура.** Вәғәҙә.

**Наҙгөл.** Рәхмәт.

**Аҡсура.** Һин үҙең дә миңә йыш яҙып тор.

**Наҙгөл.** Көн һайын яҙырмын.

**Аҡсура.** Бик һағынғанда, бик эсең бошҡанда Ҡуштирәк янына кил, йәме!..

**Наҙгөл.** Йә...

**Аҡсура.** Беҙ ошонда таныштыҡ, ошонда яратыша башланыҡ...

**Наҙгөл.** Эйе, ул бөтәһенә лә, бөтәһенә лә шаһит!..

**Аҡсура** (*Ҡуштирәкте ҡосаҡлай*). Ҡуштирәккәй, минең һөйгәнем Наҙгөлдө үҙ ит!.. Дуҫ күр!.. Ят күҙҙәрҙән һаҡла!..

**Наҙгөл.** Хафаланма, йәнкиҫәгем!.. Тыныс күңел менән кит... Ҡуштирәк иҫән-имен булғанда, мин дә иҫән-имен булырмын, һине тоғро көтөп, ҡаршы алырмын... Әйҙә, һаубуллашыр алдынан йәнә гармуныңды һайратып ебәр әле, Аҡсура!

**Аҡсура гармунын өҙҙөрөп уйнай. Тәҙрә ҡорғаны үҙ урынына төшә. Ҡуштирәктән яҡтылыҡ алына. Шул уҡ коттедж. Гөлшәкәр менән Наҙгөл уйға талған. Ишектә өҙлөкһөҙ ҡыңғырау шылтырай. Гөлшәкәр ишекте аса. Хәле бөткән Хажибәк инә. Шатлығын эсенә һыйҙыра алмаған тантаналы ҡиәфәттә диванға ауа.**

**Хажибәк.** Булды...

**Гөлшәкәр.** Хәйерлегә булһын...

**Хажибәк.** Иң яуаплы мәл башлана! Балдыҙ!.. Радио аша өс иғлан бирелде... Хәҙер тапшырасаҡтар.

**Радиореклама.**

**Башҡортостан яңылыҡтары**.

*Ғәрәбстан иленән Нефть һәм газ сығарыу ассоциацияһы башлығы Солтанбәк хандың дүртенсе ҡатыны Сөмбөл ханымдың бишенсе ҡыҙы Наҙгөлхан үҙенең эксперттары менән беҙҙең Өфөгә килеп төштө. Килеүенең маҡсаты — Башҡортостандың ландшафтын тикшереп, спонсорҙар табып, нефть һәм газ үтәреү буйынса “Башҡортостан — Ғәрәбстан” ассоциацияһын төҙөү. Солтанбәк хандың капиталына ҡушылған спонсорҙар үҙ капиталдарын ай эсендә бишләтә ҡайтарасаҡ.*

**Наҙгөл.** Уф, йөрәгем... Кинәт кенә дөпөлдәй башланы. Юҡ, юҡ!.. Мин теләмәйем... Ҡур-ҡам!

**Гөлшәкәр.** Ҡурҡып та, оялып та тораһы юҡ, һеңлем. Был хәйләне тик өсөбөҙ генә беләсәкбеҙ.

**Хажибәк.** Икеләнмә, балдыҙ!

**Гөлшәкәр.** Янында бөгөн депутат итеп һайларлыҡ еҙнәң барын иҫеңдән сығарма. Вәт!..

**Наҙгөл.** Көтмәгәндә генә нишләп әле донъя ҡуптараһығыҙ? Мин хәйлә тигәнегеҙҙе аңламайым да, белмәйем дә.

**Гөлшәкәр.** Еҙнәң аңлата бит инде...Рекламанан һуң мәсьәлә хәл ителәсәк.

**Наҙгөл** (*ҡулдары менән битен ҡаплай*). Юҡ... юҡ... юҡ!

**Гөлшәкәр.** Юҡ тимә!

**Хажибәк.** Аҙаҡ үҙең беҙгә рәхмәт әйтерһең.

**Наҙгөл.** Ошо тиклем дә яҙыҡ эш өсөн рәхмәт әйтергә!

**Гөлшәкәр.** Нишләп яҙыҡ булһын, ти?

**Наҙгөл.** Өҫтөмә гонаһ алырға теләмәйем.

**Хажибәк.** Хи-хи!.. Тәүәккәл эштән ҡурҡа берәү.

**Наҙгөл.** Эйе, ҡурҡам.

**Хажибәк.** Тәүәккәлгә Хоҙай үҙе ярҙамға килер, тигән мәҡәлде ишеткәнең бармы?

**Наҙгөл.** Юҡ.

**Хажибәк.** Әһә, шулайҙыр шул!.. Белергә теләһәң, был донъя — тәүәккәлдәр донъяһы ул, балдыҙҡайым.

**Наҙгөл.** Һм-м!.. Шулаймы?

**Хажибәк**. Шулай.

**Гөлшәкәр.** Уға китһә, был эште атҡарыуҙы беҙ үҙ өҫтөбөҙгә алабыҙ бит.

**Хажибәк.** Апайың дөрөҫ әйтте.

**Наҙгөл.** Улай булһа, тәүәккәлләп ҡарайыҡ.

**Икеһе лә.** Мә-лә-дис!

**Наҙгөл.** Йә, Хоҙайым, ярҙамыңдан айырмасы!.. Тел аҫҡыстары бирсе!..

**Хажибәк.** Хәҙер мин һиңә, балдыҙҡайым, асыҡтан-асыҡ әйтеп бирәм: күп тә үтмәҫ, береһен-береһе уҙҙырып, бай кешеләр ултырған сит ил маркалы машиналар беҙҙең урамға ағылыр... Шунан... шунан улар беҙҙең коттедж тапҡырына етеп туҡталырҙар ҙа,

машиналарынан төшөп, ишегебеҙ төбөндә пәйҙә булырҙар... Аҙаҡ көлкөлө лә, ғибрәтле лә тамаша башланып китеүенә беҙ үҙебеҙ шаһит булаҫаҡбыҙ...

**Хажибәк һөйләп бөтөргә лә өлгөрмәй, тышта машина тауыштары, өҙлөкһөҙ бирелгән гудоктар ишетелә башлай.**

**Хажибәк.** Йә, Хоҙа!.. Йә, Хоҙа!.. Мин иҫәпләгәнгә ҡарағанда ла иртәрәк башланды был тамаша!

**Наҙгөл.** Уф, өнөммө был, төшөммө?!

**Хажибәк.** Өнөң-өнөң!.. Апайың йәш сағында ғәрәп бейеүҙәрен бейей ине. Әйҙә, тиҙ генә унын шул ваҡытта кейеп бейегән костюмдарын кейеп ал.

**Гөлшәкәр.** Хи-хи!.. Һис уйламағанда тағы ла кәрәге сыҡты ул костюмдарҙың!

**Хажибәк.** Телеңә һалынма, костюмдарыңды һандығың төбөнән тиҙерәк алып бир балдыҙға!

**Наҙгөл.** Ә миңә ярамаһа?

**Гөлшәкәр.** Ярар, ярар!.. Әйҙә, тиҙерәк йоҡо бүлмәһенә! (*Кереп китәләр.)*

**Тышта машина гудоктары көслөрәк ишетелә. Хажибәк тә, ни эшләргә белмәйенсә, ары-бире йүгерә.**

**Хажибәк.** Миңә лә әҙерләнергә кәрәк. Түбәтәй бара... Махровой халат та бара. Билде быуып алырға кәрәк. Гөлшәкәрҙең яулығы менән... Әһә, яулыҡ һанына ҡарап бисә һаны билдәләнә, ти. Быуайым әле. Әйҙә, Хажибәктең өс ҡатыны бар икән, тиһендәр. Магнитофонды ла ҡороп ебәрергә кәрәк. Ҡайҙа икән көнсығыштың гүзәл көйҙәре? Әһә, был кассетала, буғай. *(Магнитофонды ебәрә. Унда көнсығыш көйө яңғырай.)* Булды. Ат-мос-фе-ра!

**Тышта тауыш. "Сират минеке!.. Мин башлап инәм!" "Юҡ, сират минеке!" тигән тауыштар ишетелә. Хажибәк ишекте асып ебәрә. Ах-ух килеп, тирҙәрен һөртә-һөртә оҙон буйлы ир килеп инә. Һаҡал-мыйығы ла бар. Күҙлектән. Ҡулында өр-яңы дипломат. Хажибәк баш эйеп, зал ишеген аса. Ир залға үтә. Кейенеп-яһанып Гөлшәкәр ҙә сыға.**

***1-се ҡунаҡтың таҡмағы:***

*Сәхнәһендә Ер йөҙөнөң*
*Фажиғәләр уйнала.*
*Был тормошта бер яңғыҙым,*
*Ҡайҙа бәхет донъяла?*
*Эх, был тормошта бер яңғыҙым,*
*Фажиғәләр уйнала.*

**Гөлшәкәр.** Төклө аяғығыҙ менән хуш киләһегеҙ, хөрмәтле ҡунағыбыҙ!

**Фәрхәт.** Яҡты йөҙөгөҙгә, татлы һүҙҙәрегеҙгә ҙур рәхмәт.

**Хажибәк.** Әссәләмәғәләйкүм вә рәхмәтулла... (*Фәрхәт һыңар ҡулын һуҙа.*) Ике ҡуллап күрешеү фарыз булыр, кем... (*Күрешәләр.*) Йомшаҡтан ултырайыҡ...

**Фәрхәт.** Рәхмәт. Күп ултырттылар инде... йомшаҡҡа...

**Хажибәк.** Шулай булһын, иншалла. Доға ҡылып алайыҡ. (*Амин тоталар.*) Һеҙ бик тә уҡымышлы, бик тә мәртәбәле кешегә оҡшағанһығыҙ. Танышайыҡ. Кем булаһығыҙ?

**Фәрхәт.** Мин Фәрхәт булам... Фәрхәт Әхәтович булам.

**Хажибәк.** Бик мәслихәт. Тимәк, Фәрхәт Әхәт оғло булаһығыҙ?

**Фәрхәт.** Ә һеҙ? Күргән кеүек тә булам...

**Хажибәк** (*терт итеп ҡала*). Булмаҫ. Беҙ Наҙгөлхан менән кисә генә килеп төштөк.

**Фәрхәт.** Наҙгөлхан менән?

**Хажибәк.** Урындағы ландшафтты өйрәнергә килгән Ғәрәбстан акционерҙар ойошмаһының хужаһы Солтанбәк хандың дүртенсе ефетенең бишенсе ҡыҙы Наҙгөлхандың ҡәбергәсә тоғро хеҙмәтсеһе Хажибәк атлы Хоҙай бәндәһе булам. (*Кәрәгенән артыҡ баш эйеп ҡуя.*) Ә һеҙҙең исемегеҙ беҙҙең яҡтарҙа киң таралған. Ғәрәпсә ул "еңеүсе", "зирәк" тигән мәғәнәне аңлата. Шигем юҡ, һеҙ, ысынлап та, зирәк һәм ғалим кешелер.

**Гөлшәкәр.** Былай төпсөнөү килешмәй. Ҡунағыбыҙҙың теле бар, үҙе һөйләр.

**Хажибәк.** Беҙҙә ғәрәп ҡатындары ирҙәр һүҙенә ҡыҫылмай. Тик кенә ултыр, йәме!.. Һеҙҙе, Фәрхәт әфәнде, рәнйеткән булһам, башымды эйеп, мең мәртәбә ғәфү үтенәм.

**Фәрхәт.** Юҡ, киреһенсә, һеҙҙең әйткән һүҙҙәрегеҙ күңелемә хуш килде. Мин, ысынлап та, ғалим кеше.

**Хажибәк.** Ғалим кеше – бай кеше!

**Гөлшәкәр.** Ҡайҙан бай булһын. Был илдә ғалимдар – иң хәйерсе кешеләр.

**Фәрхәт.** Хажибәк әфәнде, тик кенә ултыр, тине бит. Ирҙәр һүҙенә ҡыҫылмағыҙ, йәме!

**Гөлшәкәр.** Йә...

**Фәрхәт**. Минең баймы, әллә ярлымы икәнлегемде Наҙгөлхан менән осрашҡас белерһегеҙ.

**Хажибәк.** Сабыр итәйек.

**Фәрхәт.** Мин, әлбиттә, Наҙгөлхан ханымдың ни өсөн килеүен ишеттем. Радиоалғыстан.

**Хажибәк.** Хуп мәйле.

**Фәрхәт.** Уның тоғро хеҙмәтсеһе булараҡ, һеҙҙән консультация ала аламмы?

**Хажибәк.** Шатланып.

**Фәрхәт.** Ни өсөн Наҙгөлхан ҡунаҡханаға урынлашманы?

**Хажибәк.** Аҡыллы һорау... Тик ошондай уңайлы коттедж булғанда нимәгә ул ҡунаҡхана?

**Фәрхәт.** Эйе, бик тә уңайлы күренә.

**Хажибәк.** Беҙҙең илдең штаб-квартираһы.

**Фәрхәт.** Тимәк, посольство?

**Хажибәк.** Юҡ. Беҙҙең посольство Мәскәүҙә. Ә был коттедж – шул посольствоның филиалы ғына.

**Фәрхәт.** Төпсөнөүем өсөн ғәфү үтенәм. Улайһа, Мәскәү белә инде.

**Хажибәк.** Нимәне?

**Фәрхәт.** Һеҙҙең Ғәрәбстандан килеп төшкәнде?

**Хажибәк.** Аҡыллы һорау... Беҙ бит Мәскәүҙән килеп төштөк. Бөтә посольство оҙатып ҡалды.

**Гөлшәкәр.** Бөтә Мәскәү, тиген!

**Хажибәк.** Бар әле, кухняға инеп ултыр!

**Гөлшәкәр.** Сәй ҡуйырғамы?

**Хажибәк.** Ниндәй сәй, ти инде ул... Ҡәһүә!

*Гөлшәкәр сығып китә.*

**Фәрхәт.** Кем булды һуң был? Ҡыҫылмаған ере юҡ?

**Хажибәк** (*ҡул һелтәгән булып*). Обспер.

***Фәрхәт башына һуккандай тертләп ҡуя.***

**Фәрхәт.** Исемеме ни?

**Хажибәк.** Түгел.

**Фәрхәт**. Әләйһә һуң?

**Хажибәк.** Беҙҙә обслуживающий персонажды шулай ҡыҫҡартып әйтәләр.

**Фәрхәт.** Ә-ә-ә... Мин Робес Пьермы икән тип торам.

**Хажибәк.** Юҡ. Робес Пьер бит ул Мәскәүҙә йәшәй.

**Фәрхәт.** Мәскәүҙә түгел, ә Францияла...

**Хажибәк.** Ах, да!.. Шулай шул, Францияла йәшәй.

**Фәрхәт.** Йәшәгән...

**Хажибәк.** Шулай тим дә инде... йәшәгән. Ә бөгөн уның рухы тере! Башҡа мөһиме тороп ҡалды. Тыңлайым.

**Фәрхәт.** Әйтәйек, спонсор булараҡ, ауылда газ индереү мәшәҡәттәрен үҙ өҫтөмә алдым, ти. Бөтә булған расходты Наҙгөлхан туташ 4 ай эсендә 500 проценты менән кире ҡайтарҙы, ти. Радиорекламала әйтелгән шарт буйынса. Шул 500 процентты мин Ғәрәбстанға барып, Акционерҙар ойошмаһының хужаһы, йәғни Наҙгөлхан ханымдың атаһы Солтанбәк хандан ала аламмы?

**Хажибәк.** Ала алаһығыҙ.

**Фәрхәт.** Шуны мисәт менән раҫлаусы поручениеғыҙҙы күрһәтегеҙ!

**Хажибәк.** Аҡыллы һорау... Бик тә аҡыллы. (*Ни әйтергә белмәйенсә тора.)*

***Ишектә ҡыңғырау*.**

**Гөлшәкәр** *(кухнянан).* Асайыммы?

**Хажибәк.** Ас! (*Фәрхәткә*.) Ә мин һеҙ һораған поручениены алып сығайым. (*Эске бүлмәгә инеп китә.*)

***Тышҡы ишектән ҡыҫҡа буйлы Ҡәнзәфәр инә*.**

**2-се ҡунаҡтың таҡмағы***:*

*Аҡ елкәнле карабым*
*Йөҙә икән ҡайҙарҙа?*
*Ғүмерлек йөрәк яраһы:*
*Ҡайҙан бәхет яуларға?*

*Эх, шампань шарабы,*
*Ҡайҙа йөҙә карабым?*

**Ҡәнзәфәр.** Реклама буйынса килдем.

**Гөлшәкәр.** Рәхмәт. Залға рәхим итегеҙ.

**Ҡәнзәфәр.** Рәхмәт. (*Залға үтә. Фәрхәтте таный.)* Бәй-бәй!.. Кемде күрәм мин?! Әбү-бә-кер... Һин бит был!

**Фәрхәт** *(кеҫәһенән паспорт сығарып, ҡулына бирмәй генә).* Таныш булайыҡ. “Икс” акционерҙар ойошмаһының финанс бүлеге начальнигы Фәрхәт Әхәтович Алданов булам.

**Ҡәнзәфәр.** Үәт үҫкәнһең, әй... Төшөмлө урынға урынлашҡанһың икән. Ә жулик Әбүбәкерҙе икенсе йыл инде милиция эҙләй. Былдай паспорт менән табалмайҙар, әлбиттә. Етмәһә һаҡалмыйыҡ та үҫтереп ебәргәнһең. Ә мин ахмаҡ, ҡоймаларға йәбештерелгән фоторәсемендә, төрмәләш дуҫ булараҡ, аҙым һайын йолҡоп йөрөйөм. (*Кеҫәһенән алып, йыртылған милиция плакатын күрһәтә.)* Күрәһеңме, нишләп әле мин, һинең арҡанда каталашкала ятып та, “ләм-мим” йөрөргә тейеш? *(Сығып китергә ниәтләгәндә Фәрхәт тегенең сикәһенә пистолетын тоҫҡай).*

**Фәрхәт.** Ҡуҙғалма! Урыныңа баҫ!.. Эйе, мин – Әбүбәкер! Ул заманда каталашкала аунаһам да, нишләп әле бөгөнгө Әбүбәкер ожмах ләззәтен татымаҫҡа тейеш?

**Ҡәнзәфәр.** Пистолетыңды ал... Барыбер атмайһың. Әйт, күпме түләйһең?

**Фәрхәт.** Ун дана лимон!

**Ҡәнзәфәр.** Аҙ. Уны милиция ла бирә.

**Фәрхәт.** Бөгөнгө план барып сыҡһа, кеҫәмә трилдәр ҡойоласаҡ. Шунан өлөш сығарырмын.

**Ҡәнзәфәр.** Өлөш алмайым. Тейерен әйт!

**Фәрхәт.** Уртаҡ!

**Ҡәнзәфәр**. Риза.

**Фәрхәт**. Шарты бар.

**Ҡәнзәфәр**. Әйт.

**Фәрхәт.** Акционерҙар ойошмаһынан булараҡ, һинең ярҙамың кәрәк.

**Ҡәнзәфәр.** Бир “биш”те! *(Ҡул ҡыҫышалар.*)

***Ҡыңғырау.***

**Хажибәк** (*эске бүлмәнән сығып*). Оһо, һеҙ икәү?

**Икеһе лә** (*йылмайып).* Икәү!

**Хажибәк** (*тышҡы ишекте күрһәтеп).* Былыһы өсөнсө буламы?

**Икеһе лә**. Өсөнсө...

**Хажибәк.** Хуп мәйле (*тышҡы ишеккә атлай).* Инегеҙ... (*Амнист исемле йыуан ир инә.)*

3-**сө ҡунаҡтың таҡмағы:**

*Үткән ғүмерҙәремде*
*Һыҙғылап ташлар инем.*
*Яңынан сит илдәрҙә*
*Тормошто башлар инем.*
*Эх, һыҙғылап ташлар инем,*
*Эх, яңынан башлар инем!*

**Амнист**. Һаумыһығыҙ?!

**Хажибәк**. Әссәләмәғәләйкүм вә рәхмәтулла...

**Амнист**. Реклама буйынса дөрөҫ килдемме?

**Хажибәк**. Залға үтегеҙ.

***Залға инәләр.***

**Хажибәк**. Алыҫ юлдан килеү сәбәпле, Ғәрәбстан акционерҙар ойошмаһының хужаһы Солтанбәк хандың бишенсе ҡыҙы Наҙгөлхан туташ ял итә. Сирек сәғәттән уянасаҡ һәм өсөгөҙҙө лә ҡабул итәсәк. “Юл ғазабы – гүр ғазабы” тиҙәр беҙҙә.

**Өсөһө лә**. Беҙҙә лә.

**Хажибәк**. Ә мин һораған поручениены әҙерләп сығарайым.

***Эске бүлмәгә инә.***

**Амнист**. Сирек сәғәт күпме була ул?

**Ҡәнзәфәр**. Ә сирек араҡының күпме икәнен беләһегеҙме?

**Амнист**. Өс литр була.

**Ҡәнзәфәр**. Ҡара әле, белә...

**Фәрхәт**. Ә был ун биш минут була.

**Амнист** (*Ҡәнзәфәргә оҙаҡ ҡына ҡарап*). Һин Зөфәр түгелме?

**Ҡәнзәфәр** (*терт итеп ҡала*). Юҡты һөйләмә! Мин – Ҡәнзәфәр!

**Амнист**. Юҡ! Зөфәр! Миндә дүрт ай эшләп, ойошманың мисәтен урлап ҡасҡан Зөфәр. Һаумы, Зөфәр!

**Ҡәнзәфәр**. Һау түгел.

**Амнист**. Юҡ, һин һау. Шап-шаҡтай күренәһең. Шатмын!.. Миндә эшләгәндә һаҡал-мыйыҡлы инең. Ҡырып ташлағанһың икән. Бик һәйбәт иткәнһең. Нинә мисәтте һорамай икән, тип аптырама, үҙемде лә ҡыуҙылар.

**Ҡәнзәфәр**. Шәп иткәндәр.

**Амнист** (*Фәрхәткә*). Һеҙҙең менән дә таныш булайыҡ. Мин “Игрек” акционерҙар ойошмаһының элекке президенты Амнист Максович Аҡбаев булам.

**Фәрхәт**. Исем-фамилияғыҙҙың мәғәнәһен аңламайым.

**Амнист**. Атайым, амнистияға эләгеп төрмәнән сыҡҡас, миңә Амнист тип исем ҡушҡан.

**Фәрхәт**. Атайың керәшен инеме?

**Амнист**. Юҡ. Атайым Маркс исемле ине. Тик ул “р” хәрефен әйтә алманы. Исемең нисек тип һорағандарға “Макс” тип яуап бирә торғайны. Шуға күрә лә мин Максович булам. Ул замандарҙа “Вил”, “Ким”, хатта “Энгельс” тигән исемдәр ҙә күп булған.

**Фәрхәт**. Мине фамилияғыҙ ҡыҙыҡһындыра.

**Амнист**.Әйттем бит инде – Аҡбаев.

**Фәрхәт**. Эт фамилияһы икән.

**Амнист**. Эттең фамилияһы булмай.

**Фәрхәт**. Була! Исем-фамилияғыҙға ҡарап, һеҙҙең кем икәнегеҙҙе белдем. (*Кеҫәһенән әлеге пистолетын сығарып.*) Ру-ки!!!

**Амнист**. Һин нимә?!

**Ҡәнзәфәр**. Тауыш сығармаҫҡа!

**Амнист** (*ҡото осоп*). Ән-кәй!!!

**Фәрхәт**. Әнкәйеңде теге донъяла иҫкә төшөрөрһөң. Миңә килдең?

**Амнист**. Минме ни?

**Ҡәнзәфәр**. Һин!

**Амнист** (*ҡаушап*). Оноттом бит әле... Ә-ә-ә, эйе, эйе... Тик башта был нәмәҫтәкәйҙе, зинһар, алығыҙ инде... Фу, һушым юғала яҙҙы.

**Фәрхәт**. Һөйлә!

**Амнист**. Реклама буйынса инде... Теге ни... Спонсор...

**Ҡәнзәфәр**. Дауам ит!..

**Амнист**. Сит илгә тайырға ине бит әле...

**Фәрхәт**. Быныһына инде ышанабыҙ. (*Пистолетын һалып ҡуя.*)

**Ҡәнзәфәр** (*үтә лә итәғәтле булған булып*). Ултырығыҙ, креслонан... Хөрмәтле вә ғиззәтле Амнист Максович, әйтегеҙ әле, сит илгә нисек тайырға уйлайығыҙ?

**Амнист.** Поручение буйынса контракт төҙөп, аҡсаһын Ғәрәбстандан барып алмаҡсы инем... Әгәр рөхсәт итһәгеҙ.

**Фәрхәт** (*йомшаҡ*). Итәбеҙ, миңә итмәйек, ти.

**Ҡәнзәфәр** (*йомшаҡ*). Дүрт яғың ҡибла...

**Фәрхәт** (*дипломатын асып күрһәтә*). Күрәһеңме?

**Амнист.** Һуҡыр түгел дә мин...

**Фәрхәт.** Эсендә бер нәмә лә юҡ. Буп-буш! Ноль... Хәҙер үҙеңдекен күрһәт.

**Амнист.** Минеке лә буп-буш!.. Ноль...

**Фәрхәт.** Асып күрһәт!

**Амнист дипломатын аса**.

**Ҡәнзәфәр**. О-һо-һо... Долларҙар...

**Фәрхәт.** Шулайҙыр тип уйлағайным да...

**Амнист**. Хәҙер дипломаттарҙы алыштырабыҙ. Бына шулай... Тыныслан, ҡаушама... (*Алыштыралар.*)

**Ҡәнзәфәр**. Һуштан яҙа күрмә тағы.

**Фәрхәт**. Беҙҙең эшкә ҡушылаһың. Йәғни, кампаньон булаһың.

**Ҡәнзәфәр**. Ҡушҡанды ғына эшләйһең. Фәҡәт шулай ғына сит илгә тая алаһың.

**Амнист** (*ирекһеҙҙән йылмайып*). Рәхмәт инде, рәхмәт...

**Фәрхәт**. Ә хәҙер йырлашып ултырған булайыҡ. Араларында конфликт бар икән, тип уйламаһындар.

**Амнист**. Минең йырлағаным юҡ.

**Ҡәнзәфәр**. Ҡушылырһың, кампаньон бит.

**Йыр, таҡмаҡ:**

*Беҙ килдек һеҙгә*
*Спонсор булып.*
*Долларҙар беҙҙә*
*Яталар тулып.*

*Контракт төҙөйбөҙ*
*Кампаньон булырға.*
*Ҡулға-ҡул тотоноп*
*Бергә байырға.*

*Бәхет үҙе килде*
*Ғәрәп иленән,*
*Беҙҙе юллап*
*Донъя сигенән.*

**Эске ишектән Хажибәк менән Гөлшәкәр сыға. Улар ишек шаршауҙарын тантаналы рәүештә асып ебәрәләр**.

**Хажибәк**. Ғәрәбстан акционерҙар ойошмаһының хужаһы Солтанбәк ибне Исмәғил оғлоноң бишенсе ҡыҙы, газ индереү буйынса урындағы ландшафтты тикшереп, консультация бирергә килеүсе Наҙгөлхан туташ!

**Гөлшәкәр.** Наҙгөлхан туташ ҡәҙерле вә хөрмәтле ҡунаҡтарға үҙенең көнсығыш бейеүен бүләк итә!

**Музыка. Наҙгөл бейей.**

**Шаршау.**

**Икенсе шаршау**

**Шул уҡ коттедждың ҙур залы. Шаршау асылғанда, бейеү көйөнөң финалы ишетелә. Наҙгөл бейеүен тамамлай ҙа, баш эйә-эйә, бүлмәгә инеп китә. Ҡарап ултырған "ҡунаҡтар" ни эшләргә белмәй, телһеҙ ҡала.**

**Хажибәк.** Берәй һүҙ әйтә алаһығыҙмы?

**Фәрхәт.** Мин телһеҙ ҡалдым... Ишаралап-ымлап ҡына әйтә алам... (*Ҡулдары менән ишаралар яһай, ике баш бармағын юғары сөйә.)*

**Хажибәк** *(Ҡәнзәфәргә)*. Ә һеҙ?

**Ҡәнзәфәр**. Мин... Хоҙай Тәғәлә миңә, сейә һуты һымаҡ бына-бына тамам тип торған алһыу ирендәренән һурып үп тә был фани донъянан кит, тиһә, мин шатланып риза булыр инем... (*Фәрхәткә.)* Бир әле теге пистолетыңды!.. Һуңынан бирермен...

**Фәрхәт**. Мин пистолет йөрөтмәйем!

**Ҡәнзәфәр**. Ә бая?

**Фәрхәт**. Баяғы бит ул уйынсыҡ ине, йәғни детский пистолет...

**Хажибәк** (*Амнистҡа).* Һеҙ, ғали йәнәптәре, ни әйтерһегеҙ?

**Ул да бер һүҙ әйтә алмай. Өнө сыҡмай. Фәрхәттәге дипломатын күрһәтеп, "ундағы долларҙар уныҡы" тигәнде аңлатып ишаралай.**

**Гөлшәкәр**. Ай-вай-вай... Бөтәһенең дә һушын алды бит был Наҙгөлхан туташ. Шулай булһын ине ул!..

**Хажибәк** (*Гөлшәкәргә*). Кейенергә ярҙам ит...

**Ҡәнзәфәр**. Ә был кем була инде?

**Хажибәк.** Обспер була.

**Фәрхәт** (*дәртләнеп китә*). Робес Пьер?

**Хажибәк.** Обслуживающий персонаж. (*Гөлшәкәргә.*) Ҡолағың тондомо әллә?.. Бар тиҙәр бит һиңә! (*Гөлшәкәр баш эйеп, эске бүлмәгә үтә.*) Ғәфү итегеҙ, беҙҙә ҡатын-ҡыҙҙарҙы ҡамсылап ҡына йөрөтәләр.

**Фәрхәт.** Кстати, тигәндәй, һеҙҙә ҡатын-ҡыҙ мәсьәләһе нисек хәл ителә?

**Хажибәк.** Бөтә мосолман илдәрендәге кеүек инде...

**Фәрхәт.** Йәғни?

**Хажибәк.** Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәлиәссәләм дүрт ҡатынға өйләнгән. Тәүгеһе Хәҙисә булған. Шуға күрә лә, мосолман өммәте дүрт, тиҙәр беҙҙә. Күрәһегеҙме, билемдә өс яулыҡ. Тимәк, хәләл ефеттәрем өсәү. Өҫтәп тағы ла берҙе ала алам әле.

**Амнист.** Өҫ... өҫ... тәп? Ҡалғандарын айырыпмы?

**Хажибәк.** Беҙҙә айырыу юҡ. Хәлендән килһә.

**Амнист.** Көскә хәл керҙе...

**Ҡәнзәфәр.** Әйтәйек, кстати, тигәндәй, мин ҡатынымды эйәртеп Ғәрәбстанға килеп төштөм, ти...

**Хажибәк.** Хуп мәйле...

**Ҡәнзәфәр.** Тимәк, ҡатыным өҫтөнә Наҙгөлхан туташтың ҡулын һорарға хаҡым бар инде?

**Бөтәһе лә.** Ә-ә?!

**Хажибәк** (*эске ишеккә ҡарап*). Сығалар. Һуңынан һөйләшербеҙ.

**Бөтәһе лә**. Хуп мәйле.

**Наҙгөл менән Гөлшәкәр сыға.**

**Наҙгөл** (*баш эйеп*). Әссәләмәғәләйкүм...

**Бөтәһе лә.** Вәғәләйкүмәссәләм...

**Наҙгөл.** Беҙҙең ассоциацияның управляющийы, йәғни минең тоғро хеҙмәтсем Хажибәк ибне Исмәғил хәлде төшөндөргәндер, тип уйлайым.

**Хажибәк.** Төшөндөрҙөм.

**Наҙгөл.** Агрогазпром заказы буйынса, был өлкәлә берҙән-бер белгес булараҡ, урындағы ландшафтты тикшереп ярҙам итергә, йәғни консультация бирергә тип килдем мин. Башлап тикшереләсәк Ҡуштирәк ауылы Күгиҙел

башы районы үҙәгенән ун дүрт саҡрым ерҙә урынлашҡан. Исеме Ҡуштирәк булһа ла, ни бары бер Ҡуштирәк кенә тороп ҡалған. Уныһы ла газ үтәсәк урында. Газ торбаларын ете саҡрымға оҙонайтып, ауылды урап үтергә йә үҫеп ултырған Ҡуштирәкте ҡырҡып, тураға үткәрергә. Ауыл ҡарттары Ҡуштирәкте киҫеүгә ҡаршы. Бер генә юл — газ торбаларын уратып үткәрергә. Быйың өсөн аҡса кәрәк. Ярҙам ҡулығыҙҙы һуҙып килеүегеҙгә олуғ рәхмәттәремде белдереп, һүҙҙе һеҙгә бирәм. Ниндәй тәҡдимдәрегеҙ бар?

**Фәрхәт.** "Радио-өс" аша һеҙҙең рекламаны ишетеү менән, беҙ һеҙгә ашыҡтыҡ. Өсөбөҙ ҙә бер ойошманан. Беҙҙең хужабыҙ, хөрмәтле президентыбыҙ Амнист Максович Аҡбаев ҡаршығыҙҙа ултыра. Һүҙгә һаран булһа ла, аҡсаға йомарт. Бөтә финанс эштәрен Һеҙҙең тоғро хеҙмәтсегеҙ аша башҡарып, контракт буйынса тейешле аҡсаны Ғәрәбстанға барып ул алып ҡайтыр. Шулаймы, Амнист Максович?

**Амнист.** Загранпаспорт...

**Наҙгөл.** Ул хаҡта хеҙмәтсем менән һөйләшерһегеҙ. Һеҙҙең исемгә виза ебәрер.

**Амнист.** Хуп...

**Наҙгөл** (*Ҡәнзәфәргә*). Һеҙҙе лә ишетке килә.

**Ҡәнзәфәр.** Әйтәһе тәҡдимде Әбүбәкер...

**Фәрхәт.** Нимә?

**Ҡәнзәфәр.** Ғәфү... Яңы ғына эшләй башлау сәбәпле, исемен бутайым... Робес Пьер бит әле?

**Фәрхәт.** Һаташаһың, буғай.

**Ҡәнзәфәр.** Ғәфү итегеҙ, Наҙгөлхан туташ... Һеҙҙең алда мин генә түгел, ә донъялағы бөтә йән эйәһе, бөтә тереклек һаташыр. Миңә һүҙ әйтеүе ҡыйын. Күҙҙәрегеҙгә ҡараһам — яңаҡтарым тартыша. Бына бит... бына... (*Яңаҡтарын ҡулы менән төҙәтеп.*) Бөтә мәшәҡәттәр уның өҫтөнә төшә инде.

**Хажибәк.** Хуп мәйле.

**Амнист.** Долларҙар... (*Фәрхәт ҡулындағы дипломатҡа ҡарай.*)

**Фәрхәт.** Эйе, ойошмабыҙҙың доллары бишләтә артып ҡайтасаҡ.

**Наҙгөл** (*күңелһеҙ генә ултырған Амнистҡа ҡарап).* Һеҙ ҡәнәғәт түгелме әллә?

**Фәрхәт.** Бик тә ҡәнәғәт ул... Ҡәнәғәт!

**Наҙгөл.** Шатлыҡ ялҡындарын күрмәйем...

**Ҡәнзәфәр**. Эстән шатлана ул, эстән! Дөрөҫ әйттемме, Амнист Максович? Амнист. Долларҙар... Дор-р-р... (*Тирен һөртөп ҡуя.*)

**Фәрхәт.** Иғтибар итмәгеҙ уға... Ул юлдан ғына... Кисә кис кенә Италиянан ҡайтып төштө.

**Наҙгөл.** Италиянан?!

**Ҡәнзәфәр.** Эйе!.. Шәхси самолеты менән барып, Ласкал опера театрында "Севильский цирюльник"ты ҡарап ҡайтты.

*Фигаро здесь,*
*Фигаро там.*
*Фигаро, Фигаро,*
*Фи-и-га-ро!..*

**Фәрхәт.** Шәп опера. Петр Ильич Чайковский яҙған.

**Ҡәнзәфәр.** Беҙҙә шулай инде: бөтә бөйөк кешеләр ҙә Ильичҡа бөтә, Леонид Ильич... Владимир Ильич...

**Наҙгөл.** Тик ул операны Россини яҙған.

**Фәрхәт.** Оһо! Һеҙ бөтә өлкәлә лә, хатта опера өлкәһендә лә ҙур белгес. Афарин! Амнист. Аф...

**Ҡәнзәфәр.** Афарин! Һеҙ аҡыллы, Наҙгөл туташ, гүзәл!

**Фәрхәт.** Наҙлыгөл туташ!.. Һеҙ ғәрәп халҡының гүзәл һылыуы — Ширин! Теләһәгеҙ ни эшләтегеҙ, һеҙҙең алдығыҙҙа — Фәрхәт! Мин һеҙҙең ихтыярҙа!

**Ҡәнзәфәр.** "Батып үл!" тиһәгеҙ, һыуға батам. Яныпү үл!" тиһәгеҙ, утҡа инәм. Ни ҡушһағыҙ — шуны эшләйем. Мин дә һеҙҙең ихтыярҙа!

**Наҙгөл** (*Амнистҡа*). Ә һеҙ?

**Амнист.** Ә мин... Ғүмерем буйы алдығыҙҙа бейермен!

**Хәрәкәттәре килешмәһә лә, көнсығыш стилендә бейей башлай. Ҡалғандар ҙа уға ҡушыла. Музыка. Күмәк бейеү.**

**Наҙгөл.** Хәҙер ышандым. (*Ҡулын күтәреп туҡтата.*) Йәнем-тәнем менән ышандым!.. Һеҙ минең өсөн газ

торбаларын ете сағрым ғына түгел, ә етмеш сағрымға үткәрергә лә риза!

**Бөтәһе лә.** Тау ақтар, тиһәгеҙ – тау ақтарырға, диңгеҙ күсер, тиһәгеҙ – диңгеҙ күсерергә ризабыҙ!..(*Берәм-берәм Наҙгөлдөң алдына барып теҙләнәләр.*)

**Наҙгөл.** Берегеҙҙән икенсегеҙ шәберәк рыцарҙар икәнһегеҙ!.. Рәхмәт!..

**Бөтәһе лә.** Беҙгә ышанғанығыҙ, беҙҙе ошолай күктәргә сөйөп ололағанығыҙ өсөн үҙегеҙгә рәхмәт!..

**Гөлшәкәр** (*кухнянан сығып*). Ҡәһүә әҙер, хөрмәтле ҡунаҡтар!

**Хажибәк.** Обспер! Ҡунаҡтарҙы хөрмәт ит! Ә беҙгә Ҡуштирәк ауылына барып, әҙерлек сараларын күрергә кәрәк. Йә Ҡуштирәкте киҫеп ташларҙар.

**Наҙгөл.** “Мерседес”ты ҡабыҙа тор!

**Хажибәк.** Хуп мәйле. (*Сығып китә.*)

**Наҙгөл** (*өсөһөнә лә*). Тимерҙе ҡыҙыуында һуғыу мәслихәт, тигәндәй, һеҙҙе, ҡәҙерлеләрем, Ҡуштирәктә көтәбеҙ!

**Өсөһө лә.** Хуп мәйле!

**Гөлшәкәр.** Ашыҡмайыҡ әле, ҡунаҡтар менән бергә һөйләшә-һөйләшә ҡәһүә эсәйек...

**Фәрхәт**. Мин дә, Наҙгөл туташ, ашыҡмауығыҙҙы үтенеп һорайым. Һеҙҙең менән бергә булған һәр минут – беҙҙең өсөн үҙе бер ғүмер!

**Ҡәнзәфәр.** Мин дә һеҙҙең ашыҡмауығыҙҙы үтенәм!

**Наҙгөл.** Юҡ, ашығырға кәрәк. Йә башҡа ойошмаларҙан да спонсорҙар килә башлар.

**Фәрхәт.** Ә, эйе... Бик мөмкин!.. Бик мөмкин!.. Ашығыу хәйерле булыр...

**Ҡәнзәфәр.** Беҙ башланыҡ, беҙ тамамлап та ҡуйырға тейешбеҙ!

**Наҙгөл.** Һеҙҙе, ҡәҙерлеләрем, Ҡуштирәктә көтәм. Кәрәкле ҡағыҙҙарығыҙҙы, “Икс” һәм “Игрек” акционерҙар ойошмаһының герблы түңәрәк мисәтен, ә иң мөһиме, паспорттарығыҙҙы онотоп ҡалдырмағыҙ.

**Өсөһө лә.** Бөтә документтар ҙа үҙебеҙ менән!

**Наҙгөл.** Хуп мәйле...

**Наҙгөл сығып китә. Гөлшәкәр ҡунаҡтарҙы кухня яғына саҡыра.**

**Гөлшәкәр.** Ҡәһүә әҙер. Рәхим итегеҙ, хөрмәтле ҡунаҡтар!

**Амнист.** Артығыраҡ бейеп ташланым буғай, тамағым кипте.

**Фәрхәт** (*Амнистҡа*). Барығыҙ, һыуһынығыҙҙы ҡандыра тороғоҙ!

**Амнист.** Шулай итәйем әле...

**Амнист менән Гөлшәкәр кухняға инеп китә.**

**Ҡәнзәфәр.** Мин дә...

**Фәрхәт** (*Ҡәнзәфәргә*). Туҡ-та!.. Ишекте яп!.. Бына шулай... Ә хәҙер мине тыңла.

**Ҡәнзәфәр.** Тыңлайым.

**Фәрхәт.** Миңә тиһәң, Ҡуштирәк төбө-тамыры менән сәнселеп китмәйме!.. Һуҡыр тингә лә кәрәге юҡ. Төшөнәһеңме?

**Ҡәнзәфәр**. Төшөнмәнем.

**Фәрхәт**. Улайһа төшөндөрәм. Дипломат эсендәге долларҙарҙы күрҙеңме?

**Ҡәнзәфәр**. Күрҙем...

**Фәрхәт.** Ҡулға төшөрөргә кәрәк.

**Ҡәнзәфәр.** Төштө бит инде.

**Фәрхәт**. Төшмәне әле. Ул һине таныны. Ул-был була ҡалһа, икебеҙҙе лә һатасаҡ. Шуға күрә лә Ҡуштирәккә барып төшөү менән, долларҙарҙы Агрогазпром иҫәбенә күсерәбеҙ, тигән булып, дипломат хужаһын үҙ машинабыҙға алабыҙ. Юлда барғанда уңайлы ғына урында “бисмиллаһи аллаһы әкбәр” тип эшен бөтөрәбеҙ. Барыбер сит илгә тайырға йөрөй. Тәки тайған икән, тиерҙәр. Инде лә төшөнмәнеңме?

**Ҡәнзәфәр**. Бына хәҙер төшөндөм... Тимәк, уның “эшен бөтөргәс”, сират минекеме?

**Фәрхәт**. Һин нимә?! Мине, каталашкала нисәмә йыл бергә ҡосаҡлашып ятҡан йән дуҫыңды, шул тиклем дә намыҫын юғалтҡан, тип уйлайһыңмы?! Мине мыҫҡыл итәһенме?.. (*Күҙ йәшен һөрткән була.*)

**Ҡәнзәфәр**. Әбү-бә-кер!..

**Фәрхәт** (*үпкәләгән булып*). Күҙемә күренмә!

**Ҡәнзәфәр**. Робес Пьер!.. Ғәфү ит... (*Ҡосағын йәйеп.*) Кил, ҡосағыма ин!

**Фәрхәт.** Зөфәр!!!

**Ҡосаҡлашалар.**

**Кухнянан Амнист сыға.**

**Ҡәнзәфәр**. Амнист Максович!!!

**Өсөһө лә ҡосаҡлаша. Кухнянан Гөлшәкәр сыға.**

**Гөлшәкәр**. Башҡа ойошмаларҙан спонсорҙар килгәнсе Ҡуштирәккә барып етәйек!

**Ҡәнзәфәр**. Эйе шул... “Бисмиллаһи аллаһы әкбәр” тип эшен бөтөрөп ҡуйыйыҡ!

**Өсөһө лә**. Хуп мәйле! (*Музыка. Машиналар ҡуҙғалып китеүе ишетелеп ҡала.*)

**Ҡыҫҡа ваҡытҡа ғына сәхнә ҡараңғыланып ала. Прожектор уттары Ҡуштирәкте яҡтырта. Ҡуштирәк эргәһендә ауыл хакимиәте башлығы Зәйнәп ханым менән Аҡсура.**

**Зәйнәп**. Аҡ-су-ра?.. Был һинме, Аҡсура?

**Аҡсура**. Мин.

**Зәйнәп**. Күҙҙәремә ышанмайым... Бик оҙаҡ хат-хәбәрең булманы бит... Борсоуға төштөк.

**Аҡсура**. Яҙа алманым.

**Зәйнәп**. Бер-бер хәл булдымы?

**Аҡсура**. Эйе.

**Зәйнәп**. Ниндәй?

**Аҡсура**. Чечендар беҙҙе тотош взводыбыҙ менән әсирлеккә алды.

**Зәйнәп**. Бына нисек...

**Аҡсура**. Ярай, иҫән ҡалдым. Чечендар, мосолман егете икәнемде белгәс, мәрхәмәтлек күрһәтте... Ә унан, ни, гармунымда өҙҙөрөп үҙебеҙҙең башҡорт көйҙәрен уйнап, уларҙың күңелдәрен таптым. Ҡуштирәккә бағышланған көйөмдө лә яраттылар...

**Зәйнәп**. Һай, Аҡсура туғаным, һөйөндөрҙөң һин мине былай булғас. Кил әле яныма, бер ҡыҫып ҡосаҡлайым үҙеңде!.. (*Ҡосаҡлай.*)

**Аҡсура** (*ҡапыл һиҫкәнә*). Тороп тор әле, Зәйнәп апай!.. Ни күрәм!.. Унда ниндәй торбалар ята?.. Ә был ниндәй соҡор?.. Әллә ауылыбыҙҙы күсерергә булдығыҙмы?..

**Зәйнәп**. Ауыл үҙ урынында, ә үҙгәрештәр бара... Ана ҡара, һин хеҙмәткә киткәндән һуң күпме матур-матур йорттар үҫеп сыҡты...

**Аҡсура**. Уратмай ғына тураһын әйт, Зәйнәп апай! Ҡуштирәкте нимә эшләтәһегеҙ?

**Зәйнәп**. Үҙең күреп тораһың, Ҡуштирәк газ магистраленә тура килде... Һаҡлап алып ҡалырға әмәле табылырмы, әллә...

**Аҡсура**. Ҡасан киҫәләр?

**Зәйнәп**. Бөгөн... Хәҙер...

**Аҡсура**. Мин Ҡуштирәкте бирмәйем!.. Ҡосаҡлап алам да бер кемде лә яҡын ебәрмәйем. Киҫәләр икән, Ҡуштирәккә ҡушып мине лә киҫһендәр. Бына шулай! (*Гармунын ҡулына ала. Уйнай. Үҙ көйөнә үҙе ҡушылып йырлай.)*

*Осраштыҡ беҙ һинең менән*
*Ҡуштирәк эргәһендә.*
*“Яратам” тигән һүҙҙәрең*
*Ҡалды шул йөрәгемдә.*

*Аҡҡош булаһым килә,*
*Ҡуштирәгем эргәһендә*
*Һине көтәһем килә.*

**Йырҙың аҙаҡҡы куплетына Наҙгөл ҡушыла. Уның йыры алыҫтан ишетелә әле. Аҡсура туҡталып ҡала. Тыңлай.**

*Мөлдөрәмә шатлығыма*
*Дошмандар үрелмәһен.*
*Һиңә булған мөхәббәтем*
*Һүнмәһен, һүрелмәһен!*

*Аҡҡош булаһым килә,*
*Ҡуштирәккә ҡунып ҡына*
*Һине күрәһем килә.*

**Аҡсура**. Яңылыш ишетәмме?

**Зәйнәп**. Наҙгөл ҡайтып килә... Эйе, Наҙгөл!.. Ҡаршы ал!

***Сәхнәгә Наҙгөл йүгереп инә. Уның артынан — Гөлшәкәр менән Хажибәк.***

**Аҡсура**. Наҙ-гөл!

**Наҙгөл** (*уның ҡосағына ташлана*). Аҡсурам, һинме?!

**Аҡсура**. Мин.

**Наҙгөл**. Ышанғым килмәй!

**Аҡсура**. Минең дә ышанғым килмәй!

**Наҙгөл**. Һине, ҡәҙерлем, көн дә тиерлек төштәремдә күрҙем... Бәлки, әле лә төш кенәлер?..

**Аҡсура**. Мин, әсирлектә булыуым сәбәпле, хат яҙа алманым. Ғәфү үтенәм!..

**Наҙгөл**. Әләйһә, бөгөн — күк ҡабағы

асылған көндөр. Бөтәбеҙгә лә, шул иҫәптән Ҡуштирәгебеҙгә лә шатлыҡбәхет бер юлы килә.

**Зәйнәп**. Әллә...

**Наҙгөл**. Еҙнәм менән апайыма рәхмәт... Ҡаршы алығыҙ үҙҙәрен!

**Берәм-берәм күрешеп сығалар**.

**Гөлшәкәр**. Һау ғынамы, Аҡсура? Иҫән-һау ҡайтыуың менән.

**Аҡсура**. Һаумыһығыҙ.

**Гөлшәкәр**. Әй, ошоно! “Һаумыһығыҙ” тимәле!.. “Һаумы” тиң!

**Хажибәк**. Бәйләнмә һалдатҡа!.. Ул бит армияға тиклем “һаумы” тине. Ә йөрөп ҡайтҡас инде “һаумыһығыҙ” була! Йә, мосолмандарса ҡул бирешеп иҫәнләшәйек... Һаумы, Аҡсура!

**Аҡсура**. Һаумы, Хажибәк ағай... Хеҙмәткә киткәндә иң һуңғы булып оҙатҡайнығыҙ, ә хәҙер...

**Хажибәк**. Көтмәгәндә бында пәйҙә булдым. Тормош ҡыҙыҡ хәлдәрҙән тора икән ул...

**Алыҫтан яҡынайып килгән машина тауышы ишетелә. Бөтәһенең дә иғтибары шул яҡҡа йүнәлә.**

**Зәйнәп**. Газ индереүселәр килә.

**Гөлшәкәр**. Юҡ инде. Былар – беҙҙең спонсорҙар.

**Зәйнәп**. Нисек?

**Наҙгөл**. Унышын инде еҙнәм әйтер.

**Хажибәк**. Һм-м!! Әй-тәм!.. Спонсорлыҡҡа ышыҡланып, алдау юлы менән халыҡ аҡсаһын талаусы енәйәтселәр төркөмө. Беҙ уларҙы йылдан артыҡ эҙләнек. Наҙгөл арҡаһында үҙҙәре үк ҡулға килеп ҡаптылар.

**Зәйнәп**. Бөтәһе ләме?

**Хажибәк**. Бөтәһе лә.

**Гөлшәкәр**. Ә мин уларға ышанғайным.

**Хажибәк**. Мин ҡушҡас, ышанмай хәлең юҡ ине.

**Машина килеп туҡтай. Өсөһө лә, йылмайышып, Ҡуштирәк янына киләләр.**

**Фәрхәт**. Физкульт!..

**Ҡәнзәфәр.** Сәләм.

**Амнист**. При-вет!

**Фәрхәт**. Ошо Ҡуштирәкте данлап йырланығыҙ һеҙ, Наҙгөлхан туташ. Күреү менән таныным.



**Ҡәнзәфәр**. Мәңгелеккә үҙегеҙгә әсир иттегеҙ... Мин дә таныным.

**Амнист**. Мин дә!

**Наҙгөл** (*Зәйнәпкә күрһәтеп*). Ауыл хакимиәте башлығы Зәйнәп апай менән таныш булығыҙ. Әлбиттә, ул газ индереүселәрҙе көтә ине.

**Өсөһө лә**. Һау-мы-һы-ғыҙ! (*Күрешәләр.*)

**Фәрхәт**. Контракт төҙөгәндә һеҙҙең ҡултамғағыҙ ҙа кәрәктер, моғайын.

**Зәйнәп**. Ярай инде, күп һүҙ китапҡа яҡшы тигәндәй, эшкә тотонайыҡ.

**Өсөһө лә**. Хуп мәйле! (*Ҡуштирәк төбөндәге эскәмйәгә ултыралар.*)

**Хажибәк**. Ғәрәбстан акционерҙар йәмғиәтенең президенты Солтанбәк хандың дүртенсе ефетенең бишенсе ҡыҙы Наҙгөлхан туташ урындағы ландшафтты өйрәнеү буйынса үҙ өҫтөнә төшкән вазифаны юғары кимәлдә башҡарып сыҡты.

**Өсөһө лә**. Хуп мәйле!..

**Хажибәк**. Ә хәҙер бөтә документтарҙы һәм шулай уҡ паспорттарҙы өҫтәл өҫтөнә сығарып һалайыҡ!

**Ҡәнзәфәр**. Кәрт уйынына оҡшап китте әле. Малай саҡта шап та шоп кәрт һуға торғайныҡ. Теге, ни, очко!

**Хажибәк**. Очконы беҙ ҙә әҙ генә һуңыраҡ һуғырбыҙ, Ҡәнзәфәр әфәнде... Ә хәҙер...

**Фәрхәт** (*ҡулын күтәреп*). Тәҡдим бар.

**Хажибәк**. Әйтегеҙ.

**Фәрхәт**. Паспорттарҙы сығарып һалғанға тиклем, тантаналы рәүештә контракт төҙөр алдынан, беҙ Амнист Максович Аҡбаев етәкселегендә район үҙәгенә барып, Агрогазпром иҫәбенә тейешле аҡсаларҙы күсереп, спонсорлыҡ вазифабыҙҙы үтәп киләйек. Паспорттарыбыҙҙы унда һораясаҡтар. Дөрөҫмө, Амнист Максович?

**Амнист**. Дөр-р-р...

**Хажибәк**. Наҙгөлхан туташтың тоғро хеҙмәтсеһе, йәғни делопроизводителе булараҡ, һеҙ һораған порученионы һеҙгә тапшырыр алдынан формаль рәүештә булһа ла шәхестәрегеҙҙе раҫлаған паспорттарығыҙға күҙ һалғы килә.

**Фәрхәт**. Паспорттарыбыҙҙы күрһәткәнсегә тиклем Һеҙгә, хөрмәтле Хажибәк әфәнде, бер генә һорау бирергә мөмкинме?

**Хажибәк**. Һорап ҡарағыҙ.

**Фәрхәт**. Ғәрәбстандан беҙҙең илгә килер алдынан Һеҙгә лә загранпаспорт бирелгәндер бит?

**Хажибәк**. Аҡыллы һорау.

**Фәрхәт**. Формаль рәүештә булһа ла, паспортығыҙға күҙ һалырға мөмкинме?

**Амнист**. Мин үҙемде таможняла һымаҡ хис итә башланым әле...

**Хажибәк** (*ҡыҙыл тышлы кенәгәһен асып күрһәтә*). Таныш булайыҡ, Эске эштәр министрлығының өлкән инспекторы капитан Усманов.

**Өсөһө лә.** А-а-а!!!

**Хажибәк.** Аҫыл ҡош – аяғынан, тиҙәр беҙҙең яҡта. Килеп күренеүегеҙ менән үк мин һеҙҙе танып алдым.

**Тегеләр Ҡуштирәккә һикерәләр ҙә ағастың ботаҡтарында көс-хәл менән аҫылынып торалар.**

**Фәрхәт** (*аҫылынып торған килеш*). Минең дипломатым буш... Ал үҙеңдекен!

**Амнист** (*аҫылынып торған ерөнән*). Үҙеңә булһын! Минеке ноль!

**Ҡәнзәфәр** (*ул да аҫылынған килеш*). Мин ҡатнашманым!.. Мин белмәйем.

**Хажибәк.** Маташмағыҙ! Бөтәгеҙ ҙә беләһегеҙ!

**Аҡсура**. Бысратмағыҙ беҙҙең Ҡуштирәкте! Ҡәһәре башығыҙға төшкәнсе, төшөгөҙ Ҡуштирәктән!

**Өсөһө лә**. Хуп мәйле! (*Бер юлы һикерәләр.*)

**Береһе аяғын, икенсеһе ҡулын, өсөнсөһө билен ышҡып, атлай алмайынса торалар.**

**Өсөһө лә**. Әлә-лә-лә... Ҡаймыҡты, буғай...

– Һынды буғай...

**Хажибәк**. Ҡасырға маташмағыҙ!.. Бөтә саралар ҙа алдан күрелгән.

**Амнист** (*Наҙгөлгә*). Мин бит һине... ысынлап та, Солтанбәк хандың дүртенсе ефетенең бишенсе ҡыҙы Наҙгөлхан туташ тип торам... Алдаҡсы!

**Наҙгөл**. Алданғанһың шул. Ҡаршығыҙҙа – һөйгән егете Аҡсура менән ошо ауыл ҡыҙы Наҙгөл!

**Мигалкалары менән яҡынайып килгән машина тауышы ишетелә. Өсөһө лә, машина яғына ҡарап, ҡулдарын күтәрә.**

**Хажибәк**. Ашығып китеп барғаным өсөн ғәфү итегеҙ. "Спонсорҙар" менән "иҫәп-хисап"ты өҙөү мәшәҡәттәре булмаһа, ҡунаҡ сифатында ҡалыр ҙа инем...

**Зәйнәп**. Яуаплы эшегеҙҙә уңыштар юлдаш булһын!

**Хажибәк**. Рәхмәт. (*Ҡулдарын күтәргән килеш ҡатып ҡалыусыларға.*) Ат-лағыҙ! (*Тегеләр аҡһай-аҡһай машинаға табан йүнәлә.*)

**Фәрхәт**. Әллә һынған инде...

**Ҡәнзәфәр**. Билем ҡуҙғалды...

**Амнист**. Миңә амнистия...

**Хажибәк уларҙы, ҡулдарын күтәртеп, машинаға алып китә.**

**Наҙгөл** (*дипломатты бирә*). Бында Ҡуштирәкте генә һаҡлап ҡалырлыҡ аҡса бар, Зәйнәп апай.

**Зәйнәп**. Рәхмәт, Наҙгөл һылыуым... Һин гүзәл Күгиҙел ҡыҙы булыуыңды тапҡырлығың менән дә, батырлығың менән дә иҫбат иттең. (*Аҡсураға.*) Ә һин, Аҡсура туғаным, үҙең ижад иткән иң шәп йыр-көйөңдө Наҙгөл һылыуға бүләк ит!

**Аҡсура**. Наҙгөләм өсөн ғүмерем буйына гармунымдың телдәрен һайратырға әҙермен, Зәйнәп апай!

**Музыка. Йыр.**

**Шаршау.**

*Стәрлетамаҡ яҙыусылар ойошмаһына −25 йыл*

# ТЫНҒЫҺЫҘ ИЖАД УСАҒЫ

Стәрлетамаҡ яҙыусылар ойошмаһы – республикабыҙ Яҙыусылар союзының иң эре бүлексәһе, боронғо матур ғөрөф-ғәҙәттәрҙе дауам итеп һәм байытып эшләүсе әҙәби-мәҙәни усаҡтарҙың береһе. Ысынлап та, Стәрлетамаҡтың борон-борондан мәҙәниәтте һәм сәнғәтте үҫтереүсе, шул иҫәптән китаптар нәшер итеүҙе ойоштороусы ҡала булып торғанлығы билдәле.

Әҙәбиәт һәм сәнғәттең башында торған әһелдәрҙең исемдәрен телгә алыу бик урынлы булыр, тип уйлайым. Мәҫәлән, 1934 йылда Стәрлетамаҡтың педагогия техникумында башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытҡан һәм әҙәбиәт түңәрәге ойошторған Ҡадир Даянды нисек онотаһың! Был түңәрәктә һуңынан күренекле яҙыусылар булып киткән прозаик Ибраһим Ғиззәтуллин, шағирҙар Яҡуп Ҡолмой, Хөсәйен Ҡунаҡбай шөғөлләнгән.

Дәһшәтле һуғыш йылдары ваҡытында был әҙәби түңәрәктең эше туҡтап ҡала. Ошо педагогия техникумы нигеҙендә төҙөлгән Уҡытыусылар институты эшләй башлағас ҡына, түңәрәк үҙ эшен яңыртып ебәрә. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытҡан, һуңынан күренекле яҙыусы булып



*Стәрлетамаҡ яҙыусылар ойошмаһы ағзаларынан бер төркөм.*

киткән, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Лоҡман - Хәким Ғиләжев уны ҡабаттан ойоштора һәм уға етәкселек итә. Буласаҡ халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ноғман Мусин да ошонда уҡыған.

Ошо институтты тамамлаған Салауат Галин проректор булып эшләй башлағас, әҙәби ойошма эше тағы ла йәнләнеп китте. Ә Салауат Галиндан һуң – ошо педагогия институтын тамамлаған Әсхәл Әхмәтҡужин түңәрәк эшен дауам иттерҙе. Ул «Ашҡаҙар» әҙәби-ижад берекмәһе тип атала башланы, сөнки уға институттың ғына түгел, ә күрше ҡалалар һәм райондарҙың әҙәби көстәре лә килеп ҡушылды. Был берекмәнең ағзалары Стәрлетамаҡ яҙыусылар ойошмаһын асыуҙа нигеҙ булып торҙо. Бында СССР Яҙыусылар союзы ағзаһы, ғалим, филология фәндәре докторы, профессор, БАССР-ҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре, Ғ.Сәләм исемендәге премия лауреаты Салауат Галиндың һәм күп һанлы яҡты поэтик китаптары менән дан тотҡан, Башҡортостан Республикаһы һәм Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Ғ.Сәләм исемендәге премия лауреаты шағир Әсхәл Әхмәт-Хужаның хеҙмәте ҙур булды.

Стәрлетамаҡ педагогия институты (хәҙер академия) Уҡытыусылар институтынан алып бөгөнгө көнгә тиклем Башҡортостан Яҙыусылар союзын тулыландырған 20-нән ашыу бына тигән әҙиптәр бирҙе. Прозаик Раил Байбулатов менән шағир Азамат Юлдашбаев Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары булып эшләне. Драматург Рәлиф Кинйәбаев – республикабыҙҙың «Башҡортостан» гәзитенең баш мөхәррире, шағирә һәм драматург Тамара Ғәниева – «Ағиҙел» журналының шиғриәт бүлеге мөхәррире, шағир Нияз Сәлимов – Башҡортостан Республикаһы Президенты администрацияһында яуаплы эшмәкәр.

Үкенесле, яҙыусылар ойошмаһы ошо 25 йыл эсендә юғалтыуҙар ҙа кисерҙе. Бөйөк Ватан һуғышы яугирҙары, прозаиктар Зиннәт Ғәлимов, Ибраһим Ғиззәтуллин, шағирҙар Фәйзи Ғүмәров, Рауил Ниғмәтуллин, Вил Ғүмәров, прозаик Әхмәт Әһлиуллин, балалар яҙыусыһы Флүр Яхин, сыуаш яҙыусыһы, журналист Николай Леонтьев, талантлы авторҙар Мариус Мәксүтов, Николай Черезев, Үзбәк Сирбаев, Мөхәммәт Ғабдрахманов, Камил Асраров, Зөбәржәт Йәнбирҙина баҡый донъяға киттеләр. Урындары йәннәттә булһын!

Яҙыусылар ойошмаһының беренсе яуаплы секретары шағир Рауил Ниғмәтуллин бүлексәне кадрҙар, эш бүлмәләре һәм кәрәк-яраҡтар менән тәьмин итеү буйынса ең һыҙғанып эшкә тотондо. Ул эшләгән дәүерҙә әҙәби консультант вазифаһы индерелеп, унда йәш шағирә Зөбәржәт Йәнбирҙина йәлеп ителде. Рауил Ниғмәтуллин Өфөгә ҡайтып киткәс, Вил Ғүмәров яуаплы секретарь итеп һайланды. Ул ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ижадсылар сафын нығытты, йәштәр менән эшләүҙе көсәйтте. Яҙыусылар сафына лайыҡлылар ҡабул ителде. Үкенескә ҡаршы, 1996 йылда әжәл беҙҙең сафтарҙан фекер эйәһе, көслө әҙәбиәтсе һәм ойоштороусы Вил Ғүмәровты тартып алды. Ул ни бары «Тау йылғаһы», «Ауыл моңо» тигән ике генә шиғри китап сығарып өлгөрҙө. Республикабыҙ журналдарында, гәзиттәрендә бик күп очерктар, публицистик мәҡәләләр баҫтырҙы.

Артабан яуаплы секретарь вазифаһын драматург һәм халыҡ артисы Илшат Йомағолов башҡарҙы. Бер үк ваҡытта Башҡорт драма театрында

«Буш сәңгелдәк», «Һине юғалтҡым килмәй», «Мөхәббәт сәпсектәре» тигән пьесалары буйынса һәйбәт спектаклдәр эшләне, ҡайһыларында үҙе лә уйнаны. Ҡала Башҡорт драма театрын төҙөүҙәге һәм уны нығытыуҙағы, мәҙәниәт техникумында буласаҡ артистарҙы уҡытыуҙағы хеҙмәттәрен иҫәпкә алып, уны Ғәли Ибраһимов исемендәге премия менән бүләкләнеләр.

1994 йылдың октябренән 1999 йылдың декабренә тиклем ойошманы Флүр Ғәлимов етәкләне. Был илдә яңы демократик тәртиптәр урынлаштырыуҙағы ауыр йылдар ине. Шуға ҡарамаҫтан, ул ижади эштәрҙе ойоштороу, яҙыусылар сафын тулыландырыу, йәш көстәрҙе әүҙемләштереү буйынса күп көс һалды.

Яҙыусылар ойошмаһының көндәлек эше яуаплы секретарҙың һәм әҙәби консультанттың берҙәм эшләүенә бәйле. 2000 йылдан алып республиканың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, танылған шағирә Зөбәржәт Йәнбирҙина әҙәби консультант булып эшләне һәм үҙен йәш көстәрҙең аҡыллы уҡытыусыһы итеп күрһәтте. Шағирә үҙенең ижадын да уңышлы дауам итте. «Даға сыңы» тигән китабы өсөн ул Хәким Ғиләжев исемендәге премия лауреаты булыуға өлгәште, ә 2009 йылда «Хирург» тигән хикәйәһе «ЮНЕСКО»ның халыҡ-ара премияһына лайыҡ булды. Әммә талант эйәһе Зөбәржәт Йәнбирҙина ла быйыл вафат булдып ҡалды.

Йәштәр менән ихлас эшләү үҙ емештәрен бирә. Рита Фәтҡуллина, мәҫәлән, Бәләбәйҙә үткәрелгән «Илһам шишмәләре» шиғриәт байрамында Гран-приға лайыҡ булды, Башҡортостан Яҙыусылар союзына ҡабул ителде. Стәрлетамаҡ педагогия академияһын тамамлаған Альфред Хисаметдинов Мәскәүҙә М.Горький исемендәге Әҙәбиәт институтында уҡый. Ул «Китап» нәшриәтендә «Аргунский капель» тигән китабын сығарҙы. Ул да — «Илһам шишмәләре» номинанты. Әйткәндәй, Зиниә Байназарова, Асия Басирова, Нәсимә Йосопова, Әксән Хәлилов, Сулпан Миңлебаева, Айнур Үтәев, Владимир Кравцов, Константин Вуколов, Рәйлә Нәҙерғолова, Хәлиҙә Алтынбаева ла — төрлө лауреаттар һәм номинанттар. Мәрйәм Күсмәева, Әксән Хәлилов, Иҙел Хәлимов, Ғәлиә Кәлимуллина, Мөҙәрис Багаев, Кәрим Булат — бөгөндән Союз ағзаһы булырлыҡ ижадсылар. Ә Фәрит Әхмәтов, Вера Никитина, Гүзәлиә Арыҡолова, Артур Булатов, Рәмил Ғимрани, Саймә Игелекова, Нәзирә Ишҡолова, Мәүлит Кәримов, Рүзилә Ҡотлогилдина, Асия Яппарова, Мөхәррәм Бикбаев, Барый Хисаметдинов, Флүр Сәйфетдинов, Илүсә Исмәғилева, Исмәғил Аҡъюлов, Фәүҡәт Ҡотлошин, Вера Колесникова, Ишғәли Нурғәлиев, Фатима Ғәлиева, Юлай Рахманғолов, Клара Туҡаева, Валентин Асадчий үҙҙәренең эстәлекле ҡулъяҙмалары менән һөйөндөрҙө.

Йәш көстәрҙе үҫтереүҙә ижади секциялар ҙур урын тота. Шиғриәт секцияһы эшен ихлас һәм ғәҙел алып барыусы Салауат Рәхмәтулланың эшмәкәрлеге һәм ижады оло маҡтауға лайыҡ. Ул йәштәргә шиғриәттә үҙ урынын табырға ярҙам итә белә. Үҙе лә ете китап авторы, Башҡортостан һәм Татарстан республикалары әҙәби журналдарында һәм гәзиттәрендә шиғырҙары, публицистик мәҡәләләре менән йыш сығыш яһай. Драма секцияһы рәйесе Хәмит Ирғәлин Стәрлетамаҡ башҡорт драма театрында «Инә бүре ҡарғышы» тигән драмаһы буйынса ҡуйылған спектакль менән балҡып китте. Уның «Тәтегәс бей», «Салауат», «Шәкетауҙа уттар яна»

драмалары һәм «Юғалған мөхәббәт» комедияһы республика театрҙарында ҡуйылыуға сират көтә.

Стәрлетамаҡ яҙыусылар ойошмаһына ҡараған Салауат, Ишембай, Мәләүез, Күмертау ҡалаларында, 11 районда йәшәп ижад итеүсе әҙиптәрҙең әүҙем эшләүе оҡшай. Салауат ҡалаһынан Мөхтәр Сабитовтың «Көт һин мине, Рәйсә» романы «Йылдың иң яҡшы китабы» исеменә лайыҡ булды. Күмертауҙан Закир Әҡбәровҡа «Әрем еҫе» тигән китабы өсөн Хәким Ғиләжев исемендәге премия бирелде. Күптән түгел Башҡортостан Яҙыусылар союзына ағза итеп алынған Стәрлетамаҡ егете Владимир Жеребцовтың драматургияһы шатландыра. Уның пьесалары буйынса спектаклдәр Мәскәү, Волгоград, Минск, Һарытау, Ырымбур һәм башҡа ҡалаларҙағы, шулай уҡ сит илдәрҙәге театрҙарҙа уйнала.

70 йәшен яңы китабы менән билдәләргә йыйынған балалар шағиры Рәшит Заһиҙуллиндың уңыштарын әйтеп китке килә. Ул балалар өсөн тиҫтәнән ашыу китап сығарҙы һәм сатира-юмор өлкәһендә лә әүҙем эшләй. Күптән түгел Яҙыусылар союзына ағза итеп ҡабул ителгән Любовь Әфләтунованың балалар өсөн китаптары үҙебеҙҙең республикала ғына түгел, Мәскәүҙә, Дондағы Ростовта, Чебоксарҙа, Ырымбурҙа, Екатеринбургта ла баҫыла. Уның яҙыусыларыбыҙ әҫәрҙәрен рус теленә тәржемә итеү буйынса уңышлы эшләүе лә маҡтауға лайыҡ.

Ҡайһы бер авторҙарыбыҙ пенсияға сыҡҡансы Яҙыусылар союзы ағзаһы булырға өлгөрмәй ҡалһалар ҙа, ижади ынтылыштарын кәметмәйҙәр. Һикһән ике йәшлек Хәбир Хәмитов һигеҙенсе проза китабын нәшер итеүгә илтеп тапшырҙы. Стәрлетамаҡ химия технологияһы техникумы директоры, ҡала башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе Риф Дәминев өс китап нәшер итте. Юмористик хикәйәләрҙән торған һуңғыһы китап уҡыусылар тарафынан йылы ҡабул ителде һәм бик тиҙ таралып бөттө. Ошонда уҡ дүрт китап авторы, прозаик Әмир Ҡотлозамановтың, Ғәли Ибраһимов исемендәге премия лауреаты, ике томлыҡ «Частушки» («Таҡмаҡтар») китабы авторы, филология фәндәре докторы Иван Карпухиндың ижады хаҡында айырып әйтке килә. Шулай уҡ шағир һәм прозаик Марс Нуриев әүҙем ижад итә. Шағирҙар Кинйәғәле Абдуллин, Йәүҙәт Аллаяров, прозаик Флүрә Сәлимова бер нисә китап сығарҙы. Ишбулды Вәлитов тәнҡит өлкәһендә уңышлы эшләй.

Яҙыусылар ойошмаһының эшмәкәрлеге киң. Яҙыусылар һәм йәш авторҙар байрам тантаналарында, иҫтәлекле ваҡиғаларҙа, яңы китап туйҙарында, төрлө осрашыуҙарҙа ҡатнаша. Һуңғы йылдарҙа беҙ китапханаларға, театрҙарға халыҡты ҡайтарыу маҡсатында күп төрлө саралар ойоштораБыҙ. Иҫтәлекле осрашыуҙар беҙҙең эштә ғәҙәткә инеп киткән.

**Кәбир АҠБАШЕВ,**
**ойошманың яуаплы секретары.**

**Салауат**
**РӘХМӘТУЛЛА**

# “ӨФӨЛӘРГӘ ЮЛДАР АЛЫР ИНЕМ, ЭСТӘРЛЕНӘН КИТӘ АЛАЛҺАМ...”

*“Бөгөн — барһың, иртәгә — юҡ...”—*
*Тетрәндергес төшөнсә:*
*“Иртәгә”— юҡ,*
*“Бөгөн” йәшәү*
*Булмаһа тейешенсә...*

*Бөгөн йәшәү — йәшнәү булһа,*
*Ниңә яманһыуларға?*
*Йәшнәү — бөгөн булһын:*
*Күкрәү*
*Китһен килер йылдарға!..*

***

*Йәйҙәремдә ямғырҙары яуһа*
*Һәм ҡарҙары яуһа ҡышымда,*
*Шатлыҡтарым арта:*
*Минең өсөн*
*Донъя ҡото, гүйә, ошонда!*

*Йәйҙәремдә ямғыр яумай ҡалһа,*
*Яумай ҡалһа ҡарҙар ҡышымда,*
*Хәсрәттәрем арта:*
*Минең өсөн*
*Донъя йото, гүйә, ошонда...*

*Салауат Рәхмәтулла Ауырғазы районының Солтанморат ауылында тыуған. Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамлай. 20 йылға яҡын рус теле һәм әҙәбиәтен уҡыта, мәҙәниәт өлкәһендә эшләй, редакцияла әҙәби хеҙмәткәр була. Тиҫтәгә яҡын шиғри китаптар авторы.*

*Бер шатланам, бер хәсрәтләнәм мин*
*Бер – шатлыҡ, бер хәсрәт килгәндә...*
*Ерем буйлап барам:*
*Әйтерһең дә,*
*Донъя йөгө – минең елкәмдә...*

***

*... Мәскәүҙәрҙән күпме хаттар алдым,*
*Әллә күпме яҙҙы ҡазандар:*
*Әллә ниҙәр яҙмағандар инде,*
*Үҙҙәренә саҡырып яҙғандар.*

*Мәскәүҙәр ҙә кәрәк түгел миңә...*
*Төйәк итһәм Ҡазан ҡалаһын,*
*Әллә кемдәр “Өфө – Ҡазан” тиеп*
*Тапай Ҡазан – Өфө араһын...*

*Парижлары кәрәк түгел хатта*
*(Ауылыма ҡайтам – ял алһам!):*
*Өфөләргә юлдар алыр инем,*
*Эстәрленән китә алалһам...*

## *Ике + ике =?*

*Мәктәптә – тәүге көн, Уҡытыусым*
*(Өн инеме? Әллә төш инеме...):*
*“Ике икең – нисә?”– тип һораны.*
*“Дүрт!” – тинем мин...*
*“Дөрөҫ. “Биш”, – тине.*

*... Бер йәшәргә килгән был донъя ла*
*Тора икән “һорау – яуап”тан:*
*Ҡара ла –*
*Шау ҡара түгел икән,*
*Аҡ та – түгел икән шау аҡтан...*

*Йәшәүемдән риза булмаһам да,*
*Өлөшөмә төшкән – хөрт түгел.*
*Эх...*
*“Ике икең – нисә?”– белеп булмай,*
*Әммә беләм хәҙер: “Дүрт” түгел!*

***

*Һайлаған юлыбыҙ – ниндәй?*
*Хатта мин белеп торам.*
*Тик...*
*Белгәнде һөйләтмәйҙәр –*
*Йылмайып-көлөп торам.*

*Ғәйепле генә булырмын,*
*Һүҙ менән “ҡыҫылһам да...”*

*Эх...*
*Ил "шул юл"дан барыр ине,*
*Батша... үҙем булһам да...*

***

*Сит донъяларҙан киләләр*
*Яңы "күк есемдәре":*
*"НЛО" тибеҙ...*
*Уларҙың*
*Нисек төп исемдәре?*

*Белмәйбеҙ һәм...*
*Һәм белә лә*
*Алмабыҙмы икән беҙ?*
*Беҙ уларға – кеше микән?*
*Һаман... маймыл микән беҙ?..*

## *Тиҫтә-тиҫтә йылдар...*

Ашҡаҙарҙың ярҙарына баҫып,
Нисә йылдар көтәм бит инде...
**К. Аҡбашев.**

*Ярҙарына баҫып Ашҡаҙарҙың,*
*Нисә йылдар кемде көтәһең?*
*Килмәҫтәйҙе*
*Көтә-көтә-көтә,*
*Уйламаның һикһән етәһен.*

*Пьеса, шиғыр, йырҙар текстары*
*Тиҫтә-тиҫтә,*
*Көткәндәрҙең бәғерен өҙәһең:*
*Тиҫтә-тиҫтә йылдар*
*Бер ни яҙмай нисек түҙәһең?!.*

***

*Ҡартайҙым бара-бара:*
*Ғүмерем –*
*"Ул" остан "был" осҡа –*
*65 йыллыҡ ара...*

*Хайрандар ҡалдым – ҡара:*
*Ғүмерем –*
*"Был" остан "ул" осҡа –*
*Күҙ асып йомған ара...*

## *Томан*

*... Алһыуланып таң һыҙыла*
*Күҙҙәрең ҡараһында.*
*"Томан төшкән,– тиһең,–*
*Гүйә,*
*Беҙ – болот араһында!.."*

*Беҙ – болот араһында шул*
*(Әйт: “Болот, көндө йылыт!..”):*
*Болот төшкән!..*
*Томан... томан –*
*Ергә иң яҡын болот!..*

***

*Сағыштырыу – планета-ара*
*(Беләм күптәр ауыҙ йыраһын):*
*Ҡояш Ерҙе тартып торған кеүек,*
*Мине... һин бит тартып тораһың.*

*“Тартып ҡына тораһың шул”,– тиеп*
*Ниңә гел-гел һиңә бәйләнәм?*
*Яҡынайтһаң – янып бөтәм бит мин,*
*Йыраҡайтһаң – боҙға әйләнәм...*

## Ҡыҫҡа шиғырҙар

*Бирәү – тыуа,*
*Бирәү – үлә:*
*Ғүмерҙәр ағышына*
*Ҡушылып,*
*Ерҙә яй ғына*
*Кешелек алышына...*

***

*Бел:*
*Тел –*
*Мәңгелек двигатель!..*

***

*– Ҡартайта,– тиһең,–*
*Ҡартайыу*
*Ҡайҙан тойола башлай?*
*– Сәстән:*
*Ҡойола башлай...*

## Йөрәк сире

*Ярҙам ҡулдарын һуҙалмаҫ*
*Хәҙер хатта Аллаһы:*
*Илап ҡалырға әсәй ҙә,*
*Атай ҙа – юҡтар...*
*Ә ҡатын...*
*Ҡатын – кеше балаһы...*

***

*Урлап – хатта*
*Миллиардер*
*Булалар хәҙер – ғәжәп:*
*Эх...*

*Шуға ла баш эшләмәгән*
*Совет илендә йәшәп!..*

***

*Әйтмәйек: “Дуҫ – күп,*
*Дошманды*
*Еңеүҙәр беҙгә – сүп ул!..”–*
*Дуҫ күп булһа ла – аҙ,*
*Дошман*
*Берәү булһа ла – күп ул!*

## Алтын күҙ

*Һары күҙҙө, алтын күҙ, тибеҙ,*
*Хаҡ:*
*Алтын – һары белгән-күргәнгә.*
*Эх!*
*Һары булғанға күҙ – алтын түгел,*
*Алтын – йыллыҡ муллыҡ биргәнгә!*

***

*“Илаһым!” тип*
*Күккә ҡараш төбәп,*
*Ниҙәр һорап саңдар һуғаһы?*
*Күктәрҙән*
*Гел һөйәк яуыр ине,*
*Ҡабул булһа эттәр доғаһы...*

***

*Аллаһ ҡулында бер ни юҡ,*
*Өмөт юҡ шуға күрә:*
*Беребеҙҙән ала ла ул,*
*Икенсебеҙгә бирә...*

***

*Аяҡтар үлтереп һыҙлай,*
*Эх, башты яңаҡларға:*
*Йәшлектә баш-ахмаҡ*
*Тынғы*
*Бирмәне аяҡтарға...*

***

*Ҡуй көтөүҙә йығылһа ла,*
*Күренмәй үҙе беҙгә.*
*Ә дөйә –*
*Абынғанда ла?! –*
*Салына күҙебеҙгә...*

______________

## Тимер НИӘТШИН

### *Мәңге йәш*

Шәйехзада Бабичҡа

*Ҡабул итсе, кескәй ҡәбереңә*
*Хөрмәт менән һалдым сәскәләр.*
*Исемем Тимер, һиңә ағай булам,*
*Ҡылған төҫөн алған сәскенәм.*

*Тәнең бында, үлмәҫ шиғырҙарың*
*Һыйынғандар китап битенә.*
*Замандашым ихлас табына шул*
*Йотом хәмер, ҡабым итенә.*

*Яңғыҙ ҡәбереңде урап үтә*
*Йылайырҙың таҡыр юлдары.*
*Исмаһам, бер туҡтап баш эйһәләр*
*Донъя ҡыуған башҡорт улдары.*

*Күңел һалып ҡына тыңлап торһаң,*
*Тәбиғәттең теле асыла.*
*Юл туҙаны ҡунған үлән белә*
*Шағир йәнен, шағир асылын.*

*Һил төндәрҙә яҙҙың ялҡынлы йыр,*
*Хәтәр эштәр көттө көнөңдө.*
*Ил ҡурсалап ҡулға ҡылыс алдың,*
*Ҡылыс киҫте һуңғы өнөңдө.*

*Нисәмә йыл ошо кескәй ҡәбер*
*Үҙ хужаһын белмәй йәшәне.*
*Бөгөн һаман һиңә егерме дүрт,*
*Бөйөк шағир мәңге йәш әле.*

### *Балтырған*

*Зәңгәр күҙле ялан аяҡ малай –*
*Яҙғы төндә нисек шөрләмәй –*
*Борма юлдар киҫкән йылдар аша*
*Ҡайсаҡ килеп китә эргәмә.*

*Ҡабаланмай ғына кеҫәһенән*
*Алып бирҙе үҙе балтырған.*

---

*Тимер Ниәтшин 1946 йылдың 10 июнендә Көйөргәҙе районы Илкәнәй ауылында тыуған. Өфөнөң 1-се Башҡорт интернат-мәктәбендә уҡый. Юғары белемде Куйбышев политехник институтында ала. 1989 йылда “Һүҙ һорайым” исемле тәүге йыйынтығы баҫыла, ә 1993 йылда “Уянған өмөт” исемле китабы сыға. 1994 йылдан Яҙыусылар берлеге ағзаһы.*

*Шатланамын шуға: әйтерһең, мин*
*Нисәмә йыл инде ас торған.*

*Күҙгә йәш төйөлә, танауға – еҫ,*
*Тонсоу бүлмәм китә яңырып.*
*Йәнем, ток һуҡкандай, тертләп ала,*
*Күңелемдә тыуа таң йыры...*

*Ошо изге мәлем һүрелгәндә,*
*Тик бер осҡон телә уйымды:*
*"Үҫә микән йәшел балтырғаным*
*Зәңгәр күҙле йылғам буйында?"*

---

**Кәбир АҠБАШ**

## *Һин бар булһаң*

Һинән башҡа мин ул мин түгел.
**Муса Ғәли**.

*Башҡортостан, – Рәсәй йондоҙо һин,*
*Һин булғанға мин дә булғанмын.*
*Ата-бабам илен шөкөр итеп,*
*Һиңә ҡарап мин дә тыуғанмын.*

*Уҡы, улым, тиеп китап бирҙең,*
*Аҡыл бирҙең үҫмер мәлемдә.*
*Етем булдым, етем итмәнең һин,*
*Шуға иман йәшәй йәнемдә.*

*Һинһеҙ булыр ине донъям йәмһеҙ,*
*Ҡото булмаҫ ине һөйөүҙең.*
*Ғашиҡ булырға ла, шатланырға*
*Өйрәттең бит мине һин үҙең.*

*Башҡортостан, тыуыр көнөм яҡты,*
*Фәкир түгел йөрәк, киң күңел.*
*Уйым менән күккә уйылһам да,*
*Күк йөҙө лә һиңә тиң түгел.*

*Ҙур кинәнес: һин барға мин дә бар,*
*Йәшә, илем, мәңге-мәңгегә.*
*Халҡың барға һин дә, шөкөр, барһың,*
*Шуға ла һин сикһеҙ йәм генә.*

---

*Кәбир Аҡбаш – шағир һәм драматург, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, 14 китап авторы. Башҡортостан Яҙыусылар союзының Стәрлетамаҡ төбәк яҙыусылар ойошмаһы етәксеһе.*

## Мин – юҡ

*Түш кеҫәмдә яңы паспортым бар,*
*Алтын менән генә ҡайылған.*
*Кәртешкәһе тора, мисәте бар,*
*Ике башлы ҡошо уйылған.*

*Тик тоймайым паспорт барлығын мин,*
*Буп-буш кеүек бөтә кеҫәм дә.*
*Һис ышанғы килмәй, әйтһәләр ҙә:*
*Дөкәмитең бар, тип, кеҫәңдә.*

*Мин үҙемде тоям етем итеп*
*Сәмреғошо ҡармап алғанға.*
*Һис түҙерлек түгел әрнеүҙәргә*
*Көнө-төнө йөрәк янғанға.*

*Сәмреғошо йоткан милләтемде,*
*Паспортымды тотһам – ҡул яна.*
*Етем кеүек күрәм мин үҙемде,*
*Кәмһетелгән итеп донъяла.*

*Маяковский хәҙрәт, һиңә киләм;*
*Ғорурлығым ҡайҙа, күҙем – ут.*
*Хатта киң ыштан да үҙем менән,*
*Әммә паспортым бар, үҙем – юҡ!*

## Икеләнеү

*Мөхәббәтте күптәр, буш һүҙ, тиҙәр,*
*Йөрәктәрҙе насар йылыта;*
*Айлы төндә әүрәп йөрөтә лә,*
*Ә кисенә инде оҙата.*

*Шағирҙар ҙа эҙләй мөхәббәтте,*
*Йырҙарында маҡтай моң һалып.*
*Ә кемдәрҙер, юҡ ул мөхәббәт, ти,*
*Телдә генә йөрөй буталып.*

*Рәссам яҙа биҙәп бер сибәрҙе:*
*– Мөхәббәттең серен мин асам!*
*Берәү көлә:*
*– Һөйөү буяу ғына,*
*Аңлап булмай уны бер ҡасан.*

*Ысын мөхәббәт юҡ ул, юҡ, тиеп*
*Яңғыҙ ҡатын йөрөй көйөнөп.*
*Бер ир илай:*
*– Бисәм ташлап китте,*
*Мөхәббәт юҡ, булмай тейенеп.*

*Тәбиғәткәй мөхәббәттең серен*
*Йәшергәндер, ахыры, бик йыраҡ.*

*Мөхәббәткәй килә илаһиҙан,*
*Рөхсәттәр ҙә тормай ул һорап...*

## Эҫе ҡарҙар

*Күбәләкләп ҡарҙар яуа,*
*Бөтә донъя һил генә.*
*Йөрәгемдә – бер күбәләк,*
*Эргәмдә юҡ һин генә.*

*Күбәләгем осоп китте*
*Дауылдарға тағылып;*
*Һағыштары тороп ҡалды*
*Күңелемә һарылып.*

*Күбәләктәй әҙ ғүмерле*
*Булды ҡар бөртөктәре.*
*Бурандарҙан еүешләнә*
*Күҙемдең керпектәре.*

*Күҙҙәремде ялмап ала –*
*Әллә ҡар ҡайнар микән?*
*Әллә ап-аҡ ҡарҙарҙа ла*
*Күҙ йәштәре бар микән?*

## Тиле донъя

Чемберленның сатыйм анасын,
Утка тоткан Мәккә каласын.
**Һ. ТАҠТАШ.**

*Күп мосолман иле һыкрап ята,*
*Баҫҡынсылар талай илдәрҙе.*
*Ираҡ халҡының бар ни ғәйебе? –*
*Иҙеп үтә дошман гөлдәрҙе.*

*Нефте тарта, ахры, шул ҡәһәрле*
*Бомбаларҙы үҙенең башына.*
*Яуыздарҙың утлы торонбашы*
*Тараҡандай төшә ашына.*

*Әсе уйҙар телә йөрәк итен,*
*Бәхетһеҙлекме ни шул байлыҡ?*
*Үлем яуа халыҡ өҫтәренә,*
*Ҡомһоҙлоҡмо, әллә аң һайлыҡ?*

*Ҡурсаҡ ҡосоп үлә сабый бала,*
*Һирәк ҡала бында имендәр.*
*Ҡан еҫтәре килә елдәр менән,*
*Ятып илай яңғыҙ килендәр.*

*Меңәр йыллыҡ тарих һәйкәлдәре*
*Мәңгелеккә юя йәмдәрен.*
*Бомба аҫтарында ләғнәт уҡып,*
*Ыңғырашып бирә йәндәрен.*

*Заман дошмандары бик ҡәнәғәт,*
*Байлыҡтарҙа йәшәй тыҡшынып.*
*Тиле донъя әллә инде үҙе*
*Аҡылынан яҙа шашынып.*

---

**Рәшит ЗАҺИҘУЛЛИН**

## Ниңә төшөрәһегеҙ?

*Бешмәҫ ерҙән минең битте*
*Ниңә бешерәһегеҙ?*
*Бер урынға ултырткас ни,*
*Ниңә төшөрәһегеҙ?*

## Улымдың таныштары

*Минең улым*
*Ниндәй генә*
*Уңышҡа ирешмәне.*
*Шуға күрә*
*Күптер уның*
*Танышы-белештәре.*
*Шул дуҫтары*
*Йомош төшөп,*
*Беҙгә килеп урайҙар.*
*Минең улым*
*Алып торған*
*Бурыстарын һорайҙар.*

## Байып ҡайтты

*Әйтмә инде:*
*Минең малай*
*Көтмәгәндә байып ҡайтты.*
*Килен итеп бер балалы*
*Мәрйә бисә алып ҡайтты.*

## Кирәмәй

*Аяҡ бөкләп ултырған да*
*Утын яра Кирәмәй:*
*“Ятып ҡына ярыр инем,*
*Балтам үтеңкерәмәй”.*

## Күмәкләшеп төшөрәләр

*Бында хәлдәр*
*Мөшкөл, тиеп,*
*Бошонмайҙарҙыр юҡҡа.*
*Күмәкләшеп төшөрәләр*
*Был күмәк хужалыҡта.*

---

*Рәшит Заһиҙуллин 1939 йылдың 3 сентябрендә Ғафури районының Татар Һаҫыҡкүле ауылында тыуған. Стәрлетамаҡ совхоз-техникумын тамамлай. Башлыса балалар өсөн яҙа. Сатира, юморға ла маһир.*

*Стәрлетамаҡ ҡалаһында йәшәй. Шағирҙы 70 йәше менән ҡотлайбыҙ һәм ижади уңыштар теләйбеҙ.*

## Дауаланған Ғәләү

*Беҙҙең психиатрҙар*
*Ярҙам итә нисек тә:*
*Унда дауаланған Ғәләү*
*Әйләнгән, ти, – психкә.*

## Берәү тулмай

*Шешә тапшырыу алдынан*
*Сигенән сыҡты ҡатын.*
*“Йәшниктә берәү тулмай”, – тип*
*Саҡ әрләмәне ҡатын.*
*“Тауышыңды ла сығарма,*
*Кибеткә йүгер генә:*
*Тағы ла берҙе бушатып*
*Тултыр, – ти, – егермегә”.*

## Берәү генә сағыңда

*Икәү булып күренәһең*
*Асыуланған сағыңда.*
*Мин эргәңә килермен, тим*
*Берәү генә сағыңда.*

## Буяштырып киләм

*Кәңәш бирәләр: үҙеңде*
*Күрһәтергә өйрән, тип.*
*“Мин былай ҙа битте, ҡашты*
*Буяштырып киләм бит”.*

## Үтәнән-үтә

*Гөльямалдың ниндәйлеген*
*Кемдәр генә күрмәне:*
*Үтәнән-үтә күрһәтә*
*Уның яңы күлдәге.*

## Баллыбай

*Баллыбайға бик йыш ҡына*
*Килеп тора баллы ай.*
*Елтерәтеп яңы ҡатын*
*Алып ҡайтҡан Баллыбай.*

## Ауыл кисе

(Сабир Шәриповтан тиерлек)

*Уйлап торһаң*
*Иҫең китер:*
*Их, матур ауыл кисе!*
*Күккә баҡҡан*
*Мөрйәләрҙән*
*Килә көмөшкә еҫе.*

**Земфира МУЛЛАҒӘЛИЕВА**

## Аҡмулланың аҡ күлдәге

Йәйге эҫе көн. “Ураҡҡа төшкәнсе Айыҡҡа барып ҡайтырға кәрәк. Ҡыҙымды ла үҙем менән ҡунаҡҡа алам”,– тине ҡартатай. Шуға күрә әле беҙ, ат егеп, ҡунаҡҡа китеп барабыҙ. Дим йылғаһы аша күперҙән сығып бер аҙ барғас, ҡартатай: “Хәҙер Бишбүләк юлына боролор ергә лә барып етәбеҙ”,– тине. Мин: “Алты бүләк еренә юл бармы?”– тип һорағас, ул: “Уныһын, ҡыҙым, үҙең эҙләрһең”,– тип көлдө. Шунда мин беҙҙән алда китеп барған ике кешене күрҙем. Ҡартатай һәр ваҡыт юлдағы йәйәүле кешене ҡалдырмай ултыртып ала. Улар беҙҙең иҫкерәк аҫалы балаҫ йәйгән арбаға уңайһыҙланып ҡына менеп ултырҙылар. Башына аҡ яулығын ҡыҫып артҡа ҡайырып бәйләгән йәш кенә апай бигерәк матур, әллә ҡайһы ере менән минең әсәйгә оҡшап тора. Минең йәштәгерәк малай был апайҙың улы икән. Малай миңә арты менән ултыра. Уның ҡояшта янған һарғылт сәсле башы менән ябыҡ муйынын, арҡаһын ғына күрәм. Ололарҙың һөйләшкәненән малай кешенең дә, минең кеүек, көҙөн уҡырға барасағын белдем. Улар арбанан төшөр алдынан ҡартатайым: “Улым, һин уҡып сыҡҡас кем булырға йыйынаһың инде?– тип һорауына яуап булмағас, – Аҡмулла тураһында ишеткәнең бармы? Был ерҙәр – уның тыуған төйәге. Шул заманда ана ниндәй уҡымышлы булған беҙҙең Аҡмулла!”– тип тынып ҡалды. Шунда: “Уны үлтергәндәр!”– тине малай әкрен генә. Уның беҙгә ултырғанынан бирле беренсе өндәшеүе ине. Бер ауыл осонда беҙҙең юлсыларыбыҙ төшөп ҡалды. Шул саҡ уларҙы ҡаршы алырға көтөп торған ике ир баланы күрҙем. Икеһе лә, ҡайтып килеүселәрҙе күреп, йән-фарман ҡаршыларына йүгерҙе. Кендектәренән өҫтә торған аҡ күлдәктәре елберләп килә. Кинәт бәләкәйерәге, ағаһы артынан өлгөрә алмай, абынып, тупраҡлы юлға башы менән килеп төштө. Мин күҙемде йомдом. Нисек кенә күҙемде сытырҙатып йомһам да, күҙ алдымда туҙанлы юлдан йүгереп килгән аҡ күлдәкле ир бала торор...

*Туҙанлы эҫе һуҡмаҡтан*
*Яланаяҡ сәсәп йүгерә*
*Бер ир бала.*
*Кендегенән өҫтә аҡ күлдәге*
*Елбер-елбер осоп бара*
*Елдән алда.*

*Ҡото осоп ҡысҡыра әсә:*
*– Мифтахетдин, тукта, ҡайҙа бараң?*
*Бер һүҙ кермәй ҡолағына,*
*Йүгерә бала көлә-көлә,*
*Абына-абына.*

*– Ах, әйттем бит, йығылаһың, тип,*
*Тыңламайһың, бала-бала!*
*Танауынан аҡ күлдәккә*
*Һибелә ҡан –*
*ал ҡан тама.*

---

*Земфира Муллағәлиева Әлшәй районының Хәнйәр ауылында тыуған. Һигеҙ йыллыҡ мәктәптән һуң Стәрлетамаҡ мәҙәниәт техникумын тамамлай. Бер нисә китап авторы, Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

*– Ах, бала! Бала!*
*Әй, хәҡикәт:*
*Әсә күңеле – балала,*
*Баланыҡы – далала.*
*Дала, дала…*
*Эй тәбиғәт! Нисек ҡотолорға*
*Аяуһыҙ саҡтарыңдан?*
*Бер кеше лә әле ҡайталмаған*
*Упҡыныңдан – даланан.*
*Әсә күңеле лә айырыла икән,*
*Айырыла икән баланан…*
*Раббым, ниндәй гонаһ таптың –*
*Етем ҡалдырырлыҡ*
*Аҡ күңелле ошо сабыйҙан?!*

*… Йылдар үтә, йылдар бара.*
*Бара… Айыра, айыра тыуған тупһанан.*
*Тыуған яҡтар ҡала, ҡала…*
*Туҙанлы юл. Тәгәрәй арба.*
*Шығыр-шығыр арба эҙе юлдар яра.*
*Етемлектән ҡалған яра*
*Һыҡрай-һыҡрай йөрәк яра.*
*Был яраның ауырлығын*
*Тарта алырлыҡ*
*Был донъяла бармы икән*
*Берәр арба!?*
*Әсә йәне күрә микән*
*Ғәзиздәрҙән-ғәзиз балаһының*
*Китеп барған ауыр юлын?*
*Йәне өҙгөләнә микән:*
*Һуҙалмайым, тип, һаҡлар ҡулым…*

*Тәгәрәй арба.*
*Йылдар аға һыуҙар кеүек.*
*Артта ҡала юлдар ғына.*
*Бер тотам да ҡалмай арттан*
*Эйәреп килә*
*Тыуған йорттоң тупһаһынан,*
*Йомғаҡ кеүек сорналып;*
*Тормошоноң*
*Төрлө төҫкә кереп барған*
*Яҙмыш ебе сыуалып.*
*Донъя йөгө арбаһына*
*Тейәп зарын, моңон, бар малын,*
*Бара, сәсә-сәсә аң белемен*
*татарына,*
*башҡортона*
*ҡаҙағына,*
*Аҡ күлдәкле сабый бала*
*(Айырылған балалыҡтан,*

Тыуған йорто, ҡапҡаһынан).
Тик хиҡәкәт:
Айырылмаған намыҫынан,
Ас тамағын туйҙыра алған
Көнөн күргән балтаһынан.
Оҫта ҡулдан нур ҡойолһа,
Ә теленән – сәселә аҙан:
– Уҡы, халҡым. Уҡы, ҡалма наҙан!
Алдан, арттан
Даны килә – үткер сәсән,
Халыҡ улы – хаҡлыҡ улы
Аҡ күлдәкле Аҡмулла!
Бара абына-абына,
Ашығып, сәсәп.

Наҙан халыҡ – тома һуҡыр,
Белмәй ул: ҡайҙа бара?!
Көнмө уға, төнмө уға –
Юл ҡараңғы
Азатлыҡтың таңына.

Аҡмулланың манараһы
Ҡояш булып сыға бара
Ярлы халыҡ аңына.
Тәгәрәй арба…
Баш бирмәгән Аҡмулланың
Үҙе түгел,
Хатта арба эҙе
Йырлап бара төҫлө.
Дошманының
Көйә эсе,
Ҡара яна йөҙө.

Дала түбәһендә тәгәрәй арба,
Шығыр-шығыр ауыр арба.
Ә ҡолаҡта бала саҡтан:
– Балам, һаҡлан!
Етемлектән
Ҡасалмаған һымаҡ,
Дошмандарҙан, ҡара көстән
Ҡасып буламы һуң?
Кем ҡасҡан һуң?
Ҡасан?!

Ә фажиғәле яҙмышыңдан…
Бармы сара!?
Әй, был донъя…
Аяуһыҙ ҙа донъя!
“Мифтахетдин, балам, һаҡлан! Ах!
Ҡара шәүлә…”

*Баш түбәһе сатнап китте –*
*Сайпылып та китте донъя…*
*"Ах, балам.."*
*Ҡанһыҙ дошман*
*Ҡанлы ҡулын йыуа…*
*Белмәй*
*Кеше ҡаны китмәй ҡулдан.*
*Илай, һыҡрай дала*
*Ҡолағында:*
*– Мифтахетдин, балам, балам,*
*Йүгерәһең ҡайҙа?!*
*Һуңғы бер мәл – күҙ нурына һеңеп бара:*
*Аҡ күлдәкле малай саба!*
*Быуат күсәрендә тәгәрәй арба.*
*Өҙөлдө Йән.*
*Аҡ күлдәккә һибелеп бара*
*Туҙанлы ҡан.*
*Тәгәрәй арба…*
*Был донъянан бар ҙа ҡала,*
*Ҡояшы ла, Айы ла…*
*Тик артта ла, алда ла*
*Беҙгә ҡарап һорап тора:*
*"Хәлегеҙ нисек,*
*Арбағыҙҙың юлы ҡайҙа бара?!" – тиеп*
*Аҡ күлдәкле Аҡмулла!*

---

**Асия БАСИРОВА**

## *Ағыла моң*

*Ишетелә гармун тауыштары,*
*Сиртеп үтә күңел ҡылдарын.*
*Йәйғор юлы булып моңдар аша*
*Һыҙылып үтә ғүмер юлдарым.*

*Хәтер йомғаҡтарын һүтә-һүтә,*
*Алыҫтарға әйҙәп алып китә.*
*Ғүмеремде мәрйен итеп теҙеп,*
*Матур йәшлек булып наҙын һүтә.*

*Уйҙар диңгеҙендә – мин аҡ елкән,*
*Тулҡынында гиҙәм кинәнеп.*
*Өҙөлһә моң, ойоп ҡалған ерҙән*
*Ярға ҡабат йөҙәм һиҫкәнеп.*

---

*Асия Басирова Стәрлетамаҡ ҡалаһында тыуған. «Яңғыҙ итмә» исемле шиғырҙар йыйынтығы 1997 йылда, «Ағыла моң» исемле китабы 2006 йылда сыҡты.*

*Ә йөрәгем ярһый – һүнмәҫ ялҡын,*
*Зөһрә йондоҙ булып балҡый күктә.*
*Илаһи моң, күңел һыуһынымды*
*Ҡандырмаҫһың инде ғүмерлеккә.*

## Ҡоштар киткәндә

*Яҙҙар көтәм...*
*Әле күңелемдә*
*Көҙҙәр алып килер моң ғына.*
*Ҡыр ҡаҙҙары оса йылы яҡҡа,*
*Оҙатырға сыҡтым тын ғына.*

*Көҙҙәр етә, тағын көҙҙәр етә,*
*Ут-ялҡындай балан ҡыҙара.*
*Ҡыр ҡаҙҙары оса йылы яҡҡа*
*Ҡаңғылдашып ҡына үҙ-ара.*

*Күл буйҙары моңһоу бер тынлыҡта,*
*Яр буйында ҡалды аҡ ҡаурый.*
*Ҡыр ҡаҙҙары оса йылы яҡҡа,*
*Ҡанаттарын иҫкән ел тарай...*

---

**Рәйлә НӘҘЕРҒОЛОВА**

## Еҙем

*Аҡ таштарҙан яуған көмөш нурҙар*
*Еҙемемдә минең сағыла.*
*Ғорур ҡаяларға хозурланып*
*Ярҙа торам әле тағы ла.*

*Ҡауыштылар йылға менән ҡая, –*
*Һөйөү бармы уға тиңәлер?*
*Һуғармаһа йылға наҙҙар менән,*
*Һағышынан тау ҙа шиңәлер.*

*Ярҙарына һыя алмай йылға,*
*Ҡурҡыу әҫәре юҡ саяның:*
*Тулҡынланып, ярһып-ярһып сума*
*Ҡосағына мәғрур ҡаяның.*

*Сығып ҡаяһының ҡосағынан,*
*Ҡырт борола Еҙем ниңәлер...*
*Тау һөйөүен ҡабул итмәгәнме,*
*Көс тапмағанмы ул инәлер?*

---

*Рәйлә Нәҙерғолова Ғафури районы Бәйембәт ауылында тыуған. Әҫәрҙәре “Һәнәк” журналында, “Йәшлек”, “Ашҡаҙар”, “Табын” гәзиттәрендә даими баҫылып тора. 2009 йылда Бәләбәй ҡалаһында үткән “Илһам шишмәләре” шиғри байрамында лауреат булды.*

*Тулҡын ҡалмаҫ ҡая ҡосағында,*
*Алыҫ уның барыр юлдары.*
*Тик онотмаҫ Еҙем, һис онотмаҫ*
*Ҡаяһының көмөш сыңдарын.*

## Бикле ине

*Оноторға теләп, мәңгелеккә*
*Йөрәгемдән һыҙып ташланым.*
*Һөйөүемде йомоп устарыма,*
*Өр-яңынан тормош башланым.*

*Кисереүҙәр булмаҫ һис ҡасан, тип*
*Бикләп ҡуйған инем йөрәкте...*
*Йыһандарҙы ярып, йәшен уты*
*Көйҙөргәнсе атты тирәкте.*

*Күңелемдең йәшнәп күкрәүеме,*
*Ауазымы үткән йәшлектең?*
*Йыртып йәнә ваҡыт ҡоршауҙарын,*
*Ситлегеңә килеп эләктем...*

*Бикле ине йөрәк – һинең өсөн...*
*Мәңгелеккә йоҙаҡ ҡуйылған.*
*Тик исемең... күңел түрҙәремә*
*Алтын хәреф менән уйылған.*

## Ҡайтып барам, әсәй

*Ҡасан ғына, ҡайтып яндарыңа,*
*Йөрәк серҙәремде сисәйем?*
*Күҙҙәреңә ҡарап һоҡланайым,*
*Көләс йөҙлө ғәзиз әсәйем.*

*Тауышыңды бер ишетер өсөн,*
*Ҡайтам, тиеп ҡанат ҡағынам,*
*Күҙ алдында һәр саҡ йылмайыуың,*
*Һин – ҡояшы тыуған яғымдың.*

*Керһәң әгәр, әсәй, төштәремә,*
*Уңа юлым, арта шатлығым,*
*Бына тағы һине бер күрергә*
*Ҡайтып барам уҡтай атлығып.*

*Ҡайтып барам, әсәй, ҡайтып барам*
*Бала сағым үткән юлдарҙан.*
*Күңелдәге һағыш, бер моң булып,*
*Һыҙылып сыға нескә ҡылдарҙан.*

**Рәшиҙә ШӘМСЕТДИНОВА**

## Ғәзиз телем

*Ғәзиз телем күрәм мин*
*Ҡыҙҙарымдың күҙендә.*
*Майҙай наҙлы сабырлыкта,*
*Ҡорос төҫлө түҙемдә.*

*Ғәзиз телемде ишетәм*
*Һандуғас тауышында.*
*Хан һарайҙарында түгел,*
*Бесәнсе ҡыуышында.*

## Яҙмыш фалы

*Әүрәтергә, һикертеп*
*Алып ҡаш,*
*Тағы һала яҙмыш миңә*
*Ете таш.*

*Фал асыуҙан, аҡыллымын,*
*Ваз кисмәм.*
*Табан остарына тиклем*
*Наҙ һиҙәм.*

*Инҡар итмәм тәҡдиремдең*
*Уйынын,*
*Бауыр малым була алһа*
*Ҡуйыны.*

*Фирүзәләй нурҙар бөркөп*
*Балҡырмын.*
*Мөғжизәнән бар тәбиғәт*
*Ҡалыр тын.*

***

*Илемде һағынып ҡайттым,*
*Илем иҫерек.*
*Уның былдай холоҡҡонаһын*
*Булмай кисереп.*

*Балам ҡайтҡан,тиеп миңә*
*Йәймәй ҡосағын.*
*Ҡаҙан аҫмай ҡаҙы һалып,*
*Яҡмай усағын.*
*Ҡапҡа асып, минең өсөн*
*Бейемәй елдәр.*

---

*Рәшиҙә Шәмсетдинова Ишембай районының Иҫәкәй ауылында тыуған. Маҡар урта мәктәбен тамамлағас, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетында уҡый, Илеш районы Һеңрән мәктәбендә, Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтында эшләй. 1996 йылда Стәрлетамаҡ яҙыусылар ойошмаһының әҙәби консультанты итеп тәғәйенләнә. 2002 йылдан – Стәрлетамаҡ медицина колледжында китапхана мөдире. Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

*Ауылымды баҫып алған*
*Убырҙар, ендәр.*

*Илап,*
*һибелдем ысыҡтай,*
*Алдына ятып.*
*Йыйып алды ла…*
*ебәрҙе*
*Сәмәйгә һатып.*

## *Шайтан туйы*

*Аҙнаның ни көнө?*
*Донъя –*
*Түңкәрелгән түңәрәк.*
*Һырландай һырыша ҡыҙҙар,*
*Уларға һөйөү кәрәк.*

*Ҡунаҡтарҙы һыйлайым тип,*
*Усаҡ яна тырышып.*
*Ҡарт тирәкте биҙгәк тотҡан,*
*Ауыл бара ығышып.*

*Аҡ бабайҙар телдән ҡалған,*
*Юҡ янында һис кеме.*
*Ураткан үҙен ҡаланан*
*Ҡасҡан албаҫты ене.*

*Шайтан туйы барамы ни…*
*Үлгән гармун моңдары.*
*Шайтан бейеүе – уртала,*
*Өҫтә – шайтан тундары.*

*Эй, күңелле егеттәргә*
*Ҡыҙҙарҙың ҡәҙерендә:*
*Бергәләп һыра эсәләр*
*Туғандар ҡәберендә.*

---

**Әксән ХӘЛИЛОВ**

***

*Ике дәүер кисергәндә*
*Ике диуар*
*(берәү үлә, берәү тыуа)…*
*Таш усынан*
*(килгәнгә лә, киткәнгә лә!..)*
*һыу эсереп,*
*теҙҙе йыуа, йөҙҙө йыуа.*

---

*Әксән Хәлилов 1959 йылда Көйөргәҙе районы 1-се Кинйәабыҙ ауылында тыуған. Өфөнөң 1-се интернат-мәктәбендә уҡый. БДУ-ның журналистика бүлеген тамамлай. Бөгөн – Стәрлетамаҡ ҡалаһының 2-се лицей-интернатында педагог.*

*Илке-һалҡы илгә килһә*
*Ике халыҡ*
*Ҡуба ҡойоно, –*
*Өмөт өрөп өгөтһөҙө,*
*Өгөт өрөп өмөтһөҙө*
*Теҙҙе йыуа, йөҙҙө йыуа*
*ҡомо менән, –*
*донъя уйыны.*

***

*Ғүмер башында абынған*
*ташҡа бәрелеп*
*ҡанағас башым,*
*табыныр ташымды таныным –*
*ғүмер һуңында табылыр ташым.*

***

*Тегеләй китә,*
*былай үтә һыҙыҡ.*
*Һуҡмаҡ һыҙып,*
*берен-бере боҙоп,*
*арба тәгәрмәсе китте уҙып…*
*Киҫәк-киҫәк ҡалған*
*Һыҙыҡ урталары ҡыҙыҡ:*
*билсән үҫә сәсе туҙып,*
*ҡылған бәүелә ҡыҙып,*
*йырлай сиңерткә һуҙып.*
*Бер уй киҫә күңелемде*
*йыуатып, әллә боҙоп:*
*һыҙыҡ урталары теүәл,*
*һыҙыҡ ситтәре боҙоҡ.*

---

**Рима ҒӘЛИМОВА**

## Донъя башланалыр…

Мөхәббәтем, мине ташлама,
Донъя әле яңы башлана…
**Мостай Кәрим.**

*Беҙҙең һөйөү еңер, кисермәҫ ул,*
*Һин ташлаһаң-ташламаһаң да…*
*Донъя беҙҙән генә башланмай бит,*
*Фашланһаҡ та, фашланмаһаҡ та.*

*Күрһәтмәйсә урлап һөйҙөң мине,*
*Күҙҙәр теймәһен тип, күрәһең.*

---

*Рима Ғәлимова Ишембай районының Йәнырыҫ ауылында тыуған. Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтының филология факультетын тамамлай. Әлеге көндә “Ашҡаҙар” гәзите редакцияһында эшләй. Яҙыусылар һәм Журналистар союзы ағзаһы. Ике китап авторы.*

*Үкенескә ҡалманы бит һөйөү,*
*Сәстәремдән һыйпап үрәһең.*

*Һин ҡағылған һайын*
*һыйынамын,*
*Ҡосағыңда килә үләһем.*
*Ике йөрәк ярһып ҡушылғанда*
*Донъя башланалыр, күрәһең...*

## *Мәңгелеккә*

*Ихласлығым менән алдырҙыммы?*
*Тоғролоғом хайран иттеме?*
*Үҙең генә белгән тормошоңдо*
*Минең булмыш байрам иттеме?*

*Уртаҡлыҡ юҡ беҙҙең яҙмыштарҙа,*
*Йәндәр ике ярҙан тартылды.*
*Яҙғы ташҡын һымаҡ ярһып һөйөү*
*Йылғаларҙы йырып артылды.*

*Артылды ла, ҡабат кире ағып,*
*Тарихтарға инеп юғалды.*
*Тыуыр сабыйыбыҙ йәне булып*
*Мәңгелеккә табан юл алды.*

---

**Рита ФӘТҠУЛЛИНА**

## *Заң*

*Мин Күктәрҙең заңын ишеттем,*
*Ҡолағымды Ер түшенә ҡуйып.*
*Ике болот дөмбөр ҡаҡҡан саҡта*
*Ер йөрәге ҡуйҙы һулҡып-һулҡып.*

*Мин мәңгелек берлек заңын тойҙом:*
*Күктең ҡайтауазы – Еремдә,*
*Күктең ҡайтауазы – яҙмыштарҙа,*
*Күктең ҡайтауазы – йәнемдә.*

*Заң әмере ғәмәлдәргә күсә,*
*Улар теҙә ғүмер мәрйенен.*
*Бөйөк заңды йәндә уятыуың –*
*Һинең яҙмыш, һинең мәйелең.*

---

*Рита Фәтҡуллина Ишембай районының Маҡар ауылында тыуған. Маҡар урта мәктәбен, Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтын, БДУ аспирантураһын тамамлай. Бөгөнгө көндә Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһының башҡорт әҙәбиәте кафедраһы уҡытыусыһы, филология фәндәре кандидаты, Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

*Мин ер зарын тойҙом ошо заңдан –*
*Ике яҡлы изге бәйләнештән.*
*Ерҙән килгән ниндәй ҡайтауаздан*
*Күктә ике болот бәрелешкән?!*

## Атланттар

*Улар эргәһендә беҙ – кешекәй,*
*Улар эргәһендә беҙ – ваҡтар,*
*Күк көмбәҙен үҙ иңдәре менән*
*Күтәрәләр мәғрур атланттар.*

*Һорамайыҡ: "Һеҙгә нисә йәш?" – тип,*
*Атлант йәше – быуат ораны.*
*Фиҙакәрлек менән үлсәй улар*
*Ер һәм күкте бәйләр араны.*

*"Талант хаҡы – йәшәү мәғәнәһе" –*
*Ҡарашынан таны заң-антты.*
*Тик, мәңгелек ҡеүәт эйәһе, тип*
*Баһалама, зинһар, атлантты.*

*Болоттарҙа уйнар йәшендәрҙән*
*Атлант йәне нығыраҡ сараһыҙ.*
*Бейеклеге менән – ул юғары,*
*Бөйөклөгө менән – ул яңғыҙ.*

*Таланттарҙа Хоҙай өлөшө бар,*
*Таланттарға оло талап бар.*
*Күк көмбәҙе ишелеп төшөр кеүек,*
*Ауып китһә бер саҡ атланттар.*

## Тормош юлында

*Тигеҙ ерҙә һөрлөктөм дә киттем:*
*Күҙ тигәнең – ботаҡ тишеге.*
*Бысраҡты һөҙҙөм йөҙөм менән –*
*Ҡоткарығыҙ минең ишене.*

*Һуҡмаҡташтар яҡын. Берәү ҡырҡа:*
*"Нишләйһең ул?" – тиеп аҡырҙы.*
*Ҡулын бирҙе. Ҡалҡынып та торҙом,*
*Таяу итеп көслө яурынды.*

*Башҡа һүҙ ҡушманы. Мин дә, ахыры,*
*Рәхмәт әйтмәй, йәнәш атланым,*
*Йөҙөм менән боҙоп манзараны,*
*Төҫөм менән боҙоп сафтарҙы.*

*Һул яғымда кемдер шыпырт ҡына*
*Урынынан күсте йәһәтләп.*
*Шулай кәрәк икән, алыҫтараҡ*
*Минһеҙ ерҙә иркен рәхәтлән.*

*Башты, тием, ниңә аҫҡа эйәм,*
*Батҡаҡ – теләп кейгән битлекме?*
*Эҙем ҡалған һуҡмаҡ – яҙмыш һыҙған*
*Ғүмеремме, әллә ситлекме?*

*Бысраҡ йөҙөм менән һеҙгә баҡам,*
*Һуҡмаҡташтар, кемдә сафлыҡ бар?*
*Минең хәлде күргән ҡараштарҙа*
*Тантана бар,*
*Тимәк, хаслыҡ бар…*

***

“Күҙ алдына ғына килтер: миллион йылдар элек һин был донъяла булмағанһың, күпмелер ваҡыттан булмаясаҡһың…”

(Кинофильмдан)

*Динозавр менән сәфәрҙәшлек*
*Яҙмағанға Ер шарында әүәл*
*Беҙ сәбәпсе түгел…*
*Ошо дәүер,*
*Ошо ғүмер – йәнебеҙгә хәләл.*

*Ҡояш тирәһендә ҡасан килеп,*
*Нисә тапҡыр уны буйлауыңдан,*
*“Мин уңышһыҙ һәм бәхетһеҙ”, – тиеп*
*Әрнеп-әрнеп мең ҡат уйлауыңдан*
*Ни фәтеүә?!*

*Ер шарында һинең һалған һуҡмаҡ*
*Үкенестәр эҙе булып ҡалһа,*
*Юл япрағын һуғарырҙай тамсы*
*Күҙҙәреңдән зәһәр ыуҙай тамһа,*
*Ни мәғәнә?!*

*Ер өҫтөндә миллион һуҡмаҡтар бар,*
*Миллион яҙмыштарҙың тамғаһы…*
*Дәүер булып китеп барған сағың…*
*Юл башы бар…*
*Барҙыр аҙағы…*

*Һинең сәфәр мәғрур динозавр*
*Төштәренә керһә ғәм көҫәп,*
*Тарихтарҙы уятыр януар, ярһып:*
*“Уй-тамғаны уй һин мең үлсәп.*
*Йәнгә инселәнгән изге ғүмер –*
*Иң ҙур ҡиммәт ерҙә – аңлаһаң?!”*

*… Бит бәхетле булған динозавр:*
*“Мин бәхетһеҙ”, – тиеп уйлаған…*

**Кәрим БУЛАТ**

## *Ил яҙмышы – ир яҙмышы*

*Ил яҙмышы – ир яҙмышы,*
*Ил яҙмышы ҡатмарлы.*
*Үҙ илемә исем биргән*
*Башҡорттарым аһ-зарлы.*

*Ил яҙмышы – ир яҙмышы,*
*Ирҙәр тапмай таяныс.*
*Йорт тотҡаһы булыр кеше*
*Ҡәҙер күрмәй – аяныс.*

*Мир менән түләй алмайбыҙ*
*Ғазраилға хаҡтарҙы.*
*Ирҙәрҙе илдә юғалтыу*
*Бәғеремде аҡтарҙы.*

*Ил яҙмышы – ир яҙмышы,*
*Үҙ яҙмышым ҡатмарлы.*
*Һан белмәгән сит бауырҙар*
*Ил-моңомдо тапармы?..*

## *Тауға менәм*

*Тауға менәм ғүмер һуҡмағынан,*
*Һулай-һулай йыһан туҙанын.*
*Иңбашыма һалып яуаплы йөк,*
*Заман менән алға уҙамын.*

*Тар һуҡмағым упҡын ситтәрендә –*
*Ил тип янғас, һис тә ҡурҡытмай.*
*Һикәлтәләр аша үрләгәндә,*
*Минең өсөн һис кем ут йотмай.*

*Хайран ҡалып бағам офоҡтарға,*
*Таң нурына һәр саҡ күҙ һалам.*
*“Халҡым!” – тиеп йәнем әсенгәндә*
*Артылыштан уҙам, көс алам.*

*Алдарымда тағы артылыштар,*
*Ҡолас йәйгән төҫлө йылмайып,*
*Тәбиғәттең серле ҡөҙрәтенән*
*Олоғаям ғына йыл һайын!*

---

*Кәрим Булат (Сәлимов Кәрим Булатбай улы) Ғафури районының Яугилде ауылында тыуған. БДУ-ны тамамлай. Бер нисә китап авторы. Стәрлетамаҡта йәшәй.*

Фәрит ӘХМӘТОВ

## Ҡайындарым

*Ҡайындарым, шауламағыҙ берүк,*
*Бөгөлмәгеҙ елдәр иҫкәндә.*
*Елдәр уҙыр, тынысланырһығыҙ*
*Ғүмер юлҡайҙарын кискәндә.*

*Бөгөн һеҙ ҙә һағынғандай мине,*
*Таратайым һеҙҙә һағышым.*
*Елдәр менән мин дә һөйләшәйем:*
*Йәшлектәрҙән уҙып барышым.*

*Таратығыҙ минән бер аҙ ғына*
*Шау һағыштар баҫҡан сағымды.*
*Бәлки, таба алырмын йәшлегемдә*
*Шаулап аҡкан көслө ағымды.*

*Ҡайындарым, бөгөлмәгеҙ берүк*
*Әсе елдәр уҙып барғанда.*
*Һеҙҙең менән серләшәһем килә,*
*Йәшлек елкәнемдән ҡалһам да.*

## Үҙемдә бар

*Үҙ санам бар,*
*Үҙ самам бар.*
*Күрелмәгән*
*Ҙур сарам бар.*

*Үҙ йәрем бар,*
*Үҙ йәмем бар,*
*Йәшәтерҙәй*
*Ҙур йәнем бар.*

*Үҙ ерем бар,*
*Үҙ йөҙөм бар.*
*Шул еремдә*
*Ҙур йөгөм бар.*

*Үҙ илем бар,*
*Үҙ телем бар.*
*Телем биргән*
*Ҙур серем бар.*

*Үҙ ғәмем бар,*
*Үҙ тәмем бар.*
*Йәшәүҙәргә*
*Ҙур сәмем бар.*

---

*Фәрит Әхмәтов Стәрлебаш районы Мостафа ауылында тыуған.*
*Әҫәрҙәре республика матбуғатында, дөйөм йыйынтыҡтарҙа даими баҫыла килә.*

**Артур БУЛАТОВ**

## Ваҡыт, ойоп, тәмле йоҡоға талған

*Ваҡыт, ойоп, тәмле йоҡоға талған,*
*Һис кем уны уятырға ҡыймаç.*
*Күңелкәйем хозурлыҡ шәле ябынған,*
*Башҡа йәшәү теләге сарсатмаç.*

*Төнгө күктә һуңғы йондоҙ һүнгән,*
*Тимәк, хыялдар мине борсомаç.*
*Йылғаҡайҙар ағыуҙарынан туктаған,*
*Инде улар яр буйҙарын саймаç.*

*Япраҡтар эленеп тороп моңайғандар,*
*Ел, елпетеп, уларҙы ҡыуандырмаç.*
*Усаҡтағы ҡуҙҙар шулай быçҡып ятыр,*
*Уларҙың һалҡын йылыһы һүрелмәç.*

*Хәтфә үләнгә иртәнге ысыҡ төшкән,*
*Аҡ томан булып ул күтәрелмәç.*
*Ваҡыт, ойоп, тәмле йоҡоға талған,*
*Һис кем уны уятырға ҡыймаç.*

## Эйек! Беҙ бит икәү бер туған

*Эйек! Беҙ бит икәү бер туған,*
*Икебеҙгә бер ғүмер, бер яҙмыш.*
*Йылдар үтә, юлдар тарая,*
*Быҙау һалған күңелкәйгә һағыш.*

*Һыктағанда мин йәшлегемде,*
*Күҙ йәштәре тамыҙа йәш таллыҡ.*
*Насар ҡылыктарға аяҡ баçһам,*
*Иçкәртеп тора һиндәге сафлыҡ.*

*Эйеккәй ташһа, ас бүреләй,*
*Тыуған яркайҙарын һоғона.*
*Йөрәккәйҙә илһам дарьяһы,*
*Хис-тойғолар шашып ҡоторона.*

*Эйек! Беҙ бит икәү бер туған,*
*Икебеҙгә бер ғүмер, бер яҙмыш.*
*Йылдар үтә, юлдар тарая,*
*Быҙау һалған күңелкәйгә һағыш.*

---

*Артур Булатов 2007 йылда Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһын тамамланы. Әлеге көндә аспирантурала уҡый. Уның әҫәрҙәрендә тыуған яғы – Күгәрсен районында йәшәгән өләсәһенең тел байлығында тәрбиәләнгәнлеге ярылып ята.*

## Ғәлиә ҒӘЛИӘСКӘРОВА

***

*Машиналарҙа түгелмен,*
*Кәрәкмәй аттары ла,*
*Туғандарға осоп барам*
*Шатлыҡ ҡанаттарында!*

*“Етегән йондоҙ – ете икән!” –*
*Шуларҙыр беҙҙең хаҡта.*
*Ултырайыҡсы серләшеп,*
*Һүҙҙәр һыймай бит хаҡҡа.*

*Үҫтек бергә, атай-әсәй*
*Ҡуйынына һыйынып.*
*Күпме хәтирәләр ҡалған*
*Күңелдәргә уйылып.*

*Хәтерләйек бөтәһен дә,*
*Китап уҡыған һымаҡ.*
*Ултырайыҡ ҡабаланмай*
*Кистәр ултырған һымаҡ.*

*Сәйҙәрен маҡтап эсәйек,*
*Күҙ һалмайыҡ “ағына”.*
*Беҙҙең йөрәк моңдарылай,*
*Гармун моңо ағыла.*

## ***Әсәйем һалған икмәк***

*Ер өҫтөнә яңы таң һыҙыла,*
*Күтәрелә өҫкә күк төтөн.*
*Ҡайнар мейес тулып икмәк бешә,*
*Алһыу ҡояш кеүек бөп-бөтөн.*

*Йүгерешеп беҙ ҙә килер инек,*
*Әсәй икмәк йөҙөн ҡараһа.*
*Байрам төҫлө оло шатлыҡ ине,*
*Икмәк еҫе өйгә таралһа.*

*“Туйып булырмы бер икмәккә?..” – тип*
*Әсәй әрнеүҙәре иҫемдә.*
*Шөкөр итеп хәҙер йәшәргә бит,*
*Күпме ризыҡ өҫтәл өҫтөндә.*

*Икмәктең дә юҡ ниндәйе генә –*
*Кибеттәргә барып керәһең.*

*Ғәлиә Ғәлиәскәрова (Кәримова) Ауырғазы районының Балыҡлыкүл ауылында тыуған. Талбазы урта мәктәбенән һуң Стәрлетамаҡ педагогия институтының филология факультетын тамамлай. Тәүге шиғырҙары ҡала һәм республика гәзиттәрендә, “Ағиҙел”, “Пионер” журналдарында баҫыла.*

Тел осонда ғына торорлоғон
Тик әсәйем һалған, күрәһең...

Хәтеремдә һаман ауылым таңы,
Мөрйәбеҙҙән йәйелә күк төтөн!
Аҡ яулыҡлы әсәй икмәк әүәләй,
Ҡайнар ҡояш кеүек бөп-бөтөн.

---

**Рәсим ШӘФИ-РӘХМӘТ**

## Мәктәп

Ғүмер – мәктәп, тормош – уҡытыусы,
Бер туҡтауһыҙ бара дәресе.
Аҙым һайын көтә имтиханы –
Яуаптарҙың кәрәк дөрөҫө.

“Синыфташтар” – минең быуындаштар.
Бер һорауға яуап – күп төрлө.
Бик талапсан тормош-уҡытыусы:
Яңылыштыңмы – ҡуя “икеле”.

Ҡаралама ҡабул итмәй тормош –
Яуаптарҙы яҙам тик аҡҡа.
Хаталанһам – тормош “бармаҡ янай”,
“Тәртип боҙһам” – “ҡуя босмаҡҡа”.

Булмаһам да тәүге “синыфта” мин,
Тормош ҡуя һаман мең һорау.
Ғүмер – мәктәп, мин – уҡыусы.
Берүк
Ашыҡмасы, һуңғы ҡыңғырау!..

***

Яҙған хаттарыма яуап көтөп
Йәй ҙә уҙҙы, инде көҙ үтте.
Төн буйына бөгөн ҡарҙар яуған
Күмеп, гүйә, һуңғы өмөттө.

Икәү йөрөгән һуңғы һуҡмаҡтарҙан
Үткәндәрҙе сығып эҙләнем.
... Һиңә яҙған хат юлдары һымаҡ
Ҡар өҫтөндә ҡалған эҙҙәрем.

---

*Рәсим Шәфи-Рәхмәт (Рәхмәтуллин) 1964 йылда Ауырғазы районының Солтанморат ауылында тыуған. Шиғырҙары матбуғатта даими күренә.*

## Байрам үткәс

*Байрам үтте. Булмаған да төҫлө*
*Телмәр-ҡотлау, сәләм-теләктәр.*
*Бары ла китте. Тынлыҡ. Өнһөҙ генә*
*Кәштәләрҙән ҡарай бүләктәр.*

*Күңелдәрҙә һыуыҡ бушлыҡ ҡалды,*
*Яңғыҙ бүлмә ҡалды тønәлеп.*
*Шәмдәр һүнде. Тәҙрәнән ҡарай*
*Иртәгәһе һоро көндәлек.*

*Яу ҡырылай өҫтәл уртаһында*
*Иҫән ҡалған сәскә бәйләме.*
*...Булған байрамдарҙан иң ысыны –*
*Байрамдарҙы көтөү байрамы...*

## Тимер юл вокзалында

*Мин тәүге лә һәм һуңғы ла түгел –*
*Был вокзалдан китә мең-меңдәр.*
*Мин бараһы юлдар – тимер юлдар.*
*Юлдар – сыҙам, юлдар – тимерҙәр.*

*Ҡулды болғап, китер мәлдәр еткәс,*
*Тулышыр ҙа ташыр күңелдәр:*
*Мин бараһы юлдар ғына тимер,*
*Күңелдәр бит... тимер түгелдәр...*

## Яҙҙар етә...

*Яҙҙар етә: хистәр ҡабат*
*Йоҡоға талмаҫ хәҙер.*
*Яҙҙар етә: күпме йөрәк*
*Ғашиҡ булырға әҙер...*

*Тик яҙҙар ғына сәбәпсе*
*Хистәр уяныуына.*
*...Мөхәббәтһеҙ яҙ–яҙ түгел,*
*Көндәр йылыныу ғына...*

**Флүрә СӘЛИМОВА**

# Ерҙе һатмағыҙ!

Уйланыу

– Ерҙе һатырға! Урман-һыуҙарҙы һатырға! Зәңгәр күлдәрҙе, сәскәләрҙе һатырға! Һатырға, һатырға, һатырға!

Ер – байҙарға! Урман-һыуҙар – байҙарға! Зәңгәр күлдәр, сәскәләр – байҙарға!

– Ер кешеләрен, икмәк үҫтереүселәрҙе ҡайҙа ҡуйырға?

– Ҡолдар яһарға!

Ер таң нурҙарынан керпектәрен асып, йоҡонан ғына уянып килә ине, ошондай тауыштарҙы ишетте. Ҡурҡып китте, тертләп китте, йөрәге дөп-дөп типте.

– Мине һатырға?! – тине ул ғәжәпләнеп. – Юҡ, мин үҙ теләгем менән һатылмайым. Мин һатлыҡ мал түгел, һатлыҡ әйбер ҙә түгел. Мин – Ер-әсә! Миңә донъя табына, кешеләр табына. Ҡояш миңә нурҙарын ҡоя. Ҡараңғыла ҡалһам, күктә Ай ҡалҡа, йондоҙҙар ҡалҡа. Ай нурҙары, йондоҙҙар мине яҡтырта. Ай-йондоҙҙар ҡара болот пәрҙәләрен үтеп сыға алмай торғанда, мин шомға батам. Болоттар таралыр. Күк йөҙө яҡтырыр. Тик кешеләр күңелендә болоттар ҡуйырмаһын, кешеләр күңеле ҡараймаһын, тим.

Ҡышын мин тәрән йоҡоға сумам. Яҙын ғына уянам. Яҙға тиклем хәл алам.

Мин йоҡола саҡта, ҡыш булһа ла, игенсе дуҫтарым йоҡламай. Мине тәрбиәләйҙәр, ҡарайҙар. Ашламалар ташыйҙар.

Һәм бына яҙ килә. Ҡояш миңә йылы һулышын өрә. Минән боҫ күтәрелә. Күктә турғайҙар миңә моң түгә. Игенсе тәүге бураҙналарын яра. Минән рәхимлек, шәфҡәтлелек һорап, изге теләктәрен теләй-теләй, бураҙнаға орлоҡтар һала. Мине үҙ иткәндәргә, миңә күкрәк көсөн биргәндәргә, маңлай тирен түккәндәргә мин бурыслы булып ҡалмайым. Хеҙмәттәрен данлайым. Йыл ыңғай килгәндә башаҡтар шаулатам. Игенселәрҙең йөрәгендә – көс, күңелдәрендә яңы дәрт уятам. Икмәгем менән илде байытам, донъяны яҡтыртам.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында кешеләрҙең аслыҡтан күргән ғазаптарын мин онотманым. Бер телем икмәккә лә тилмереп йәш түккән сабыйҙарҙың ыҙаларын онотмағыҙ һеҙ ҙә, кешеләр.

Заманыбыҙ өҫтөндә төрлө елдәр иҫә. Ил байлығы, минең байлыҡ һатылып бөтөп бара. Төрлө юлдан, сит яҡтарға, сит ҡулдарға аға, көмөш аға, нефть аға, бөтә байлыҡ аға. Мине һатыу өсөн хәҙер бәхәс бара. Үҙҙәренә байлыҡ, файҙа эҙләүселәр, иген үҫтереүҙең нимә икәнлеген дә белмәүселәр йәбештеләр минең яғаға.

Мин – Ер-әсә! Мине һатмағыҙ! Изге күңелле кешеләр, мине яҡлағыҙ, һаҡлағыҙ! Элек-электән ата-бабаларыбыҙ мине яҡлаған, ҡаһармандар мине һаҡлаған. Яу ҡырҙарында баштарын һалһалар ҙа, Илен, Ерен һатмаған.

Мине һатмағыҙ! Мине һатһағыҙ – илегеҙҙе, динегеҙҙе, телегеҙҙе һатаһығыҙ. Мине һатһағыҙ – әсәгеҙҙе, атағыҙҙы, балағыҙҙы һатаһығыҙ. Мине һатһағыҙ – ата-бабаларығыҙҙы, тамырҙарығыҙҙы һатаһығыҙ. Мине һатыу – оло гонаһ, мине һатыу – фажиғә. Был турала уйланығыҙ!

---

*Флүрә Сәлимова Стәрлебаш районы Әмир ауылында тыуған. Тәүге хеҙмәт аҙымдарын Турмай мәктәбендә уҡытыусы булып эш башлай. Унан һуң мәҙәниәт өлкәһендә эшләй. 1990 йылдан хаҡлы ялда.*

*Әҫәрҙәре урындағы һәм республика баҫмаларында баҫыла килә. Үҙнәшер менән китаптары донъя күрҙе. 2008 йылда татар телендә "Мәңге чылтыра, чишмә" йыйынтығы сыҡты.*

## Әмир ҠОТЛОЗАМАНОВ

# Фәрештә

Хикәйә

Ишек асылды ла, унан ҡурсаҡтай биҙәнгән ҡыҙҙың башы күренде. Ул стена буйлап теҙеп ҡуйылған ултырғыстарҙа ултырған ҡатындарға ҡарап:

– Кәримова! – тине. Әклимә үҙ фамилияһын ишетеү менән һиртмә һикерткәндәй урынынан торҙо. Былай ҙа ҙур ҡара күҙҙәре тағы ла ҙурайыбыраҡ киткәндәй булды, йөҙө ағарына төштө, һәм шул көйө секретарь ҡыҙҙың башы кереп юғалған ишеккә табан атланы – алғы бүлмәне үтеп, ҡара күн менән көпләнгән ишекте асып, тикшереүсе янына, йылтыр өҫтәл артында ултырыусы һары погонлы милиция офицеры ҡаршыһына барып баҫты. Офицер Әклимәгә күҙ ташлап ҡына алды ла ниндәйҙер ҡағыҙҙы уҡыуында булды. Әклимәгә башын күтәрмәй генә, ишаралап ултырырға ҡушты. Уның ишараһына Әклимә:

– Ярар, рәхмәт, баҫып ҡына торормон, – тине. Тикшереүсе, уҡыуынан айырылып, Әклимәгә күтәрелеп ҡараны һәм уның аяҡтарына текәлде. Ихтыярһыҙ Әклимә лә аяҡтарына ҡараны. Бәрәс, яланаяҡ икән дә баһа.

– Нишләп улай яланаяҡ көйө керҙегеҙ? – тине тикшереүсе, үҙенең ирендәре ситенә йылмайыу йәшеренгәне күренеп тора.

– Коридорҙа ултырғанда һалып торғайным, кейергә онотҡанмын, – тине Әклимә аҡланып.

– Барығыҙ, аяғығыҙға кейеп керегеҙ, – тине тикшереүсе.

Әклимә килеп сығыуға көтөп ҡалған ике ҡатын да урындарынан һикереп торҙолар һәм икеһе бер юлы тиерлек:

– Нимә һорай? Ни ти? – тип Әклимәгә ташландылар. Әклимә “Ҡуйығыҙ әле!” тигәндәй ҡулын ғына һелтәне лә иҙәндә аунап ятҡан туфлиҙәрен кейеп, киренән кереп китте. Ҡатындар аптырашып урындарына ултырҙылар. Ҡалын күкрәкле, ҡыҫҡа аяҡлыһы “И Аллам!” – тип көрһәндә. Икенсе ҡатын – уның киреһе – зифа буйлы, ҙур зәңгәр күҙле. Йыуан ҡатын көрһөнөп “И Алла!” тигәндә, ул да “Ой Господи” тип ҡуя.

Яңынан кергәндә тикшереүсе һаман уҡый ине әле. Офицер ярайһы уҡ йәш кенә, погондарында бер нисә бәләкәй генә йондоҙ бар. Ул ҡара бөҙрә сәстәрен әленән-әле башын ҡағып, йөҙөнән артҡа ташлай. Был хәрәкәте үҙенә шул хәтлем килешә, Әклимә, бераууҡ үҙен, аянысла хәлен онотоп, ҡатын-ҡыҙҙарса уның матурлығына һоҡланды. Әммә был бер бик ҡыҫҡа мәл генә ине, шунда уҡ күңелен шәхсән үҙ хәле биләне.

– Ултырығыҙ, ултырығыҙ, – тине тикшереүсе Әклимәгә ҡарамай ғына.

Әклимә ултырҙы һәм ихтыярһыҙ үҙенең бөгөнгө хәйерһеҙ көнө тураһында уйлана башланы. Бөтәһе лә шул Рәхиләнең арланы Мәғрүф-Мишканан башланды инде. Ул бөхтә кейенеп ала ла ит комбинатына, улар янына, кергеләп йөрөй; бында эшләгән ҡатындар араһында үҙ кешегә әйләнеп бөткән. Рәхилә инде уны маҡтап бөтөрә алмай. “Уның ҡалала белмәгән начальнигы юҡ, милиция начальнигы менән дә аралары һин дә мин”, – ти.

Бөгөн дә шул килгәйне.

– Ҡыҙҙар, мин барҙа ҡурҡмағыҙ, итте мул алығыҙ, ҡарауылда минең дуҫтар тора...

Асыҡ ауыҙҙар! Йә инде, башһыҙҙар, шул шылғаяҡтың һүҙенә ышандылар бит.

---

*Әмир Ҡотлозаманов 1935 йылда Ғафури районының Игенйылға ауылында тыуған. Ҡазан педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт факультетын, Ырымбур педагогия институтының тарих факультетын тамамлай. 40 йыл балалар уҡыта. Хикәйәләр яҙа, ике йыйынтыҡ авторы. Стәрлетамаҡ ҡалаһында йәшәй.*

Улай бик шәп кеше булһа, Рәхиләнән тегендә-бында ҡыҫтыртып, ит урлап ташытамы ни?! Үҙҙәре бит нисек рәхәт кенә сыға торғайнылар. Ҡарауыл башлығына тейешле аҡсаһын йыйып бирәләр ҙә, ул кемде кәрәк майлай, ҡапҡанан мажараһыҙ ғына сыға ла китә торғайнылар. Шул шылғаяҡҡа ышанып сығабыҙ, тип ОМОН-сыларға килделәр ҙә ҡаптылар. Мәғруф ОМОН-сылар менән һөйләшә башлағайны, иҫерекһең тип, үҙен айныҡтысҡа алып киттеләр.

Күрәген, ломын күтәреп, кувалда менән сөйҙәрҙе ҡаға-ҡаға, шул тимер юл ремонтында ғына йөрөһә, моғайын, был көнгә ҡалмаған булыр ине.

... Иҫенә бала сағындағы бер хәтирә төштө. Бергә уйнап йөрөгән күрше ҡыҙы Гөлшаттың ҡурсағын – һыңар ҡуллы йөнтәҫ айыуын урамдан табып алып кергәйне, әсәһе, ҡурсаҡты күреп:

– Был, балам, Гөлшаттың ҡурсағы бит, бар, үҙенә илтеп бир, – тигәс, Әклимә:

– Мин уны урамдан таптым, хәҙер минеке лә ул, – тип ҡаршылашҡайны. Әсәһе:

– И, балам, Гөлшат ҡурсағын таба алмай илап йөрөйҙөр инде, – тине, үҙе иламһыраған булды. Әклимә шунда уҡ Гөлшатты бик йәлләне.

– Әсәй, мин хәҙер уның ҡурсағын илтеп бирәм, – тип Гөлшаттарға тороп йүгергәйне. Гөлшат ҡурсағын күреп ысынлап та бик шатланды ул саҡ. Бала сағындағы шул бер хәлдән башҡа Әклимәнең кеше әйберенә тейеү түгел, табып үҙләштергәне лә хәтерендә юҡ. Ә бына бөгөн... милиция тикшереүсеһе алдында...

***

Бер көндө элек тимер юлда бергә эшләгән Асия осраны. Ике йыл күҙгә салынғаны юҡ ине. Күрһәң, шпал һөйрәп йөрөгән Асия тимәҫһең. Алтын элмәгән ере ҡалмаған. Ҡулының һәр бармағында тиерлек тараҡан ҙурлыҡ ҡашлы йөҙөктәр, ул кейгән кейеменең затлылығы! Тик үҙе генә әҙәм ҡарағыһыҙ булып арҡырыға йәйелгән. Әклимәне килеп ҡосаҡлап уҡ алды ла:

– Бер ҙә генә лә үҙгәрмәгәнһең, нисек һаман шулай матур тораһың? – тине был.

– Ҡайҙа, ти, ҡорогор, шпалдар алмаштырып йөрөйбөҙ.

– Ниңә бүтән эшкә күсмәйһең һуң? Квартира алғанһың, тип ишеткәйнем.

– Эйе, барактарҙы емереп, урынына яңы йорттар һалалар. Беҙгә квартира бирҙеләр. Уныһына ҡыуанып бөтә алмайым.

– Шулай булғас! Элек, ярай, квартира тип йөрөгәнһең. Хәҙер кит һин шунан, йөрөмә бушҡа.

– Китеп тә ҡайҙа бараһың инде. Йүнле генә эшкә урынлашырға ни таныш-белеш юҡ, ни арыу ғына һөнәр юҡ. Беҙҙең кеүек ауылдан килгәндәргә ҡайҙа барһаң да шул ат эше инде.

– Беҙҙә лә ат эше генә түгел, эт эшелер әле. Тик килеме икенсе, – тине Асия.

– Шулай һәйбәт түләйҙәрме? – тине Әклимә. Асия ҡапыл ғына яуап бирмәне. Башта серле генә итеп йылмайҙы, унан һуң ғына:

– Үҙеңдән тора... беҙҙә... – тине серле генә.

Әклимә бер ни аңламаны, уға ҡарап ҡатып ҡалды. Асия, аптырағас, һүҙенә асыҡлыҡ бирҙе:

– Һин дә торған булаһың! Юҡһа, ит комбинатында нисек итеп аҡса яһағандарын ишеткәнең юҡтыр инде, – тине ул, мут йылмайып.

– Урлайһығыҙмы? – Әклимә "урлайһығыҙмы" һүҙен бышылдап әйтте.

– Ниндәй урлау булһын, ти? Кеше ала, беҙ ҙә алабыҙ. Улар түләгән эш хаҡына ышанып йөрөһәң, ауыҙыңды сөйгә элерһең. Зарплатаны йыуырға ла етмәй ул, – тип шарҡылдап көлдө Асия. – Эй, ҡара әле, минең бит унда цех начальнигы әшнә. Теләһәң... һине лә үҙебеҙгә эшкә урынлаштыра алам.

– Юҡ, юҡ, мин унда эшләй алмаясаҡмын. Унда бик сая ҡатындар эшләй. Йыш эсәләр ҙә, ти.

– И, һин дә һөйләп тораһың. Тимер юлда эсмәйҙәрме? Һәр берәһенең тыуған көнө бар, үҙе тыумаһа, йә улы, йә ҡыҙы тыуған... барыһы ла "йыуыла" инде.

Бында, иркенерәк йәшәгәс, улай бик тартынып тормайбыҙ, эсмәгән кешенең ауыҙына берәү ҙә көсләп һалмай. Тик шуныһы: кешенән айырылып йәшәп булмай.

– Уныһы шулай. Әллә инде, әллә. Бушҡа ватылып йөрөү ҙә ялҡытты, – тине Әклимә.

– Баш ҡатырма юҡҡа. Берәй көн кил дә сыҡ минең янға. Цех начальнигына үҙем әйтермен. – Асия үҙен нисек табырға икәнен өйрәтеп китте.

***

Комбинатҡа яҡынлашыу менән Әклимә танауын ҡыҫып, кире боролоп китерҙәй булды. Шулай ҙа кире боролманы, барҙы. Асияны стеналары боҙға ҡатып бөткән бер келәт эсендә тапты. Аяҡ аҫты боҙ ғына, абайламай баҫһаң, тайып барып та төшөрһөң. Өҫтәренә еүешләнеп бөткән һырма, аяҡтарына оло резина итектәр кейгән ҡатындар шаҡмаҡлап туңдырылған мал эсәктәрен бәләкәй тимер арбаға һалып, әллә ҡайҙан шалдыр-шолдор һөйрәп алып киләләр ҙә ошо боҙло бүлмәнең түбәһенә еткәнсе тигеҙләп өйөп ҡуялар. Уларҙың эшен танауы әллә эсеүҙән, әллә һыуыҡтан ҡыҙарып бөткән бер ир ҡарап, күҙәтеп тора. Ҡатындар бер шаҡмаҡты яңылыштан ҡулдарынан төшөрөп ебәргәйне, быларҙы бик әшәке әрләп ташланы. Ҡатындар, күрәһең, бындай мөғәләмәгә күнегеп бөткәндер, ҡаршы бер һүҙ ҙә әйтмәнеләр.

Асия Әклимәне шул ир янына алып барҙы.

– Бына, Әхмәт Садиҡович, теге... мин әйткән ҡатын, – тине. Әхмәт Садиҡович тона башлаған иҫерек ҡарашы менән Әклимәне баштан-аяҡ һәрмәләй башланы. Һәм, күрәһең, күҙәтеүенән ҡәнәғәт:

– Ҡайҙа ғаризаң? – тип Әклимәгә ҡулын һуҙҙы.

– Мин әле ғариза яҙманым, – тине Әклимә. Уның өсөн Асия яуап бирҙе:

– Төшкө ашҡа туҡтайбыҙ ҙа шунда яҙырбыҙ, – тине.

Ҡатындар иң һуңғы шаҡмаҡты иң өҫкә тиргәнә-һүгенә ырғыттылар ҙа бытовкаларына – төшкө ашҡа киттеләр.

Ә бында ҡатындарҙың береһе оло кәстрүлде тултырып ит бешергән. Ҡатындар оло өҫтәлде тирәләп теҙелешеп ултырышты. Ҡыҫтай-ҡыҫтай, Әклимәне лә ултырттылар. Эшләп арыған ҡатындар асыҡҡан, өндәшмәй-тынмай дәррәү ашарға тотондолар. Аш бешереүсе өҫтәл аҫтынан бер шешә сығарҙы, стаканға яртылаш араҡы ҡойоп бирә башланы. Ҡатындар араҡыны йөҙҙәрен дә һытмай эсеп ебәрәләр һәм ашауҙарын дауам итәләр. Теге стакан сират буйынса Әклимәгә лә килеп етте.

– Юҡ-юҡ, ҡыҙҙар, булмай! – тине ул, араҡы һуҙған ҡулды этәреп.

Йөҙөнә ҡором һеңгәндәй ҡарайып бөткән киң битле ҡатын:

– Йә, ҡыланма. Сытлыҡланыу ирҙәр ҡосағында ғына килешә ул. Бында килеп беҙ эшләгән эштә эшләй башлаһаң, араҡыһыҙ бер аҙнала аяғыңды һуҙырһың. Әйҙә, күнегә тор. – Әклимә шулай ҙа эсмәне һәм уға бүтән “эс” тип әйтеүсе булманы.

Әклимә бынан киткәндә ”килмәм” тип уйлағайны ла, бер аҙ уйлап йөрөгәндән һуң бындағы эш уға еңелерәк күеүек тойолдо. Теге Әхмәт Садиҡович та ғәҙәте буйынса ғына һүгенә икән. Ул эшкә килеп бер сәғәт тә үтмәй, һалмыш булып ала ла аяҡ араһында буталып тик йөрөй. Ваҡыт- ваҡыт:

– Ҡарағыҙ уны, түшкәне боҙмағыҙ! – тип ҡатындарҙы киҫәтә.

Ҡатындар ул киҫәткән һайын:

– Што һеҙ, Әхмәт Садиҡович, боҙа булабыҙмы һуң инде! – тиешәләр. Ул айный төшһә, шунда уҡ ярты стакан һалып бирәләр. Смена аҙағына аяғында баҫып тора алмай, күберәге кабинетына кереп, өҫтәлгә башын һалып йоҡлай был....

Бына шунан һуң ҡайтырға әҙерләнеү башлана. Ялтлап торған үткер бысаҡ килеп сыға. Һыйыр түшкәһен дә аҫма юл менән дөбөрҙәтеп килтереп еткерәләр һәм, уның һум итен телгеләп, билдәренә бик оҫта йәшереп бәйләп ҡуялар. Кейенеп алғас (биш-алты кило ит йәшерелеүгә ҡарамаҫтан), ҡатындарҙың кәүҙәһе әллә ни үҙгәрмәй ҙә.

... Әҡлимә беренсе көн ҡатындарҙың был ҡыланышына аптырап торҙо.

– Ә һин нимә ауыҙың менән себен тотоп тораһың? – тине теге көн эсергә ҡыҫтаған Сәғирә исемле ҡатынҡай.

– Юҡ-юҡ, минән булмай, – тине Әҡлимә.

– Мә, бынауҙы сумкаңа һал, – тип Сәғиҙә Әҡлимәнең сумкаһына бер киҫәк ит һала.

– Ҡурҡма, һылыу, ҡарауылда – үҙебеҙҙең кеше, ул “майланған”. Бына урамға сыҡҡас һаҡ бул, йәме.

***

Бер ҡараһаң, бында күңелле генә эшләйҙәр. Аҙна һайын тиерлек байрам итеп алалар. Эштән һуң йә берәйһенең квартираһына барып, йә Стәрле буйына төшөп, йырлап-бейеп ял итәләр. Әҡлимә ул күңел асыуҙарға ҡатнаша алмай. Һуңлап ҡайтырға ҡурҡҡандан гел.

Ире: “Барып урынлашам да һеҙҙе ҡайтып алам”, – тип Төмән яҡтарына сығып киткәйне – бер йыл инде хаты ла, хәбәре лә юҡ. Хәйер, Әҡлимә унын юғалыуына бик бошонмай ҙа. Эшләмәй йөрөп, йәнен ҡыйып бөткәйне. Балалары ла, ул эсеп ҡайтып ҡоторона башлаһа, ҡурҡып, ҡалтыранып тора торғайнылар, хәҙер тын алып ҡалдылар. Балаларының береһе баҡсаға йөрөй – уны ваҡытында алырға кәрәк, олоһо уҡый башланы – дәресен әҙерләтергә кәрәк. Шуға күрә ул-был күңел асыуҙарҙа Әҡлимә ҡатнаша алмай. Шулай ҙа бер барҙы. Стәрле буйына төшөп шешлек бешерҙеләр. Машина фаралары яҡтыһында ярты төн үткәнсе йырлап-бейеп иҫерешеп алғас, мал һуйыусы ирҙәр менән парлашып, төрлөһө-төрлө яҡҡа таралышты. Ирҙәр бик бәйләнә башлағайны, Әҡлимә һиҙҙермәйсә генә ҡайтып китте.

Әкренләп Әҡлимә лә яңы мөхиткә күнде. Бүтән ҡатындар хәтлем үк булмаһа ла, ит алып ҡайта башланы. Һатырлыҡ булмаһа ла, ашарлыҡ ҡайта. Ул да файҙа: эшләгән аҡсаһы янға ҡала. Әкренләп өй кәрәк-ярағы, өҫ-башына ала башланы. Бөтәйеп киттеләр. Бер аҙҙан ит алып ҡайтыу уға урлау булып тойолмай ине инде.

Тикшереүсе һаман уҡыуын белде. Әҡлимәнең уйҙары әллә ҡайҙарға осто. Иҫенә төшөрә торғас, ҡапыл йөрәге “жыу” итеп китте, ҡурҡышынан ағарынып, ултырған еренән ҡып-ҡыҙыл булды. Тикшереүсе, уҡып ултырһа ла, Әҡлимәнең был халәтен күрмәй ҡалманы.

– Һеҙ үҙегеҙҙе арыу тояһығыҙмы? – тине ул, уҡыуынан айырылып.

– Юҡ-юҡ, зыян юҡ, мин былай ғына... – тине Әҡлимә.

Былай ғына түгел шул! Мәңгелек бысраҡ булып күңеленә яғылған хәтирә иҫенә төштө. Ул Әҡлимәне ғүмеренең һуңғы көнөнә хәтле ғазаплар инде.

Бигерәк тә Әхмәт Садиҡович ныҡ уҙына. Әҙерәк ҡыҙмаса көйө йә килеп ҡосаҡлап ала, йә һәрмәргә керешә. Уға асыуланыусы юҡ, унын ҡылығынан ҡатындар шарҡылдап көләләр генә. Был ғәҙәткә кергән тәрбиәһеҙлекме, әллә ысынлап та аҙғынлыҡмы, тип Әҡлимә, әй, аптырай... үҙенә килеп тотонһа, сар-сор әрләшә.

Бер көн Асия Әхмәт Садиҡовичтың кабинетында оҙаҡлағас, ҡатындар:

– Былай булғас быларҙың борсағы бешә, – тип көлөштөләр. Асия, ысынлап та, май урлап ашаған бесәйҙәй, йылтырап килеп сыҡты...

Әҡлимә Асияны киҫәтмәксе булды:

– Кеше әллә ни уйлар, һағыраҡ ҡылан, – тине. Асия ҡапыл ҡыҙып китте лә аты-юлы менән шундай һүҙ әйтте, Әҡлимә уны беренсе күргәндәй аптырап ҡарап ҡалды.

Шул көндән һуң Асия унын менән йүнләп һөйләшмәй. Ул ғына ла түгел, рәте тура килгән һайын: “Фәрештә”, – тип мыҫҡыллай. Уға ҡарап бүтәндәр ҙә шулай ҡылана. Әҡлимә, эш эҙләргә лә бынан китергә, тип уйланы. Тик өлгөрә алмай ҡалды. Ит менән эләктерҙеләр. Әҡлимәне һәм бер нисә ҡатынды бик ентекләп тентенеләр. Керһәләр – үҙҙәренең цех начальнигы Әхмәт Садиҡович. Ҡыланыуы! Көн буйы эсеп йөрөгән бер сәрхүш тимәҫһең. Башта ике ҡатынға ла акт төҙөттө һәм:

– Милицияға саҡырғанды көтөгөҙ, – тип сығарып ебәрҙе быларҙы. – Иртәгәнән эшләмәйһегеҙ.

Унан һуң Әҡлимәгә акт төҙөлдө. Әҡлимә үрһәләнеп иланы ла иланы. Балаларын уйланы. Береһен баҡсанан алып ҡайтырға кәрәк, нишләйҙәр икән бисараҡайҙар.

– Әхмәт Садиҡович, бүтән бер ҡасан да алмам. Мин иртәгәнән бынан китәм. Милицияға ебәрмә мине, – тип ялынды.

– Ҡурҡма, мин һине әрәм итергә йыйынмайым. Тик, Әҡлимә һылыу, бергә эшләгәс, ул хәтле танауҙы юғары йөрөтөргә ярамай. – Ир Әҡлимәне һәрмәй башланы. Һәм шулай мырлай-мырлай ғына һөйләп, шыңшып илаған Әҡлимәне диванға килтереп һалды...

– Бына, күк тә емерелмәне, афәт тә сыҡманы. Ә төҙөгән акт менән бына ни эшләйем? – тине, салбар ҡайышын эләктереп, һәм актты йыртты ла ташланы. – Эштән китергә кәрәкмәй, мин әле бер кемде лә әрәм иткәнем юҡ.

Әҡлимә өйөнә нисек ҡайтҡанын да белмәне. Шунда ғына ниндәй ҡот осҡос аҙым эшләгәнен бөтә йәмһеҙлеге менән күҙ алдына килтерҙе. Әхмәт Садиҡовичтың ауыҙынан килгән һарымһаҡ, тәмәке, араҡы еҫе уға мәңгегә кереп һеңде һымаҡ, ул хатта уҡшый башланы.

Юҡ, ул бысраҡты уҡшып ҡына ташлап булырҙай түгел икән шул. Икенсе көндө үк ҡатындар төртмә телдәре менән Әҡлимәне үрле-ҡырлы һикертә башланылар. Ә Сәғирә ап-асыҡ итеп:

– Шулай, йәнем, бында һин фәрештә булып ҡыланма. Бөтәбеҙ ҙә бер сыбыҡтан ҡыуылған: эшләйбеҙ икән – эшләйбеҙ, эсәбеҙ икән – эсәбеҙ, урлайбыҙ икән – урлайбыҙ. Ҡалғаны – Хоҙайҙың эше, һин уға тапшыр. Унда барғас, кемгә тамуҡҡа, кемгә йәннәткә икәнен үҙе тәғәйенләр. Ә бөгөн беҙ нисек беләбеҙ, шулай йәшәйбеҙ. Юҡ менән тормошоңдо ҡатлауландырма, уйға батып йөрөмә, эшләгәндә эшлә, һалғанда эс, – тине.

Ул көндө Әҡлимә иҫереп ҡайтты. Ҡара һин уны, эсеп алһаң, диңгеҙ тубыҡтан була ла ҡуя икән. Күңелде иҙеп торған уйҙар ҙа әллә ҡайҙа олағып бөттөләр...

Уның уйҙарын тикшереүсенең тауышы өҙҙө:

– Йә, апай, һөйләп ебәрегеҙ әле, нисек һеҙ дәүләт милкенә ҡул һуҙҙығыҙ? Закон буйынса...

Әҡлимә тикшереүсенең артабанғы һүҙҙәрен ишетмәне: һуштан яҙып, ултырғыстан иҙәнгә ауҙы, итәге килешһеҙ асылып ҡалды. Тикшереүсе аптыраны, секретарын саҡырып алды ла:

– Һәйбәтләп ябып ҡуй әле, – тине. Ҡыҙ Әҡлимәнең боттарын итәге менән ябып ҡуйғас: – Медсестра килһен, – тине.

Медсестра иң элек Әҡлимәнең беләгенән тотоп пульсын ҡараны, унан һуң мамыҡҡа сылатып нимәлер еҫкәтте. Әҡлимә бер аҙ ятҡас ҡына күҙҙәрен асты һәм, ҡайҙа ятҡанан самалау менән, һикереп урынынан торорға ынтылды.

– Әкрен, әкрен, – тине медсестра. – Ашыҡмай ғына торогоҙ. Бына шулай.

Әҡлимә тороп ултырғысҡа ултырғас, секретарь менән медсестра сығып киттеләр.

– Ғәфү итегеҙ, – тине Әҡлимә, уңайһыҙланып, – бер ҙә улай булғаны юҡ ине.

Тикшереүсе:

– Кемдәрегеҙ бар, апай? – тип һораны.

– Үҙем дә ике балам. Ирем Түбән яғына киткәйне, ике йыл инде – хәбәре юҡ.

Тынлыҡ урынлашты.

– Апай, бына былай. Һинән ҡараҡ сыҡмай. Мин һеҙҙең халыҡты күргеләнем. Ана, тышта көтөп ултырған ике ҡатын бында өсөнсө ҡат инде. Бер ҙә йығылырҙай түгелдәр. Күрәм, һин унда осраҡлы кеше. Ҡас һин унан. Эш тапмаһаң, үҙем ярҙам итермен. Бер юлға штраф менән сикләнәм, – тине тикшереүсе. – Китергә мөмкин.

Әҡлимә аңҡы-тиңке сығып китте.

**Риф ДӘМИНЕВ**

# Һуҡ бармаҡлы бейәләй

Хикәйә-хәтирә

Бала саҡта тыуған фекеремдә әйтеп үтәйем әле. Минеңсә, халҡыбыҙ өсөн иң ауыр йылдарҙың береһе – һуғыштың аҙаҡҡы йылы һәм 1946 йыл булғандыр. Халыҡ арыны, йонсоно, асыҡты, яланғас ҡалды, хатта эшкә йөрөргә лә хәлдәре ҡалманы. Ул осор һәр ауыл айырым колхоз ине. Ир-егеттәр һуғышта, ҡыймылдай алған ҡарт-ҡоро, ҡатын-ҡыҙ, балалар яҙын-йәйен һәм көҙөн бесән, иген, картуф әҙерләне. Бөтәһе лә фронт өсөн ине. Ә ҡыш көндәрендә бөтә халыҡ фронттағыларға бейәләй, ойоҡбаштар бәйләп ебәреп, уларҙан хаттар көтөп тилмерҙе. Һәр ғаилә ҡулынан килгәнсе һыйыр, һарыҡ йә булмаһа кәзә аҫырарға тырышты. Әгәр кешеләрҙе ашатҡаны-эсергәне һыйыр булһа, кейендергәне һарыҡ, кәзә булды.

Һаман иҫемдә: кис булдымы, әсәйем апайым менән йә ойоҡбаш, йә бейәләй бәйләргә тотона. Бәйләп бөткәс, йыуып, киптереп, посылка итеп фронтҡа ебәрәләр. Бәйләгәндә әсәйем апайыма: “Тығыҙыраҡ итеп бәйлә, тығыҙ бәйләнгән бейәләй йылыраҡ була”, – тип өйрәтә торғайны.

Яңы йылдан һуң апайым аҙаҡҡы йөндән тағы ла ике пар бейәләй бәйләне. Оҙаҡ та үтмәне, апайыма фронттан хат килде. Бәләкәй генә өсмөйөш хат, тышына адресы, эсенә хат яҙылғайны.

Һалдат шул хатында апайыма ҙур рәхмәтен әйткән. “Һеҙҙең бейәләйҙәр бик йәтеш булды, тик бына икенсе бәйләгәнегеҙҙә һуҡ бармаҡлы итеп бәйләһәгеҙ ине,– тип һорағән. – Сөнки бармаҡ яланғаслана һәм өшөй. Беҙ бейәләйҙең һуҡ бармаҡ урынын тишеп, курокка баҫыр өсөн, шул тишектән бармағыбыҙҙы сығарабыҙ. Курок тимер булғас, ҡыш көндәре бармаҡ өшөй”. Хатының аҙағында тағы ла рәхмәтен әйткән һәм, беҙ тиҙҙән фашистарҙы ҡыйратасаҡбыҙ, Еңеү көнөнә күп ҡалманы, тип өҫтәгән.

Был хатты уҡығас, апайым һуҡ бармаҡлы итеп яңынан бейәләй бәйләргә булды. Тик беҙҙең йөн бөткәйне. Әле тик ҡыш уртаһы ғына, ә ҡышын һарыҡ йөнөн ҡырҡмайҙар.

Ҡыш – ҡыш инде: тиҙ ҡараңғы төшә, төн оҙон, көн ҡыҫҡа. Шәмде лә оҙаҡ яндырып булмай, кәрәсин тиҙ бөтә. Уныһын да район үҙәгенән һирәк алып киләләр. Алып килһәләр ҙә, тик мәктәп менән ферма өсөн генә. Әсәйем уҡытыусы ине, беҙ мәктәп янындағы уҡытыусылар өсөн махсус төҙөлгән йортта йәшәнек. Мәктәп менән беҙ йәшәгән өй ауыл уртаһында, тик урамдан ситтәрәк, тау эргәһендә урынлашҡан. Бүрәнәнән һалынған ҙур булмаған өй эргәһендә башы һалам менән ябылған мал кәртәһе төҙөлгән, өй менән кәртә бәләкәй генә солан менән тоташтырылған. Мал ҡарау өсөн тышҡа сығып, көрткә батып йөрөмәйһең. Ә бесән кәртә башына өйөлгән. Барыһы ла бик уңайлы. Тик малға һыу эсереү генә ҡыйыныраҡҡа тура килде. Һыуҙы Һаҡмарҙан ташырға кәрәк, ә ул йыраҡ ҡына. Ҡайһы бер буранлы көндәрҙә малдарға ҡар ҙа иретеп эсерҙек.

Шулай итеп, көн буранлы торҙо, ә кискә табан тағы ла көсәйҙе. Урманлы

*Риф Дәминев Хәйбулла районының Ҙур Арыҫланғол ауылында тыуған.*

*Өфө авиация институтын тамамлағас, Стәрлетамаҡта төпләнә: “Красный пролетарий” заводында технолог, аҙаҡ конструктор, химия-технология техникумы директоры булып китә. Ул – СССР-ҙың маҡтаулы химигы, Башҡортостандың атҡаҙанған халыҡ мәғарифы хеҙмәткәре.*

тауҙар араһында юғалып ятҡан ауылда ыжғыр буран уғата хафа тыуҙыра. Ҡаялы тауы битендәге ағастар шундай хәтәр шаулай, хатта бөтә донъя өҫтөнә килеп түңкәрелер кеүек. Шул мәлдә үҙенде бер меҫкен кеүек тойоп, был донъяға ниңә тыуҙым икән, тип йәлләп тә ҡуяһың.

Көслө бурандар башланһа, әсәйем: “Балалар, ятығыҙ. Миңә дәфтәр тикшерергә кәрәк, дәрестәргә план да яҙылмаған,” – тип беҙҙе йоҡларға һала ине.

Бер ваҡыт төн уртаһында солан яғынан яман итеп ыңғырашҡан тауыш ишетелде. Барыбыҙ ҙа йоҡонан уяндыҡ. Әсәйем ут ҡабыҙҙы. Беҙҙең шәмебеҙ бар. Унлы шәм, иң ҙур һәм иң яҡты шәм. Уның филтәһе ҙур булғас, быялаһы ла ҙур, шуға ялҡынлап, ап-аҡ булып яна һәм нуры алыҫ яҡтырта. Шәмде тоҡандырып, тағы ла һағайып ҡына тыңлап торҙоҡ.

Шул арала хырылдаған тауыш сыға башланы. Әсәйем, апайым, ағайым тиҙ генә урындарынан тороп, өҫтәренә кейем элэктерҙеләр ҙә соланға сығып киттеләр.

Мин, янымда ятҡан кесе апайыма бер һүҙ әйтмәй, быймама ялан аяғымды сумдырҙым да, ҡулға эләккән бер кәзәкейҙе өҫтөмә ябып, соланға сыҡтым. Әсәйемдәр кәртә эсенә инеп тә өлгөргәндәр, мин дә шунда ашыҡтым. Албырғап торғанда, эргәбеҙҙән генә ҙур бер һоро этке оҡшаған йәнлек һикереп, түшәмдәге ярыҡтан уҡ шикелле атылып сығып китте. Бахыр һыйырҙың ҡурҡыштан күҙҙәре аҡайған, тыпырсынып тора. Үҙе дерелдәй, үҙе мөңрәй, ә янында уға һырынып ҡына ике һарыҡ бәрәсе ҡатып ҡалған. Кәртә уртаһында хырылдап, ҡанға батып һарығыбыҙ ята. Мин был мәхшәрҙе күреп, ҡурҡышымдан ҡысҡырып илап ебәрҙем. Әсәйем: “Бар, кит бынан, өйгә ин,”– тип мине этеслэп өйгә индереп ебәрҙе. Кесе апайымдың: “Нимә булды, кем хырылдай?” – тигән һорауына бер ни әйтә алманым.

Әсәйемдәр оҙаҡ булашты. Һыу аҡҡан тауыш та, һауыт-һаба шалтырағаны ла, балта сапҡан тауыш та ишетелде. Тыңлап ята торғас, йоҡлап киткәнмен.

Иртәгәһенә барыһы ла асыҡланды. Буран көсәйеп, төн уртаһы еткәндә, бүре беҙҙең мал торған ҡураға түшәмде тишеп инеп, малдарға ташланған. Һыйырға көсө етмәҫен белеп, һарыҡҡа йәбешкән, бәлки, тәүҙә арҡы аяғына йәбешкәндер, сөнки арҡы бото умырылғайны, ә һуңынан боғаҙынан алған. Шунлыҡтан һарыҡ хырылдай башлаған. Ошо мәлдә ағайымдар шәм тотоп һарайға килеп кергән. Бүре, уттан һәм кешеләрҙең күплегенән ҡурҡып, үҙе төшкән тишегенән сығып ҡасҡан.

Ҡалғаны бик ябай ғына барып бөткән. Һарыҡты һуйғандар, эс-ҡарынын таҙартҡандар, йөнөн ҡырҡҡандар ҙа йыуып киптерергә һалғандар. Ҡазалы төн шулай үтеп китте.

Һуңынан, һарыҡ йөнө кипкәс, апайым уны тетеп, таҙартып, иләп, теге һалдаттың һорауы буйынса, ике пар һуҡ бармаҡлы бейәләй бәйләп ебәрҙе.

Тағы ла бер айлап ваҡыт үткәндер, теге һалдаттан хат килеп төштө. Ул, һуҡ бармаҡлы бейәләйҙәр бик йәтеш булды, тип рәхмәт яҙып ебәргән.

Кем белә, бәлки, һуҡ бармаҡлы бейәләй был һалдатҡа башҡа кәрәкмәгәндер ҙә, бәлки, уны иҫтәлек итеп үҙенә ҡалдырғандыр, ә, кем белә, бәлки, шул бейәләйҙәрҙе кейеп Бөйөк Еңеүҙе яулашҡандыр. Әлбиттә, шулай. Бер айҙан “Һуғыш бөттө!” тигән шатлыҡлы хәбәр килде. Әллә ниңә теге һуҡ бармаҡлы бейәләйҙе һораған һалдат беҙгә ҡайтыр төҫлө. Унан һәр саҡ хат көтөр булып ҡалдыҡ. Бигерәк тә апайым...

**Рауил ГАЛИН**

# “ЙЫРЛА, УЛЫМ...”

Олоғайған һайын балалыҡ хәтирәләре күберәк иҫкә төшә кеүек. Әллә бала саҡ һағындыра, әллә үҙең бала хөкөмөнә инеп бараһың. Бәлки, миңә генә шулай тойолалыр…

...Минең бик яратҡан Муса бабайым бар ине, әсәйем менән бер туған. Мөһабәт кәүҙәле, зәп-зәңгәр күҙле, асыҡ йөҙлө кеше. Мин уны яратҡан кеүек, бабайым да мине яратты. Ул һәр ваҡыт һыбай йөрөр ине. Килеп етер, атын ишеккә ебәрер ҙә, беҙгә инеп, мине алдына алып ултыртыр ҙа йырлатыр ине. Әллә мин һаҡау булғанлыҡтан, уға бик мәрәкә булғанмы, әллә ысынлап та матур йырлағанмынмы – уныһы әлегә сер...

Шулай бер ваҡыт әсәйем миңә бер ниҫә йыр өйрәтте. «Бына ошо йырҙы бабайың, улым, йырла әле, тигәс тә йырларһың», – тип ҡуйҙы. Бабайым килгәнен түҙемһеҙлек менән көтә башланым. Ә күршеләге Ғәйнисламм менән Ғилметдин ағайҙар ҙа кәнфит, ҡармаҡ йә һыбыҙғы бирә йырлаталар. Улар өсөн минең икенсе «йыр»ҙарым етерлек;

*Эләктеъеп, ҡаптыъып кей*
*Кәстүмеңдең аллагын.*
*Мин үҙем дә ҡайыъыш алып,*
*Һөйҙөм кеше йәъҙәъен.*
*Биъсәткәһен талға элгән,*
*Талға элгәнен кем күргән,*
*Ҡаъшы утыъып сәйҙәъ эстем,*
*Йәъ булыъын кем белгән?*

Бында «ъ» урынына «р» хәрефе кәрәк. Тегеләр рәхәтләнеп көлә, мине үҙҙәре менән күтәреп кенә тигәндәй йөрөтә. Башҡа малайҙар араһында минең дәрәжә ҙур.

Бына көткән көн килде... Бабайым килеп төштө. Ул ҡәҙимгесә алып алдына ултыртты ла: «Йә, улым, йырлап ебәр әле», – тиеү менән йырлап та ебәрҙем:

*Алма бешкән, өҙөлөп төшкән,*
*Күгәъсен башын тишкән.*
*Матуъ әбейҙәъ һайлай-һайлай,*
*Сәстәъеңә аҡ төшкән...*

Бабайым шым ғына әсәйем яғына ҡарап ҡуйҙы – этлектең кемдән икәнен белгән-һиҙгәндер. Мине яй ғына алдынан төшөрөп ебәрҙе.

---

*Рауил Галин 1950 йылда Архангел районы Ҡыҙыл Яр ауылында тыуған. Абҙан урта мәктәбен тамамлай. Совет Армияһы сафында хеҙмәт итә. Өфө дәүләт сәнғәт институтының театр факультеты актерҙар бүлегендә уҡый. 1974 йылдан – Салауат башҡорт дәүләт драма театрында, 1991 йылдан Стәрлетамаҡта башҡорт театрында эшләй.*

*«Буя уйлап, ҡуйма бутап», «Дүрткүҙ» исемле китаптары донъя күрҙе. Тәржемә иткән пьесалары Башҡортостан сәхнәләрендә бара.*

Башҡаса “Улым, йырла” тигәне булманы. Тура әйткән туғанына ярамағандыр инде. Бабайым... миңә ул саҡта бабай булһа ла, йәш, сибәр “әбейҙәр”ҙе бик ярата ине шул, буғай.

## “Һыпырталар кәнфитте”

Атайым магазинда эшләгәс, тәмле-томлоға мохтажлыҡ булманы. Шулай бер көн әбейҙәр, апайҙарҙы йыйып, ҡөрьән уҡыттыҡ. Беҙ туғаным менән ҡыҙыҡ итергә булдыҡ. Шым ғына өҫтәл аҫтына инеп, мулланың аяғын ҡытыҡлайбыҙ. Теге аяғын бер һелкетте, ике һелкетте, бесәй йөрөй, тип уйланы шикелле. Һуңынан аңлап ҡалды. Шунан атайыма:

– Әхтәрйән, аяҡ аҫтында бесәйҙәрең йөрөй, шуларҙы алып ҡуй әле, – тимәһенме!

Ашап-эскәндән һуң, барыһы ла ҡайтырға йыйынды. Шул ваҡыт һәр береһе кеҫәләренә нимәлер алып тыға башланы. Шуларҙы күргәс, сыҙамым бөткәнгәлер:

– Әбейҙәр кәнфитте һыпырталар ғына, – тип әйтеүем әле лә хәтеремдә.

Һуңынан миңә осраған әбейҙәр:

– Раупл, әбейҙәр кәнфитте һыпырталармы? – тип көлөп һөйләрҙәр ине.

---

**Тимербулат МӨХӘМӘТКОЛОВ**

## Аптырамай

Ике ир һөйләшә:

– Ҡайҙа эшләп йөрөйһөң, һабаҡташ?

– Бер ерҙә лә түгел…

– Нисек?

– Нимәгә ул эш? Атай-әсәй пенсия ала бит.

– Ҡарттар ғүмер баҡый йәшәмәҫтәр ҙә?

Теге әҙәм был юлы ла юғалып ҡалманы:

– Мәрхүм булһалар, ул сағында үҙемә лә пенсияға сығыр ваҡыт етә.

## Кәзәнең үсе

Фәхри үҙенең емеш-еләк баҡсаһын сүп-сарҙан таҙартып йөрөй ине. Күршеһе Хәлфетдиндең кәзәһе кереп, кәбеҫтә кимереп тороуын күргәс, алдында яткан таяҡты алды ла туп-тура кәзәгә төҙәп сорғоп ебәрҙе. “Ша-аҡ-ҡ-ҡ” иткән тауыш яңғыраны. Шул саҡ кәзәгә әллә нимә булды: донъя яңғыратыу түгел, “Мә-ә-ә!” тигән ыңғырашыуы

---

*Тимербулат Мөхәмәтколов 1970 йылда Стәрлебаш районы Ибраҡай ауылында тыуған. Стәрлетамаҡ, Өфө заводтарында эшләй. Әлеге көндә – Стәрлебаш районының Салауат исемендәге агрофирмаһында механик. 2006 йылда “Мөгөҙлө айыу” исемле китабы донъя күрҙе.*

ла ишетелмәне, исмаһам. Һикергеләп йөрөгән мал бороллдо ла, Фәхригә мәғәнәле итеп ҡарап алғандан һуң, экрен генә, яңы ғына ҡыҫылып кергән ситән ярығынан үҙ йортона табан йүнәлде.

Тәҙрәнән юғалған кәзәһен ҡарап торған Хәлфетдиндең быға бер ҙә иҫе китмәне. "Ярар, күрше, бөгөн булмаһа, иртәгә күрмәгәнеңде күрһәтермен әле..." – тип уйланы.

Икенсе көндө Фәхри баҡсаһына сыҡһа, ни күрһен: әллә ҡайҙан ярылып яткан эҙҙәр менән сыбарланған йәшелсә, емеш-еләк баҡсаһы яу яланын хәтерләтә. Төшөндө Фәхри: был кисә экрен генә атлап сығып киткән кәзәнең үсе ине...

## Ике күрше

Ике күрше Фәсхиямал менән Кәримәнең тыныс, татыу, дуҫ булып йәшәгәндәре һирәктер. Бер мәл магазинда әйбер артынан сиратта торалар. Билдәле, бөтә хәбәр янсығы шунда инде. Матур ғына һөйләшеп торғанда, сәйәсәткә инеп киттеләр. Фәсхиямал коммунистарҙы маҡтаны, Кәримә демократтарҙы яҡланы. Көрәш ике яҡтың да еңелеүе менән тамамланды. Шунан һуң ай ярым һөйләшмәй йөрөнөләр. Ике күрше һәйбәт кенә йәшәй башлағайны ла, тағы сәбәп табылды: ирҙәре ҡайҙалыр эскәндәр ҙә сәкәләшеп алғандар. Ошо хәлгә кем түҙһен инде! Бик оҙаҡ ваҡыт бер-береһенән һаулыҡ та һорашманылар. Был да онотолоп бөткәйне, уйнап йөрөгәндә Кәримәнең малайы Фәсхиямалдың ҡыҙының сәсенән тартҡан. Тегенеһе шарылдап илап кергән дә киткән. Ярай, был да ҡасан да онотолдо, ти. Тик ике ҡатынға оҙаҡ ваҡыт матур һәм татыу йәшәргә яҙмағандыр. Сөнки ауылдаштары бөгөн генә әлеге күршеләрҙең һыйырҙары һөҙөшөп торғанын күргән. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ, шунан һуң нисек тыныс, матур йәшәйһең инде?

## Ҡыйыулыҡ

Борон заманда бер бай хеҙмәтселәрен саҡырып алған да былай тигән:

– Арағыҙҙа ҡыйыуҙар бармы?! Булһа, урманға барығыҙ ҙа миңә арыҫландың тиреһен тунап алып ҡайтығыҙ!

Хеҙмәтсенең икәүһе шул минутта уҡ хужаның теләген үтәргә тип урманға юл алған.

Тик өсөнсөһө был ниәттән баш тартҡан.

Теге икәү киткән ерҙәренән әйләнеп ҡайтмай. Ә өйҙә ҡалғанын бай ҡурҡаҡлыкта ғәйепләй. Ләкин тороп ҡалған хеҙмәтсе үҙен ҡурҡаҡ йән тип иҫәпләмәй. Дөрөҫ уйлай ул. Сөнки ҡайһы ваҡыт башлыктарҙың туҙға яҙмаған бойороҡтарын үтәмәү өсөн дә ҡыйыулыҡ кәрәк бит...

Өмөтлө ҡәләм



**Малик**
**ИЛЬЯСОВ**

**УЙМАҠ ХИКӘЙӘЛӘР**

# МӨХӘББӘТ КӘМӘҺЕ

*Любовная лодка столкнулась о быт.*
В. Маяковский.

Йортҡа килен төштө. Йоҡомһорап ултырған кескәй өй йәнләнеп киткәндәй булды. Йырыҡ ауыҙлы бала-саға өй тирәһенән китә белмәне, эленән-эле кеҫәһенән еңгә бүләген сығарып, бер-береһенә маҡтанышты. Һуңғы арала сирләүҙән башы сыҡмаған ҡәйнә кеше йәштәрсә елтләтә баҫып йөрөй, ана, йә килененең арҡаһынан тупылдатып һөйөп китә, йә әйләнгән һайын алсаҡланып, "килен дә килен" тип күршеләрен бирә. Һүҙгә әүәҫлеге булмаған ҡайнының да был арала ауыҙынан хәбәре йышыраҡ сыға. Ошоға тиклем төҫө уңып бөткән күлдәк-ыштанда, йыртыҡ калоштарҙа йөрөүсе ҡартты танырлыҡ түгел: кейеме ялтлап тора, аяғына ялтыр туфли кейҙереп ебәргәндәр.

Ә шулай ҙа йорттағы иң бәхетле кеше — кәләш наҙын татыуҙан үҙен ожмах түрендә тойоусы егеттер, моғайын. Эш тигәндә ыҡлап бармаған кешенең иңдәренә бөгөн, әйтерһең дә, ҡанат үҫкән: йорт-ҡура тирәһендәге ваҡ-төйәк мәшәкәттәрҙе оса-ҡуна башҡара. Ял итеүҙе лә кәрәк тапмай — беләктәрендә бөтмәҫ-төкәнмәҫ көс тоя, көнө буйы аяҡ өҫтөндә булыуына ҡарамаҫтан, арыу-талыуын да һиҙмәй. Кәләшенең: «Әйҙә, ашап ал», — тигәнен ишетмәмешкә һалыша. Әйҙә, һоҡланһын кәләше иренең ғәйрәтенә, егәрлелегенә! Үҙе йыш ҡына сәғәтенә күҙ төшөрөп ала — ҡасан кис етә инде… Йәш ир үҙен бәхет карабында йөҙөп китеп барғандай тоя. Барыһы ла үҙ урынында — атаһы, әсәһе, йәндәй күргән йәш кәләше. Тормош

---

*Малик Ильясов 1977 йылда Күмертау районы Яманһары ауылында тыуған. Ишембайҙа 2-се Башҡорт республика гимназияһын, Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһын тамамлай. Әлеге көндә Күмертау ҡалаһы һәм Көйөргәҙе районының "Юшатыр" ижтимағи-сәйәси гәзите мөхәррире. "Ағиҙел"дә тәүге тапҡыр сығыш яһай.*

йылғаһының тулкындарында иркәләнеп, ошо бәхет карабында ғүмерҙәренең ахырынаса йөҙөрҙәр ҙә йөҙөрҙәр...

Әллә ни күп ваҡыт та үтмәгән. Ҡасандыр өй тирәһенән ҡыуып та ебәрерлек булмаған бала-сағанан елдәр иҫкән. Ҡәйнәнең ваҡытлыса онотолоп торған ауырыуҙары кире ҡайтҡан, буғай, ах та ух килеп йөрөп ята. Һырҙары тағы ла тәрәнәйеберәк киткәндәй. Танау эсенән бер туҡтауһыҙ мығырҙай үҙе. Яҡыныраҡ килеп тыңлаһаң, ошондайыраҡ һүҙҙәрен ишетергә мөмкин: «Кеше ашҡа шул хәтле тоҙ һаламы? Йыуған керҙәрен дә ташҡа үлсәйем, таҙартҡансы ышҡырға ҡулын йәлләй инде әллә? Һыйыр һауғанда ла тамсыһына тиклем һауып бөтмәй шикелле... Ҡуй-ҡуй, эшкә өйрәтмәгән әсәһен әйтер инем! Үҙе, нишана, иренең муйынына аҫылынырға әҙер генә тора — был яҡтан килешкән, битһеҙ...» Ҡайны ҡарт та үҙенең элекке хәленә ҡайтҡан: өҫтөндә — әҙәм ҡарағыһыҙ күлдәк-ыштан, аяҡта — тишек калоштар. Хәбәрен ҡыпһыуыр менән дә тартып алырмын тимә.

Ҡасандыр бәхет карабында елдәр менән ҡыуышҡан ғашиҡ егетебеҙ ҙә алһыу томандар араһында аҙашып йөрөмәй хәҙер. Эшкә лә дәртләнеп тормай, ҡатынына ла элеккесә иркә һүҙҙәр әйтмәй, уны тамағы асыҡҡанда йәки мунсала арҡаһын ышҡытырға кәрәк булғанда ғына иҫенә төшөрә. Йоҡларға ятҡас, «бөгөн яман арытты» тип ҡатынына артын ҡуйып, әүен баҙарына китеүгә өйрәнеп алған. Мөхәббәт карабы тураһында бөтөнләй онотто ул. Ҡасан ғына бейемем, ҡайным, йәнем тип өҙөлөп торған ҡыҙға ла ҡағылды үҙгәрештәр: үҙҙәре ишетмәгәндә ҡарсыҡты — йылан, ҡартты — Муму, ә ирен буш ҡыуыҡ тип атар булып китте. Донъяла нимәнәндер ваз кискән хәсрәтле кешеләй, күҙҙәрендәге нуры леп һүнде лә ҡалды йәш ҡатындың...

Мөхәббәт карабында тулкындар ярып йөҙөү генә етмәй икән шул. Таш ҡаяларға бәрелмәҫ, һай урында төбө менән ҡаҙалып селпәрәмә килмәҫ өсөн, уның оҫта ишкәксеһе лә булырға кәрәк, имеш.

## Кәстүм

Марат кәстүм алып ебәрҙе. Кәстүм дан ине! Ғүмере буйы өҫтө-башы йүнле кейем күрмәгәнгәме, Марат үҙен миллиондарҙы уңлы-һуллы ырғытҡан олигархтарҙан кәм тойманы. Ҡала урамында осраған барса халыҡ уның кәстүменә көнләшеп ҡарай кеүек. Шулай булмай ни, һиҙелер-һиҙелмәҫ зәңгәр буй төшөрөлгән, ялтылдап торған ҡара кәстүмде теләһә кем кейә алмай. Әгәр ҙә бер башмағын һатмаһа, Марат та булдырмаҫ ине. Башмаҡтан килгән аҡсаның бер өлөшөн ошо кәстүмгә һалды. Кейемдең ҡыйбатлырағын һайларға булды ир, сөнки белә: әйбер ни тиклем ҡиммәтерәк, шул тиклем яҡшыраҡ. Ғүмер буйы куфайка менән һырыған ыштан, төҫө уңып бөткән күлдәк тә һалдат салбарынан башҡа арыу кейем күрмәй йәшәргә тейешме ни өҫ-башы — Марат та әҙәм балаһы ла баһа! Сәсрәп кенә китмәйме ауылда сабылмай ятҡан бесәне, ҡорттан ашалып ултырған картуфы — бер көн генә булһа ла үҙен кеше итеп тойһон эле Марат. Ғүмерҙә бөтмәҫ эш менән йөрөп, ары сабып, бире сабып, тамаҡты ғына уйлап, күңел тигән нәмәнең барлығы тураһында ла онотола.

Үҙен донъялағы иң бай кешеләй хис итә торғас, Марат юл сатында ултырған кафены шәйләп ҡалды. Бер ҡасан да бындай ерҙә булғаны юҡ уның, киноларҙа ғына кешеләрҙең кафе-барҙарҙа донъяларын түңәрәкләп ултырғанын күргәне бар. Элегерәк заманда ҡалаға килһә, ысталауай тигән

булып, шәһәр ашын тәмләп ҡайта, данлыҡлы Ермолай һыраһы менән тамаҡ сылатҡылай ине. Бөгөнгө кафе-барҙар ул замандарҙағы ысталауай ишеме ни, әллә ҡайҙан ялтырап ултыра, эстә ҡыҫҡа итәкле ҡыҙҙар өлтөрәп йөрөп, йәнең ни теләй — һырамы, балыҡмы — килтереп еткерә һала...

Һыра тигәс, апаруҡ ҡына һыуһауын тойҙо Марат. Йәй селләһенең кәрәкте биргән сағы — тамаҡ ҡорғаҡһып киткән, ҡәһәрең. Етмәһә, кәстүм кейеп алған. Эҫе булһа ла, юрый сисмәне уны Марат — әйҙә, күрһендәр кемдең кем икәнен. Туҡта, инеп сыҡһын әле кафе тигәндәрендә, бер тәнен яҙып алһын. Ҡасан тейә быңдай форсат... Бер юлы кәстүмен дә йыуыр. Керҙе Марат кафеға, кәштәләргә күҙ һалды. Аб-ба, быңдағы һыралар күплегенән һәм төрлөлөгөнән күҙҙәр ҡамаша ла баһа! Ҡайһыһын һайларға белмәй, тапанып торҙо ир. Һатыусы ҡыҙҙың ҡарашын тойғас, уңайһыҙланып китте, кешене көттөрөү килешмәҫ, тип, күҙенә ниндәй һыра эләкте, шуға бармаҡ төртөп күрһәтте. Ярай, суҡынһын, бер генә йәшәй, эсеп ҡараһын әле ул да сит илдең зәм-зәмен. Ана, телевизорҙағы рекламала күрһәтәләр бит: һыра эсеп алған йәштәр күңел аса, тормоштары дәртле, һәйбәт...

Байтаҡ ултырҙы Марат кафела. Эсемлек оҡшап ҡалды үҙенә, тағы алды. Хәҙер ул һатыусы янына барып йөрөмәне, ҡулын болғап ҡына саҡырҙы ҡыҙҙы. Бер ҡасан да тәмләп ҡарамаған балығын, әллә ниндәй диңгеҙ ашамлыҡтарын йыпырҙы. Һатыусыһы ла йүгереп килә лә етә, килә лә етә. Маратты, Мәскәү, Себер яғынан кеҫә ҡалынайтып ҡайтыусы әҙәм, тип уйланы, ахыры. Ә кәк же, ауыл еренән ситкә йүнләп аяҡ баҫмаған кеше булһа ла, Марат фартауай егет ул, кеҫәлә — аҡса, өҫтә — ҡыйбатлы кәстүм... Әйҙә, рәхәтен күреп ҡалһын әле был донъяның! Бынан һуң әллә тейә уға быңдай бәхет, әллә юҡ.

Ныҡ өшөүҙән уянып китте Марат. Тәүҙә ҡайҙа ятҡанын аңлай алмай аҙапланды. Бәй, ятҡан урыны... ҡола ялан да баһа! Кисәге ваҡиғалар яйлап ҡына иҫенә төшә башланы ирҙең. Кафела ултырҙы, һыра эсте... Шунан нимә булды һуң әле? Хет үлтер — хәтеренә төшмәй. Туҡта, юл сатында үткән-һүткән машинаға ҡулын һелтәп торҙо түгелме һуң? «Ай, был башты, урталай ярыла хәҙер», — Марат үҙенең тыуған ауылы янында ятҡанын аңғарып ҡалды. Кемдер уны ултыртып алып, ошонда ташлап киткән, тимәк. Ҡапыл Мараттың күҙҙәре маңлайына менә яҙҙы. Атаң башы, ул яңы кәстүм алғайны бит! Ир өҫ-башын һыпырғылап ҡараны: яғаһы йыртылған, еңе һүтелгән, етмәһә, дегәнәк-маҙар йәбешеп бөткән кейеменән әллә ниндәй уҡшытҡыс еҫ сыға. Шаҡшы, кафенан елтерәтеп сығарҙылар инде әллә үҙен? Мараттың тамағы кипте. Ай, алйот, нимә тип кенә керҙе инде ул кафе тигәндәренә? Йәнәһе, берәү бай булып ҡылана. Бай түгел, өҫтөнә кейер кейеме булмаған байғош ул! Аңҡы-тиңке булып торғандан һуң Марат ауылына табан атланы. Ҡатыны әрләр, балалары күстей көтөп күҙҙәренә тилмереп ҡарар инде. Күстей тигәндән... Аҡсаһы мул да баһа, шуны ҡатынына тотторор, балаларына ауыл лавкаһынан кәнфит-маҙар алыр. Ир кәстүменең кеҫәһенә тығылды, унан яңы кейеменең әле белеп тә еткермәгән тишек-тошоҡтарын ҡапшарға тотонодо — юҡ! Берәй йылғыры, ауыл тинтәген күреп, аҡсаһын һыпырып ҡалғандыр инде. Күкрәгенән йөрәген һурып алдылармы ни уның, ҡапыл күҙҙәре ҡараңғыланып китте. Их, ошонда, торған ерҙә генә, үлергә лә ҡуйырға... Марат үҙен донъялағы иң бәхетһеҙ кеше итеп тойҙо. Ҡапыл ныҡлы ҡарарға килеп, ир өҫтөндәге

пинжәк-салбарҙы сисеп ырғытты ла, үҙенең иҫке, күп йыуылыуҙан уңып бөткән күлдәген һәм тубығы сыҡҡан трикоһын кейеп алды. Иҫке кейеме ялтырап торған кәстүмгә ҡарағанда күпкә ҡәҙерлерәк ине ниңәлер Маратҡа.

## Тейешле эш һәр саҡ тейешлеме?

Интернатта уҡыған йылдар. Юғары синыф уҡыусылары булараҡ, интернатыбыҙҙың төп хужаһы итеп тойоп йөрөйбөҙ: рәхәт – береһе лә ҡағылмай, картуф әрсетмәй, йоҡларға ятҡандан һуң битте теш пастаһы менән буяп ыҙалатмай. Хәҙер үҙебеҙ түбәнерәк синыфта уҡыусылар өсөн яфаға әүерелдек. Танауға еҫ керҙе – ҡыҙҙарҙың элеккесә сырҡылдығын сығармайбыҙ, арыуыраҡ күренгәндәре артынан сабабыҙ, төндәрен уларҙы уйлап йоҡлай алмай ятабыҙ.

Тағы ла бер шөғөлдө – төндәрен кәрт һуғыуҙы үҙ итеп алдыҡ. «Дурак», «Кәзә» уйындарынан ялҡҡас, аҡсаға уйнай башланыҡ. Китте хәҙер беҙҙең тормош хөрриәткә: төндәрен генә түгел, көндөҙҙәрен дә кәрт, аҡса шауҡымынан иҫереп йөрөйбөҙ – теләһә ниндәй «Лас Вегас», «Монте Карло» казинолары ары торһон! Кәрт уйнаған өҫтәл өҫтөнә тинлектәр менән бер рәттән хатта һумлыҡтар ҙа менеп ята. Уйын ҡыҙғандан-ҡыҙа бара, бөтә интернат йоҡлағанда, кемдең нимә тип ҡысҡырғаны аңлашырлыҡ булмай башлай. Спираттағы уйыныбыҙҙың иң көсөргәнешле мәлендә, өҫтәлдәге аҡса апаруҡ ҡына йыйылып киткәс, бер егетебеҙ урынынан һикереп торҙо ла:

– Өс һум дальше! – тип ҡысҡырҙы. Йәнәһе, һәр уйнаусы йәнә өс һумын өҫтәлдәге дөйөм кассаға һалырға тейеш. Әйткәндәре ҡеүәтлерәк яңғыраһын өсөн, типмелер, өҫтәп ҡуйҙы: фәләненде төгән итәйем...

Тик уңышлы уйынсыға был юлы аҡса бәхетен татырға насип булманы. «Ай-бай», – тигән тауышҡа боролоп ҡараһаҡ, ишек төбөндә... директорҙың тәрбиә эше буйынса урынбаҫары тора.

– Һеҙҙән быны көтмәгәйнем... – тине лә, түргә үтеп, өҫтәлдәге кәрттәрҙе һыпыра тартып алды ла сығып китте.

Иртәгәһенә уҡыу ҡайғыһы китте: бына-бына директорға саҡыртып, эт күрмәгәнде күрһәтергә тейештәр... Күпме генә көтһәк тә, ул көндө лә, иртәгәһенә лә, һуңынан да беҙҙе директорға саҡырыу түгел, ҡомарлы уйыныбыҙ тураһында һүҙ ҡуҙғатыусы ла булманы. Уйын өсөн аҙаҡҡы тиндәрен йәлләмәгән егеттәр башҡа кәрт тип ауыҙын да асманы – һабаҡтың еллеһен бирҙе беҙгә өлкән уҡытыусы. Әгәр ҙә ул беҙҙең шуҡлыҡ тураһында еткерһә, (бәлки, вазифаһы буйынса ул быны эшләргә лә тейеш булғандыр) гимназиянан ҡыуылыуыбыҙ ҙа ихтимал ине. Етмәһә, директорыбыҙ таяҡты тотҡан еренән һындырырға күп һорап тормай. Хәҙер уйлап ҡуям: директорҙың тәрбиә эштәре буйынса урынбаҫары үҙенең ҡылығы менән яҙмыштарыбыҙҙың кире йүнәлеш алыуынан аралап ҡалманымы икән? Әйткәндәй, һүгенеп кәрт уйнарға яратыусы егетебеҙ, Мысырҙа белем алып ҡайтҡандан һуң, дин юлынан китте.

... Тәү ҡарашҡа тейеш тойолған эштәрҙе башҡарыуҙан тыйылыу ҙа ҡайһы ваҡыт яҡшы һөҙөмтә бирә икән.

## Кризис

Илдар, ҡыҙын балалар баҡсаһынан алғас, ашыҡмай ғына йорто яғына атланы. Һуңғы мәлдәрҙә ул эш көнө аҙағында ғына түгел, иртән иртүк үҙенең арыуын тоя. Тән арыуы ғына булһа – бер хәл, бында йән йонсоған.

Тормоштоң ҡаҡҡылап-һуҡҡылауҙарынан, алдағы көнгә өмөттөң самалы булыуынан тамам биҙҙерҙе, ҡасан кешесә йәшәй башлармын, тигән уй өнөндә маҙаһыҙлауы етмәгән, һуңғы арала төшөндә лә тынғылыҡ бирмәй. Уйҙары, билдәле, аҡса мәсьәләһенә барып тоташа. Инде генә донъялары арыуландымы тиһә, йә тегенеһе, йә бынеһы килеп сыға ла барлыҡ хыялдарҙы селпәрәмә килтерә лә ҡуя. Һис уйламағанда кризис тигәндәре халыҡтың бәкәленә һуҡты. Уның нилектән, ҡайҙан пәйҙә булғанлығын Илдар аңламай ҙа, аңларға ла теләмәй, бары тик әҙәмсә йәшәгеһе генә килә. Әле байтаҡ ерҙәрҙә эш урындарын ҡыҫҡартыу бара, күпме кеше урамда ҡаласаҡ... Эш урындарында ҡалыусы бәхетлеләргә өҫтәмә вазифа йөкмәтелә — урамға тибелеүселәр эштәрен үҙҙәре менән бергә алып китмәй бит. Ғаиләһе нишләр бынан һуң, кредитты нисек түләп бөтөргә? Илдар ауыр уйҙарынан арынырға теләп, устары менән битен һыпырғыланы. Етмәһә, тыуымды арттырырға кәрәк, тигән булып, халыҡты был юҫыҡта әүҙемләшергә саҡыралар. Кешенең йәшәр урыны, эше булһа, бала табырғамы, юҡмы, тип баш ватамы ни? Бына Илдар ҙа ҡатыны менән ҡыҙына ипотекә берәй бәпес алып ҡайтыр ине лә, осон-осҡа ялғап йәшәүҙәре арҡаһында ниәттәрен тормошҡа ашыра алмайыраҡ торалар.

Илдар өйөнә яҡынлаша башлағас, тәмәкеһе бөтөүен иҫенә төшөрҙө. Алама ғәҙәтенән ҡотола алмай нисә йыл этләнә ул. Бер йомарлап һалып ҡуйыр инде ул Илдарҙы... Күңел урында булмаған был заманда күп тә тартыла, ҡәһәрең. Ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та, уйлап ҡараһаң: ҡайһы саҡ өйҙә икмәккә аҡса юҡ, ә тәмәкегә табыла. Күрше-тирәнән теләнселәп булһа ла ала уны ир. Уйҙарына бирелеп, ҡыҙының үҙенә нимәлер тип өндәшкәнен дә абайламай килә икән Илдар.

— Атай, шикалат ал әле? — Ҡыҙының тауышында икеләнеү ҙә һиҙелә: балалар баҡсаһынан ҡайтҡан һайын тиерлек һорана ул, тик өмөтө генә йыш аҡланмай ҡала. «Аҡса юҡ бит әле, ҡыҙым. Булғас алырбыҙ, йәме»,— һымағыраҡ өйрәнелеп бөткән яуапты ишетергә әҙерләнһә лә, бала етәктә килеш атаһына баҡты: бәлки, бөгөн бәхет йылмайыр үҙенә, ә?

— Пока аҡса юҡ, ҡыҙым, бына киләһе аҙнала зарплата алғас...

Артабанғыһын тыңламаны бала, нисектер, бөршәйә төшөп, бойоҡ ҡына атлауын дауам итте. «Һай, донъя, һай, кризис... берәй заман үтерме был тормош кризисы?» Илдар, уфтанып, кеҫәһен ҡапшап ҡараны. Бая эштәге дуҫынан бер аҙ аҡса алып торғайны, анау киоскынан тиҙ генә тәмәке алырға ла өйгә ҡайтып, телевизор янына ултырырға кәрәк, уйҙарынан арыныр, исмаһам. Киоск тәҙрәһенә бер нисә ҡағыҙ аҡса һоноп, тәмәке алған Илдар был ерҙән тиҙерәк китергә ашыҡты. Юҡһа, ҡыҙы ялтыр-йолтор тышлы кәнфиттәргә ҡыҙығып текәлә лә өйгә ҡайтыуҙы онота.

— Атай, нишләп һинең тәмәкегә аҡсаң бар, ә шикалатҡа юҡ? — Илдарға ҡыҙының һорауы урлашҡанда бурға «Һәй!» тип ҡыҫҡырыу менән бер булды. Аптырап, бер килке ни әйтергә белмәй ҡатып торҙо атай кеше. Шунан, киоскыға шәп-шәп атлап барҙы ла, тәмәкеһен кире тапшырып, урынына ялтыр тышлы кәнфит алды ла ҡыҙына тотторҙо. Яурынынан оло йөк төшкәндәй булды Илдарҙың, әйтерһең, кемдер оло гонаһынан алып ҡалды. Атайлы-ҡыҙлы ҡабаттан өйҙәренә табан ыңғайланы. Ирҙе кискә тартырына булмауы ла борсомай ине әлегә.

# *Әҙәби тәнҡит*

## БОҘҘАР БУЛЫП АҠТАРЫЛЫР КҮҢЕЛ

*Әлегерәк, үҙем дә аңғармаҫтан, «ҡатын-ҡыҙ» тигән һүҙгә баҫым яһап: «Ҡатын-ҡыҙ шиғриәтен бигүк уҡығы ла килмәй. Нимә инде?.. Уңмаған мөхәббәт хаҡында уҡыу күңелһеҙ, ялҡытҡыс... Ир-егет шиғриәтенә ҡарағанда, үтә сөсө, үтә шәхсән нәмәләр күп унда...» — тип уйлай торғайным. Тора-бара «...ир-егет йәки ҡатын-ҡыҙ шиғриәте тигән төшөнсә юҡ ул. Шиғриәт — ул шиғриәт!» тигән һүҙҙәргә йә, киреһенсә, «ҡатын-ҡыҙ шиғриәте», «ир-егет шиғриәте» тип айырып ҡарауҙарға юлыҡтым...*

*Ә бит кемдәр тарафынан әйтелгән был һүҙҙәр...*

*Белла Ахмадуллинаның Массачусетс штаты Амхерст колледжында үткәрелгән шиғриәт кисәһендә легендар шәхес, күңеле менән боласы шағир Иосиф Бродский студенттар алдында инглиз телендә сығыш яһай: «Шиғриәтте бер нисек тә ҡатын-ҡыҙҙыҡы, көньяҡ йәки башҡа региондыҡы... зәңгәрме, ҡарамы, тип атап булмай. Бындай аныҡлаусы һүҙҙәр килешмәй уға. Ул — йәки шиғриәт, йәки шиғриәт түгел...»*

*Рус әҙәбиәте тәнҡитендә «ҡатын-ҡыҙ шиғриәте», «ир-егет шиғриәте» тигән төшөнсәләрҙең барлыҡҡа килеүен Ахматова, Гиппиус, Цветаеваларҙың шул осор әҙәбиәтендә шау-шыу ҡуптарыуҙары менән бәйләйҙәр. Мандельштамдың тәнҡит һүҙҙәрен генә иҫкә төшөрәйек: «... Ҡатын-ҡыҙ шиғриәте ир-егет шиғриәтенә элек-электән хас булған һиҙгерлекте, уяулыҡты, зирәклекте арттырып, иң юғары ноталарҙа тирбәлеүен дауам итә». А. Ахматованы гонаһ ҡылып тороп, аҙаҡ тәүбәгә килеүҙәрҙә ғәйепләгән В. Набоков: «Уның шиғриәте башҡа шағирәләрҙекенә зарарлы йоғонто яһай», — тип билдәләп үтә үҙенең бер тәнҡит мәҡәләһендә.*

*... Кемеһенең һүҙе хаҡтыр, кемеһенеке хаталыр — әлегә был полемика булып ҡалһын, әйҙә.*

Миңә ҡалһа, шиғырҙың, әгәр ҙә ул ысынлап та шул исемгә лайыҡ икән, йәне, күңеле бар. Шиғырҙың яралғыһы – хис-тойғолар. Тимәк уның «күңеле» лә үҙен тыуҙырыусыһы – ирме ул, ҡатынмы – күңеленә ауаздаш.

Ҡатын-ҡыҙҙың шиғри күңеле тураһында булһын артабанғы һүҙ. Ул һүҙ шағирә, публицист, Ш.Бабич исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Лариса Абдуллина ижадына барып тоташа.

Ларисаның шиғырҙары – хәҙерге заманда ғаилә һәм эш, һөйөү һәм яңғыҙлыҡ, заман талаптары һәм күңел өндәүе, иҫәп-хисапҡа ҡоролған тормош һәм ижад араһында бишкә ярылырҙай булып өҙгөләнгән ҡатын-ҡыҙ күңеле ул. Үҙе көслө, үҙе йонсоу, үҙе күндәм, үҙе тынғыһыҙ – бына шундай ҡатын-ҡыҙ. Инде

ошо образдың күңел төпкөлөнә төштөм, бына-бына хәҙер унда һаҡланған серҙәрҙең, нескәлектәрҙең бер бөртөгөн дә ҡалдырмайынса сүпләп бөтәм тигәндә генә, шағирә, икенсе бер шиғырындағы икенсе бер һүҙе менән арбап, иғтибарҙы башҡа йүнәлешкә алып китә. Һәм теге образ Леонардоның Джакондаһылай күҙ алдында балҡып тик тора.

Ҡатын-ҡыҙ һәм уның хис-тойғоға бик бай булған күңеле тураһында һүҙ башлағас, иң тәүҙә ижадсының мөхәббәт лирикаһына туҡталып китәйек. «Ағиҙел» журналында Т.Ғәниева: «...йәш шағирәләрҙең күбеһенең ижады ошо теманы культ хәленә еткереү менән мәшғүл. Лариса ла шулай итә. Бер үк тема һәм мотивтарҙы йырлай ҙа йырлай. Күбеһе үтә шәхсән. Быларҙан ҡотолорға кәрәк ул...» – тип еңелсә генә итеп иҫкәртмә лә эшләп үткәйне... Тапҡыр, көслө әйтелгән, әлбиттә. Шулай ҙа... «Мне нравится, что вы больны не мною», – тип беҙҙең аңға, хәтергә һеңгән һүҙҙәрҙең авторы үҙенең тормош иптәше С.Эфронға мөхәббәт шиғырҙары яҙыу менән мауыҡмаһа, бәлки, Цветаева – Цветаева булмаҫ ине. Лариса үҙенең шиғырҙарында бер генә мөхәббәткә тоғро булған ҡатын-ҡыҙ булып сығыш яһай. Әммә күҙ йәштәрен түгеп үкереп илап ултырған, әсе яҙмышына ләғнәт уҡыған ҡатын-ҡыҙ түгел ул. Беҙ ҙә Ларисаның ошондай шиғырҙарына өйрәнгәнбеҙ, бәйләнгәнбеҙ. Үҙенсәлекле, мауыҡтырғыс лирика. Артабан ошо «мөхәббәт яуы»нда уның уй-фекерҙәре, тойғолары, ҡылыҡтары ҡайһы тарафҡа юл алыр икән, тигән ҡыҙыҡһыныуҙа уянып ҡуя.

Иғтибарымды ошо һүҙҙәр яуланы: Минең өсөн яуға сығалмаҫһың, / Һин түгелһең маһир Искәндәр. / Минең өсөн яуға сыҡһаң да һин, / Мин булырмын сәмең сәбәбе. / Ул мөхәббәт яуы булмағас һуң, / Кемгә, әйтсе, булыр кәрәге?

Кем нисек аңлайҙыр был шиғырҙы, әммә мин үҙем ошо асыҡ тексты һөйгәненең үҙенә ҡаршы яу асыу тип ҡабул иттем. Үкенеү ҙә, рәнйеү ҙә, һыҡтау ҙа, өмөтләнеү ҙә юҡ бында. Һөйгәне «Һин түгелһең маһир Искәндәр» тип үҙенә төбәлгән һүҙҙең киреһен иҫбатларға тырышһа, «...сыҡһаң да һин, мин булырмын сәмең сәбәбе» тип оҫта итеп ҡорған тактиканы шағирә. Тегенеһенә аҡланырға, боролоп китергә, артҡа сигенергә урын да ҡалдырмаған. Был шиғырҙа ҡатын-ҡыҙға хас аҡыл ярылып ята, әҙерәк хәйләкәрлек тә бар...

...Һөйөүһеҙ ҙә йәшәп була микән? / Мейесһеҙ бер өйҙәй һып-һыуыҡ. / Олой һағыш, иҫә иҫәр хистәр – / Елде улар тоталды ҡыуып. / Емерәм дә ҡуям ошо өйҙә, / Таш диуарҙай булып ҡатҡансы. / Мөхәббәтем, кисер, мең тетрәтеп, / Йөрәгемә кире ҡайтһаңсы ./ – яңғыҙлыҡ тураһында бәләкәй генә шиғыр. Лирик геройҙың яңғыҙлығы, уның арҡаһында тыуған күңел ғазабы ҡысҡырып торған һүҙҙәр артына ышыҡланмаған. Артыҡ хис-тойғо ла кәрәкмәй.

Ижад кешеһенең булмышы ҡыҙыҡ шул: ике параллель донъяла йәшәй бит ул. Береһе – ысынбарлыҡтағы тормош, икенсеһе – хыялдағы. Ул, әгәр ҙә Ижад тигән ғали йәнәптәренә ысын күңелдән хеҙмәт итһә, был донъяға иғтибар итмәй, ә үҙенең уйлап сығарған донъяһын моң-нурға, төҫтәргә байыта... Унда, мәңге йәшел тау итәгендә, өй һала, уны уратып алма, муйыл ағастары ултырта... Сәйер, ул ағастар унда һәр ваҡыт аҡ сәскәгә төрөнөп ултырған була... Ҡояш йылмая, һандуғастар һайрай, йылы ел иҫә, дымлы ер еҫе аңҡый... Иң мөһиме, мөхәббәт үлемһеҙ унда... Һөйәһең, һөйөләһең... Бер туҡтауһыҙ шулай...

*Бөгөн түгел, иртәгә лә түгел...*
*Һин инерһең килеп ишектән.*
*Мин тутыҡҡан ишек күгәненең*
*Шығырлауын хәҙер ишетәм.*

*– Ҡайттым! – тип әйтерһеңме икән,*
*Өндәшмәҫһең, бәлки, бер нәмә.*
*Йөҙ-һыҙатым үҙгәрерме икән?*
*Ялғанмай ҙа торһа көлимә…*

*Аш ҡуям тип, әйҙә, уралырмын,*
*Төшөп китер ҡулдан табағым.*
*Йомшарыр ҙа күҙҙәремдән һарҡыр*
*Күптән төйөрөлгән тамағым.*

*Лар төбөнән ондо ҡырып алып,*
*Дүртебеҙгә ҡоймаҡ ҡойормон.*
*Һин алыҫтан мине һиҙгән кеүек,*
*Һәр ымыңдан һине тойормон.*

*– Һин утын яр! – тигән булырмын да*
*Тотторормон иҫке балтаны.*
*Онотормон әйтер һүҙҙәремде,*
*Ә нисәмә йыл уны ятланым…*

*Шарт-шорт янған мунса өнө баҫыр*
*Әллә минең… һинең һыҡтауҙы…*
*Нисәнсе ҡат хыялымда шулай*
*Ҡабатлайым һинең ҡайтыуҙы.*

**(«Һин ҡайтҡанда»)**

Лирик героиняның яңғыҙ тормош көтөүе тураһында бәйән иткән символик образдар: тутыҡҡан ишек күгәне, табаҡ, лар, уның төбөндә генә ҡалған он, иҫке балта, яғыуһыҙ мунса – шиғриәт донъяһынан. Шағирә үҙенең хыялдағы тормошон тап ошолай итеп күҙ алдына килтерә: ябай тормош, ауыл өйө, мунса, сабыр улдар, ул үҙе лә тыныс, баҫалҡы… Ошо тормош ижадсы күңеленә күпкә танһығыраҡ, яҡыныраҡ.

Шағирҙы рәссам менән сағыштырырға була. Рәссам беҙҙе солғап алған донъяны, ундағы күренештәрҙе, хәл-ваҡиғаларҙы төҫтәр менән һүрәтләһә, шағирҙың һүрәтләү ҡоралы – һүҙ. Тылсымға, көскә эйә булған һүҙ. Рәссамдарҙың төрләһе була: пейзаж, натюрморт ҡына яҙғандары, кешеләрҙең кисерештәрен, холоҡ-фиғелдәрен портреттарҙа сағылдырғандары, ҡатын-ҡыҙҙың илаһи тәненә табынғандары, һоро төҫтәрҙе генә ҡулланғандары, йәйғор төҫтәрен яратҡандары… Шағирҙар менән дә шулайыраҡ…

Ларисаның шиғри юлдарында уның күңел һыҙланыуынан, рухи төшөнкөлөктән, эске көсөргәнештән ҡотолорға теләп яҡтылыҡҡа, тынғылыҡҡа ынтылыуын йыш ҡына күҙәтергә мөмкин. Ул үҙенең ошо күңел торошон ярҙарға бәреләһуғыла аҡтарылып, ҡубып киткән боҙҙар менән сағыштыра: Бер ҡараһаң, йән әрселде инде – / Сабый ғына кәйеф уяна («Апрель таңы»); / Әрселгәндә йылға иҫкелектән / Бушанып та ҡалыр был йәнем («Боҙ киткәндә»); / Боҙҙар булып эсем аҡтарыла, / Аһ, һыйманым инде ярыма («Боҙҙар булып эсем аҡтарыла»). Ағын һыу был боҙҙарҙы алып китә… Ә һуңынан үлән шытып сыға, бөрө һутҡа тулыша, ҡайындар һырғалана… еләк сәскә ата…

Ижадсы, үҙе ҡулланған төҫтәрҙең көсөнә, мәғәнәһенә иғтибар ҙа итмәйенсә, зәңгәр, һоро төҫтәрҙән – һары, йәшел төҫтәргә, һалҡын тондарҙан йылы,

тыныс тондарға күсә. Бигерәк тә йәшел төҫтө һәм уның төрлө төҫмөрҙәрен үҙ иткән. «Төҫ – шәхестең тибын билдәләй», – тип әйткән боронғо Тибет философтары. Психологик диагностикала, йәшел төҫкә тартылған кешенең күңеле хис-тойғоларға бай, уның иғтибары ла эшкә, ижадҡа йүнәлтелгән, тип билдәләйҙәр.

Шағирә тәбиғәттең бөйөклөгөн шундай ябай һәм оҫта итеп һүрәтләй: «тертләп асылғандай бөрө күҙе…», «сырт-сырт итеп ҡуя боҙ өҫтө…», «сыңлап көләр сәскә күккә бағып…», «һуңғы аккордтарын бирмәҫ тимә биш ҡунаҡлы миҙгел тағы бер…», «игеҙ йәйҙә ҡояш нурын һауып, әсе генә балан балланған…», «ыуыҙ ғына сағы тәбиғәттең…», «яҙ күҙҙәре быйыл һөрмәле…», «Талҡаҫ өнө менән төнгө усаҡ дуэт булып ниҙер көйләнә…». Ошондай һүрәтләүҙәр булған «Күҙем тышта тороп ҡалды инде…», «Яҙ башы», «Апрель таңы», «Сарсатып та килгән йәшел майҙың…», «Игеҙ генә йәйҙә иңдәреңде…», «Ҡымыҙ еҫе һеңгән яландарҙа…» шиғырҙарынан күңелдәрҙе иретерлек көйләлек, моңлолоҡ, яғымлылыҡ бөркөлөп тора.

…Йәш ултырыуымылыр ул, әллә буш хыялдар ҡороуҙан арып-талыуымы, Ларисаның һуңғы осорҙа ижад ителгән шиғырҙарында Ғаләм һәм Ер ҡанундары, үлем һәм йәшәү тураһында уйланыуҙар урын алып тора. Хатта, бер ни тиклем апокалиптик мотивтарға тартым уйланыуҙар ул. Бына «Зыяратта» шиғырынан бер нисә юл:

*…Йыһандарға һыймаҫ әҙәми зат*
*Күреп белә ҡәбер тарлығын.*
*Ниндәй йәмдәр табып йәшәй кеше,*
*Аңлай тороп үлем барлығын…*

Шунда уҡ:

*Зыярат – фәһем, мәғәнә лә төҫлө.*
*Ер-әсәгә һеңһен хаҡ бәндә.*
*Ҡәберле лә булыу – бәлки, бәхет,*
*Нисек баһаларҙар «тегендә»?...*

Ике донъя араһындағы сиктә тороп уйлана ижадсы. Һыҡтамайынса, зарланмайынса, тыныс ҡына итеп уйлана. Уның аңы үлемде ҡот осҡос, имәнес күренеш итеп түгел, ә йәшәйештең серен асыу сараһы итеп ҡабул итә. Уның «Зыярат – фәһем, мәғәнә лә төҫлө» тигән һүҙҙәре шағирә И. Лиснянскаяның «Йәшәү йомаҡ булһа, үлем булыр уның әҙер яуабы» тигән шиғри юлына бәрәбәр.

«Әллә ниндәй заманалар килде», – тип мөрәжәғәт итә шағирә йор, тапҡыр һүҙе, тос ижады, тәрән психологизмы менән айырылып торған прозаик, публицист Р. Солтангәрәевҡа. Ларисаның ни өсөн Рәшит ағайҙың рухына шулай итеп өндәшеүен аңлар өсөн уҡыусыға прозаиктың ижады менән таныш булыу мотлаҡ. Һүҙ әлегә шиғыр хаҡында.

*…Дөрөҫлөктәр әллә кәрәкмәйме?*
*Баһаланмаймы ни ғәҙеллек?*
*Уйланылған хәйлә-мәкерҙәргә*
*Бармы беҙҙең көрлөк, әҙерлек?*

*Кемде саҡырһам да, шуныһы – юҡ,*
*Намыҫ һатыу түгел яңылыҡ.*
*Зиһендәре аяҙ милләттәштең*
*Һәр береһен баҫҡан яңғыҙлыҡ.*

Шунда уҡ:

*Айырылған күстәй, был халыҡтың*
*Юғалырмы икән үҙ төҫө?*
*Һүрелгәндә күңел усаҡтары,*
*Баһалаусы бармы һүҙ көсөн?*

Артабан:

*Ымһындырыр Мәскәү, Питерҙары…*
*Беҙҙең зиһен кәрәк был ергә.*
*Ҡаның тамған илдә намыҫ менән*
*Яҙһа ине ғүмер итергә.*

*Беҙҙең хистәр кәрәк ошо илгә –*
*Булһам икән унда мин дә үҙ.*
*Тағы болғауырҙар аңды бутай, –*
*Рәшит ағай, кәрәк һинең һүҙ!*

Был шиғырҙағы фекерҙе әллә нисә көнгә, әллә нисә айға һуҙырлыҡ итеп үҫтерергә лә үҫтерергә мөмкин. «Зиһендәре аяҙ милләттәштең һәр береһен баҫҡан яңғыҙлыҡ»… Ошо шиғырҙың асылына төшөнөп уйланһаң, «яңғыҙлыҡ» тигән һүҙҙең «үлем» тигәндән дә яманыраҡ, ҡурҡынысыраҡ икәненә инанаһың… Рәсәй тигән беҙҙең илебеҙҙә «зиһендәре аяҙ кешеләр» бер быуат эсендә лагерь, төрмә, һөргөн, психиатрия хәстәханаларында ҡырылған. Бөгөн ундайҙарҙы кешеләрҙең күңел бушлығы, һалҡын битарафлығы юҡҡа сығара.

Башҡорт халҡы, уның теле, тип, рухи бейеклектәр тураһында һөйләп һөрән һалған зыялыларҙың үҙҙәренең үк балалары Мәскәү, Питерҙа төйәк тапҡан – ошо хаҡта әйтергә теләй шағирә. Ә Мәскәүҙә, Питерҙа нимә?.. Был «нәмәләр» күп унда… Ундамы?.. Унда «бөйөк», «билдәле», «атаҡлы», «мөһим», «өмөтлө» йондоҙҙар бик күп… Унда талант түгел, аҡса хужа… Мәҙәни саралар ҙа бик күп унда… Ә уларҙы Ксения Собчактар алып бара… Зәңгәр экрандарҙан кешеләрҙе алдаштырып, көлдөрөп аҡса эшләйҙәр… Һәм көнө-төнө аҡса, аҡса, тағы ла аҡса һанайҙар…

Дөрөҫ әйтә публицист, тәнҡитсе К.Ковалев: «Былайтып теләһә ниндәй моськанан да фил яһап була. «Был королдәр яланғас бит!» – тип бар донъяға ишетерлек итеп ҡысҡырырға тейеш тәнҡитсе йәки теге бер ҡатлы малай ҡайҙа булған һуң?»

«Рәшит ағай, кәрәк һинең һүҙ, тигән мөрәжәғәтең менән һин дә теге бер ҡатлы малайҙы эҙләйһеңме әллә, Лариса?» – тип һорағым килә шағирәнән. Һәм, уның яуабын көтөп тә тормайынса, ошо һүҙҙәрҙе әйтергә теләйем: «Ҡурҡма ла һин, икеләнмә лә, әйт ул һүҙҙе үҙең. Шиғырҙарың менән әйт… Публицистик мәҡәләләреңдә әйт… Иң мөһиме, был ваҡытлы донъяның ваҡлыҡтарына бирелмә, ялтырауыҡтар менән әүрәтеүҙәргә, алдаштырыуҙарға бирешмә. Үҙ-үҙеңде юғалтма…»

**Айһылыу ВАХИТОВА,**
**Бөрө дәүләт социаль-педагогия**
**академияһы башҡорт филологияһы кафедраһы**
**өлкән уҡытыусыһы, филология фәндәре кандидаты.**

*Беҙҙең юбилярҙар*

# “ӘЙ БУЙЫНА ҠАЙТАМ ӘЛЕ...”

*(Ризван Хажиевҡа 70 йәш)*



Журналист һәм яҙыусы Ризван Хажиевтың новеллик повесы шулай тип атала. Унда һүҙ ябай ауыл малайының нисек итеп журналистикаға, артабан фәнгә, документаль һәм нәфис әҙәбиәткә юл ярыуы хаҡында бара. Етмешкә яҡын новеллалар аша етмешкә яҡын кеше яҙмыштарын һүрәтләһә лә, асылда бер генә шәхестең – повестың төп геройы Әмир образын сағыу буяуҙар менән аса ул.

Ризван Хажиевтың тормош һәм ижад юлы менән бер ни тиклем хәбәрҙар кеше Әмир – Ризвандың үҙе, ләкин байтаҡ киңәйтелгән, художество формаһына һалынған прототибы икәнлеген аңлаясаҡ. Уның Башҡортостан Журналистар союзы рәйесе булып эшләгән йылдарында миңә лә, ул саҡта “Ҡыҙыл таң” гәзитенең баш мөхәррире, Журналистар союзының башҡарма комитеты ағзаһы булараҡ, йыш аралашырға, бергә эшләргә, үткән быуаттың 90-сы йылдар баштарындағы ҡатмарлы һәм сетерекле ваҡиғалар уртаһында ҡайнарға, Журналистар союзын, ҡайһы бер республика, өлкәләрҙәге һымаҡ, тарҡатыуға, юҡҡа сығарыуға юл ҡуймаҫ өсөн байтаҡ көс һалырға, ең һыҙғанып көрәшергә тура килде. Тап ана шул осорҙа мин Ризвандың тура һәм тапҡыр һүҙле, ҡырыҫыраҡ, хатта тупаҫыраҡ шәхес, башҡаларға ла, үҙенә лә талапсан, ҡаты ҡуллы етәксе икәнлеген һынаным. Бәлки, ул йылдарҙа нәҡ Хажиев һымаҡ етәкселәр кәрәк булғандыр ҙа, юғиһә беҙ Башҡортостан Журналистар союзынан ҡолаҡ ҡағыуыбыҙ мөмкин ине.

Бер яҡтан, әҙәбиәт һуҡмағына аяҡ баҫҡан киң билдәле журналист, икенсе яҡтан, талапсан һәм ҡәтғи етәксе – ундай сифаттар һәр кемгә лә бирелмәйҙер ул.

Ысынлап та, кем һуң ул, Ризван Хажиев?

Ризван Закирхан улы Хажиев – Әйле ҡәбиләһенең (ниңәлер уны хәҙер “берекмә” тип атай башланылар) Ҡошсо ырыуы егете. Ул 1939 йылдың 30 сентябрендә Һөләймән ауылында ғаиләлә дүртенсе бала булып донъяға килә. Унан алда Ғалимхан (1928 – 1990), Мәғәфүрә (1930 – 2006), Тельман тыуған була. Аталары Закирхан (1907 – 1942) “Искра” колхозында ат ҡараусы, бригадир, хисапсы, колхоз рәйесе, Ләмәҙтамаҡ ауыл Советы рәйесе булып эшләгән һәм һуғыш йылдарында ла бөтөп етмәгән кулак ҡалдыҡтары тарафынан мәкерле рәүештә үлтерелә. Әсәләре Мәғәмүрә (1908 – 1993) – ябай колхозсы.

Һөләймән башланғыс, Ләмәҙтамаҡ урта мәктәптәрен, Силәбе өлкәһенең 31-се Бакал ҡала һөнәрселек училищеһын тамамлағас, Ризван паровоз машинисы ярҙамсыһы булып хеҙмәт юлын башлай. Өс йыл Совет Армияһында хеҙмәт итә.

Унан ҡайтҡас, Мәсетле районының “Коммунист” гәзите редакцияһына әҙәби хеҙмәткәр итеп эшкә алына. 1964 йылда Башҡорт дәүләт университетының филология факультетына уҡырға инә. Уҡыу йылдарында университет комсомол комитетының өсөнсө, артабан икенсе секретары, ике йыл студенттарҙың йәйге хеҙмәт семестры буйынса БДУ штабы начальнигы вазифаларын башҡара, II – IV курстарҙа Ленин стипендиаты була. Университетты “ҡыҙыл диплом”ға тамамлағас, уны әҙәбиәт кафедраһы мөдире, профессор, күренекле башҡорт яҙыусыһы Кирәй Мәргән (Әхнәф Нурый улы Кирәев) аспирантураға тәҡдим итә. Ләкин ике йыл элек университет етәкселеген ҡаты тәнҡитләп сыҡҡан “бузотер” Хажиевты ректоры Ш. Х. Чанбарисов үткәрмәй, һәм егет Мәләкәс һигеҙ йыллыҡ мәктәбенә директор булып китә.

1970 – 1974 йылдарҙа район мәҙәниәт бүлеге мөдире, район гәзите мөхәррире урынбаҫары булып эшләй һәм 1974 йылда “Совет Башҡортостаны” гәзитенең Учалы зонаһы буйынса (уға Учалы, Белорет, Бөрйән райондары, Учалы һәм Белорет ҡалалары инә) эшкә саҡырыла. Артабан республиканың төньяҡ-көнсығыш райондарына күсерелә һәм 1981 – 1987 йылдарҙа шул уҡ гәзиттең партия тормошо бүлеген етәкләй, редколлегия ағзаһы, профком рәйесе була. 1987 йылда Башҡортостан Журналистар союзы рәйесе Динис Бүләковтың тәҡдиме менән идараның яуаплы секретары, бер йылдан, Д. Бүләков Башҡорт АССР-ының Телевидение һәм радио буйынса дәүләт комитеты рәйесе һәм бер үк ваҡытта Башҡортостан Яҙыусылар союзы рәйесе итеп һайланғас, Ризван Хажиевты Башҡортостан Журналистар союзы рәйесе итеп һайлап ҡуялар, һәм был вазифаны ул 1996 йылға тиклем тарта, Журналистар союзының ике съезын үткәрә. Шуны ла әйтергә кәрәктер: әгәр быға тиклем Журналистар союзы менән республика гәзиттәре һәм журналдары мөхәррирҙәре генә етәкселек итеп килһә, Ризван Хажиев – ябай журналистар араһынан һайланған тәүге (бәлки, һуңғыһылыр ҙа) рәйес. 1990 йылдағы БАССР Юғары Советына һайлауҙар ваҡытында беҙ уны депутатлыҡҡа кандидат итеп күрһәттек һәм яңылышманыҡ. Ул, Ҡыйғы районының Ләүзә һайлау округында КПСС район комитетының беренсе секретарын еңеп, депутат мандаты алып ҡайтты.

Нәҡ Хажиев осоронда Рәсәйҙә беренсе булып республика журналистарының иң яҡшы әҫәрҙәренә үҙ премияһы булдырылды һәм уға егерменсе йылдарҙағы күренекле йәмәғәт һәм дәүләт эшмәкәре, публицист һәм яҙыусы Шәһит Хоҙайбирҙиндың исемен ҡуштыҡ. Уның буйынса йыллыҡ өс премия профессиональ журналистарҙың иң яҡшы әҫәрҙәре: очерктар, аналитик мәҡәләләр, документаль повестар; телевизион һәм радио тапшырыуҙары; фоторепортаждар шәлкеме өсөн бирелергә тейеш ине. Үкенескә ҡаршы, был тәртип һуңғы йылдарҙа боҙола башланы. Лауреаттарҙың һаны ла йә ике, йә биш булып китә, ваҡлана башланы: ул киң информация сараларында эшләмәгән кешеләргә лә бирелә, ә фоторепортерҙар бөтөнләй төшөп ҡалды.

Тәүге премияларҙы Матбуғат йортоноң ҙур залында 1989 йылдың 9 октябрендә, йәғни Шәһит Хоҙайбирҙиндың тыуған көнөндә, уның ҡатыны Мәһруй апай менән ҡыҙы – Башҡортостандың халыҡ, РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы, бейеү сәнғәте оҫтаһы Тамара үҙ ҡулдары менән тапшырҙылар. Бөгөн лауреаттар исемендә етмешкә яҡын журналист, премия Шәһит Хоҙайбирҙиндың тыуған ауылы – Күгәрсен районының Хоҙайбирҙе ауылында тапшырыла.

СССР тарҡалыу менән СССР Журналистар союзы ла бөтөүгә юл тотто һәм уның урындарҙағы берекмәләре үҙ көндәрен үҙҙәре күреүгә күсте. Бының өсөн иң тәүҙә үҙебеҙҙең Уставты эшләргә кәрәк ине. Уны ла, положениеһы кеүек, миңә яҙырға тура килде, һәм байтаҡ төҙәтмәләр, өҫтәмәләр менән идара пленумдарының береһендә ҡабул иттек. Ризван Хажиевтың юллауы буйынса Союзды

республика бюджетына алдылар. Штатҡа дүрт берәмек бирелде, еңел автомобиль бүленде. Әлегә тиклем ундай льгота менән Яҙыусылар союзы ғына файҙалана ине. Союз рәйесе лә йәмәғәт башланғысынан штатлы вазифаға күсерелде. Туҡһанынсы йылдар башында ҡайһы бер республика, край, өлкә журналистар берекмәләре тарҡала, төрлө ассоциация, лига, ойошмаларға тарала башланы. Беҙҙә лә ундай тенденция барлыҡҡа килде. Ҡайһы бер йомро баштар район, ҡала, республика гәзит һәм журналдарын айырып, һәр тармаҡ өсөн лига ойошторорға маташып ҡараны. Ләкин Ризван Хажиевтың һүҙе бер ине: "Кем дә кем үҙҙәренә айырым берекмә, лига төҙөп маташа икән, мин ҡаршы түгел, ләкин беҙҙән бер төрлө лә ярҙам, льгота, таянысҡа өмөт итмәһендәр. Беҙ Башҡортостан Журналистар союзын тарҡатыуға юл ҡуймаясаҡбыҙ!" Шунан һуң ғына көндәштәр Журналистар союзына йөрөүҙән туҡтаны.

Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов һәм Министрҙар Советы яғынан журналистарға иғтибар, ярҙам артҡан һайын ижади әүҙемлеккә лә киң юл асылды. Хәҙер ижади берекмәләрҙәге осрашыуҙар элеккесә шахмат уйнап, спорт ярыштарын ойоштороп ҡына үткәрелмәй, ә аныҡ ижад проблемаларын хәл итеүгә күсте. Шулай, мәҫәлән, Матбуғат һәм киң информация министры Зөфәр Тимербулатов һәм Ризван Хажиевтарҙың инициативаһы менән "эшлекле уйындар" тибындағы семинарҙар, ижади конкурстар йышайҙы. "Стерлитамакский рабочий" гәзите мөхәррире Һаҙый Арыҫланов, мәҫәлән, экология һәм тәбиғәтте һаҡлау буйынса Рәсәйҙә ойошторолған конкурс лауреаты исемен яуланы. Союз пленумдарын Өфөлә генә түгел, бәлки, күсмә рәүештә үткәреү ғәҙәткә инде. Хәтеремдә, ошондай пленумдарҙың береһе Ағиҙел буйлап Бөрөгә барышлай — теплоходта, икенсеһе — Ҡырмыҫҡалы районында, өсөнсөһө Ҡариҙел районының пионер лагерында үткәрелгәйне. Шуны ла әйтмәй булмай: Өфөләге Матбуғат йорто фойеһында Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған журналистар иҫтәлегенә "Никто не забыт, ничто не забыто" тигән стенд тора, ләкин ундағы исемлек тулы түгел ине. Беҙ, архивтарҙа эҙләнеп, яңы исемдәр асыҡланыҡ һәм яңы стенд эшләп ҡуйҙыҡ. Бында ла Ризван Хажиев юл башлап барҙы.

Ризван Хажиев эшләгән йылдарҙа Башҡортостан Журналистар союзы СССР-ҙа, артабан Рәсәйҙә киң танылыу тапты. Ризван Закирхан улы үҙе Рәсәй Журналистар союзы идараһы ағзаһы итеп һайланды, Рәсәй Журналистар союзының III съезын алып барыусы рәйестәш булды, СССР Журналистар союзы делегацияһы составында Афғанстан Журналистар союзы менән хеҙмәттәшлек итеү буйынса килешеү төҙөп ҡайтты, ә 1994 йылда, НАТО штабының саҡырыуы буйынса, Мәскәү журналистары менән Бельгияға барҙы һәм был хәрби ойошманың эше тураһында республика матбуғатында сығыш яһаны. Был да Журналистар союзының абруйы тураһында һөйләй.

Унан һуңғы йылдарҙа Ризван Хажиев Башҡорт дәүләт университетының журналистика кафедраһында уҡытты, бер үк ваҡытта башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетының декан урынбаҫары вазифаһын башҡарҙы. 1997 йылдан 2001 йылға тиклем "Ватандаш" журналы баш мөхәрриренең урынбаҫары булып эшләп хаҡлы ялға сыҡты.

Үрҙә әйтеүемсә, Ризван Закирхан улы 1990 — 1995 йылдарҙа Башҡортостан Республикаһының XII саҡырылыш Юғары Советы депутаты булып торҙо һәм үҙен әүҙем дәүләт эшмәкәре итеп тә күрһәтте. Уның туранан-тура ҡатнашлығында Мәғариф, мәҙәниәт, фәнни эшмәкәрлек һәм дәүләт фәнни-техник сәйәсәт, Башҡортостан Республикаһының дәүләт флагы, гербы, гимны тураһында закондар, киң информация саралары тураһында кодекс проекттары әҙерләнеп, сессияларға сығарылды һәм ҡабул ителде.

Журналист һәм яҙыусы-документалист булараҡ та Ризван Хажиев республикала киң билдәле. Уның тәүге "Бейек Татр бөркөтө" повесы 1981 йылда донъя

күрҙе һәм Словакияның Бейек Татр тауҙарында немец фашистарына ҡаршы көрәшеүсе партизан отряды командиры Вафа Әхмәҙуллиндың әлегә тиклем имеш-мимеш хәбәрҙәр менән бысратылып килгән исемен бөтә дөрөҫлөгө менән яҡташтарына ҡайтарып бирҙе. Йәки бына Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында БАССР Халыҡ Комиссарҙары Советы Рәйесе, һуғыштан һуң Башҡортостан өлкә партия комитетының беренсе секретары булып эшләгән, әммә сәйәси дошмандары тарафынан онотолоуға дусар ителгән Сабир Ваһаповтың яҡты образын “Кем һин, Сабир Ваһапов?” повесында бөтә тулылығы менән асыуға өлгәште. Башҡорттарҙан тәүге архитектор, СССР Төҙөлөш һәм архитектура академияһының ағза-корреспонденты, сәнғәт фәндәре докторы, профессор, Башҡортостан Архитекторҙар союзына нигеҙ һалыусы, Ишембай ҡалаһының беренсе генераль планы авторы, Башҡорт дәүләт университеты, Өфө авиация институты, Өфөләге байтаҡ торлаҡ йорттар һәм биналар проекттары авторы Барый Кәлимуллиндың исеме лә оҙаҡ йылдар онотолоп, нәжескә буялып торҙо. Үҙенең “Путь архитектора” тигән документаль повесы менән Р. Хажиев Барый Ғибәт улының исемен “ҡара пиар”ҙарҙан айырып алып ҡалды. Уның инициативаһы һәм башланғысы менән 2000 йылда Башҡортостанда тәүләп районлар энциклопедияларына нигеҙ һалынды, һәм ул бер төркөм яҡташ ғалимдар менән “Мечетлинский район Республики Башкортостан. Краткая энциклопедия” йыйынтығын баҫтырып сығарҙы.

Ризван Хажиев – филология фәндәре кандидаты, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Башҡортостан Министрҙар Советының Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге журналистар, Мәсетле районының Рәшит Әхтәри исемендәге әҙәбиәт һәм сәнғәт премиялары лауреаты, Башҡортостан Республикаһының Маҡтау грамотаһы менән бүләкләнгән, Мәсетле районы Һөләймән ауылының почетлы гражданины.

Үҙенең журналистлыҡ бурысын үтәгәндә Ризван Хажиев республиканың бер генә ҡала, районын ҡалдырмай арҡыры-буйға йөрөп сыға, Рәсәйҙең дә байтаҡ республикаларында өлкәләрендә булырға тура килә, хатта сит илдәр ҙә уға ят түгел. Әгәр Венгрияла совет ғәскәрҙәренең Көньяҡ төркөмө сафында армия хеҙмәтен үтәһә, Германия Демократик Республикаһының Галле округына Башҡортостандың төрлө мөйөштәренән йыйылған хеҙмәт алдынғылары, ғалимдар, сәнғәт коллективтары, Бөйөк Ватан һуғышы һәм хеҙмәт ветерандары – барлығы 350 кешенән торған “Дуҫлыҡ поезы” менән барып, республика гәзиттәренә репортаждар ебәреп торһа, 1989 йылдың август-сентябрендә Словакия милли восстаниеһының 45 йыллығы айҡанлы “Бейек Татр” партизан отряды командиры Вафа Әхмәҙуллин менән уны Словакияға саҡыралар, һәм үҙенең геройы менән ул йөрөгән һуғыш һуҡмаҡтарынан үтеп, матбуғатта “юл яҙмалары” баҫтыра. Һуңынан Германия, Чехословакия, Афғанстан, Бельгия тураһындағы хәтирәләр “Журналист булып ҡалам...” китабында ла урын ала.

Беҙҙә, ғәҙәттә, теге йәки был яҙыусы тураһында һүҙ сыҡһа, ул үҙенең ижад юлын журналистиканан башланы, тиҙәр. Эйе, уныһы ла хаҡ. Ләкин шул уҡ ваҡытта әҙәби ижад юлын журналистиканан башлап, артабан да унан айырылмаған әҙиптәр хаҡында ла онотмаһаҡ ине. Сөнки журналист-яҙыусы үҙ әҫәрҙәрен бер ваҡытта ла тыныс һәм иркен фатирында яҙа алмай. Ул һәр саҡ юлда, һәр көн тәгәрмәс өҫтөндә, һәм уның ҡәләме аҫтынан сыҡҡан геройҙар ҙа – тере йән эйәләре, беҙҙең замандаштар йә тарихи шәхестәр. Бәлки, шуғалыр ҙа бер үк ваҡытта матбуғатта эшләп тә яҙыусылыҡ менән шөғөлләнгән әҙиптәр аҙ беҙҙә. Ризван Хажиев – шуларҙың береһе.

**Рәсих ХАННАНОВ.**

*Беҙҙең календарь*

# ЯРҺЫУ ҒҮМЕР, ЯРҺЫУ ИЖАД

*(Ғәзим Шафиҡовтың тыуыуына 70 йыл)*

Башҡорт дәүләт университетында уҡыған йылдарында уҡ Ғәзим Шафиҡов шағир булараҡ һәм боронғораҡ башҡорт авторҙарының (Аҡмулла һәм Шәйехзада Бабичҡа тиклем), шулай уҡ замандаштарыбыҙҙың әҫәрҙәрен тәржемә итеү буйынса ҙур танылыу яуланы. Шулай ҙа Хәйбулла районының Аҡъяр урта мәктәбен тамамлаған 16 йәшлек үҫмерҙең сәйер ҡылығы – Өфөләге административ органдарҙа эшләүсе туғанының кәңәшен тотоп, ябай кешегә эләгеү еңелдән булмаған Мәскәүҙәге Халыҡ-ара мөнәсәбәттәр институтына (МГИМО) юлланыуы – хаҡында ул саҡта белеүселәр аҙ булмағандыр. Ҡабул итеү имтихандарын уңышлы ғына тапшырһа ла, конкурстан үтмәй. Был унын өсөн ҡот осҡос трагедияға әүерелә. Мәскәүҙәр төндәр буйы билетҡа сиратта торған Ленин Мавзолейын, Пушкин исемендәге Художество музейында әле генә асылған Дрезден галереяһы күргәҙмәһен ҡарау ҙа үҙ һүҙле башҡорт егетен йыуатмай. Ата-әсәһе йәшәгән Хәйбулла районының Әбеш ауылына ҡайтырға кәрәк була уға. Атаһы Ғәзиз Хафиз улы Шафиҡов – Әбеш урта мәктәбе директоры, әсәһе Мөкәрәмә Хатип ҡыҙы мәктәп интернатында тәрбиәсе булып эшләй. Студент булыу бәхете теймәгән егет алдына "Ни эшләргә, нимә менән шөғөлләнергә?" тигән һорау килеп баҫа. Ғәзим (тағы ла кемдеңдер кәңәше буйынса) күрше Оло Арыҫланғол ауылында избач булып хеҙмәт итә башлай. Һуңыраҡ ул ошо хаҡта "Уҡыу өйө" поэмаһын яҙа. Унда һауынсылар, мал ҡараусылар, конюхтар араһында спектаклдәр ҡуйыу, хор ойоштороу, төнө буйы бейеүҙәрҙән торған ошо "хеҙмәт"кә арналған юлдар бар. Уның "Йәшлек менән хушлашыу" тигән повесы ла шулай уҡ ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра.

Нимәгә яҙам мин быларҙың барыһын да? Юҡ, милли әҙәбиәтебеҙҙең төрлө жанрҙарында: поэзия, проза, драматургия, публицистика, тәржемә өлкәһендә эштәре баһалап бөткөһөҙ күренекле башҡорт яҙыусыһының биографияһын уҡыусыға сираттағы тапҡыр еткереү өсөн түгел... Ғәзимде ҡыйыу рәүештә тарихсылар, әҙәбиәт һәм сәнғәт белгестәре, тәнҡитселәр иҫәбенә индерергә мөмкин. Төрлө өлкәләрҙә нисек итеп уңышлы эшләргә өйрәнгән – әйтеүе ҡыйын. Ғәзим үҙе был хаҡта шулай ти ине: "Йәшәнем. Уҡыным. Тирә-йүнгә күҙ һалдым. Кешеләрҙе, характерҙарҙы өйрәндем..."

Уға төрлө интервьюлар, бихисап һорауҙарға яуап бирергә тура килә. Журналистарҙың береһе: "Тормошоғоҙҙағы иң иҫтәлекле осорҙо билдәләгеҙ әле", – тигәс: "Халыҡ-ара мөнәсәбәттәр институтына инә алмағандан һуң Сик (Оло Арыҫланғол) ауылында избач булып эшләгән ваҡыттар", – тип яуаплауын айырып әйтке килә.

Быны юмор йәки парадокс кеүек ҡабул итергә мөмкин. Әммә Ғәзим Шафиҡов һүҙҙәренең ихласлығын ябай һәм ышаныслы итеп раҫланы:

– Әлегә тиклем миңә Әбеш йәки шул уҡ Сик кеүек төпкөлдә эшләргә тура килмәне. Айырыуса сағыу, хатта философик мәғәнә менән, тип әйтер инем. Был урындағы тәбиғәттең матурлығы хаҡында һөйләү генә аҙ, ошо ергә хас булған ғөрөф-ғәҙәттәр, үҙенсәлекле лексика, йолалар, әкиәттәр, йырҙар, мәҡәлдәр һәм әйтемдәр тураһында ла әйтергә кәрәк... Быларҙың барыһын да тағы ла ҡайҙа күреп, ишетеп, бар күңелем менән ҡабул итә алыр инем?! Халыҡ тормошон белмәй тороп, ышандырырлыҡ һәм күп төҫлө әҫәрҙәр ижад итеп буламы ни?

Былай һүҙҙәргә ҡаршы бер ни ҙә әйтеп булмай. Яҙыусы, ҡайҙа ғына йәшәмәһен, үҙен уратып алған мөхитте танып белә. Башҡаса булыуы ла мөмкин түгел. Әгәр ул тирә-йүндәге ысынбарлыҡҡа тәрәнерәк төшөнөргә, милли характерҙы аңларға теләй икән, халыҡ тормошоноң уртаһында ҡайнап йәшәргә тейеш.

– Тормошомдоң икенсе мөһим осоро, – тип дауам итә Ғәзим Шафиҡов, – ул башҡорт халыҡ ижады әҫәрҙәрен, иң элек – “Урал батыр”, “Аҡбуҙат”, “Иҙеүкәй менән Мораҙым”, “Байыҡ Айҙар сәсән”, “Мәргән менән Маянһылыу” кеүек боронғо ҡобайырҙарҙы, риүәйәт һәм легендаларҙы тәржемә итеү. Сөнки уларҙан үҙ халҡыңдың алыҫ үткәндәрен аныҡ белергә мөмкин. Халыҡ ижадын өйрәнмәй тороп, ырыуҙаштарыңдың күңелен аңлау мөмкин түгел.

Үрҙә әйтелгән әҫәрҙәрҙең барыһы ла тап Ғәзим Шафиҡов тарафынан урыҫ теленә тәржемә ителгән. Улар – тылсымлы һәм көнкүреш әкиәттәре, бәйеттәр, йырҙар, халыҡ тормошоноң төрлө дәүерҙәрен сағылдырған айырым ҡобайырҙар, урта быуаттарҙағы яҙма повесть “Күҫәк бей”. Провинциянан сыҡҡан әүәлге избачтың киң ҡоласы бына ошонан ғибәрәт!

Нимәһе ҡыҙыҡ: “Урал батыр” спектакле 1977 йылда Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры сәхнәһендә тәүге тапҡыр ҡуйыла. Уны Мәскәү режиссеры – Ҡурсаҡ театрының баш режиссеры Владимир Штейн сәхнәгә сығара һәм был постановка республикабыҙҙа ысын мәғәнәһендә мәҙәни ваҡиғаға әүерелә. Һуңыраҡ спектаклде Чехословакияның Пльзень һәм Братислава, Польшалағы Люблин, Югославиялағы Осиека ҡалаһы тамашасылары ҡарай. “Урал батыр” эпосы мотивы буйынса ҡалмыҡ режиссеры Борис Маджиев “Сәсән йыры” тигән спектакль ҡуя, ә Сибай театры режиссеры Дамир Ғәлимов Йәштәр театры өсөн ошо уҡ пьесаның тағы ла бер вариантын әҙерләй. Ниһайәт, Ғәзим Шафиҡов “Аҡбуҙат” эпосы мотивы буйынса сценарий яҙа. Уны күренекле режиссер, хәҙер инде мәрхүм Владимир Мильниченко сәхнәгә ҡуя, шулай уҡ Сибай театры күрһәтә. Төрлө театр режиссерҙарының башҡорт эпосына тартылыуы Ғәзим Шафиҡовтың халыҡ ижады әҫәрҙәрен белеүҙең яҙыусылар өсөн әһәмиәте хаҡындағы һүҙҙәренең хаҡ булыуын раҫлай. Ғәзим Шафиҡов яҙған драма әҫәрҙәренә килгәндә, улар тиҫтәләрсә. Хирургтарҙың изге хеҙмәтенә арналған “Операция” тигән тәүге пьесаһы ҙур уңыш яулай. Унан һуң “Иҫке фатир”, “Бында минең төйәгем”, һоҡланғыс башҡорт яҙыусыһы Һәҙиә Дәүләтшина хаҡында “Һәҙиә”, бөйөк башҡорт шағиры Шәйехзада Бабич тураһында “Ҡорбан килтереү”, “Ҡайтыу”, “Ҡара юрға” спектаклдәре баш режиссер Михаил Рабинович тарафынан Республика рус дәүләт драма театрында ҡуйыла һәм, театр ҡайҙа ғына гастролдә йөрөмәһен, ҙур уңыш яулай. Сценарийҙарын Ғ. Шафиҡов яҙған, кинорежиссер Ренат Нуруллин ҡуйған “Һәҙиә” һәм режиссер Малик Яҡшымбәтовтың “На камне кровь моя густая” фильмдары ла иғтибарҙан ситтә ҡалмай. Шуны билдәләргә кәрәк: “Һәҙиә” фильмы Бөтә Союз телевидениеһынан күрһәтелә. Тапшырыуҙы алып барыусылар менән бергә был трагик фильмды ижад итеүселәр – Ғ. Шафиҡов һәм Р. Нуруллин да сығыш яһай. Фильм, Башҡортостандың үҙенсәлекле визит карточкаһына әүерелеп,

үҙәк һәм урындағы телевидение аша тағы ла бер нисә тапҡыр күрһәтелә.

Шафиҡов өсөн ҙур әһәмиәткә эйә булған, әммә әлегә тормошҡа ашырылмаған тағы ла бер сәхнә әҫәре – Салауат Юлаевтың тыуыуына 250 йыл тулыуға арналған “Иҫке көндәлек саңы” тигән драмаһы бар. Драманың ошо рәүешле исемләнеүе сюжетының үҙенсәлекле булыуына бәйле. Әлегә тиклем Салауат хаҡында Емельян Пугачев, Екатерина II, Хлопуша һәм башҡа персонаждар ҡатнашмаған бер генә әҫәр ҙә булғаны юҡ. Ниһайәт, беҙҙең алда бөтөнләй икенсе күренеш – Салауат Юлаев менән уны йыл ярым эҙәрлекләүсе подполковник Иван Иванович Михельсон араһында дуэль. Драманы “Алыш” тип тә атарға булыр ине. Алышта йәки, икенсе төрлө әйткәндә, ике төп геройҙың дуэлендә, секундант ҡатнашырға тейеш. Ул “Көндәлек”тә лә бар: Александр Сергеевич Пушкин үҙе! Әлбиттә, тәү ҡарашҡа драматургтың былай алымы абсурд кеүек күренеүе ихтимал. Ә былай әленән-әле ҡулланылған художестволы алым ул. М. Булгаковтың “Мастер һәм Маргарита”һын ғына алайыҡ. Өҫтәүенә, тап Пушкин “Пугачев тарихы”ның авторы һәм “йыртҡыс Салауат”тың тәүге тарихсыһы булып тора. Тимәк, автор бөйөк рус шағиры шәхесен драма геройы итергә хоҡуҡлы. Әммә алға китмәйек – яҙылған драма әлегә үҙенең режиссерын көтә. Башҡорт дәүләт драма театрында ҡуйылған “Атилла” трагедияһы “Көндәлек”тең туранан-тура башланғысы булып тора.

Мин Шафиҡовтың сәхнә әҫәрҙәренә ҙур иғтибар бүлдем, сөнки автор тап уларға һуңғы ваҡытта айырым әһәмиәт биргәйне. Әммә күптән түгел генә уның “Атыу” романы донъя күрҙе. Китаптың йөкмәткеһен өҫтән-мөҫтән генә һөйләп сығыу ҙа күп ваҡытты алыр ине. Шуны ғына әйтергә теләйем: башҡорт әҙәбиәтендә былдай роман юҡ. Уны документаль әҫәр тип әйтеп булмай. Роман-эпопея, З. Вәлиди, Ш. Хоҙайбирҙин, М. Мортазин, Ғ. Шәмиғолов; Ленин, Сталин, Троцкий, Крестинский һәм башҡа күренекле тарихи персонаждар менән бер рәттән, китаптың асылын тәшкил иткән, уйлап сығарылған персонаждарға бай. Романдың авторы аҙ билдәле темаларҙы, башҡорттарҙың 1920-1921 йылдар тарихындағы йәшерен “аҡ таптар”ҙы асып һала. Ғ. Шафиҡов был романды ул осорҙағы хәл-ваҡиғаларҙы бөтә яҡлап тәрәнтен тикшергәндән һуң ижад итә. Уның “И совесть, и жертвы эпохи”, “Крючья под ребра”, “Дыхание жгучее истории” кеүек публицистик әҫәрҙәре “Атыу” романының нигеҙен тәшкил итә.

Ғәзим Шафиҡов – “Последняя вспышка лампы”, “Аҡмулла”, “Ҡасыу” повестарының авторы. 1970, 1980 йылдар башында ул “Рождение в седле”, “Поющий стебель”, “Водораздел”, “Рубеж”, “Формула Канта” тигән биш шиғри йыйынтыҡ сығарҙы. 1995 йылда Ш. Бабичтың ул тәржемә иткән “Яҙғы йыр” йыйынтығы донъя күрҙе. Иң үкенеслеһе: Ғәзим Шафиҡов үҙенең “Һайланма әҫәрҙәр”енең беренсе томын да күрә алмай китте.

Ғәзим Шафиҡов гәзит һәм журнал биттәрендәге, телевидение һәм радио аша бик күп сығыштары буйынса ла киң билдәле. Шуға күрә ул йыш ҡына үҙен журналист тип тә атай торғайны.

Бына шундай тынғыһыҙ кеше ине ул, яҙыусы, шағир һәм драматург, Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы һәм тағы ла республиканың биш премияһы, шул иҫәптән Аҡмулла исемендәге абруйлы премия лауреаты, Салауат Юлаев ордены кавалеры.

Замандашым, ҡорҙашым хаҡындағы яҙмамды ул иҫән саҡта уға арналған “Ул бер үҙе” тигән шиғыр менән тамамлағым килә. Сөнки ул һаман беҙҙең арала һымаҡ:

*Ул бер үҙе нисек тарта*
*Унлап кеше тартасаҡты?*
*Белеп бара иңдәрендә*
*Йөгө тағы артасаҡты.*

*Нисек әйтә, баҙнат итеп,*
*Берәү әйтә алмағанды;*
*Һәр саҡ алдан килеп сыға*
*Башҡа сара ҡалмағанда.*

*Әллә күпме ил улының*
*Әйтер һүҙе ир һүҙендә.*
*Әллә күпме шәхес һыны*
*Нишләп унын бер үҙендә?*

*Тәүәккәллек ҡыла ҡалһа,*
*Була шаҡтар ҡатырлығы.*
*Иҫкә төшә, һиҫкәндереп,*
*Салауттар батырлығы.*

*Тертләп тә ҡуя ҡай саҡ*
*Алдан күреү һирәклеге.*
*Хәтерләтә ҡараштары*
*Вәлидиҙәр зирәклеген.*

*Әйткән һүҙе атҡан уҡтай —*
*Шытыр орлоҡ сәскәнлеге.*
*Әйтерһең дә, дауам итә*
*Бабичтарҙың сәсәнлеген.*

*Өр-яңынан башлай, ярһып,*
*Башҡаларҙың ташлағанын.*
*Утҡа керһен, һыуға керһен —*
*Ташламай ул башлағанын.*

*Әллә күпме ил улының*
*Әйтер һүҙе ир һүҙендә.*
*Әллә нисә шәхес һыны*
*Нишләп унын бер үҙендә?*

*Күҙ алдымда балҡып китте*
*Тик бер яуап — гүйә, ялҡын:*
*Бөтәбеҙҙән ул нығыраҡ*
*Һөйә бөгөн ерен, халҡын.*

**Ирек КИНЙӘБУЛАТОВ.**

*Әҙәби мираҫ*

**Ғәли**
**ИБРАҺИМОВ**

# КИНЙӘ

## ТАРИХИ РОМАН

**III китап**

## БҮГӘСӘҮ БАТША ҺАНАТЫ

9

Кинйә үҙе ебәргән азаматтарын онотмай. Уларҙан хәбәрҙәр килә. Ҡай саҡ туптар, дары ебәрәләр, ҡай саҡ үҙҙәре һорай. Ярҙам итергә кәрәк.

Пугачев Яйыҡ ҡалаһына киткәс, бөтә хәбәр-фармандарын Максим Шоғаевҡа еткереп торҙо. Ул бөтә армияға баш булып ҡала.

Давыдов килде. Быҙаулыҡҡа еткән икән карателдәр. Һөйләне. Бергәләп тыңланылар. Эштәре шәптән түгел. Бибиков ҡыҫа. Һамарҙы алған Арапов та ҡаланы ҡалдырып китергә мәжбүр булған, уны ғына түгел — Алексеевканан да бәреп сығарылған.

Артынан Муфель[1] ҡыҫа.

Ҡалмыҡ атаманы Дербетов Ставрополь ҡалаһын бик ауырлыҡ менән генә ҡурғап тота ине, ул да ҡайтты.

Белобородовтан ҙур ғына ҡаҙна килде. Заводчик Сергеевтың бер-бер артлы ике заводын алған. Билимбай заводына ингән, Шайтан заводтарының икәүһе лә Петр Федорович батшаға баш орған. Уткин заводына бәреп кергән. Ә хәҙер Екатеринбург янында хөкүмәт ғәскәрҙәрен ҡыйрата.

Ҡәнзәфәр килде. Кузнецов һөжүм ойоштора алмаған. Көнгөр алынмаған.

Салауат ҡаты яралы. Быны бик әсенеп һөйләне Ҡәнзәфәр.

— Салауаттан сапҡын бар. Яңынан көс йыйып, Красноуфимға табан ҡуҙғалған.

— Мин дә китәм,— Ҡәнзәфәрҙең тауышы тәүәккәл сыҡты.

Бергә һөйләшкәс, уны Белобородовҡа ярҙамға ебәрергә булдылар.

---

[1] *Муфель Карл Иванович — подполковник, 24-се еңел хәрби команданың командиры.*

---

*Башы 3–7-се һандарҙа.*

Бына ни саҡлы яңы хәбәр. Сапҡындар килә тора, батша исеменән әмер алып, китә тора. Ә Ҡаранайҙан, Торновтан хәбәр юҡ та юҡ.

Пугачевсылар, ике-өс көн үттеме, үҙҙәре килеп еттеләр. Шәп килгәндәр. Аттарын ныҡ ҡыуғандар, ҡорһаҡтарынан аҡ күбектәр ағып тора.

Минзәлә янында ла, Нуғайбәк янында ла ҙур һуғыштар булған. Бибиков армияһы Ыҡ йылғаһын үткән, һуғыш Нуғайбәк, Баҡалы тирәләрендә бара. Баш күтәреүселәрҙең көстәре бик ныҡ ҡырылған. Отрядтарын ышанычлы ярандарына ҡалдырып, кәңәшкә килгәндәр. Улар өсөн генә түгел, бөтә яу барышында ауыр көндәр. Күп тә үтмәҫ, каратель ғәскәрҙәре Өфөгә лә, Ырымбурға ла килеп етерҙәр. План нисек...

Максим менән Кинйә Хәрби коллегия йыйҙы. Мәсьәлә бер төрлө. Ошо ике урында ныҡлап әҙерләнеп ҡаршыларға.

Торнов менән Моратовҡа бер аҙ туп биреп, кире ебәрҙеләр, ярҙам ебәрһен тип, Зарубинға сапҡындар указ алып китте. Ул яҡында. Тиҙ барып етерҙәр.

Төрлө яҡтан...

Ә батша юҡ... Ләкин Максим Шоғаев бик бирешмәй. Үҙенә ышана.

— Беҙ һуң?.. Булдырмайбыҙмы ни...

Шулай ҙа бит... Уны тыңлай һалмайҙар. Үҙе юҡтың — күҙе юҡ шул.

Пугачевтың үҙен саҡыртырға тура килде. Уның, ай-һай, үҙенән алда унда туй үткәреп йөрөүе шәп түгел.

Һәр кем үҙенсә аңланы, һәр кем үҙенсә һөйләне.

— Был ни хәл, ошондай ваҡытта?..

— Ғәмен юғалтып, бер ҡыҙға алданып, беҙҙе оноттомо?

— Батша булғас, батшабикә лә булырға тейеш.

— Батшаға казактан алыу килешмәй ҙә ул.

— Ябай казак ниндәй батшабикә булһын?

— Һәй, ярамаймы? Ана тегеһе. Минең ҡатын яратмаған бит. Ни көнгә төшөргән.

— Батшаға — ирек. Башҡорт ҡыҙын алһа ла килешә.

Кинйәгә лә оҡшаманы Бүгәстең өйләнеүе. Хәйерлегә түгел. Яҙғанын күрәм, тип йөрөйҙәр. Тирә-яғы ныҡ түгел. Батшалар янында — дворяндар. Ә бында ундай көс юҡ. Шуны булдырырға ине тәүҙә.

Кинйә Максим менән һөйләшә.

— Шулай дөрөҫмө? — Өҙөп кенә бүтәнгә әйтмәй. — Ышанып буламы?..

— Дөрөҫ.

— Ниңә государға... ябай ҡыҙ? — Казачка тимәне, йә асыуланыр, йә үпкәләр.

Максим ҡарап ҡуйҙы. Государмы? Ул асығын белә. Ул да, йәнә бер нисә казак. Дон казагы икәнен үҙе белә. Ләкин Кинйәгә Максим ул хаҡта әйтмәй. Әйтмәһә лә белә. Ул да, башҡалар ҙа. Әйҙә, шулай Петр Өсөнсө булып йөрөһөн... Әле улар бер-береһенә сер асмайҙар. Шик таратырға ярамай.

— Беҙҙең казактар шулай талап итә. Ташлап китер,тип ҡурҡалар. Бына шулай берҙәмлек нығыныр.

Батша ҡайтып төштө. Устиньяһы тегендә ҡалған. Шулай ҙа Пугачев байрам иттерҙе, мискә-мискә араҡы, аҡса өләште. Тынысланыр, тигәйне. Юҡ. Өйләнгән, тиҙәр. Тантана... Атамандар шаша, ҡылана... Яйыҡ ҡалаһы һаман алынмаған.

Ҡаҙыған юл барып сыҡмаған. Шул киткән көндө бер малай хәбәр иткән. Дарыны күсергәндәр. Шартлау булған-булыуын. Сиркәү емерелгән. Ҡала — ныҡ... Ишеткәс, дәрт ҡайта, өмөт һүрелә. Баштар түбән эйелә. Өндәшмәйҙәр.

Пугачевтың үҙенең абруйы шартлаған кеүек тойолдо Кинйәгә. Нисек кенә йәшермә, халыҡ белә ләһә.

— Өйләнһен, казак ҡатынлы булырға тейеш. Был – Васька Гугня атамандан ҡалған йола.

Былар ҙа Гугняға, үҙҙәренең зат анаһы Фатимаға һылтаналар. Халыҡ үҙ күңелен шулай тынысландырҙы.

Ә Хәрби коллегия был хәлде үҙенсә баһаланы. Устинья исемен Ғәлиә йәнәптәре кимәленә күтәрҙеләр. Шул көндән башлап сиркәүҙә ғибәҙәт ҡылғанда поп ошо юғары титул менән атап, император Петр Федорович тигәндә, государыня Устинья тип тә һаулыҡ теләне.

Пугачев килеп етеүе хаҡында шул государыня Ғәлиә йәнәптәренә көн һайын курьер ебәрҙе.

Беренсе хатты үҙен оҙата килгән яңы старшина Иван Фофанов алып ҡайтып юлыҡтырҙы.

***

Хәл бик тиҙ үҙ яйына ҡайтты. Пугачев хәл менән танышып алды.

Давыдов ярҙам һорағас:

— Үҙем барам, — тине Пугачев.

Пугачев алдан разведчиктар ебәрҙе. Генерал Голицын бер корпус менән килә, тинеләр. Уның гусарҙарын күргәндәр.

— Бәй, ул кенәздең Карҙан ҡайһы ере артыҡ?! Килә бирһен әйҙә...

Күрмәгәнен күрер, тип әйтергә ине. Әйтмәне. Күҙ күрер. Ә разведчиктар уның губернаторға ебәргән курьерын тоттолар. Ябай кеше булып кейенгән, үтеп китергә теләгән. Рейнсдорпҡа яҙылған бер хаты француз telендә ине. Уны шул генерал Кар ғәскәренән әсир ителгән офицер Шванович тәржемә итте. Немецса яҙылған хатҡа ла уның теше үтте.

Голицындың көсө, пландары билдәле хәҙер атамандарға.

10

Салауат үҙ ауылында, үҙ өйөндә. Бөтә ауыл хәрби күрән кеүек. Әйләндереп, ҡар өйөмө ҡалҡытылған. Ҡапҡалары бар. Юлдарҙа — ҡарауыл, шәйләктәр.

Батыр өйө янында бағауылдар[1] тора.

Яраһы һыҙлай ине. Әллә ниндәй ғазаптар. Әсәһе дауалай. Инде яра бөтәште. Йөрөп була. Хәҙер ғазап урынына буталсыҡ уйҙар килә башына.

Атаһы:

— Ә бына хат, батша һанаты Кинйәнән.

— Һанаттан булғас, һәр һүҙе указ беҙгә.

— Был яҡты бергә төйнә, тигән.

Эйе, бында Исәт яғын, тау араларын нығытырға. Дошман үтерлек булмаһын.

Атаһы менән икәү-ара серләштеләр.

— Үҙем дә, бер ил ҡороп алырға кәрәк, тип уйлай инем.

— Нисек? Батша бар ҙа баһа... Кәрәген ул әйтер.

— Юҡ, мин сиреү илен әйтәм. Ныҡлап һаҡлар өсөн, юғиһә һәр кем үҙенсә ҡылана. Айырым-айырым. Бер бармаҡ көс түгел, ә йоҙроҡ тос була!

— Уныһы кәрәк, раҫ.

— Һин, атай, һатҡыға бар. Ундағы уҙамандарға ошо хаҡта әйт. Батша дарманы, тиң.

— Силәбе яғында Бәҙерғол, Юламан бар, урыҫтар.

— Ана шуларға әйт... Палкауник Грязнов ҡайҙа икән? Улар Силәбене алһындар, ә бында Белобородовҡа указ бирәм. Батырҡайға ла. Көнгөрҙө алырбыҙ,

[1] *Бағауыл – һаҡсы (автор һүҙлегенән).*

шунан — Катеринбурҙы. Төрлө яҡлап ҡамарбыҙ.

Шулай килештеләр.

— Һин йөрөп ҡайт, атай... Уңарсы мин йортта булырмын.

***

Атаһы Усть-Ҡатауға китте. Улар ҡушылған Златоусҡа. Унын управляющийын Салауат аҫтырғайны. Шунан бирле тыныс. Көҙҙән үк. Крепосҡа тирәләп ур ҡаҙытып, ур өйгәндәр. Ҡапҡала һаҡ. Пикеттар. Юлайҙы индерәләр. Был уларҙың штаб, урҙуға кеүек.

Һатҡынан үҙҙәре вәкил ебәрҙе.

— Башҡа заводта һаҡлыҡ грамота бар. Шуның өсөн уларға йоғонмайҙар. Ә беҙгә тегеһе лә, быныһы ла һуғыла. Тыныслыҡ юҡ. Грамота бирегеҙ. Тәртибе шул. Элек-электән. Батшаға баш һалғанбыҙмы һуң?

— Бәй, буйһонабыҙ.

— Тәүҙә ант итерһегеҙ.

Юлай бара. Ант иттереп, батша исеменән һаҡлыҡ грамотаһы бирә. Элек тә, әле лә шулай. Воеводаға ҡағыҙҙы яҙһаң да, батша исеменән яҙаһың. Ул да батша исеменән яҙа. Шул йоланы әле лә һаҡлайҙар.

Юлайға рәхмәт әйтәләр. Ул Һатҡыны ҡарай.

Грязновҡа ла, Бәҙерғолға ла Юлай кешеләр ебәрҙе.

...Грязновтың штабы яҡын ине.

***

Иван Грязнов менән Григорий Туманов бер ай самаһы уҡ был яҡта йөрөй ине. Стәрлетамаҡ, Табында булып, Богоявлен, Архангель заводтарын алдылар ҙа был яҡтарға табан йүнәлгәйнеләр. Григорий бик уңай, бик кәрәк кеше. Башҡортса, татарса сатнатып һөйләшә, уҡый-яҙа ала. Кинйә өйрәткән һабаҡ уға һәр ваҡыт ярҙам итте. Ә хәҙер бигерәк тә.

Отряд ҙур ғына. Грязнов менән Туманов һөйләшеп бара. Еҙем буйында. Көҙ. Әсе ел. Григорий ат өҫтөндә өшөй.

Һа-ай, матур урындар! Күккә ашҡан тауҙар. Тар ғына ҡыҫындар. Грязнов бында күпме йөрөгән. Туманов ер-һыу исемдәренә иғтибар итә. Бына Борхатау... Ҡышҡы һалҡында ла боҫланып тора.

Күкташ, Сыуалташ. Уҡлы ҡая. Бер заман һуғыш булғандыр был тирәлә. Шәреташ. Боҙланған. Яҙ етер, ҡояш ҡарау менән иреп ятыр.

Һөйләшеп туя алмаҫтар кеүек.

— Ҡайҙа саҡлы?

— Ә... Косотурҙа туҡтарбыҙ.

Усть-Ҡатауҙы алдылар. Ул саҡта Салауат ҡайтып етмәгәйне әле.

— Әйҙә, хәҙер Ҡыштымға.

— Ә Силәбегә?

Туманов:

— Көс етмәҫ.

— Һүҙ менән алып була. Мин әйтеп торам, һин яҙырһың. Беҙҙең шулай һәйбәт булыр.

Косотур заводына указ яҙҙылар, 200 кеше ҡушылды, 4 туп алдылар.

Һатҡыла булып, ары үттеләр.

Бынан Косотурға яҡын. Матур урындар. Туманов бында беренсе тапҡыр. Ә илгиҙәр Грязновтың күп йөрөгәне бар. Тауҙары бейек. Һыуҙары сылтырап ҡына аға. Кешеләре ихлас, егәрле.

Тағанай һырты менән баралар. Бейек-бейек түбәләр. Оло Тағанай, Урта Тағанай, Кесе Тағанай. Өс түбәле тау һырты.

Косотурҙа урынлаштылар. Халыҡ күтәрелгән. Әммә артабанғы ерҙәр бөтәһе

хөкүмәт ғәскәрҙәре ҡулында. Кәҫле, Ҡыштым заводтарында майор Чубаров командаһы хакимлыҡ ҡыла.

Урынлашып алғас, бер аҙна үттеме — Ҡыштымдағы казактарҙан йөрөшкәләр пәйҙә булды.

— Бына беҙҙең яуыз! — Начальникты тотоп алып килгәндәр, имеш. Ләкин көстәре юҡ, ярҙам һорайҙар. Делегация батша исеменән Туманов яҙған манифест алып, кире китте.

— Уҡығыҙ! Көс йыйылыр.

Улар артынса Ҡыштым, Кәҫле заводтарына эшкә килтерелгән крәҫтиәндәр вәкиле лә килде. Улар ҙа ярҙам һорайҙар.

— Манифест уҡый тороғоҙ!

Грязнов менән Туманов отряды Ҡыштымға йүнәлде. Ундағы эшселәр, казактар, хәрби команда, баш күтәреп, үҙҙәренең командирҙарын тотоп бәйләп, ихтилалға ҡушылдылар. Майор Чубаровҡа быҒау һалынған. Үҙ-ара тартыш ваҡытында приказчик, надзирателдәр араһынан үлтерелгән әҙәмдәр бар.

2 ғинуарҙа Кәҫле заводында ла эшсән халыҡ еңде. Иркенләп тын алырлыҡ ине. Урал алды ҡалтырай. Хәҙер алда көтәләр. Ә был ваҡытта Салауат хәрәкәт итә башлағайны, үҙе булған да Көнгәр яғына киткән. Ә атаһы Эҫем, Ҡатау заводтарында, Һатҡыла хәрәкәт итә, байтаҡ ҡына старшиналар ҡуҙғалған. Ә Кәҫле заводы янында Бәкәтин старшинаһы Бәҙерғол Юнаев ҡуҙғалды.

Быны ишеткәс, Грязнов тамам йәнләнде.

— Оһо, Гриша, депутат та беҙҙең яҡлы! Катерина депутаты.

— Государыня унын һүҙенә ҡолаҡ һалмаған, значит. Хәҙер үҙенә һөңгө күрһәтә.

— Шулай, тап шулай...

Бәҙерғол үҙе килеп, завод кешеләре менән берлектә алғайны Кәҫле заводын. Унан – Үрге Ҡыштым заводын, Түбәнгеһен. Унын ике йөҙләп кешеһе бар ине. Эргәлә Ҡундрау татарҙары ла ҡуҙғалды, Ҡара-Табын олоҫо старшинаһы Юламан Ҡушаев тирә-яғын үҙ ҡулына алды.

Төрлө яҡлап тотонғас, аҙна-ун көн эсендә был яҡтарҙа Үрге Убыл, Ҡуй йылға, Уҡлы-Ҡарағайлы, Эткол ҡәлғәләре яулап алынды, ундағы кешеләр баш күтәреүселәргә ҡушылды. Яу хәрәкәте, көслө тулҡындар булып, Себергә табан һирпелде.

— Хәҙер Силәбене алырға ваҡыт! — тип дәртләнде Грязнов. Ләкин Силәбе бик ныҡ нығытылған. Ә воевода артында Себер линияһы ғәскәрҙәре командующийы генерал Деколонг, унда — Себер губернаторы Чичерин.[1]

Грязнов шуларға ҡаршы көрәшкә баҫты. Күкрәк киреп, ең һыҙғанып бара.

Туманов башҡорт старшиналарына хат яҙҙы. Улар ҙа ныҡлап тотондо.

Бәҙерғол Силәбе янында байтаҡ ҡына башҡорт яугирҙарын туплап алды: 2000 кеше унын командаһында.

Грязнов Силәбегә уҡтала.

5 ғинуарҙа Сыбаркүл ҡәлғәһен ала. 5 туп — улъя. Хәҙер 12 тубы бар.

Бында уға 200 кеше менән башҡорт старшинаһы Исай Тоҡтағолов[2] ҡушыла, Кермәнғол ауылында — тағы 500 кеше, Саманғол ауылында — бер сотня, Амангилде ауылында — 300 яугир, Барын-Табын олоҫо старшинаһы Әбделкәрим Курманаевтын[3] алайы ла ҙур ғына ине.

Силәбе кешеләре лә көтөп кенә ятмайҙар.

...Силәбе ҡалаһы 1736 йылда Таймаҫ тархан ерҙәре – Миәс йылғаһы буйындағы Ҡарағай тигән атамалы йәйләүгә төҙөлгәйне. Ул йәйләүҙе Сил ябы тип тә төҙөттөләр. Крепость Сил ябы тип аталды. (Ике йылдан ул бөтә Исәт

[1] *Чичерин Денис Иванович — генерал-поручик, Себер губернаторы.*

[2] *Тоҡтағолов Исай — Исәт провинцияһы Ҡара-Табын олоҫо баш старшинаһы, ахун, б. к. отряд командиры.*

[3] *Әбделкәрим Курманаев — Исәт провинцияһы Барын-Табын олоҫо старшинаһы, б. к.*

провинцияһының үҙәге ителәсәк.) Ҡала ҡойма менән уратып алынған. Ҡала... Шулай тигәс, ҡәлғә тип тороу кәрәкмәй. 500 двор. Ғәскәр әллә ни күп түгел. Берәй рота һалдат та казактар, яңы көстәр аҙ.

Крәҫтиәндәр ишеткән, казактар белә, башҡорттар ҡатнаша.

Грязнов килгәнсе бәйләнеш бар.

Ғинуарҙа Пугачев манифесы килтерелә.

5/I — ихтилал. Хорунжий Невзоров,[1] казактар атаманы Уржумцев[2] майҙандағы туптарҙы алалар. Веревкинды, офицерҙарҙы — ҡулға алалар. Еңәләр һәм... еңеләләр. Үҙҙәре майҙанда һуғышып, яҡлап алған туптарҙы һаҡһыҙ ҡалдырып, ҡулдан ысҡындыралар. Хөкүмәт яҡлылар, шуларҙан атып, воеводаны – Веревкинды, чиновниктарҙы ҡотҡаралар. Боласыларға ҡаланан сығып, бер урынға тупланырға ғына ҡала. Ҡамап алалар.

Воевода – Деколонгтан, яуға күтәрелеүселәр — Пугачев полковнигы Грязновтан – ярҙам. Уның 4000 кешеһе Сыбаркүлдә.

Силәбе – байтаҡтан бирле Исәт провинцияһының үҙәге. Элегерәк уға өс өйәҙ, бындағыса әйткәндә, Исәт, Щадрин, Окунев дистриктары[3] ҡарай ине. Тағы Ҡуртамыш, Увельский өйәҙҙәрен ойошторҙолар.

Бөтәһенең эше ошонда, Силәбелә, атҡарыла. Өфөнән кәм түгел, тип уйланы Грязнов.

Быны ул да, генерал Деколонг та уйлай ине, әлбиттә.

Деколонг Силәбене алырға итә. Тик ул төрлө яҡлап ҡамауҙа. Бигерәк тә уны бер яҡтан Грязнов, икенсе яҡлап Юнаев ҡыҫып тота.

Ә Троицк ҡәлғәһе — ҡамауҙа.

Миәс крепосы яугирҙар ҡулында. Далмат монастыры ҡамауҙа. Грязнов воззваниелар, өгөтнамәләр ебәрә.

8/I — Силәбегә атака.

10/I — Крепосты тупҡа тоталар. Унан — штурм.

Туманов: "Офицерҙар оҫта шул", — тип уйлай ғына.

11/I. Деколонг килә. Дозор хәбәр иткәс, Грязнов артҡараҡ китә. Йәшерен урында башҡорт отрядтары ҡала.

Грязнов:

— Мурҙаға инһен, әйҙә.

Туманов:

— Шунда тоторбоҙ тиһеңме? Ул христиандар ҡанына батасаҡ тәүҙә.

Өндәшмәй, тештәрен ҡыҫа.

— Үҙе килер.

— Һин күрәҙәсе түгел.

13/I. Деколонг Силәбегә кереп бикләнә. Уны шунда ҡамайҙар. Туманов һүҙе дөрөҫ булды. Язалау, үлтереү. Атаман Максим Уржумцевты язалап үлтерә.

Хәбәрҙәр өҫтәлә тора.

Хорунжий Невзоров та язалауға түҙә алмай. Уға ҡамсы менән һуғалар, ҡалала ат ҡойроғона тағып, һөйрәкләп йөрөтәләр. Уны үле килеш аҫып ҡуйғандар, һуңынан ҡала ситенә сығарып ырғыталар.

Грязнов яуабы: штурм!

Тегенән — вылазка. Шунда офицерҙарҙы тотоп алалар.

— Быныһы — Уржумцев өсөн!

— Быныһы — Невзоров өсөн!

Шул ваҡытта Һатҡынан хат килде. Юлай ебәргән.

"Бергәләп ҡыҫайыҡ". Салауат кәңәше был. Батша ҡушҡан. Ҡайҙа ярҙам кәрәк, шунда барайыҡ.

---

[1] *Невзоров Наум — Силәбе казактарының хорунжийы, б. к.*

[2] *Уржумцев Максим — Силәбе казактарының атаманы, б. к.*

[3] *Дистрикт (лат.) — округ.*

— Дөрөҫ, — тине Грязнов. — Бик риза. Шунһыҙ Деколонгҡа, Гагринға ҡаршы тороп булмаҫ. Бер фронтҡа ойошоу фарыз.

Быndай хәбәр Ҡушаевҡа, Юнаевҡа ла китте.

— Дөрөҫ, — тине. — Белобородовҡа ла ебәрергә кәрәк ине.

— Унда Салауат үҙе китте.

Үҙе... Тимәк, әмер итә... Мәслихәт, Салауат!

11

19/II. Гагрин Красноуфимды алған.

— Етер! — ти Салауат. — Көнгөрҙө алырға кәрәк.

Екатеринбург, Силәбе яғы ныҡ тора. Бына бында, үҙе булмағас, хәлдәр хөрт.

Салауат көс йыя: 4 мең яугир, 6 атлы полк.

***

Красноуфимда Салауат яралангас, Сура Рәсүлев уның урынына ҡала.

Бойҙан баш тарта. Ҡапҡалар ябыла.

Салауат Көнгөргә барырға итә. Унда ла көстәр бар.

Барда олоҫона ышаныс юҡ. Уның старшинаһы Туҡтамыш Ишбулатов... Ул яуҙа булды. Депутат булғаны өсөн генә... Мәгәр ышаныс юҡ.

Йыйып булһа, Батырҡай, Әбди... Заводтарҙы тағы ҡуҙғатырға... Унда Иван Белобородов бар. Бына шунын менән берегергә ине.

Белобородов Бердаға 4 татар ебәрҙе. Еңеү рапорттары бар ине. Ебәргән улъялар бар. Ебәргән 4 татар ҡайталар.

— Ул — ысын батша, — тип һөйләнеләр, ҡайтҡас.

Белобородовҡа ярлыҡ алып ҡайталар: атаман итеп тәғәйен ителгән.

Был халыҡты күтәрҙе, үҙенең дәртен үҫтерҙе. Күп кенә заводтарҙы алды. Екатеринбургтан ҡырҡ саҡрымда хөкүмәт ғәскәрҙәрен ҡыйратты.

Салауат сапҡын ебәргәндә, был ваҡытта, февраль уртаһында, Белобородовтың базаһы ныҡ ине. Базаһы Шайтан заводтарында ине. Күп тә үтмәне, ундағы карателдәргә, секунд-майор Фишерға Көнгөрҙән секунд-майор Гагрин килде. Был базаны ла, Уткин заводын да баҫып алды. Екатеринбургтың төньяғына ла ғәскәрҙәр килде. Белобородов яугирҙарын төрлө яҡлап ҡыҫтылар.

Беренсе мартта Каменский заводы ҡыйралды. Белобородов Уткин, Кәҫле заводына күсте. Гагрин үксәгә баҫып ҡыуа. Ай уртаһында бик аҙ кешеһе менән генә Һатҡы заводына килеп һыйынды.

Ҡыш. Юл насар. Бәйләнеш өҙөлгән. Салауат был хаҡта белмәй ине.

Ә майор Гагрин 12 мартта Белобородовты Кәҫлелә ҡыйратҡас та, унда бик аҙ ғына кеше ҡалдырып, Красноуфимға — Салауатҡа табан ташланды.

17 мартта Салауат ғәскәрҙәре Буғалыш ауылы янында еңелә.

Салауат сигенә.

Урта Уралда яу еңелде, хәрәкәттәр баҫылды. Ләкин халыҡтың еңеү ҡомары һүнмәгәйне әле.

12

Бибиков килде.

Бында ярҙамсылар бар. Ләкин үҙенең ҡәрҙәше Ларионов менән ағаһының улы полковник Юрий Бибиковҡа ышана һалманы.

— Йүнһеҙҙәр, — ти, — Зәй ҡалаһын алғандар. Кама буйынан китә алмайҙар.

Нуғайбәк, Баҡалыны алғандар ҙа кире ҡалдырғандар... Ә злодей... шайкалары Ырымбурҙа, Өфөлә...

Бында ике корпус. Ике командир кәрәк.

Ул кенәз Голицын менән подполковник Михельсонды һораны. Икеһе лә йәш, булдыҡлы. Польша Ете йыллыҡ һуғыш походынан бирле белә, батырлыҡ, ҡыйыу.

Государыня Екатерина ҡаршы килмәне.

Тәүҙә ул быndaй тәғәйенләүгә ышанманы. Түбәнһетерҙәрме шулай? Уның шундай ғәҙәте. Кәмһенде, дикарҙар, ворҙар араһына барһынсы...

Бында ниндәй һуғыш булһын!

Уның ғәҙәте. Уны гел алдатҡандар. Ҡыҙҙар, вәғәҙә биреп, ташлағандар, чины ла подполковник ҡына ине.

Михельсонды А. И. Бибиков үҙе һораны. Уны белә. Ете йыллыҡ һуғышта уның батырлығын күрҙе.

Иван Иванович Михельсон — йәш. Егерме йәшлек сағында поручик ине. Кунерсдорф янындағы һуғышта яраланып, Одер буйында ятты. Унда ла Бибиковтың полковник ҡына сағы ине.

Үткер күҙле, түңәрәк йөҙлө егет оҡшаны. Михельсон яраланды. Башына штык эләкте, үҙе ҡылыс менән ҡотолдо. Бибиков уны Кенигсбергка оҙатты.

1770 йыл Төрөк фронтында Бендеры крепосын алғанда батыр һуғышыуын да белә. Кисеү-Саттағы башҡорттар Михельсонға бирелә.

Үҙ эскадроны менән төрөктәр лагерына бәреп инде. 8 туп алды. Ҡулы яраланды. Бында уҡ рескрипт[1] килде. Ул премьер-майор. Бөтә корпус уға буйһона.

Корпусты 19 мартта ҡабул итте булдыҡһыҙ Ларионовтан, үҙенең 6 ротаһынан тыш. Былар — Ҡазан дворяндар корпусы. Томск уҡсылар полкынан 4 рота, Архангел эскадрон карабинерҙары, 4 рота гусарҙар, Измайлов полкынан 4 рота. Секунд-майор Харин Карп башлығында Чугуй казактарынан — ике рота, шунан бер рота егерҙәр. Шулар өҫтөнә Санкт-Петербург, Изюм полктары, Ҡазан уландары. Карабинер полкын алып килә секунд-майор Отто Дуве, Изюм гусарҙар полкын — капитан Григорий Кардашевский. Ә иң мөһиме — Ҡазандың йомошло татары Мөслимов. Мәндей Төпәйев — башҡорт еренән. Бына былары алтын, тине ул.

Михельсон корпусы Стәрлетамаҡҡа килде. Туптарҙан ата. Башҡорттар Баҡалыға китте.

Бөгөлмә янында Аҡбаш ауылында уҡ ғазраил салғыһын һелтәп алды.

18/III. Михельсон Баҡалыны алды.

***

Февраль. Өфө.

Зарубинға Торнов менән Ҡаранай кешеләре Берданан ҡайтышлай хәбәр ебәргәндәр.

Эштәре шәптән түгел. Яңы баш командалаусы Бибиков килгәс, ныҡлап тотонған.

Зарубин аңланы. Иң кәрәк, иң мөһим эш әле Өфө түгел, Өфөгә ҡарай килгәнен алдан барып киҫәтеү, Кар һымаҡ итеп, ҡыйратып ҡайтарыу.

Ул байтаҡ ҡына көс алды ла үҙе китте.

Барһа, Нуғайбәкте хөкүмәт ғәскәрҙәре алған. Стәрлетамаҡ ауылына ингәндәр. Торнов менән Моратов Бердаға киткәс, ҙур һуғыштар булған. Улар тырышалар.

8/III Баҡалы алынған. Нуғайбәктә — һалдаттар. Ҡаранайҙар яңынан алырға ынтыла. Ауыр һуғыш. Март башында генерал-майор Ларионов корпусы килеп етә. Уны туҡтаталар.

Бергәләп алдылар.

10/III Нуғайбәкте тағы алалар. Артабан Баҡалыға, Стәрлетамаҡ ауылына. Юлды нығытыу. Ҡар өйөү, бүгәүҙәр һалыу. Ларионов ул яҡҡа барманы. Ларионов, отставкаға китәм, тип һорай Бибиковтан.

Был ваҡыт Польшанан Санкт-Петербург карабинерҙар полкы килде. Уның командиры — подполковник Михельсон.

Зарубин бер аҙ көс ҡалдырып китте.

Ҡара яу килә. Сигенәләр. Сара күрергә кәрәк. Зарубин ашыға, төрлө әмәлдәрен эҙләй.

---

[1] *Рескрипт — яңы чин биреү хаҡында яҙыу.*

Ҡара Яҡуп ауылында айырым саңғысылар отряды ойоштоpoлдо.

Уларға ярҙамға — ике мең кеше. 4 туп менән Ҡасҡынды ебәрә.

Жуково ауылына бер отряд ебәрҙе.

Март, 1774 йыл. Ҡ. Усаев.

Ҡәнзәфәр Усаев тағы Зарубин яғына килеп сыҡты.

— Ҡайҙа?

— Китеп барам. Батша ебәрҙе Белобородов, Салауат яғына.

Ҡулында батша указы бар.

Ҡәнзәфәрҙе теге ваҡытта Кузнецов ябып ҡуйһа ла, юғалманы, Чесноковкаға туҡталманы, кем белә, тағы бер аңлашылмаусылыҡ булыр. Ул Бердаға килгәс, һөйләп бирҙе: үҙенә ҡушылған әмерҙең үтәлеүен дә, Кузнецов менән борсағы бешмәй ҡалыуын да. Эшләгәне күп... Ғәскәр туплаған, яу сапҡан, заводтар, крепостар алған. Белобородов менән Васев яу юлына төшөргән...

Был хаҡта белә ине батша. Икеһенән дә рапорт килде, ҡаҙна килде. Икеһенә лә Пугачев рәхмәт белдереп, полковник чины биреүен яҙып тотторҙо курьерҙарға.

Шәп уның полковнигы Усаев. Молодец! Ундайҙы йәберләй буламы һуң Пугачев.

Уға икенсе эш ҡуштылар.

— Таныш яғың. Белобородов, Салауатҡа ярҙам ит.

Был хаҡта һөйләп биргәс, Зарубин:

— Ул яҡҡа үтергә кәрәкмәй. Декабрҙә Өфөгә бергә ябырылдыҡ. Әле бергәләп Михельсонды ҡаршылайыҡ. Йый үҙеңдең мишәрҙәреңде.

...Шунда ҡалды.

Һуғышта ҡатнаша, еңелгәс, бер ауылға барып һыйына.

Ауылға ҡайтырлыҡ түгел. Унда — Михельсон күҙҙәре.

Һеләүһенде обоз менән, әсирҙәр менән Ырымбурға ебәрә.

***

Корпусын Михельсон корволант тип атай. Летучий корпус. Ләкин бик еңел түгел. Юл ауыр, тәрән ҡар. Тар ғына юл. Ылауҙар, һуғыш ҡорал-яраҡтары, дары күп.

— Корволант, — һүҙен йыш ҡабатлай.

23/III — Ҡара Яҡупҡа. Туҡтап алдылар.

Бында башҡорттар һуғыш башлай. Ситтә ҡалғандарҙы Ҡасҡын юлға яҡынайта. Бер саҡрым буйы. Саңғысылар. Атлылар. 4 мең кеше.

Аталар уҡтан. Унан тиҙ генә китәләр.

Ар ауылы. Теләш ауылы. Сиреү ҡоҙоғо.

20/III. Төрөш ауылын алғайны.

Жуково ауылы һулда ҡала. Унда алпауыттар, байҙар. Бик хәлле, тигәйнеләр. Улар крәҫтиәнде ҡыҫҡан. Улары күтәрелгән. Көс күп. Бер ҡайҙа ла китмәҫтәр, тине Михельсон, һуңынан...

Ә бит Зарубин тап шуға алданыр тигәйне. Унан Ҡазан юлы үтә. Дим тамағында таралып-таралып ҡоя, Ағиҙел аша сығыу. Ям станы. Шунан тәүҙә Өфөгә инер. Шунда барырға тип, бөгөн төндә ике мең кеше ебәргәйне.

Хата булды. Ә Михельсон туп-тура барып, ул ҡалаға еңеүсе булып керергә ярата. Еңеүҙе уртаҡлашмай ул. Үҙе генә татый.

Бында — отряды ғына. Аҙыҡ йыя, фураж. Ә, бәлки, Уҙытамаҡ ауылынан боролоу кәрәктер. Михельсон Сәлих ауылын, Уҙытамаҡты айҡай. Байрамтауҙа, Йыйынтауҙа башҡорттар була. Тарата. Жуково ауылына яҡын бармай. Ҡурҡылдауыҡ йылғаһында туҡтала.

Зарубин бынан һуң үкенә. Их, ике мең кешеһе китте. Ул сиреү хатта ярар ине хәҙер.

Михельсон уңға бороллдо. Аҡзыяратҡа. Башҡорттар уң яҡҡа сыҡты. Зыяратты ҡаплап бара.

— Ниңә?

— Тапатмаҫҡа.

Бында Ғәбделмәннән Мөслимов әйтеп ҡараны. Тыңламаны. Унан — Ҡара Яҡуп.

***

Зарубин белде. Хәбәрҙәр ебәрҙе. Зубово ауылында көс тупланы. Килеп еткәнсе теткеләргә.

Михельсонға йә колоннаға, йә обозға төрлө яҡтан ябырылалар.

Юл буйы.

Наҙыяҙ буйы — Теләшкә[1] ингәндә. Себенлекүл, Ҡайынлыкүл. Һул яҡта – Туйка ауылы, Нуғай ҡулауығы.

Унан Айтаяҡ түбәһе. Яуыш урманынан баралар.

Михельсон төшөп килә. Ике яҡтан ябырылыу.

Һулда — Куровское ауылы ла, Мырҙахан ауылы ла *(хәҙерге Нижегородка, Таптыҡ ауылдары)* һулда ҡала. Уңда Ключ ауылы — Третьяковка.

Кареға[2] теҙелделәр. Тышта — пехота, эстә – аттар, ылауҙар, туптар. Туптарға яһау ҡуйылғас, алдағы шеренга эскә уҙа.

Шунан ҡыҫа төштө.

Каре ике ҡатлы.

Тупсылар:

— Заряжай!

Канонир төҙәй.

— Отскачи! — Ут төртәләр.

Тағы.

— Заряжай!.. Отскачи!

Алғы рәт ата, артҡылар "заряжает". Урындарын алмаштыралар. Кавалерияны сығармай.

Бер яҡын килделәр. Унда атлыларҙы сығарып ҡыуаланы, тағы теҙҙе. Бер йән кеүек уҡмашып килә.

Бөтәһе бер команда менән. Михельсон башынан. Михельсон ышанмай.

— Бында ниндәй һуғыш булһын?

24/III. Төнгө сәғәт икелә. Чесноковкаға — биш саҡрым. Зарубин ҡаршыға ете меңлек отряд ебәрә. Ике яҡтан — саңғылы пехота. Атлылар ситтән. Яҡтыра. Дары еҫе. Йорттар яна. Төтөн.

Көн оҙоно һуғыш. Әле алға йомолалар, әле артҡа сигенәләр.

Кискә табан Зарубин еңелә. Зубовола һуғыш уҙа.

Ҡарғалар килгән саҡ. Бөтә Бәрҫеүән буйы ҡарғалар...

Өфөлә ҡарғалар ҡурҡманы. Ҡарайҙар, ишетәләр.

Бәхтиәр тауынан күренә... Бында — һуғыш. Тәүҙә команда бирелә, һалдаттар бер аҙым алға баҫып аталар. Икенсе рәт алға сыға — аталар. Команда теүәл үтәлә. Ә уларға уҡтар яуа. Атлылар һөңгө тоҫҡап киләләр. Артҡа ҡаҡсыйҙар..

Шулай барҙылар. Бер аҙҙан бөтәһе буталды.

Буталды. Ҡайҙа фланг, ҡайҙа һөжүм яһайҙар — күреп тә булмай. Офицерҙар команда бирә, улар күрмәгән — унтер-офицер, һәр һалдат үҙ ыңғайына хәрәкәт итә. Төтөндән үтергә теләгән кеүек алға баралар, төтөн дә күсә. Михельсон шул төтөндән генә самалай.

Ул — алғы авангард. Төп корпус күптән каре менән килә. Уның эсендә — туптар, ылауҙар, дары запасы, байраҡтар. Һәм Михельсон үҙе.

---

[1] *Теләш — Келәш ауылының иҫке исеме.*

[2] *Каре (фр.) — пехотаның атлы атакаға ҡаршы дүрт босмаҡлап теҙелеүе.*

Тирә-яҡ саналар менән уратылған. Осло ҡаҙыҡтар ситкә тырпайған. Яугирҙар, күҙгә аҡ-ҡара элмәй, ябырылып киләләр, шул осло ҡаҙыҡтарҙы алып ташлайҙар ҙа йөк өҫтөнә менәләр. Кемдең ҡулында ни бар: йә һәнәк, йә һөңгө. Уларҙың үҙҙәренә офицер пистоле, һалдат карабины ут бөркә, йығылалар. Аттар кешнәп, йығыла. Тыпырсына.

***

Өфө халҡы сыҡҡан. Тәүҙә төркөм-төркөм. Унан иркенләп. Ҡалай был? Бер кем теймәне.

Третьяковтар, Зубовтар. Үҙ йорттарына. Тау башына ҡарайҙар.

Михельсон Зубово ауылына ингәс, Өфөнән сапҡындар бара, хәбәр килтерә торалар.

Еңә башланы.

Өфөнән бик сыҡманылар. Арттан башҡа отрядтар килеп бәреүе бар.

Фекла бер команда менән китә.

— Үҙем. Йә тере, йә үле килтерәм, — ти.

Онотмай ине фельдмаршал казакты. Ой, күҙҙәре, ой, ҡосағы... Яндырып үбеүе... Тик уны улай үҙ алдына ҙур командир итеп түгел... Ҡоло итеп күргеһе килә. Алып килһәм, үҙемә алып ҡалырмын, ти.

Бара.

Ҡасҡын ҡасҡан.

Зарубин ҡасҡан. Михельсон уны үҙе ҡыуып киткән. Стәрле юлынан.

Фекла ҡыуып етә.

Михельсон:

— Ниңә килә инең?

— Атаманды алып ҡайтырға.

— Һин кем?

— Дворян ҡатыны. Ул яралы. Үсен алам. Был крәҫтиәндәрҙең кәрәген бирермен. Быныһын көйләй ҙә белермен. Закон ғына бирмәҫ. Яза көтәлер.

— Ирең кем?

— Тылмас.

— Үҙең дә беләһеңме? Миңә тылмас кәрәк. Әйҙә... — Хәйләле ҡарай. Ҡатын тартынмай. — Пасха бит, бергә байрам итербеҙ.

Каретаға алып керә.

— Ирем минән башҡа байрам итерме?

Михельсон Өфөлә бер аҙ ял иттерә. Ғәскәрҙе ваҡ-ваҡ төркөмдәр менән. Карательный маҡсат.

Өфөлә лә ышанмай. Бөтә эште үҙе тикшерә.

***

Зарубин Табынға, унан Богоявленскиға китә.

Башҡорттарҙы, мишәрҙәрҙе Михельсондың бер отряды ҡыуа. Төрлө яҡҡа тарала. Ҡасҡын Һамаров Еҙем буйҙарына — урманға, Ҡәнзәфәр – Өршәк, Үҙән буйына.

28/III. Губановты Табында бәйләйҙәр. Казак яҫауылы.

Михельсон авангарды килеп тә етә.

24/X — Губанов Өфөлә публично казнен.

Ә Зарубинды Богоявленда приказчик тоттора. Унда — казактар командаһы. Капрал була.

(Ике вариант) — беренсеһе:

Табында Михельсон Феклаға:

— Хәҙер китмә. Килтерәләр.

Зарубинды килтерҙеләр.

Зарубин берсә Михельсонға, берсә Феклаға ҡарай.

Михельсон:

— Әйт, төп көстәре ҡайҙа, ҡаҙнаһы ҡайҙа?

Фекла әйтеп бөттө.

Зарубин:

— Үп, минең ҡулдар бәйле.

— Йылан булһам, сағыр инем.

— Һин былай ҙа ҡара йылан.

Икенсе вариант:

Зарубин эсә. Кис бер үҙе ҡала. Шунда уны староста бәйләтә (барабошили). Ҡайҙа оҙатырға тигәндә, Михельсон барып етә. Фекла ла Зарубиндан допрос ала.

Фекла:

— Бына, оҡшағанмы фельдмаршалға?

Михельсон ерәнеп ҡарай.

Зарубин:

— Ах, кәнтәй, тағы таптыңмы? — Ымлай подполковникка.

— Һине таптым.

— Кил, үбәм.

— Тиреңде тунайым...

Тиреһен ул тунамаҫ. Бүтәне, Екатерина бар. Уның ҙурыраҡ армайҙары. Йөрөтөрҙәр. Ә Михельсон менән Фекла шунда, Табында, Богоявленскиҙа хушланып, пасха аҙнаһын уҙғаралар. Шунда сиркәүҙә үҙ еңеүенә ғибәҙәт ҡыла.

* * *

Шул ваҡыт Стәрлетамаҡтан бер отряд килә. Михельсонға әйтәләр.

Табын яҫауылы һиҙеп әйтә. Тотоп килтерәләр. Буранғол ҡотҡарырға килә, Михельсон һөйләшеп тә торманы. Уның хөкөмө ҡыҫҡа:

— Аҫырға!

Бына шунда ул башҡорттар хаҡында, уларҙы нисек ҡулға алырға, тип баш вата.

Улар баш һалһындар әле. Язалау менән ҡурҡытыу ярамаҫ. Яза тип килмәҫтәр.

Әсирҙәргә теймәй. Екатерина манифесы биреп, старшиналарына аҡса биреп ҡайтарырға, үҙ яғына ауҙарырға — иң яҡшыһы шул.

Ләкин башҡорттар бик ауа һалмайҙар. Күҙ алдында аҡсаны ырғыталар, манифесты йырталар. Ә алыусыға ерәнеп ҡарайҙар.

Ләкин бының файҙаһы бар ине. Өйгә ҡайтҡас, карателдәр килһә, шул манифесты ярлыҡаш ҡағыҙы итеп күрһәтәләр.

Шулай итеп, Әлибай ҙа ҡотолдо, Ҡасҡын да ҡотолдо. Шундай ҡағыҙҙы Юлдаш, Ибраһим Мерәсов, Һеләүһен, Ҡәнзәфәр ҡулға төшөрҙө.

Ә Ҡыҙрас вәғәҙә бирҙе, мәгәр үҙе караттар юлына сыҡты.

Старшиналар баш эйә бара. Өйгә ҡайталар.

Ҡасҡын да килер шунда...

Уға, Михельсонға, биш йөҙ кеше бирә. Ҡыҙрас, ғәскәр туплап, ҡыйратырға ҡырсына.

Бөтә Табын, Богоявленск шаулай. Байҙар, поптар тантана итә, йәнәһе, еңәләр.

Ә ярлы казактар, крәҫтиәндәр, заводта эшләүселәр Зарубин, Губанов өсөн әрней, тирә-яҡ башҡорттар, стәрлетамаҡтар ҡайғыра. Элек бер икона... Бер изге бар ине. Һыу һибеп, боҙға ҡатырылған Митрофан. Тағы икәү... Ләкин былары тере әле...

П

Һуңғы яҙмыштары — Зарубин, Губанов. Зарубиндың яфалы көндәре бар әле, язалы оҙон юлы булыр. Мәскәү, Петербург хөкөм булып, ҡот осҡос вәхшәтте күрһәтерҙәр. Пугачевты четвертовать иткәндә, унан Иван Зарубинды Өфө килтереп, 1775 йыл февралдә башын киҫерҙәр. Башлы ҡолғаға Сергеев перевозы, үҙенең һөжүмгә килә торған урынға кәүҙәләрен эшафоты менән бергә яндырырҙар. Көлөн армайҙар күккә осорор...

10 февраль, 1775 йыл. Өфө. Ағиҙел яры. Башын киҫеп, ҡаҙыҡҡа ултырталар. Бында төрмә. Сиркәү баҙында – язалау, боҙ өҫтөндә — йәшерен төрмә. Бик серле. Унда ике кеше сыҡмай — мәкегә сумыралар, тимәк.

Калакул һуғалар. Ҡаҡҡан һайын саңы йөрәккә һуҡкан кеүек.

Пасха байрамы байрам булманы ул йылды. Михельсон — Фекла ҡосағында. Ә үҙе Голицын хаҡында уйлай... Ул да еңгән. Ул тотормо Пугачевты? Боласы тауҙар араһына киткән. Бына ер-һыу ғына кипһен, юл төшөр, ул үҙе юлланыр Пугачев артынан...

**Бишенсе бүлек**

## Тыуған ер тыуы

*Күгәрепкәй генә ятҡан Урал тауы –*
*Атай-олатайҙарҙың төйәге,*
*Ерен-һыуын һаҡлап ҡорбан булған*
*Шунда ята батырҙар һөйәге.*

1

угачев, Давыдов ярҙам һорағас, үҙем барам, тигәйне. Хәл етди икәнен аңлай. Һамарҙы алғандар, Ставрополдән киткәндәр. Боғоросланда ла. Давыдов юҡка килмәгәндер.

Пугачев күҙ алдына килтерә. Ҡыҫып килә. Бибиков ебәрә.

Яңы поход. Кар походы. Ләкин улай ғына буламы. Бында кенәз Голицын килә.

— Кенәз менән дә алышырбыҙ.

***

Яҙ етә. Борон-борондан килгәнсә, хәмәл-ҡуҙы[1] айы. Уның башы — Яңы йыл.

Буранбикә:

— Бөгөн Яңы йыл!..

Яңыса башлана. Бейә ҡолонлар ваҡыты. Шатлыҡ. Уны элек-электән, ҡымыҙ була, йылҡылар ишәйә, тип ҡыуанғандар.

Ырымбур янында ҡымыҙ көтмәйҙәр. Еңеү кәрәк. Еңеү көтәләр.

Аҡкалпаҡ менән Буранбикә күрәләр: башҡорттар йыйына башланы. Алайҙар теҙелә. Кинйә кемдәргә бараһын, кемдәргә бында ҡалаһын әйтте.

— Беҙ ҙә барабыҙмы?

БындаҠотлогилде ҡала.

Юҡ, ҡатын-ҡыҙ яу сапмай шул.

— Һаҡ торогоҙ, ҡаланан сығыуҙары бар.

Тауҙан Берда яғы ла күренә. Унда ла олуғ сиреү йыйыла, байраҡтар күренә. Ҙур эштәр.

Аҡкалпаҡ — Буранбикә. Ҡарап торалар. Ҡала ҡапҡаһы асылды. Кешеләр сыға. Йөрөйҙәр. Бынан да отряд ҡуҙғалды. Әҙер. Ләкин ары китмәнеләр. Унан да килмәнеләр.

---

[1] *Хәмәл-ҡуҙы — Овен йондоҙлоғо.*

***

Ҡәлғә эсендә хәрәкәт, көтәләр.

Губернатор.

Петр Рычков Ырымбурҙа. Бөгөлмә ерҙәрен һатты. Һай, бында килмәгән булды.

Ҡыҙы өсөн ҡайғыра. Зубовта кейәүҙә унылы. Ә Зубово ауылы яугирҙар ҡулында. Ә ул Күгәрсен биҫтәһендә тора.

Улы — Бөгөлмәлә. Андрей, подполковник. Унын көндәлек яҙыуы яҡшы, әлбиттә.

***

Голицын килә. Йәш. Кенәз, генерал.

Ҡыҫырыҡлап киләләр. Киң фронт менән. Һамар — Пьяный Бор — Минзәлә. Өфөгә, Ырымбурға табан.

Фрейман, Мансуров.

Мансуров авангардта.

14/II Быҙаулыҡта атаман Араповты ҡыйратты, Арапов сигенде.

***

Татищев 1735 йылда һалынған. Бында ҙур мөгәзәйҙәр эшләй.

Алдан кешеләр ебәргәйне. Голицын килгәне билдәле.

Бердала ҡаршы алыу уңайһыҙ.

— Ҡубынмайыҡ. Боҫҡон яһайыҡ, — тиҙәр.

— Алға барып ҡаршыларға, — ти Пугачев. — Бында ике яҡлап ҡыҫыуҙары бар.

— Чернышевты еңдек бит.

— Ә был — Голицын! Хәҙер корпустан ҙурыраҡ яу килер.

Казактар боҫҡоны, тип уйлай Кинйә. Ҡыш көнө унын маневры юҡ. Ҡар. Ҡыуаҡтар ҡуйы түгел. Лава методы ла ҡыш һәйбәт түгел.

Юлда барыу. Байраҡтар (ҡыҙыл киндергә һигеҙ яҡлы тәре — раскольниктарса). Кинйәләр Пугачевтың бик ғәййәр, етди икәнен күҙәтә килделәр. Бында уңайһыҙ. 18 саҡрым Чернореченская ҡәлғәһе. Ул бәләкәй.

Бынан 27 саҡрым юл өҫтөндә — Рычков утары. Унда нығытма юҡ.

Пугачев ары әйҙәне.

Татищев ҡәлғәһе ныҡ (54 саҡрымда).

Татищев ҡәлғәһенә килеп урынлаштылар. Голицын корпусы килеүе хаҡында хәбәр килде.

— Ошонда ҡаршылайбыҙ, — тине Пугачев.

Кинйә яҡ-яғына ҡарап алды.

Ҡәлғә уңайлы урында. Яйыҡ буйы. Ошонда Ҡамыш-Һамар йылғаһы ҡоя. Тамаҡтан ярты саҡрым.

Бында башҡорттар, ҡалмыҡтар йыл да яҙ көнө эшкә килә ине. Көҙгә саҡлы Кинйәнең дә командаһын килтергәне булды. Шуға таныш.

Ҡәлғә — дүрт мөйөшләп һалынған ҡармыш стена. Мөйөштәрҙә ағас башы. Эстә ике йөҙләп йорт. Малорустар. Был – Яйыҡ буйлап һуҙылған ҡәлғәләрҙең терәге, база. Унда аҙыҡ-түлек, фураж, кейем-һалым складтары урынлашҡан. Туптар ҙа күп ине. Бөтә кәрәк-яраҡ алынғайны, әлбиттә. Туптар яңынан килтереп урынлаштырылды.

Туптар тау башында ла бар.

Тирә-яҡ ауылдарға разведка ойошторола. Ҡансура ауылына Балтай кешеләр алып килә.

Пугачевтың көсө күп. Ырымбур ҡамауына ла ҡалды. Голицынды ҡыйратырға ла етә. Ҡарға ауылы яғын һаҡларға ла онотманылар.

Разведка хәбәр иткәс, Пугачев яңы әмер бирә:

— Овчинников, һин Сорочинск ҡәлғәһенә бар.

Ә Дербетовка:

— Ҡалмыҡ отрядыңды ал да алға, — ти.

Үҙе лә 1500 кеше алды. 10 туп.

Үҙе Пронкино ауылында туҡталды. Бәрелеш. Новосергийскиға сигенде. Атамандарҙы Татищевта ҡалдырҙы.

Үҙе Бердаға ҡайтты. 5 мең кеше, 20 туп алды. Иң яҡшы канонирҙар.

Шоғаевҡа:

— Һин был яҡты ҡара, — ти.

13/III Татищевҡа килде.

Бында униң бөтәһе 10 мең кеше. (3 мең казак, 2 мең заводтан, 2 мең башҡорт, татар, ҡалмыҡ 2 мең ярым.)

Ҡәлғәне оборонаға әҙерләү. Туптарға ҡарҙан урҙар эшләнә. Атыу өсөн ара билдәләп ҡуйҙылар. Туптарҙың көстәрен тикшерҙе. Таҙартылған. Дары картуздары[1] һалып ҡуйылған. Прицел көйлә.

Пугачев үҙе килеп тоҫҡап ҡарай.

Бөтә ғәскәрҙе теҙә.

— Батыр һуғышығыҙ. Кенәз килә.

Әмер: бер тауыш булмаһын! Ут яҡмаҫҡа! Бөтәһе эш-көш йәшерен, боҫоп ҡына торорға, һис кем күренмәһен. Кенәз ғәскәре килеп сығыр. Ҡапыл ябырылырға.

Йәҙрәләр, картечтар менән ҡойондорорға уйлағайны. 36 туп бар бит.

22/III Голицынға хәбәр. Переволоцкиҙан киләләр. Татищевта бер төрлө хәрәкәт юҡ.

Ә... бер төрлө лә юҡмы? Шомло.

Арапов бер ҡатынды ебәрә. Тоторҙар. Һорарҙар. Бер кем дә юҡ, тиергә...

Әһә, быныһы ла, бер кем юҡ, ти.

Голицын яҡынлай, туҡтай, туп алмаҫлыҡ арала. Үҙе разведка ебәрә.

Разведка килә. Ҡапҡаға. Уларға Арапов, Овчинников һәм Пугачев үҙе ташлана. Береһе эләгә, икәү ҡаса.

Бына һиңә "бер кем дә юҡ..."

Голицын батареяларын крепость тирәһендәге ҡалҡыуыраҡ урындарға күсерә лә ут аса.

Пугачев та ут асырға әмер бирә.

Был арала Голицын пехотаһын, кавалерияны уйһыуға алып китә.

...Голицын туптары ата. Кинйә шуларға ҡаршы кеше ебәрә.

— Ҡасмағыҙ! Яҡын булһаң, йәҙрә баш аша оса.

Шулай эшләйҙәр. Тик тегенән атака башлана.

Кинйә икенсе төркөмдө туптар артына ебәрә. "Уратып алаһы ине".

Унда тупсылар ҙа бар. Ҡулға алһа, үҙҙәрен бурорға.

Атыш бара. 4 сәғәт буйы.

Голицын туптарына уң яҡтан Пугачев тағы Кинйәне ебәрә. Бер аҙ туптар алды. Ике батальонын ҡыҫа. Шунда Фрейман килеп сыға. Ул саҡ-саҡ туҡтата. Уға ярҙамға Голицын кенәз Долгоруковты[2] ебәрә.

Кемгә кем килеүен Кинйә ҡайҙан белһен. Дошманға ярҙам килә. Шул ғына. Үҙе лә ярҙам ебәрҙе... Әлибай алайын.

Сигенәләр.

Пугачевтың күҙе икенсе яҡта ине.

— Государь! — ти бер тауыш.

---

[1] *Картуз (гол.) — орудийный снаряд. Туптар көбәгенә дары һалалар, прибойниктар менән тыңҡыслайҙар, шуның өҫтөнә йәҙрә һалына.*

[2] *Долгоруков Василий Васильевич — кенәз, полковник, 2-се гренадер полкының командиры.*

Ҡарай: Емеля.

— Ана, дошман бөтөрә!

Бында ла китмәй икән. Ҡараһа, Кинйәне ҡыҫып баралар. Пугачев күрҙе, ярҙамға ҡалмыҡтарҙы ебәрҙе.

Барып өлгөрҙөләр. Давай, Емеля, тип арҡаһынан ҡаға. Бынығын алдаманың, шулай ҡарап йөрө.

Шунан Голицын тағы атлы гусарҙарын ебәрә.

Ана, унда — Яманһары, унда – Әлибай. Үҙе алға гусарҙар өҫтөнә йомолдо.

Уға Сәйдалы килеп ҡушылды. Уға ла ҡыйын. Бында ҡыр-ҡаҙаҡтар бар ине.

Бергә ҡыҫалар. Сәйдалының ҡустыһы:

— Апырмай![1] — тип ташланды. Алға кереп китте. Бер гусар менән һай-һайлап, башҡалар сатрашлап ҡылыс һуға башланылар. Артҡа сигенә Сәйдалы. Янында сарбаздары. Бергә килә. Ләкин өлгөрә алманы, ҡустыһының башы ергә тәгәрәне, кәүҙәһе ауҙы. Кинйә килеп етте. Ҡырғыҙҙар ҡыҫтылар гусарҙарҙы. Улар ҙа юғалтты.

Кәүҙәне алып сыҡтылар.

Саҡ өлгөрҙөләр. Сигенәләр. Голицын пехотаһы. Штыктар.

Тағы тупланып ҡарайҙар. Штыкка ҡаршы барып булмай. Һөңгөләр һынған.

Эш ауырға ҡалды. Төркөм-төркөм әсир бирелде. Үлеп ҡалыусылар күп. Аттар йығылды.

Сигенеп, ҡәлғәгә йыйылдылар.

Овчинников:

— Кит, государь!

Кинйә Алпарҙы батша янына, байраҡ янына ебәрә. Һаҡларға. Үҙе лә килә.

— Ҡас, батша!

Теге китмәй. Мансуров отряды урата. Кинйә башҡорттарҙы ебәрә. Икенсе яҡтан казактар һөжүмде тотоп торалар.

Пугачевты ҡасыралар. Кинйә уны арттан ҡаплап бара.

Улар артынса Овчинников үҙе лә китә Яйыҡ казактары менән. Ләкин батша артынан китә алмай. Драгундар бүлде. Овчинников бер аҙ казак менән, Дербетов ҡалмыҡтар менән бүленеп ҡалды. Яйыҡҡа табан.

Әлибай алып китте. Шул йыйын йолҡош, ярлы-ябағай рәтендә, улар ыңғайына йөрөгәнсе. Бөтә әтрәк-әләм. Элекке ҡасҡындар бында күкрәк кирә. Былар бөгөн урыҫ алпауыттарын талайҙар, унан миңә тотонорҙар. Ғәбдессәләм дөрөҫ әйтә, ти.

Ҡолан башына эш төшһә, ҡолонона ҡарамаҫ, тигән.

Уның артынса тағы ла кемдәрҙер. Крәҫтиәндәр таралды. Һалдаттар, сержанттар бар ине — улар әсиргә, шулар араһында Кинйә подпоручик Швановичты ла күреп ҡалды.

Был юлы беҙҙең менән бергә түгел. Бүре берегеп мең булмаҫ.

...Казактар араһында ла паника. Йә Голицынға, йә Ырымбурға бирелергә, тигән ынтылыш һиҙелде, быш-быш һөйләшәләр.

Таралды. Ҡом йыйылып таш булмаҫ, тиҙәр. Сиреү күп ине лә. Китергә. Тиҙ-тиҙ... Бөтә көскә.

25/III – Благовещение көнө.

Был – яҡшы хәбәр көнө. Христос тыуырҙы алдан хәбәр итә. Пугачев та был көн килгәндә элек гел яҡшылыҡ көттө.

Бынығы — Еңелеү бирҙе.

Насар булды.

---

[1] *Апырмай (ҡаҙаҡ.) — ғәжәпләнеп өндәшеү.*

2

Аҡҡалпаҡ көттө. Буранбикә менән Алпар ҡайтмай. Йыраҡ киттеләрме? Ауыр һуғышмы?

Аҡҡалпаҡ күрә: ғәскәр сигенә.

Ашығып ҡайттылар. Башҡорттарҙың бөтәһе килмәне.

— Ни булды?

— Еңелдек.

— Ҡайҙа ҡалғандар?

Алпар юҡ. Кинйә лә юҡ.

— Улар... батша янында.

Бына бер ваҡыт Һамар юлында... Еләләр. Ҡасалар. Берәүҙәр Бердаға етә, оҙаҡламай — Аҡтүбәгә лә.

Ҡотлогилде сапҡындары белгәйне. Йыйынырға. Бердаға күсергә әҙер.

Кинйә килде. Момент Бердаға. Ырымбур ҡапҡаһын асҡандар. Ләкин хәҙер унда барыу юҡ.

Буранбикә:

— Ни булды, ҡайным?!

— Һин ҡайт, үҙ һөйгәнеңде эҙләү сараһын күр. Ул Өфөлә булыр. Бында ярҙам килтерһен. Бында килмәһен. Ҡотҡар бәләнән. Һаҡла. Йортта сиреү туплаһын.

Берсә Кинйә, килене иҫән ҡалһын, ирен һаҡлаһын, нәҫел өҙөлмәһен, тип уйлаған төҫлө ине.

— Ундамы?

— Унда. Бик кәрәк. Ҡор яланын ҡарағыҙ. Аң булығыҙ. Кәрәк еренә хәбәр итермен, — тине Кинйә.

Аҡҡалпаҡҡа әйткәйне.

— Мин Алпар янынан ҡалмайым! — тине Аҡҡалпаҡ.

Буранбикә атаһы иләүенән килгән азаматтарҙы алып китте.

Бер аҙ барғас, Буранбикә боролдо. Ниҙер әйтергә, әллә Аҡҡалпаҡты алып китергәме?

— Ҡайным... Үҙең.

— Бар, килен, бар... Эҙләп тап.

Ул Өфөлә төп ғәскәр ҡырылғанды белмәй ине.

Тирмәләрҙе һүттеләр. Ҡаҙандар, запас ҡорал-яраҡ тейәлде. Ылауҙар елдерә.

...Бер арала Исхаҡ Әхмәтовты[1] саҡырҙы. Йөҙәй крәҫтиәне. Сос кеше. Ырымбурҙан сығып, бында бик елһерәп йөрөй ине.

— Бар Верхне-Яицкиға!

Бына шул кеше хәбәр итһен! Грязновка, Тумановка... Унда — Салауат, Белобородов. Беҙҙе һораша торһондар. Ҡушылырға әҙер булһындар.

Ҡайҙа барырҙар...

Бердала — мәхшәр (паника). Хәбәр тарала. Тейәләләр. Әмерҙәр. Пугачев ҡамсы болғай.

Бер әбей:

— Яҙмыш... Әйтелгән ваҡыттан элгәре күренеү ярамаҫ ине.

Пугачев:

— Халыҡты йәлләнем.

— Шуның бәләһе.

— Бир ваҡыт. Еңермен! Бында булманы. Питерға китәбеҙ.

Китергә — һуғышырлыҡ көс юҡ. Әммә бошонмай.

[1] *Исхаҡ Әхмәтов — Мостафа ауылының татары, б. к. полковнигы.*

Далаға, тиҙәр. Тауға.

— Әле... Ҡарғалыға!

Кинйә шунда. Алпарҙы ла шунда күрҙе. Юлға сыға ылауҙар. Юл тар. Тәрән ҡар. Этеш-төртөш. Казактар атҡа атланды. Башҡорттар ҙа. Башҡалар таралыша. Йәйәүлеләр ниңә кәрәк?..

Аҡҡалпаҡ Алпар йәнәшендә. Ҡарғалыға саҡлы...

***

Берданы ташлап киттеләр. Әле көс бар: 5 мең кеше. Атлы, 10 туп. Йәйәүлеләр ҡалды.

Пугачевтың биш ай торған төйәге ҡалды.

Ҡалды Кинйәнең олатайҙары урҙуғаһы Аҡтүбә.

Пугачевсылар өс юлдан: үҙе — Переволоцкиға, Хлопуша — туп-тура Ҡарғалы юлы менән, ҡалмыҡ атлылары көнсығышҡа тартылды.

Күптәр таралды. Әлибай ҙа китте.

Халыҡ сәмләнә:

— Китәбеҙме ни?

— Батша беҙҙе ташлап китәме?

— Ә Ырымбурҙы?! Губернаторҙы аҫаһы бар.

— Улмы? Ул беҙҙе үҙе аҫыр.

— Йүнле айғыр өйөрөн ташламай, — ти икән Әлибай.

Бүтәнен дә әйткәндер, был батша түгел, бағый, тигәндер. Ундайҙар китер. Китһендәр. Хәҙер уларҙы йыйып уҡмаштырыу мөмкин түгел. Ләкин бөттө тигән һүҙ ҙә түгел. Үҙәге, һөйәге бар, атамандар батша янында, тине Кинйә. Шулай ҙа арала, ихтимал... Ул яҡын булырға тырышты. Үҙенең көсөн таратманы.

Пугачев та:

— Юҡ, әле көрәш алда, — ти.

Дөрөҫ, ул Татищевта ҡыйралғас, бөтөү ошолор, тип уйлап та ҡуйғайны.

Бына ышаныслылар бар. Атамандар. Шоғаев, Кинйә... Бына Хлопуша... Һай, Афанасий... Алышты! Артҡы дозор һаҡлап килде. Ләкин үҙ янындағылар тотоп бәйләгән... Губернаторға илтерҙәр.

Дөрөҫ һиҙенә ине ул: Ырымбурға илтерҙәр. Губернатор үҙе үк уны аҫырға ҡушыр.

Юл буйы Пугачев үҙенең көсөн, атамандарын барланы. Кинйәгә:

— Һин янында көс тот, минең эргәлә бул, — тине.

Кинйәгә ышанырға була.

3

Хлопуша килә. Пугачев та килде. Көс, бергә тупланып, Һаҡмар ҡалаһына йүнәлтелә. Хлопуша, рөхсәт һорап, алдан китте. Бик аҙға. Ҡаршы сығып торор.

Ҡатыны бында ине. Ике балаһы. Шуларҙы Һаҡмар ҡалаһына илтеп ҡуяйым, тине. Шул фатирға барып етеүе булды. Юл ыңғай Муса Алиевҡа инде. Яуҙаш бит. Полковник! Әйҙә, киттек! Ҡайҙа ул! Бара, ти, һиңә. Дуҫтарын йыйып, Хлопуша артынан барып етте. Уны төрлө яҡлап уратып алдылар.

— Һин, Муса, хаин — һатлыҡ йән, белдең! — тине Афанасий.

Йығып бәйләнеләр, баҙға һалдылар.

Хлопуша таныны. Уларҙың бер аҙы Ырымбурҙа ҡамауҙа ине. Еңелеү булғас, Голицын туптары ышығында ҡаланан сығып, ҡайтып еткәндәр. Ә өсәүһе шунда Бердала бергә йөрөнө. Яуҙаштар, йәнәһе.

Пугачев килеп етә, ҡотҡара. 7 старшинаны үлтерә.

Ә ҡайҙа эләгә һуң?

Хлопушаны губернаторға рапорт менән ебәрәләр, ти бит.

Шунда төрмәлә ятыр. 10/V. Ырымбур секрет комиссияһында допрос. Башын киҫеп, ҡаҙыҡҡа ултыртырға!

18/VI — Армай үтәне.

(18/VII тигәне лә бар.)

***

Голицын тантана итә. Таралды. Әсирҙәр күп. Туптары. Башҡорттар китә. Туптар күпме.

Ул Татищевта уҡ ҡасыусы Пугачев алдына сығыу өсөн Переволоцк крепосына подполковник Бедряганы[1] ебәрҙе.

Уның алдында Ырымбур.

Ул Татищевтағы еңеү тәьҫиренән арынып етмәгәйне әле.

— Пугачевҡа беренсе удар яһаным, — ти.

Кар булдыра алманы. Бында Рейнсдорп бикләнеп ята. Күпме көсө бар! Тегенән — Деколонг. Бибиков булдыра алманы.

Ә шулай ҙа ниндәй ҡаршылыҡ! Ниндәй оҫта ойоштора. Һис көтөрлөк түгел. Ябай казак бит әле үҙе!

Голицынға ныҡ тирләргә тура килде.

Күпме үлтерҙе, күпме әсир алды. Бөтә туптары, әрйә-әрйә йәҙрәләр, картечь зарядтары...

Ошолар хаҡында рапорт яҙып, Сенатҡа ла, Бибиковҡа ла ебәрергә.

Бибиков саҡ еңел тын алды. Күпме ауырлыҡ, күпме мәшәҡәт! Инде үлһәң дә.... Һәм ул апрель башында уҡ шул теләгенә ирешер.

Ваҡ-төйәге инде...

Ә Михельсондан хәбәр юҡ ине һаман.

"Мин — Голицын шул. Атаҡлы нәҫел. Голицындарҙан губернатор ҙа бар. Фельдмаршал да. Шуға күрә алмайҙар. Һөрөп тә ебәрҙеләр, баштарын да киҫтеләр. Бына бында ла бер Голицын булған.

Хәҙер — бына ул!

Йәш әле... Ә ниндәй хөрмәт булыр уға. Бына уның алдына губернатор йығылыр. Ҡосаҡлар, үбер. Башҡалар күтәреп йөрөтөр..."

Юҡ, әле ул Ырымбурға ынтылманы. Церемония — һуңынан. Барабандар бында ҡағылһын, борғолар бында уйнаһын.

Походта кейә торған сюртюгын һалмай. Камердинеры бүтән китель, аксельбанлыны әҙерләй ине.

Губернаторға адъютантын ебәрҙе:

— Бөтә Йайыҡ буйын киҫәтһен. Ҡарғалыны, Сакмарскиҙы алһын.

Юҡ, сыҡмай. Бер ҡурҡҡан эт өс көн буйы өрә... Ә был ҡурҡышынан арына алмай, өңөнән сыҡмай ята. Бердаға килмәгән.

Шуның арҡаһында Пугачев сығып китә алған.

Голицын көлөп үтеп китте. Батша һарайы, йәнәһе. Бүренең дә төйәге була шул.

Обоздар, иген — ҡалаға. Әйҙә, кинәнһендәр. Асҡа ҡаҡланғандар. Эт, бесәй ашағандар, тиҙәр. Ҡала ҡапҡалары асыҡ.

Уның янына килделәр.

— Виват! Виват! — тиҙәр.

— Виктория! — тиҙәр.

Голицын Ҡарғалыға ынтылды.

Татарҙар шунда уҡ таралды. Байҙары алға килеп, аяҡҡа килеп йығылды.

---

[1] *Бедряга Аким Фомич — Изюм гусарҙар полкының подполковнигы.*

Ғәбдессәләм ҡарт остаз, тиҙәр... унынына иғтибар ҙа итмәне.

Бында һуғыш. Ҡаты булды.

26/III. Бой.

Бында бик татарҙы ҡыра. Өй беренсә кереп, эҙләп үлтертә.

Голицын ары полковник Хорватты[1] ебәрә. Капитан-поручик Толстой[2], подполковник Аршеневский.[3]

Төрлө яҡҡа команда оҙата.

Хәҙер Ырымбурға барып тантана итһәң дә ярай. Һиҙенә, бөтәһен белә: уға хөрмәт булыр. Рапорт барып еткәс...

Бында ғына түгел, Петербургта ла. Екатерина Алексеевна уны ҙурлар, күккә күтәреп маҡтар. Ә шуның өсөн фаворит Григорий Потемкин, көнләшеп, алдағы йылға уҡ бөтөнләй юҡ итер.

Голицындар — ауыр яҙмышлы нәҫел шул.

4

Пугачев уйланып килә. Кәйефе юҡ. Ҡырҡ изге көнө. Көн менән төн тиңләшкән мәл. Быйыл ул хәйерһеҙ булды. Еңелдек.

Үҙе был хәлен күрһәтмәй. Ул — батша. Ә Ҡарғалынан һуң юл юҫығы хәҙер ҡайҙа табан, тип казактар алан-йолан ҡарана башланы. Уларға башҡалар күҙ һалды. Крәҫтиәндәр күптән үк тороп ҡалды, завод кешеләре әлегә таралмай.

Кинйә башҡорт алайҙарына күҙ һалды. Ҡайһы берәүҙәр күҙ яҙҙырырға өлгөргәйне инде. Әлибайҙы Кинйә, саҡырып, туҡтата алған.

Яманһары алдан тайған.

— Беҙ яңылыштыҡ, — тип әйткән, ти, ул. — Сысҡан артынан эйәрҙек. Сысҡан бит, әжәле етһә, бесәй ҡойроғон тешләй. Ә Бүгәс тә шуға оҡшай. Үҙ хәлен белмәй, бында ла ҡарыулашҡан булды.

Үҙе бөтә алайын алып киткән, ә яман һүҙҙәрен бысраҡ эҙ итеп ҡалдырған. Ә хөсөт бик тиҙ тарала. Кинйә күргән бере, саҡырған бере һөмөрө ҡасҡан. Һырт бирен китеү яғын ҡарайҙар. Йәнәһе, һыу таша-таша ла тына. Яу ҡыйралды.

Әлибайҙың да шулайыраҡ самалағаны һиҙелеп тора.

— Көс аҙ. Ни саҡлыны ҡырҙырҙы, — ти. — Эш көрсөккә текәлде.

Кинйә:

— Бына именһең бит.

— Күпмеһен ташлап китте. Яман булаһын һиҙенәлер батша. Үлем килеүен күргәс, эт көсөгөн ташлай.

Кинйә уға ҡарап:

— Яу ҡайтыуһыҙ булмай. Бер тына, бер ярһый... Ныҡ бул... Йый яугирҙарҙы. Әйҙә...

Ҡарғалынан бер аҙ кителгәйне. Кинйә Мәләүез юлына ла, Һаҡмар үренә лә батша фарманынан еткереү өсөн сапҡындар ебәрҙе. Кире килергә.

Сапҡындар тәүҙә Юлдаш Ҡотлинға етте.

— Ҡасмағыҙ. Кире килегеҙ! Атаман шулай ҡушты.

Юлдаш старшина:

— Кинйә атаман ҡушҡас, барабыҙ. Атаман ғына түгел, юрматының батыр улы. Юрматы ҡыҙы Аҫылбикә инәйҙең Кинйәһе.

Уның боролоуын күреп, башҡа старшиналар, сотниктар ҙа үҙенекеләрен килгән юлға йүнәлттеләр, сапҡындар башҡалар артынан төштө. Бикҡол, Иманғол

[1] Хорват Георгий Иванович — полковник, Изюм гусарҙар полкының командиры.

[2] Толстой Александр — лейб-гвардияның капитан-поручигы.

[3] Аршеневский Николай Я. — подполковник, 23-сө еңел хәрби команданың командиры.

ауылдары кешеләре лә кире килде. Оҙаҡламай Кинйә үҙенең янындағылар менән бергә өс меңләп атлы ғәскәр туплай алды.

Быны күреп, батшаның дәрте үҫте. Яйыҡ атамандарына ла ышаныс килде. Һаҡмар ҡалаһына туплана башланылар.

Пугачевтың әле биш меңләп кешеһе бар. Үҙенә күрә ҙур ғына көс.

Һаҡмар ҡалаһында тупланып, хәл алып була. Тағы йән алып — йән биреп алышырға мөмкин.

Һайылмыш тамағына, Һаҡмар буйына һалынған был ҡала башҡорттарға — үҙ йорт-илдәре кеүек, Яйыҡ казактары өсөн дә яҡын. Тәү башлап 1726 йылда яйыҡтыҡылар уға нигеҙ ҡорған. Үҙ өйҙәре, үҙ ҡалалары кеүек күрәләр. Ҡәрҙәштәр, дуҫтар ҙа күп.

Бындағы казактарҙан да байтаҡ ҡына кеше йыйып алдылар.

Голицын Ҡарғалыла ҡалғайны. Полковник Хорват ҡапылғара арттан ҡыҫып, туҡталып торҙо. Шул арала ҡаланы арлы-бирле нығыттылар. Барынса туптар урынлаштырылды, пикеттар ҡуйылды.

Биш көн үтте.

Беренсе хәбәрҙе Емеля әйтте. Һаман китмәй, буталана кеүек. Кинйәгә оҡшамай. Шикле. Сакмарскиҙан эйәрҙе. Әйләнеп килде. Алдаша.

— Бында бүре күрҙем, китәйек, — ти.

— Ҡайҙа?

— Күптәр.

Кинйә:

—Ҡайҙа?

Емеля уға әйләнә, башҡортса:

— Ана, теге юлда (Яманһары кешеләре).

Пугачевҡа әйләнә:

— Ана тегендә...

Улары һалдаттар икән.

1 апрель көндө карателдәр күренде. Голицын, үҙе килмәйенсә, генерал Мансуровты ебәрҙе.

Тәүге ябырылыуҙы залп-залп ут менән кире ҡайтарҙылар.

Тағы ябырылыу. Унылын да...

Пугачев Кинйәгә:

— Кавалериянды ебәр.

Бер аҙ ҡыуҙылар. Генерал резервын индерҙе. Пугачев та казактарҙы:

— Йәгеҙ, молодцы! — тип яуға елкендерҙе.

Туптар атты, туҙҙырҙылар. Сигенәләр. Пугачев үҙе алға йомолдо.

Казактар, башҡорттар, мишәрҙәр ҙә — алға. Генерал күрҙе Пугачевты. Уға табан күрһәтте һалдаттарға. Быны күреп, кемдер ҡысҡырҙы:

— Батша атаҡайҙы һаҡларға!

Казактар һул яҡтан ярҙам итәләр. Башҡорттар — уңдан.

Барыбер Пугачевҡа яҡынлайҙар. Ул үҙ-үҙен онотто, ябай казак сағын хәтерләп, алға, ҡылысҡа ҡылыс... Бер үҙенә икәү-өсәү ташлана. Бына шунда ҡурҡыныс саҡ. Араға Емеля килеп керә.

— Осударь!..

Уның башын драгун сабып төшөрә.

Пугачев күҙ һирпене, таныны... Шул арала ярандары уға яҡынлашты... Дежур-майор Давилин. Ҡарт Почиталин, улы Ваня-секретарь. Балтай, атаһы Иҙеркәй. Максим Горшков атын алға сығарып:

— Артҡа кит!

Аңланы, арҡараҡ шылды. Бер яҡта – Витошнов, икенсе яҡта – Кинйә.

Шул арала уға ҡарай, флангтан урап сығырға итәләр. Унда Әлибай. Хәле мөшкөл.

Үҙ янындағыларға ҡылыс болғап ым бирҙе.

Шунда ҡайырылғанда, Әлибайҙы драгундар уратып алғайны. Бер үҙе икәүгә ҡаршы. Ҡысҡыра-ҡысҡыра, Кинйә алға ташланды.

Драгундарҙың алдағылары сабып ташланды. Ҡалғаны — артҡа. Әлибай, рәхим өсөн йылмайып:

— Аһ, ҡотҡарҙың, ҡушаға!

— Әйҙә, әйҙә!..

Кинйә ҡараһа, тағы Пугачевҡа табан ябырылалар. Ул драгундар лаваһын туҡтатырға итә. Уны тағы Горшков артҡа алып китте, теҙгенен эләктереп, Максим Шоғаев һул яҡтан тотҡарлай.

Пугачев байҡап алды. Ҡыҫымды тотарлыҡ түгел. Үлгәндәр байтаҡ, яралылар күп. Пленға биреләләр. Башҡорттарҙың да ике төркөмөн бүлеп алдылар. Улар һырт бирҙе. Китергә тура килә. Оҙаҡлай.

Янында Балтай, йәш Почиталин ине.

— Барығыҙ, бөтә ҡағыҙҙарҙы яндырығыҙ!

Ҡалмаһын. Туптар ҡалғас, дуҫтар ҡалғас, былары ниңә... Бәлә генә тыуҙыра. Һәр һүҙҙә — бер кеше йәне.

— Живо!

Аңлашыла: ул ҡағыҙҙарҙа күпме кешенең исеме... Кемгә — указ, кемгә юл билеты бирелгән, кемгә нимә...

***

Яугирҙар урамдың ике яғына бүленеп һуғыша-һуғышалар. Нык тоторға тырышалар. Батша һул яҡҡа тартылды. Ә Балтай менән Иван обоздан ҡағыҙҙар һалынған һандыҡты алып, уң яҡтағы бер мунсаға кереп киттеләр. Саҡма сағып, ут тоҡандырҙылар. Утҡа ташлайҙар. Уларҙың яҙғаны, башҡалар яҙғаны дөрләй...

— Тиҙерәк янһын, бутала, — тине Ваня Почиталин. Үҙе ике ылауҙа ҡалғандарын алырға йүгерҙе.

Драгундар ҡыҫып килә. Алып керәм тигәндә, драгундар күреп ҡалып, шарт-шорт атып ебәрҙеләр. Аты ышыҡтан сыҡҡан, кешнәп, гөрһөлдәп йығылды. Ваняның аяғына тейҙе, ахыры, йығылды, ҡағыҙҙар туҙыла башланы. Балтай уға ярҙамға ашыҡты. Торғоҙорға итә, юҡ.

— Аяҡ...

— Бар ана тегендә, аҙбарға табан бара тор, бынһын — үҙем, — Иван фузейҙымы, мылтығына таянып йығыла, бер тора, китте.

Балтай күҙ һала. Драгундар, егерҙар крепость эсенә үтте. Һул яҡтағылар сигенде. Арттарынан китергә кәрәк. Тик Ваня яралы, ташлап китеп булмай. Янына барырға. Янмағаны үҙе яныр.

Уның янына табан ырғығанда, Иван атаһы Яков Почиталин менән үҙенең атаһы Иҙеркәй килгәнен күрҙе. Уларға драгундар ташланды. Ҡаманылар. Йырып сыҡтылар. Киттеләр.

Күпме кешене йырып урап килгәндәр. Ҡалдырмаҫҡа, үҙҙәре лә ҡабып ҡуйырҙар. Балтайға атаһы бик яҡын булып тойолдо. Ҡиәмәтлек атай тиһәләр ҙә, үҙенекенән мең артыҡ. Үҙ атаһы төркмән Тудыш улы Аббас элек тә һис ҡараманы. Әленән-әле ташлап китте. Яу башланғас, йортта ҡалғайны, үлһәң әгәр — улым бар ине лә, тимәҫ.

— Әйҙә, — тип ҡабатланы Балтай Ваняға.

Ваня:

– Ике ат та ауҙы. Береһе иҫән булһа ла, икәү менгешеп булһа ла китербеҙ. Бәлки... юҡ шул. Ни бары ошонда Йәшерен ҡалырға...

Яков та, Иҙеркәй ҙә ярҙамға килеп етә алманы. Уларҙы драгундар ҡыуа төштө.

Өс-дүрт драгун Балтайҙы бәреп йыҡты. Мунсанан һөйрәкләп сығарҙылар.

— Нимә яғаһың?

— Ул писарь. Ҡотҡо ҡағыҙҙарын яға.

Хәҙер китеп тә, ҡасып та булмай. Ана, ҡаршылаша-ҡаршылаша ҡасалар. Батша күренеп ҡалды. Уны һаҡлап һуғышалар, буғай. Атаһы күренеп ҡалды. Кинйә. Тағы...

— Бынының бер ҡайҙа китмәҫ! — тине сержант.

— Әсирҙәр янына бар.

Үҙҙәре ҡыуа китте. Әсирҙәр күп. Өс меңләп булыр.

Балтай, кешегә ни — миңә шул, тип шунда китте. Ҡайҙа ҡасһын? Һаҡмар буйына ҡараны. Бәй, ана Максим Шоғай ҡасҡан бит. Ҡаса, һуғыша. Ә мин? Ниңә һис юғы мин дә шул яҡҡа... Юҡ шул, Максим да яңғыҙы ҡалған. Уны өсәү ҡыуа. Максимдың аты тәрән ҡарға батты. Тора алмай, үҙе ҡарға бата-сума йүгерергә тырыша. Ҡыуып еттеләр. Ҡылыс һелтәне. Ләкин сапманы. Ә... сисенергә ҡуштылар. Кейеме затлы шул. Яҡшы тунын һалдырҙылар, бишмәтен. Буҫтау салбар, итеген, ойоҡтарын... Бына, үҙ-ара һуғышып киттеләр. Шул саҡ Максим яланаяҡ ҡар өҫтөнән йүгерә. Урманға. Ә Максимды бәреп йыҡтылар. Ул сатай-ботай барып төштө. Унда казактар бар, күрәһең.

Ҡалғанын Балтай күрмәне. Төрткөләп алып киттеләр.

Ә Максим урмандағы казактар менән ҡасты. Илек ҡаласығына саҡлы барырҙар, 7/IV унда тотоп, ҡул-аяҡтарын бәйләп, Ырымбурға килтерерҙәр. Тикшереү, хөкөм. Уны Мәскәүҙә, Болотный майҙанында, Емельян Пугачев менән бер көндә, бер үк урында, алдағы йылдың 10 ғинуарында башын киҫерҙәр.

Ә Балтай үҙе быны күрмәҫ. Быны ғына түгел, ҡиәмәтлек атаһын да, батшаны ла, Кинйәне лә, дуҫы Һеләүһенде лә башҡаса күрмәҫ.

Уны Йәшерен комиссия хөкөм итеп, һорау алып, Ырымбурҙа, Ҡазанда тоторҙар. Унан 1775 йылдың 26 майында ғүмер буйы батшаға хеҙмәт итһен өсөн Архангел ҡалаһына оҙатырҙар.

## 5

Аяуһыҙ алыш дауам итә ине әле.

Яугирҙар, ҡарыулаша-ҡарыулаша, ҡаланың төньяғына йәйге үрешлек тапандығына сыҡтылар. Драгундар, тәрән ҡар йырып, уларҙы ҡамарға тырыша.

Алпар Аҡҡалпаҡты алғараҡ ебәрергә тырышты. Ә ул Алпары янынан китмәй. Ә уныһы – Кинйә янынан, абыҙ батша янынан китмәй.

Аҡҡалпаҡҡа үҙе өсөн түгел, ана шул ирҙәр өсөн ҡурҡыныс. Ниңә һуғышалар улар?!

Улар ғына түгел. Ана, аттар ҙа тәкәшә, кешнәйҙәр, ауалар. Кешеләр үҙ-ара алыша. Кемдең ҡулында нимә бар. Ҡылысы булғаны — ҡылыс менән. Сың-сың... Икәүҙең береһенең йәне ҡыйыла. Башҡорттар ҡулында һөңгө. Ҡулда суҡмар булһа ла ярап тора.

Тағы ныҡыраҡ буталыш. Казактар артҡа сигенә. Батша алда ҡалды.

— Ай, Хоҙайым! — Йөрәк ярып ҡысҡырҙы Аҡҡалпаҡ.

Уның тауышы ишетелерлек түгел ине, әлбиттә. Үҙҙәре күреп, бер нисә кеше ярҙамға. Кинйә лә шул яҡҡа. Уның артынан Алпар.

— Государь, кит! — тине Кинйә.

Пугачевты ҡамауҙан уратып алып сыҡтылар. Ә Кинйәнең үҙен уратып алдылар.

Аҡҡалпаҡ тағы:

— Атаманды ҡотҡарығыҙ! — тип ҡысҡырҙы.

Кинйәнең ҡылысы һынды. Берешен пистолдән атып йыҡты. Суҡмарын алып, икенсеһененең ҡылысын бәреп төшөрҙө. Бөлдөргөһө шарт итте. Ярҙамға Алпар, тағы бер-ике яугир ырғылды.

Аҡҡалпаҡ үҙе тороп ҡалды.

Ләкин драгундар яңғыҙ итмәне. Береһе ҡылыс күтәреп уға ташланды. Ҡылыс һелтәп ҡаршы алды. Теге унын ҡылысын бәреп төшөрҙө.

Нишләргә уйлап тормаҫтан, уң яҡ ҡунысҡа ынтылды — унда бысаҡ бар. Эйелгән саҡта атҡа аттылар. Ауҙы. Үҙе ҡолап төштө. Тәрән ҡар. Сарыҡ батҡансы. Ҡылыс ҡарға батҡан.

Драгун туҡталған кеүек. Әллә ҡолаған кешегә, әсир бирелә тип, теймәйҙәрме? Ҡулға ниҙер алырға. Ҡорал? Юҡ. Ул башынан һыпырып ҡолаҡсынын[1] алды ла, сәс толомдары һүтелде.

— Мә, дөмөк! — Тегеңә бәрҙе. Теге ҡылыс менән кире бәрҙе. Аҡҡалпаҡ тотоп алды ла тағы бәрҙе: — Бәреп үлтерәм мин һине!

Драгун аптыраны. Йә, Хоҙай, ҡолаҡсын аҫтында — оҙон толомдар. Ҡара томра сәс. Ҡыҙ кешеме, берәй йәш бисәме?.. Быға ни ҡалған тағы. Ни ҡулың барып шуны сабаһың... Ләкин ул саптырыуҙан онотолоп китеп барырға өлгөрмәне, Алпар ҡатыны яғына әйләнеп ҡараһа, бәләгә тарыуын күреп, атын ҡыуаланы. Драгун һырт бирҙе, Аҡҡалпаҡ ҡолаҡсынын тотоп, ҡарға сумған ҡылысын һәрмәп маташа ине.

— Кил! — тип ҡысҡырҙы Алпар.

Уны йәһәт кенә биленән эләктереп, эйәр өҫтөнә алдына ултыртты. Барлы-юҡлы төркөмгә, ярай, килеп өлгөрҙөләр.

Батша ла, Кинйә лә ҡуҙғалды. Казаҡтар, башҡорттар эйәрҙе.

## 6

Һаҡмар ҡәлғәһе артта ҡалды.

Тәғәйен йөсөҡ юҡ ине. Яйыҡ казаҡтары башта тәртәне үҙ яҡтарына ҡайырып, далаға табан китергә кәрәк, тип әйтеп-әйтеп алғайнылар. Ләкин арттан карателдәр ҡыҫып килә. Хатта Яйыҡ яғына боролоп ҡарарлыҡ форсаттары ла булманы. Әле лә көс-хәл менән генә улардан бер аҙ айырылып китә алалар. Барыбер киләләр. Ҡайҙа ла ҡасырға, күҙҙән яҙырға кәрәк.

Тик ҡайҙа?

Пугачев йәнәшәһенә баҫҡан Кинйә Покровка заводына табан һуҙылған юлға ҡамсы һабын һуҙҙы. Эйе, шул яҡҡа. Әле һис кем ҡарышманы. Емельян Пугачев та уға баш ҡағып, артҡа табан ҡул болғаны. Быныһы — батша әмере. Башҡаса уйы юҡ унын. Кинйә беләлер. Үҙе был яҡтарҙа булмаһа ла, башҡа тараф хаҡлығын аңлай. Ул Ырымбурҙан Яйыҡ буйлап үрләп, Верхне-Озерный ҡәлғәһенә саҡлы барғайны. Әле унда — бригадир Корф ғәскәрҙәре. Арыраҡ — генерал Деколонг. Шул яҡҡа һуғылып, морон төртөр урын юҡ. Артта — Голицын. Пугачевтың һиҙемләүенсә, был яҡта — Пречестенский ҡәлғәһе, унан — Тимашев биҫтәһе.

Ләкин Кинйә юлды ул яҡҡа йүнәлтмәне. Артта бит карателдәр.

Генерал Голицын... Ул генерал-майор Фрейманды — Бөгөлсәнгә, генерал-майор Мансуровты Яйыҡ ҡалаһына табан ебәреүен белмәй, ләкин Бөгөлсән, Стәрлетамаҡ, Табын тирәһен ғәскәр баҫыуы былай ҙа аңлашылып тора. Өфөгә табан килгән Михельсондың Чесноковкала Зарубинды ҡыйратыуын, Табында тотоп алыуын беләләр. Һәр тарафта бар улар.

[1] *Ҡолаҡсын – башҡорт яугирҙарының баш кейеме; йәнлек тиреһенән осло түбәле итеп тегелгән, яуырынды, ҡолаҡты, тамаҡ аҫтын ябып торған кәпәс.*

Көс бик аҙ. Ни бары дүрт-биш йөҙләп кенә кеше. Улары ваҡ-ваҡ төркөмдәр булып таралғандарҙан йыйылды. Күптәр ҡырылды, әсир булып ҡалды. Башҡорттар ҙа бик аҙ ҡалған. Китеп ҡотолғандарҙыр. Һәй-әй, унын полковниктары!

Уларҙың юҡлығы, Пугачевтан бигерәк, Кинйәне әсендерҙе. Муса Имәнғолов[1] китер, ә бына Әлибай, үҙенең нағасыһында йортауай булып торған Юлдаш, Һәләүек буйы Һайран, Тәйрүктәге Көҫәпҡол. Бигерәк тә Яманһарыға аптыраны. Йән дуҫым тип йөрөй торғайны... Был һыуын-ҡыпсаҡтар әллә ҡалай бит хәҙер, Кирилов, Тәфтиләү заманында уларға ҡаршы бөтә халыҡты күтәргән Туҡсура Әлмәковтан һуң төклө аяҡлы йортауайға тейенә алмай йонсойҙар. Үҙ-ара бүленеп тә бөттөләр. Туҙыҡаһы Ҡотлогилде генә бер олоҫ тотоп килә. Ул әле лә эргәлә, Кинйәнең үҙенекеләр менән бер ҡарар.

Кинйә, тағы кемдәр тигәндәй, яҡ-яҡҡа ҡаранды.

— Бадишам, алға шәйләк ебәрергә рөхсәт ит.

— Эйе, ебәр... Ни кәрәген үҙең күр. Бөтә сараны самала.

Ҡотлогилде үҙенең бөтә ҡалғаны менән алға йомола.

— Ташлыға табан. Ян-яҡта шәйләктәр тот, — тине Кинйә.

Ҡалғандар ҙа еләә. Туҡтарға ярамай.

Пугачевҡа аҙмы-күпме өмөт ҡунғандай булды. Юғиһә бөтөнләй һүнгән һымаҡ ине өмөт шәмдәлдәре.

Шулай ҙа ул:

— Ҡайҙа минең армиям? — тип көрһөндө.

Ғәскәр, ихтимал, булыр, ә ышаныслы дуҫтар булырмы? Ҡайҙа һеҙ, дуҫтар?!

Зарубин-Чика менән Ульянов Өфө янында. Ә бында?.. Татищевта күпме ҡалды.

Овчинников, Перфильевты Яйыҡҡа үҙе ебәргәйне. Иҫәндәрме, юҡмы, осрашыу яҙғанмы?

Соколов-Хлопушаны, Ҡарғалыла ҡапҡан, тигәйнеләр. Ах, йәл, бик йәл Афоня! Ундайға хәҙер ярлыҡау теймәҫ.

Ә Максим Шоғаев? Уны Пугачев бөтәһенә ҡарағанда ярата ине. Уны ысын кәңәшсеһе итеп таныны. Үҙе берәй яры киткәндә, бөтә эшен уға тапшырып китә ине. Уға енәйәтсене аҫырға, киҫергә хоҡуҡ бирелгәйне. Ул үтәне. Шуға уны тыңланылар. Башҡорттар ҙа, татары, ҡалмығы ла уға кәңәш һорап килә ине. Ә бит күңеле бик үк таҙа түгел ине. Бер ваҡыт, Бердала саҡта уҡ. Яйыҡтағы старшина Мартимьян Бородиндың туғаны Григорий аяҡ аҫтында тигәндәй буталып йөрөп, бил бөгөп, баш эйеп, ышаныс яулаған да, Татищев ҡәлғәһендә еңелгәндән һуң, Пугачевты тотоп-бәйләп, Ырымбурға илтеп бирергә уй ҡорған. Максим Шоғаев үҙе ҡатнашмаһа ла, быға риза ине. Ләкин ҡара уй барып сыҡманы, батшаны һаҡланылар. Ә уның яҡын кәңәшсе тигәне Григорийҙы туҡтатып, тотоп бирмәне. Был хаҡта Пугачев белмәй. Әле уны йәлләй, юғалыуына ҡайғыра.

Ҡарт Андрей Витошнов... Хәрби коллегияһының баш хөкөм итеүсеһе — төп хакимдары ине. Ҡайҙа юғалыуын да күреүсе-белеүсе юҡ.

Уларҙың һуңғы яҙмышын белмәй. Алдағыһы бөтөнләй билгеһеҙ. Ә бит... Витошнов хөкөм ҡарары сыҡҡансы уҡ яҙалауҙан Ырымбур төрмәһендә 26 апрелдә үк йән бирҙе.

Сотник Мясников... теге Тимофей, уны тәү батша итеп таныусыларҙың береһе. Секретарь Максим Горшков... Быларҙы аҫырҙар.

Тимофей Иванович Подуров. Сотник башы менән килде. Ырымбур казагы.

Пугачев Ырымбур казактарының ниндәй икәнен белә. Был электән килгән йолалы Яйыҡ казагы түгел. Дондағы ла, Буткальский ҙа түгел. Былар араларында

[1] *Муса Имәнғолов — Нуғай даруғаһы Бөрйән олоҫо старшинаһы.*

байҙар, дворян тоҡомдары ла бар. Өфөнән, Самарҙан килтерелгән яңылар. Быларға ер, сабынлыҡ бир, жалунья түлә, ирек тип даулашмайҙар. Уларҙың үҙ яусылары бар. Түрә итеп ҡуялар, шуға баш эйәләр, хеҙмәтен үтәйҙәр.

Уlармы? Улар ҡаланың үҙендә, губернатор янында ҡалды. Ә былары, мине ҡыйратырға ебәргән ерҙән, минең яҡҡа сыҡты. Депутат шул. Аңлы казак. Ирек уға, ирек! Ярты йыл миңә хеҙмәт итте. Быuna ҡулға эләккәнме, үлгәнме — Хоҙай ғына белә.

Берәй хәбәре-хәтәре килерме, тип борсолдо. Килер. Ул ғына түгел, тағы осрашырҙар. Ләкин...

Тимашевҡа барып еткәнсе байтаҡ эҙ яҙҙырҙылар. Алда тыныс кеүек. Ҡотлогилденән ике сапҡын килде. Тыныс икән унда.

Юл ғына ауыр. Битләүҙәрҙә ҡара ер. Уйһыуҙа ҡар бата. Ҡайҙа урап, ҡайҙа тәрән ҡарҙы йырып-йырып үтергә тура килә.

Аттар ашатып, үҙҙәре лә арлы-бирле тамаҡ ялғап алдылар. Ит әҙерләтеп, икмәк йыйып торманылар. Казактарҙың эйәргә бәйләнгән күн тоғонда һәр ваҡыт кипкән балыҡ менән сохари була. Башҡортта, мишәрҙә кипкән ҡорот, аҙ-маҙ ҡаҙы, ҡалмыҡта ҡыҙыл эремсек, ҡаҡлаған ит була.

— Аттар ашап, хәл алдымы? — тине Пугачев.

— Һоло бирергә ине лә...

— Һуңынан... Юлға, балалар!

Тағы юл. Бер мәл ойотоп китте Пугачевты. Бәй, был ни эш?! Ә бой нығ булған икән.

Ул ҡарап алды. Тағы дуҫтары иҫкә төштө. Күҙ йомһа, күҙ алдына баҫа.

Ҡарт Яков Почиталин арттараҡ бара. Ә улы Ванюша, Идорканың улы ла юғалғандар. Балтай менән Ванюшаның икеһенә штаб ҡағыҙҙарын яндырырға үҙе ҡушҡайны.

Шунда ҡалғандарҙыр.

Аталарынан һорашты, йыуатты. Юҡ, яҙмыштар айырылды шул.

Кинйә Пугачевты үргәрәк алып китте. Быны һиҙеп, казактар алан-йолан ҡаранды. Пугачевҡа бынан форсат кәрәк ине.

— Минең яндан китмә. Ярандарың яҡын торһон.

Эйе, аңлашыла. Икеһе лә һиҙенәләр. “Пугачевты губернаторға тотоп бирергә” тигән уй Ырымбур янында уҡ әле бер тапҡыр түгел, ике-өс тапҡыр һиҙелгәйне. Ә хәҙер бигерәк тә. Нимәлер ҡылмаҡ итеүҙәре бар.

Тағы күҙ алдына: "Ҡайҙа һеҙ, дуҫтар, батыр яуҙаштар?" — тигән ҙур һорау баҫа.

***

Ташлы ауылы. Илле саҡрым үттеләр. Артта арлы-бирле отряд күренмәй. Яҡ-яҡтан да тыныс кеүек.

Кинйәгә үҙ яҡтары, үҙ ерҙәре.

Оло Эйек йылғаһы. Һул яҡтан Энәк ҡоя. Уңдан, Етерыу ерҙәрендә, Ташлы һыуы аға. Ана шул тирәләге бошман-ҡыпсаҡ ерҙәре — Һеләүһен өлөшөнә тейгән биләмәләр.

Эргәлә — Покровка заводы. Тирә-яҡта – башҡорт ауылдары. Ташлы ерҙәре Һеләүһенгә бирелгән. Өйө бар.

Ҡотлогилде алда килеп әҙерләгән. Өй бар. Һаҡ тора. Кинйә инеп сыҡты.

— Бадишам хәҙрәттәре, рәхим ит!

Ул һулға күҙ һирпене. Шартына килтереп, дежур-майор Давилин инеп сыҡты. Һаҡҡа баҫты. Пугачев өйгә үтте, артынан – атамандар, полковниктар.

Бөтәһе әҙер. Аш-һыу, аттарға бесән. Лагерь ҡороп торор саҡ түгел. Яугирҙар өйҙәргә бүлеп ҡуйылды.

***

Татищевта Голицын, Фрейман, Мансуров.

Пугачев еңелә. Ныҡ һуғыш була.

Пугачев үҙе етәкселек итә. Һуңынан уға китергә кәрәк, тиҙәр. Кинйә лә, китергә кәрәк, ти. (Уның янына башҡорттар килә, әйҙә, алып китәйек, тиҙәр.)

Овчинников:

— Кинйә хаҡлы, — ти.

Пугачев риза була. Ул уйлай, бөттөмө ни, ти. Ырымбурҙы алып булманы, Яйыҡты ҡамап булманы. Элек уға казактар, бынан китмә, тиҙәр ине. Китһә, хыянат булыр. Кемгә ышанырға? Шул тиклем көс йыйылған, өйрәтелгән ғәскәр юҡ. Пушка юҡ. Ҡыш. Яйыҡ казактары аҙ. Кемгә таянырға?..

Шулай тимәҫлекме? Бөтә генералдар: Ҡазанда, Мәскәүҙә, Петербургта шулай уйлайҙар, шатланалар. Тантана!

Юҡ, ул Кинйәне тыңланы. Башҡорттарға таянып була. Унда заводтар бар. Эшселәр. Пушка булыр. Унда — Салауат...

Шул көндән башлап Кинйәне бигерәк тә яҡын күрә...

Кәңәшмә уҙғарҙы.

— Йә, ярандарым. Ниндәй уйҙар бар?

Һәр кем үҙенекен тылҡый. Ҡыҙып-ҡыҙып һөйләйҙәр.

— Знамо, Яйыҡҡа!

Ҡурҡыныс үткәс, Яйыҡ казактары йәнләнде. Улар хәҙер күп түгел. Бында ни бары йөҙләп. Ләкин улар яу башлаған, батша — уларҙыҡы.

— Яйыҡҡа ҡайтайыҡ! — тиҙәр.

— Көс йыйырбыҙ. Ял итеп, баш-күҙ алырбыҙ.

Ә Ташлыла Пугачевҡа:

— Яйыҡҡа, Гурьевҡа! — тиҙәр.

— Нисек барып етергә, унан һуң — ҡулда тотоп булырмы?

— Оҙаҡҡа сыҙап булмаҫ.

— Гурьевтан Алтын Мәсеткә китербеҙ.

Яков Антиповтан Пугачев һорай:

— Кубанға. Нисек үтергә? Крепостар. Унда — ғәскәр. Далала ҡар.

Пугачев Воскресен заводы барын да онотмағайны. Быны Антипов та әйтә.

Бында уның башҡорттарға, Кинйә йортона китеүен Иҙеркәйгә, Антиповҡа әйтәләр.

Завод кешеләре күнмәҫ ине. Ләкин бында уларҙың вәкилдәре юҡ. Кемдер берәү:

— Завод кешеләре күнмәҫ. Үҙебеҙ генә ҡалырбыҙ, — тип шик һалды.

Уны бүлдерҙеләр:

— Берәү урынына ун казак бар!

Кинйә өндәшмәне, ай-һай. Хәҙер тауҙан таш артырмы? Казактар икегә бүленде. Арҡанды ике яҡҡа тарталар. Яйыҡ яғы көслөрәк.

Пугачев башҡорт башлыҡтарына ара-тирә күҙ һирпене. Ниңә өндәшмәйҙәр, Кинйә ниҙер көтәме, әллә тороп ҡалырҙанмы самаһы?

Ниһайәт, Кинйә:

— Бадишам, мине лә тыңла. Мин башҡорт һүҙен ишеттерәм.

— Эйе, Кинзей, әйт, ни ти минең балаларым.

— Беҙ ҙә Яйыҡ яғын беләбеҙ. Дала яҡ. Карателдәр айҡап йөрөй. Беҙҙә ҡалын урман, беҙҙә тау яғы. — Кинйә көнсығыш тарафҡа күрһәтә. — Орскиҙан төньяҡҡа — Ҡыҙыл буйҙары, Ҡырҡты, Ирәндек тирәләре; Әүжән, Иҙел башы — Белорет. Бөрйәндәр, тамъян, тәңгәүерҙәр беҙҙе һаҡлай. Ундағы заводтар — көллөһө беҙҙең яҡлы. Ул яҡта һаҡ ҙур. Һул яҡ Ағиҙел буйын, Мәскәү юлын ҡарарбыҙ. Бында

янаралдар йоғонмаҫ. Бында көс күп. Себер юлы атаманы Юлай... Йәш полковнигы Салауат, мишәр Усаев, Баҙарғол, Ҡанҡай, Белобородов, Грязнов, Туманов. Унда күп. Бөтәһен ташлап китәһеңме? Шунда күсен, көсөң тупла. Ҡеүәтле фарман бирерһең. Бөгөн бойороғоҙ — иртәгә биш мең атлы сиреү булыр, ун мең, тип бойорһағыҙ — ун мең яугир килер, йыйырмын!

Бығаса Пугачев үҙе лә икеләнеп, уйы бүтәнсәрәк ине. Бына шул дөрөҫ. Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы шул. Күп һөйләп торор ваҡыт түгел. Пугач аңлай: әле үк эргәһендә биш йөҙләп башҡорт йыйылған. Иртәгә тағы ишелеп килерҙәр.

Ул ҡалҡынды. Кинйәне ҡосаҡланы.

— Һүҙең дөрөҫ. Шулай булыр.

— Һүҙемде аяуға рәхмәт.

— Үҙең юл күрһәтерһең.

— Баш өҫтө, бадиша! Беҙҙең арала завод кешеләре лә бар. Юлда ҡарай-ҡарай барырбыҙ.

Бының менән генә бәхәс һүрелмәүен аңлайҙар. Яйыҡ атамандары бик тиҙ күнә һалмаҫ. Бер-бер уй ҡорорҙар. Заговор яһарға маташыу элек тә һиҙелеп-һиҙелеп ҡалғыланы. Юҡ итергә ынтылыусы булмаҫ тимә. Ниңә, теге ваҡыт Федулев ынтылманымы?!

Бына, эй, замана!

Генералдан һаҡлан, казактарҙан һаҡлан.

— Башҡорттан да, — ти Яков.

Уларға ничего, китергә. Голицын да, Хорват та етмәһен.

Юҡ, бик абай булыу кәрәк.

Кинйә, Пугачевтың иҙеүен күреп:

— Тимер күлдәгегеҙҙе кейергә кәрәк, — тине.

Был һүҙҙе асыҡтан-асыҡ әйтте, йәшерәһе һүҙ түгел.

— Ә, һин бүләк иткән... Мине күп ҡотҡарҙы ул.

— Һеҙҙең олатайығыҙ бүләге.

— Эйе, эйе... Шулай тигәйнең.

— Әле лә кейегеҙ.

— Давилин!.. Килтер!

Ҡушар аттың эйәргә һалынған тоҡтан алды.

Пугачев камзул, күлдәк өҫтөнән кейә.

— Миңә ҙурыраҡ та... Атайың минән йыуаныраҡ булғандыр.

— Эйе, һомғол кәүҙәле ине. Быны елән эсенән генә кейә ине.

— Оһо-о!

Кинйә яҡ-яҡтағы бағауылды көсәйтте.

Ташлынан сығыу менән Кинйә:

— Төрлө яҡҡа һаҡ кәрәк, – тине. – Юғиһә, бит Яманһары яманы. Элек тә һаҡһыҙ түгел, әле бигерәк тә...

Уң яҡҡа ла, һулға ла, артта, алда ла.

Ә инде Ҡор яланынан сыҡҡас, был бит ғәскәр, йәйләү тирәһенән бағауыл ҡуйыу ғына етмәй. Бөтә йүнең дошман, бөтә Рәсәйҙе карателдәр баҫҡан.

Бөтә башҡорт ерен уятып, ҡараулы тоторға.

Бөрйән яҡтарына сапҡын: унда Йәнсәйет[1] старшина булыр, аҡһаҡал. Исхаҡ Әхмәткә әйт. Шуларға әйт, улар булмаһа — тап булғанына. Аң булһындар, ҡәлғәләргә тынғы бирмәһендәр, юлдарҙы үҙ ҡулында тотоп, көс туплаһындар. Был — батша фарманы, был – минең һүҙем.

Ағиҙел буйын — улы ҡараһын. Юлды күҙәтһен, ҡарғаулы тотһон. Артта Көнгәк

[1] *Төрөкмән Йәнсәйетов — Нуғай даруғаһы Бөрйән олоҫо старшинаһы, б. к. полковнигы.*

тауы артын — туҙыҡаһы Ҡотлогилде... Унда ҡәйнеше... Юҡ, Көҫәпәйгә ышанып булмай. Ергән, Стәрлетамаҡ, Левашевка, Табын яҡтарынан күҙ яҙҙырмаҫҡа.

Кинйә бөтәһен ҡарай. Ҡарарға тейеш, батша уны бөтә башҡорт иленә атаман итеп ҡуйған...

Ошонда ҡунырға булдылар.

Бер килке һиллек урынлашҡан бит.

Ятҡансы һөйләшкән булдылар.

Казактар үҙҙәренең төйәктәре хаҡында иҫкә алдылар. Алыҫлашырға тура киләсәк бит. Ҡайтһалар ҙа...

Завод крәҫтиәндәренең береһе:

— Бына бында Эйек буйында Покровка заводы, — ти, — Шуваловтыҡы ине.

— Ә, Шуваловтар аҙ түгел, — тине Пугачев ишетеп ҡалғанынса.

— Быныһы — Александр Ивановичтыҡы. Үҙең беләһең бит, граф, фельдмаршал.

— Эйе, эйе... — тине Пугач. Башҡаса әйтә алманы. Минең апайым Лизаветаның терәге, тип әйтәһе генә лә бит.

Йоҡларға яттылар. Эҫе, арыҡҡан. Шомло уйҙар. Етмәһә, кәбәркелә һис туҡтауһыҙ өй сиңерткәһе тызылдай. Ә Пугачев:

— Бөтәһе яңынан башлана... Ҡайҙа ул элекке яуҙаштар?..

Пугачев:

— Бына изге Алексей көнө.

Тауҙарҙан йырындар төшә. Балыҡтар ҡышҡы ятыуҙан ҡуҙғала...

Тиҙҙән һабан турғайҙары күренер. Унан — Матрена көнө.

Яҙ. Ҡара ерҙәр. Ғәҙәттә, аслыҡта әйтәләр. Ҡара ергә аяҡ баҫһа, тип. Яу сапҡанда ла ҡара ергә баҫып йөрөү уңай шул.

Бер урында — йылға. Ташҡан. Үргә лә, түбәнгә лә барып урарлыҡ түгел. Юл өҙөгө шул.

— Ошо ла юлмы? — тип һуҡранды Творогов. Был Чумаковҡа ла етә ҡалды.

— Бындай мәлдә шайтан да йөрөмәй.

Пугачевтың ҡашы сытайҙы, мыйығы тырпайҙы. Ләкин һүҙҙе уйынға алды.

— Шайтан йөрөмәһә, батша йөрөй, — тине ул, тегеләргә күҙ ҡыҫҡан булып, шулай ҙа асыуын да һиҙҙерҙе. — Их, һеҙ... Максим Шоғаев һуҡранмаҫ ине. Иң алдан төшөп китер ине. — Үҙе атын һыу ситенә атлатты.

Йәберһенделәр.

Пугачев атын туҡтатты. Кинйә лә, Алпар ҙа туҡтаны.

— Нимә? Ни тип? Заговор ҡорҙолармы?

— Ни булһын?.. Улар ни, һине бәйләп, губернаторға илтергә уйлағайны, бына беҙ, яҡшымы-яманмы, ошо ярандарың һаҡлап ҡалдыҡ.

— Ниңә әйтмәнегеҙ?..

— Ул саҡ асығын белмәгәйнек.

Ни тиһен инде Пугачев... Үткән эш, ә бөгөн — үҙҙәре... Ниҙер әйтергә итәләр, ниҙер ҡылмаҡ булалар. Тотоп бирерҙәр, йәнендә ҡыйырҙар.

Ул атын һыуға яҡынайтты. Ат туҡталды. Кинйә әйтеүе буйынса, башҡорттар сыға башлағайны инде. Ләкин Алпар алға сыҡты. Аты төштө. Унан — Пугачевтыҡы. Унан – Кинйә.

Творогов та, Чумаков та сыҡты, әлбиттә. Бөтәһе килеп сығып бөткәс, ҡуҙғалдылар. Билгә тикле еүешләтте. Ләкин әллә ни түгел.

Пугачев уйланды. Ниҙер уйлай. Әйтмәй. Әллә уйының осона сыға алмаймы?

Бер килке барғас, шәйләктәр:

— Сиреү йөрөй, — тип хәбәр алып ҡайтты.

— Кем?

— Һыуһындар.

— Яманһарымы?

— Үҙе түгел, улы Кейекбай башлыҡ.

— Бына тағы? Үҙеңдеке — үҙеңә яу.

Яманһары кешеләрен күргәндәр. Төркөм-төркөм. Үҙе юҡ.

— Һеҙ бағиҙар сиреүенәнме? — тип һорағандар юрамал.

— Юҡ, Ҡара батшаны эҙләргә сыҡтыҡ, — тип әйтәләр, ти.

— Ниңә киттегеҙ, бер бағынғас?

— Һәй, ул Бүгәс ҡасҡын икән дәһә.

— Тағы көс йыйып алһа әле...

— Йыйҙы, ти... Ҡом йыйылып, таш булмаç, ҡол йыйылып, баш булмаç... Был ни... ора алмаған кеше оло күçәк күтәргән булды, — тигәндәр Кейекбайҙыҡылар.

Үҙҙәре уның ҡайҙалығын белмәй, эҙләп йөрөйҙәр икән. Тотоп илтәләр ҙә ҙур ярлыҡаш алалар, йәнәһе, губернатор ҡаршыһында "аҡланып" та ҡалалар, йәнәһе.

Уларға һиҙҙермәнеләр. Ҡайтып хәбәр иттеләр.

Яманһары ҡайтҡас та рапорт ебәрҙе Голицынға. 300 кеше йыйҙым, тип.

Улдары Кейекбай, Үҙәнбай Пугачевты тоторға китте, ти. Ә үҙем Тимашау командаһына барам, тигән.

Пугачев был юлы:

— Ах, бына казактан да, башҡорттан да һаҡлан, — тине. Яков ҡарт һүҙҙәрен хәтерләй.

Бына бит, бер яҡтан, Яйыҡ казактары быш-быш һөйләшә, икенсе яҡтан, бында Яманһары бармаһа, сиреүе менән улы боларыр. Уныһы инде атаһынан яманыраҡ...

Кинйә лә, Пугачев та һағайҙы. Казактар шиккә төштө.

Булһа ла булыр. Ағиҙел буйын, Өфө юлын Голицын баçҡандыр. Башҡорттар ҙа шулай ҡаршы сыға башлаһа...

Юҡ, шәп түгел, тиҙәр казактар. Бирешмәçкә ине, бирешеп тороу бик хәтәр. Уҡмашырға кәрәк. Ни бары батша тирәһендә генә тупланып була. Уны башҡорттар һаҡларға тырышыр. Улар шулай тип Кинйәгә күҙ төбәнеләр. Завод крәçтиәндәре лә, бер аҙ татарҙар, мишәрҙәр, ҡалмыҡтар ылыҡты.

Заговор һиҙелде. Әрләш булды. Тотоп та бирерҙәр. Кинйә:

— Батша! Быларҙан китеп торайыҡ.

— Ярай, бер юлын тап.

Был хәбәрҙән һуң, Кинйәнең кәңәше буйынса, был төндө Пугачев айырым өйҙә ҡунды. Тауыш-тын юҡ. Һис кем белмәһен.

Давилинға:

— Минең янға бер кемде лә ебәрмә. Кинйәне һорауһыҙ индер.

Ә атамандарға, завод кешеләренә:

— Беләһегеҙ, ҡурҡыныс ныҡ. Бергә бара алмабыҙ. Ҙур төркөм менән һуғыша алмабыҙ. Төркөм-төркөм бүленеп барырға кәрәк, — тине Пугачев.

Кинйә таралыу юлдарын күрһәтте. Тупланыу урыны — Воскресен заводы. Әле крәçтиәндәр алып барыр. Башҡорттарҙы Кейекбайға ҡаршы тип ебәрҙеләр. Унда бармаçтар, алға юл ярырҙар.

Иртән таңда тороп сығып киттеләр. Бер кешегә әйттеләр: йә Твороговҡа, йә Чумаковҡа әйт:

— Һаҡлыҡ өсөн киттеләр. Тупланһындар. Хәбәр итербеҙ.

Юл яҙҙырып бер аҙ үттеләр бик шәп итеп. Башҡорттар әйтелгән урында ҡушылды. Ә Яйыҡтыҡылар... эҙләп-эҙләп табырҙар. Һис ҡайҙа китә алмайҙар.

7

Татищев ҡалғаһында еңелеп ҡайтҡас, Кинйә Буранбикәгә:

— Бар, килен, нүкәрҙәреңде ал да үҙ һөйгәнеңде эҙләп тап, — тине.

— Ә... аңлайым... Бында йыйыныРға кәрәк бит. Мин дә булышайым.

— Бар...

Яу яҙмышы, яу хәстәре бар, әлбиттә. Әммә йорт-ил яғын да онотоп булмай. Улы ни хәлдәлер. Уны табып, хәл-әхүәл хаҡында иҫкәртергә кәрәк. Уйламаҫтан әйләнеп килеп, янаралдар ҡорған тоҡан кәртәгә килеп инмәһен.

Хәлде аңышһа, ни кәрәген ул үҙе белер. Йорт-илде нығытыр. Кәрәк хәбәрен юлыҡтырыр.

Кинйә килененә ҡарап алды. Унын, үҙен бер бөтөн йөрәктең яртыһы һымаҡ тойоп та, бында ҡайныһы һүҙен тыңлап ҡына ҡалғайны. Ҡалай һағынып бөткәндәр. Ана, осоп китерҙәй ҡалай атлыға. Арлы-бирле йыйынып, юл һалығы тупланы. Үҙе генә түгел, нүкәрҙәре лә бар. Үҙенең түркене Ҡарағужа ауылынан атаһы биреп ебәргән егеттәрҙе йыйҙы, эйәр ҡуржындары һалыҡ[1] менән тулды, ике бәләкәс тирмәне йәһәт кенә йыйып төрҙөләр.

Ул арала Кинйә юл нәсихәте бирҙе. Юл яғын самалау, Һеләүһенде эҙләп табыу сараһы. Өйгә ҡайтһындар, унда хәбәр барыр.

Ҡалған яғын үҙҙәре белерҙәр.

***

Апрелдә Буранбикә Һеләүһенде эҙләп китте.

Кейем таушалып бөткән. Айымға шатлыҡ. Ҡосаҡлай ҙа, көләс йөҙлө киленкәйем, ти ҙә, минең кескәй ҡояшым, ти ҙә арҡаһынан һөйә.

Шулай булмай ни, бик, бик көттө киленен, көтә-көтә арманһыҙ булды бит.

Киттеләр ҙә ҡайтмаҫҡа дүнделәр, яу тип инде: килененең килене. Яңы батша тарафына баш ҡушты. Ҡурҡа бит, һәр ваҡыт сабауыл килеп сығыр төҫлө. Тик әле йортауай үҙ туғаны. Ә башҡалар бөткәнме ни? Әле ул киленен йәлләне, ана, Батырша яуындағы кеүек.

— Яфалар сиктең, килен. Бына бит, яу юлы ерекмәне. Мин был арала, аяҙ булдымы, кис менән күккә ҡарайым, гел ҡойроҡло йондоҙ күрәм. Афәткә була ла ҡуя шул ул.

— Булмаҫ, ҡәйнәм, булмаҫ жондоҙҙоң ҡойроғо булмайҙыр, — тип уйнаҡланы әсәһе телендә. — Ҡайным, еңәбеҙ, тисе.

— Ул әйтер ҙә...

Буранбикә китте.

Эйе, яу унын эше түгел. Хәләл ефетен эҙләп тапһын. Яу заманы, аяуһыҙ. Кеше ғүмере менән иҫәпләшмәй. Был йәш ҡатындың ирен дә, ҡайныһын да — ни көтәлер, бөтәһе ҡыл өҫтөндәге кеүек. Ә ир бауыры бөтмәһен, нәҫел өҙөлмәҫкә тейеш. Ҡайтһын...

Буранбикә һиҙгер күңелле. Ҡайныһының ни уйлап ҡалыуын, хушлашҡанда бәхиллек биргәндәге кеүек ҡарап ҡалыуын һиҙҙе, әлбиттә.

...Ул үҙе өсөн борсолмай ине. Ырыуҙаш егеттәре — Ҡарағужа шонҡарҙары барҙа, уға ел-ямғыр теймәҫ, йәбер-золомдан һаҡларҙар.

Ә юлды ҡайҙан һайларға — ҡайныһы әйтте, үҙе самалар. Ул Өфө юлынан ситкә янтайҙы. Улар әле, яза бирәбеҙ тип, ваҡыт әрәм итмәйҙәр ине. Армайҙар артта ла етерлек. Берәм-һарамын тоторҙар, тикшерерҙәр, кәрәкһә, Өфөгә, Ырымбурға оҙатырҙар. Мәскәү ҙә алыҫ түгел. Ауыл-ара юлдарҙан үтә-үтә, тирә-йүн хәбәрҙәрен айыша-айыша барҙы. Карателдәр күренмәй, башҡорттарҙан, крәҫтиәндәрҙән ҡайтыусылар күп. Ә Һеләүһен хаҡында һис ни ишетелмәй. Һуңынан күренә ҡалһа, абай булып, уға хәбәр еткерһендәр, тип әйтә-әйтә үтте. Иренең ҡайҙа-ҡайҙа туҡталып йөрөр урындарын Буранбикә бер сама белә.

Бына бында уң яҡҡа ҡайырылып, Ташлыға һуғылмай булмаҫ. Бына үҙ ерҙәре, үҙ кешеләре бар.

---

[1]*Һалыҡ — йөк (автор һүҙлегенән).*

Һеләүһен булған. Күптән киткән. Ә артабан – Оло Эйек үренә. Унан – ҡайныһының дуҫы Яманһары. Ул әле яуҙалыр.

Шул ауылға ингәс, уралтып алдылар. Яманһарының улы — Кейекбай кешеләре. Ул таныны. Тотоп, үҙ йортона алып ҡайтты. Атаһы ҡайтып еткән.

— Бына, Кинйә абыҙ килене ошо була инде.

Атаһы:

— Нимә, йомошо бармы, үтенесеме? Ярҙам итегеҙ.

— Юҡ... Ул — аманат. Алырға Һеләүһене килер. Һеләүһен артынан — атаһы. Беҙҙең ҡулда булыр. Ҡапыл-ҡараға буш ҡул түгел.

Буранбикә бөтәһен булмаһа ла, күрәген аңланы. Килеп ҡапҡан... Ә ҙурыһы уға мәғлүм түгел. Аталы-уллы бер үк ҡылыҡлы булһалар ҙа, яу башланғас, күптәнге дуҫы Кинйәне тыңлап, яуға сыҡты, хатта унан алда. Улы ҡаршы ине. Йортта тороп ҡалды. Ә бына атаһы ҡыйралып ҡайтып төшкәс, Кейекбай ирәйҙе.

— Бына күрәген алдыңмы?

— Илгә ни — миңә шул булыр.

— Башыңдан һыйпамаҫтар. Ана ни саҡлы янарал, эписәр килә. Йорт-илде караттар баҫыр. Беҙҙә лә ҡырғын.

— Әлләә... Эйелгән муйынды ҡылыс киҫмәҫ әле.

— Эйелеп ҡотола алмаҫһың.

Тора-бара улының һүҙҙәре тәьҫир итте. Яманһары ҡурҡыуға төштө.

— Нишләйем һуң?

— Һин түгел, атай. Мин үҙем ҡотҡарам һине... Яу башлыҡтарын берәм-берәм тотоп илтәм.

— Ай-һай... Яҫығы ҙур.

— Яҫыҡ тип...

— Ҡара инде.

Кейекбай шунда уҡ бер алай уҡмаштырып алды. Бына эләктереп тә алды. Егеттәрен таратыр, ә килен аманат булып торор.

Ләкин быны атаһы килештермәне.

— Һуң, ул Һеләүһен... япа-яңғыҙы килер тиһеңме?

— Килһә... Ҡорал ҡулда бит...

— Һе, уларҙағы...

Буранбикә:

— Һин минең кем ҡыҙы икәнде беләһеңме?

— Килен һин...

— Эйе, мин Кинйә атаман килене! Ә атайым — Ҡарағужа! Бөтә Һаҡмар, Яйыҡ үҫәргәндәрен яу итеп алып килер, ә әсәйем ҡаҙаҡтың көллө алымын[1] күтәрер. Шунда ни тиерһең?!

Яманһары һиҙенә ине быны. Яҡшыға түгел.

— Килен, ярһыма... Ул аңғармаҫтан ғына. Юлыңды бүлмәбеҙ. Ниндәй ярҙам кәрәк, әйт.

— Ярҙамға мохтаж итмәҫмен, иркәмде эҙләйем. Ҡайҙа булыр ул?

— Кейәүең менән ҡауышырға насип булһын. Ул оло ҡәйнәң йәйләүендә, моғайын. Бынан Таймаҫ алыҫ түгел. Бар шунда.

Көйөргәҙе буйы йәйләүҙәренә еттеләр. Әгәр әле шунда булһалар, Аҫылбикә инәйҙең түркенендәге ҡәрҙәштәре Һеләүһенде күтәреп алалар. Уның өсөн йәндәрен фиҙа ҡылырға әҙерҙәр. Ниңәлер Кинйәгә ҡарағанда ла улын яҡын күрәләр.

Ләкин йәйләү буш ине тиерлек. Ике тапҡыр ғауға төштө, тиҙәр. Байтаҡ ҡына малдар үткенсе бағыйҙарға юлыҡҡас, ауылға ҡайтып киткәндәр.

Әйҙә Ашҡаҙар буйына. Унда еттем тигәндә оҙон арҡаны, һыу-шишмәләрҙең берәүҙәрен Ағиҙелдең ҡойло йылғаларына, икенселәрен Яйыҡ яғына айырып

---

[1] *Алым (ҡаҙаҡса) – мощь, сила.*

ағыҙып ятҡан оҙон һыртты артылыу кәрәк. Тап шунда — тау типкенендә генә Ҡотло улы йортауай Юлдаш төйәк ҡорған...

Бында ла үҙ итеп ҡаршы алдылар. Хәбәр ишетте: "Бағыйҙар сиреүе таралған бит", — тигән.

— Юҡ, юҡ, — ти Буранбикә.

Юлдаш йортауай ҙа ҡайтыр. Өфөлә лә еңелгәндәр.

— Юҡ! — Бынының Бердала саҡта ишетелгәйне әле. — Ҡайҙан ишеттегеҙ?

— Хәбәр әйтелә. Ауыҙҙан сыҡҡан һүҙ осҡан ҡош кеүек ул.

— Шулай... Мәңге һүнмәҫ ут булмаҫ.

Бынының ышанырғамы? Ышанмай ҙа булмай. Төрлөһө...

Арҡа артылып, Ашҡаҙар яғына сыҡтылар. Ана унда, һул яҡта, мырҙалар аймағы башлана, Бөркөтлө һыуы тамағында. Ҡазбулат ауылы күренеп тора.

Байтаҡ ҡына ара булһа ла, Ашҡаҙарға барып еттеләр. Тәүҙә сыуаштар ауылын үтеп, унан татарҙар ауылын уң яҡ ярҙа ҡалдырып, Ашҡаҙар ярына — Ҡазбулат ҡаршыһына барып туҡтанылар. Боҙ нык ине әле. Үттеләр.

Ете төн араһында ят кешеләр килгән тип, лаҫбыр эттәр ләңкелдәп сыҡты, берәй ғауға төшмәйме тип, ҡарт-ҡоро һағайҙы, ир-егеттәр ҡоралдарын барланы. Ләкин бик тиҙ танынылар.

Был — Кинйәнең әсәһе Аҫылбикәнең тыуған ауылы. Бындағы кешеләр уның балаһын, бошман-ҡыпсаҡ йортауайы булһа ла, үҙҙәренең улдары һанап, былтырҙан бирле "Юрматының батыр улы Кинйә ҡаһарман" тип йырлайҙар.

Улы Һеләүһен дә, килене Буранбикә лә уларҙыҡы. Ҙурлап ҡаршы алдылар.

Тик өҫ-башы тәпәрләнеп, таушалып бөткән, бысранып бөткән ҡыптыр тун, ҙур ҡолаҡсын, сарыҡ кейгән хәлдә күреп ғәжәпкә ҡалдылар. Элек шундай һылыу килен, итәктәр иркен итеп, күкрәктәр тығыҙ итеп тегелгән, билдәр ҡыҫып торған еләне, матур ҡашмау, яҡаһы, түш тирәһе ука менән нағышлы, көмөш тәңкәләр сыңлап торған, йөҙө лә, өҫтө-башын бер ҡарау менән күҙ ҡамаша ине. Күҙ яуын алып торған күлдәк кейеп йөрөй торған Буранбикәнең өҫтөндә ҡыптыр бүрек, аяҡта еҙ дағалы сәхтиән итек түгел. Эсе йылытылған ҙур сарыҡ. Башында — ҙур ҡолаҡсын.

Уға сәйерһенеп ҡарап-ҡарап алдылар. Ләкин матур кейем ниңә кәрәк уға? Батыр ир-ҡыҙ, яу ҡыҙы бит ул.

Өкө йөнө менән һөйкөмлө, тиҙәр ҙә, былбыл өнө менән ҡәҙерле. Тәүге һүҙҙәре үк!

Бик йылы ҡаршы алдылар. Ул үҙе, башына һис иғтибар итмәй, ат өҫтөнән осоп тигәндәй төштө, хужабикәләр уны ҡул осона тиерлек тотоп алды.

— Беҙҙең батыр килен, яугир Буранбикә!

Өлкәне уны ҡосаҡланы.

— Батыр килен һең, эйе, кем, Буранбикә... Ә бына заманы яман... Яу сабыу һинең яҙмышмы?

— Ниңә, йәнкәйе яуға киткән бисә өйҙә ятырмы? — Ғәҙәтенсә һорау менән яуап бирә.

— Ятабыҙ бит.

— Хәүеф ҙур, тим...

— Ил ҡыуанысы минеке булғанда, ил хәүефе минеке булмаймы?

Башҡаса йәлләп торманылар. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары өсөн яу кейеме ят түгел, яуҙа ҡатнашыу яҙыҡ түгел.

Үҙен – бер өйгә, егеттәрен икенсе өйгә алып керҙеләр. Аттар утлыҡҡа бәйләнде, дәстәрхан әҙерләнде.

— Килен, хәлдәрең ҡалай? Беҙгә берәмтекләп ишеттер. Күргәнеңдең ҡыҙығын да, ауырын да.

— Һеләүһен ҡайҙа? Хәбәре бармы?

Аңланылар.

— Эйе, эйе... ул...

Күптән булған да киткән. Күптән, уның һис туктауһыҙ йәйләүҙән йәйләүгә, ауылдарға, заводтарға барып, халайыҡ араһында, ябай саруаһын да, ил-көндөң яҡшыларын да, урыҫын, сыуашын да, татарын-мишәрен дә йыйып, яу яғына Петр Салис батша хөрмәтенә өгөт-нәсихәт һөйләп йөрөүен, шунда күп-күп ир-егеттәрҙе үҙ яғына күндереп, команда-команда итеп оҙатыуын беләләр. Кешеләр ҙә оҙата, аҙыҡ-түлек тә, һоло-маҙар ҙа. Ҡаршы булһа, караттар менән алышып, үҙенә юл ярыуҙан да тайшанмай.

Төрлөһө булды, әле лә яугирҙар тубы таралды, батшаны ялған тиҙәр, ҡара батша тиҙәр, муллалар, дәғи ул, тип бәддоға уҡыйҙар.

Кинйә абыҙ, Һеләүһен мулла һаман яу яҡлы, һәр ерҙә өгөт әйтә, уның өгөтө тағы ла күберәк кәрәктер, эше артыҡтыр.

Тик әле ҡайҙа һуң?!

Бында ла Өфө яғында граф Зарубин отряды ҡыйратылыуын, үҙенең Табында тотолоуын ишеткәндәр, унда Михельсон тигән дәү әфисәр хаҡында һөйләйҙәр. Зарубин янындағы башҡорттарҙың баш атаманы Ҡасҡын Һамаров та иҫән ҡалған, башҡорттарын эйәртеп үтеп киткән, имеш. Теге әфисәр әйтә, имеш, ҡайтығыҙ ҙа баш һалығыҙ, ярлыҡаш ҡағыҙы бирелә, ти, имеш. Ҡасҡын барып баш һалған, тиҙәр.

Бер аҡһаҡал. Кинйәнең быуайының өлкән улы кәңәш бирә.

— Килен, тим, һорайым әле, әллә һин дә түрәләргә баш һалырға бараһыңмы, тим.

— И, ҡайным, бисә кеше берҙән-бер хәләленә баш эйә икәнен белмәйһеңме?

— Беләм, беләм уныһын. Яҙыҡтарығыҙға ярлыҡаш һорау – әүәл-әүәлдән килгән йола.

— Юҡ, ҡайным. Беҙҙең бер төрлө яҙыҡтарыбыҙ, хилаф эштәребеҙ юҡ.

— Аптырап әйтәм. Һеҙҙе йәлләйем. Ана бит, Ырымбурҙы баҫҡан дәү янарал, кем әле ул?

— Галисинмы?

— Эйе, эйе... Бында Өфө юлына бер капитанды – Рылеевты ебәргән, Стәрлетамаҡ, Табын, Бөгөлсән тирәһен айҡай, ти. Баш һалмағанды үҙ ҡылысынан үткәрә, тиҙәр.

— Минең дә ҡылысым бар! — тине килен. — Бөркөттәрем батыр. Мин Өфөгә саҡлы китәм. Һеләүһенемде табам. Бәләгә төшөп ятмаһын. Ҡотҡарырмын!

Уға өлкәндәр ҡарап-ҡарап алды. Һоҡландылар ҙа, йәлләнеләр ҙә. Туҡтар тимә. Ләкин яу улай уҡ дыуамал булыуҙарҙы яратмай. Уға ауылға ҡайтырға, бындай ваҡытта йорт-илде бағауыллы, Айым ҡәйнәһен һаҡлаулы тотоу ҙа бик изге эш, тинеләр, ә Һеләүһенде...

— Йөҙ кешене атҡа атландырырбыҙ, яраҡландырырбыҙ. Табыр.

— Эйе, эйе... Аймылыш йөрөмәгеҙ. Өйөңдә ултыр. Абай бул. Бында көт уны.

***

...Һеләүһен өйгә лә һуғылмаған. Буранбикә шунда көттө, сапҡын егеттәре төрлө яҡта йөрөп-йөрөп ҡайтты.

Уның ҡайтыуына Айымдың йөҙөнә шатлыҡ төҫө ҡунған һымаҡ булды. Ләкин күпкә түгел. Шатлыҡ ваҡытымы? Ире әллә ҡайҙа, улының булып китеүенә бик күптән.

Һораша, ҡайғырыша. Үҙе киленен йыуатҡан була.

— Йөҙөңә һағыш һарыһы төшөп ҡуйыр, үтә бойоҡма...

— Иркәген күрергә мең зар булған бисәнең хәсрәте бөтөрмө?

Йорт-ил былай имен-аман. Ҡөҫәпҡол, Кинйәнән ҡурҡыпмы, һүҙендә торған, һис зыян-зәүрәт килтермәгән. Арлы-бирле йоғонмаһын өсөн бағауыл тотҡан.

Буранбикә үҙенсә көттө. Айым үҙенсә. Шул шунан арынмаҫ. Ирен көтә, улын көтә. Әлиәһе бер хәсрәт. Уны Инйәр буйына күсергәндәр. Изге ниәттән түгел,

бағый башҡорт ярпыһы, тиҙәр, ҡыҫалар. Үҙенә ер биреп, аҙ-маҙ мал биреп күсергәндәр икән. Ҡоҙалар килмәй, кейәү тигәне ҡайтмай. Бер һан юҡ. Ҡайғы ауыр. Ләкин донъяның үҙ заңы, үҙ ғәме бар.

Айым бөтә йортто, ауылды ҡарай.

Аҫылбикә ағын онотмай. Хәлен белгеләй. Ситтән булһа ла көс-ҡеүәт. Йоғоноп ҡараһындар. Бөтә мырҙалар юрматыһы ябырылып, ярҙамға килеп етер. Әле лә Буранбикәне оҙата килделәр.

Улар өгөтләй. Әле лә:

— Элек тә әйттек. Бөгөн дә әйтәм, яу заманы хәтәр. Был зауыдтар яны, оло юл өҫтө. Ҡазбулатта тынысыраҡ. Бергә торабыҙ. Әйҙә, киттекме?

— Юҡ, эш көрсөккә етмәгән бит әле.

— Ҡуйсы, улай тимә. Юрағанға юш килеп ҡуйыр.

— Ни зыяны бар. Унда күсәһең, унан ҡайтаһың. Башҡорт борон-борондан күсеп-ҡунып йәшәгән.

— Етеүе лә бар.

— Бик етһә...

Бер ваҡыт етер... Яуҙар еңелер, һөрөп ебәрерҙәр, Һәләүек алып ҡайтыр. Шунда төйәкләнерҙәр.

Юҡ, Айым ҡубынманы. Йорт-ере, мал-тыуар, иренең ата-баба нигеҙе. Ул ҡәйнәһе юлын ҡыуырға тейеш. Батырша яуында Аҫылбикә ташлап китмәне. Айымды тау араһына оҙатып, шунда ҡалды, шунда...

Ай, изге йән мәрхүм. Ул көндө күрергә яҙмаһын.

Ул тырышты. Өйҙә сүкер-сүкер килеп бейә ағытты, май ҡайнатты, ебәрҙе. Эркет әсетте, ҡорот һарҡытты, уларҙы йомар-йомар яһап, ылашта ыҫланы.

***

Өсмө-дүртме көн үтте. Киске тамаҡҡа ашап ултырғанда, Һеләүһен ҡайтып төштө. Ҡулында һөңгө, яурынына уҡ тулы һаҙағын арҡкан... Ул да сәйер, үҙе лә сәйерһенә, шатлыҡ та, шом да.

Һөңгөһөн ҡуйҙы, һаҙағын һалды, ҡамсыһын Буранбикәгә һондо. Әсәһен килеп ҡосаҡланы, унан кәләшен күкрәгенә ҡыҫты.

Нағасыһында[1] һүҙҙәрендә тороп, эҙләткәндәр, юлына төшөп, хәбәр юлыҡтырғандар.

— Имен ҡайтҡас...

— Бөтәбеҙ ҙә имен, шәһидтәребеҙ ҙә бар.

Тоғро юлдаштары Әбеш менән Төмтөк, Бағай менән Тайсура ла Мырым. Айыт та үҙ кешеләре менән унан ҡалмай.

Ләкин әлегә уларының үҙ төйәктәре бар.

— Имен.

— Һаман өгөт әйтеп йөрөнөңмө, балам?

— Әле бик кәрәк. Батшаға ла, атайыма ла кәрәк.

— Ҡурҡыныс бит.

— Түгел... Үҙеңә әйткәйнем бер ваҡыт: ниңә мин үлемһеҙ булманым. Һеҙгә ярты ғүмеремде бирермен, тигәс, кәрәкһә ошо ғүмеренде лә бирәһең, тигәйнең. Атайыма ярҙам кәрәк.

Юл хәлдәрен һөйләне. Яманһары аманаты хаҡында әйткәс:

— Яманһары яманымы? — тип көләмһөрәне.

— Эйе.

— Кәрәген күрер, Хоҙай ҡушһа...

Буранбикә Ырымбур янындағы хәлдән башҡаһын белмәй ине. Ни бары Вознесен, Воскресен заводы менән хәбәрҙәш булһын, тигән. Яҡындағыһына барып ҡайтты. Хәбәр юҡ, ә Вознесен алыҫ. Шулай ҙа барып ҡайтыу кәрәк.

---

[1] *Нағасы — әсәй үҫкән йорт, ауыл.*

Тағы юл. Тағы Әбештәр, Төмтөктәр. Тағы Айыт төркөм саҡырып килтерҙе.

Кешеләр көндө уларға. Ҡайһы берәүҙәр дала бүре өйөрөнөң ҡорто[1] булып йөрөй, тиҙәр.

Буранбикә ҡалды.

— Әсәйемде ҡара, йортто бағауыллы тот.

Әйтмәһә лә белә. Теләк теләй.

— И тәңрем, иҫән-һау ғына йөрөй күрһен. Һөңгөһө һынмаһын. Атҡанда уғы яҙлыҡмаһын.

Әсә лә хуш-аяҡ батаһы бирҙе. Ул да теләк теләй. Ҡәйнә менән килендең һүҙҙәре бергә ҡушылды. Күҙҙәре һәр ваҡыт үткер булһын, аяҡтары талыҡмаһын, уҡ атҡанда ҡулы ҡалтырамаһын, уғы тайшаймаһын... Һүҙҙәр бергә әйтелә, ирендәр бергә ҡымырлай, күҙ нурҙары бер нөктәгә — һеләүһенгә төбәлгән, йәштәре бер ыңғай тәгәрәй...

Юл ауыр ине. Шулай ҙа йөрөрлөк. Егеттәр Нөгөш буйлап үрләнеләр ҙә Ағиҙелгә табан арҡаға артылдылар. Иҙелде кисеп, Вознесенскиға барҙылар.

Был заводтың хужаһы Карл Ефимович фон Сиверс ине. Барон булды, граф булды. Ул үҙе ағаһы янында Ревелдә торҙо (хәҙерге Таллинн)... Килеп тә йөрөмәне, әле — ҡаҙна заводы. Баш күтәрҙеләр.

Әле лә көтәләр...

Ләкин батша ла, Кинйә лә юҡ. Петров торған йорт, знакум... Кинйәнән хәбәр: улым килһә, Алпарҙы ҡыуып етһен, Ҡор яланына.

Кире киттеләр.

***

Кинйә киләсәк хаҡында уйлана: бер заман Аббас хәлиф заманында шоғайҙарҙың (шиит) башы Джафар үҙенең өлкән улы Исмаилға, шарап ярата тип, Персия тәхетен вариҫ итмәгәс, улы үҙенең яҡлылары менән янъял күтәрә. Тауҙарға китәләр, шахталарға. Байҙарға ҡаршы көрәшә, уны ярлылар яҡлай.

Ләкин был яҡшы тип өмөт итеү оҙаҡҡа бармай.

Яҡшы эш тә тиҫкәре китеүе бар. Көткәнде бирмәй, уға ҡара уйлы яман кешеләр эйәрһә, насарға китә.

Әле Пугачев ярандарын көтә. Иван Творогов, Чумаков, Иҙеркәй, Кинйә лә көтә. Уларһыҙ булмай. Ләкин яҡшығамы? Шуныһы икелерәк кеүек һиҙелеп-һиҙелеп ҡала бит.

Бер тапҡыр Ырымбур янында тотоп бирергә иттеләр. Ә Ташлыла далаға табан тарттылар. Бик абай булыу кәрәк, һиҙгер, аң булыу фарыз.

8

Әле лә оло юлдан барырлыҡ түгел. Тауҙар аралап, урман яғалап барырға тура килер. Бәлки, йә Нөгөш, йә Үрек буйлап үрләргә.

Заводҡа батша үҙе килде.

Вознесенский заводында эшләүсе мастеровойҙар, крәҫтиәндәр. Яу башында уҡ ҡуҙғалғайнылар. Туптар, дары ҡулға төштө. Көҙ көнө бер отряд килеү менән заводты алдылар. Приказчик, шахмейстер үлтерелде. Мастер Соколов[2] заводҡа начальник итеп ҡуйылды. Пугачев уға яҫауыл чины бирҙе. Ул ысын батша, ти. Завод документтарын яндырҙы. 170 кешене Ырымбурға ебәрҙе. Пугачев әле хәтерләй: шуларҙың 30-лабын атаман Давыдовҡа биреп ебәрҙе. Береһен атаман Бердала уҡ үҙенә секретарь итте (Яков Калугинды).

Әле шунда туҡтанылар. Соколов шунда. Ҡурҡыбыраҡ йәшәй ине. Кинйәнең хәбәрсеһе шуға юлыға. Ул әйтә, ары киттеләр, ти. Кинйәнең улы ла килгән, ләкин ул ҡайҙа китеүен әйтмәгән. Мәсетле ауылында әйткән. Йәнләнеп китте, халыҡ яҡшы ҡаршы алды.

---

[1] *Ҡорт — вожак (бүре ҡорто — матерая волчица).*

[2] *Соколов — Вознесен заводының берггершворены (горный офицер).*

Һый. Эске. Пугачев эсертмәне.

Хәбәр: Грязнов Силәбенән киткән. Туманов еңелгән. Силәбе тағы Деколонг ҡулында.

Пугачев уйы: заводтарға. Һорашты. Преображен, Кухтур (Ҡотҡор), Әүжән, Белорет. Юл хаҡында. Юл өҙөгө. Кинйәнең электән самалауынса ла, ул яҡҡа әле юл юҡ.

Пугачев, Кинйәнең кәңәшенсә, ҡайҙа юл тотоуын асыҡ әйтмәй. Ярамай. Бер урынға төпләнәһе бар, нығынаһы.

— Ошонда килерҙәр. Көтһөндәр. Әмер ебәрермен, — ти.

Ташлынан киткән саҡта Кинйәгә юлды билдәләп, 4 апрелдә (иҫке стиль менән) Вознесенский заводына барғас, ҡайҙа китергә, тигәйне. Юл — Әүжәнгә, Иҙел башына...

Тик нисек? Заводтан заводҡа.

Ағиҙел буйлап үрләп, Ҡана-Никольскийға, Воскресендан ни бары утыҙ саҡрым. Унан Урман-Йылайырҙа Преображен заводы бар. Кухтур заводы, Әүжән, Белорет...

Яҙғы юл өҙәреме. Ауыр. Туп-тура Әүжәнгә? Был юл да ауыр. Воскресендан юл яҡшыраҡ, әммә урау — 100 саҡрым... Булһын — урау булһа ла, юл булһын... Ә юлда — караттар.

Шуның өсөн тупланып, хәл алырға. Боронғолар һәл тигәндәр. Бер йылға үҙәнен Һәлләүек тигәндәр.

Әле ул Ҡор яланы. Бында ла борон шундай урын. Әле лә шулай булһын.

Бында — үҙҙәренең төйәге. Атаһының солоҡтары. Яуҙар заманында мал-тыуарҙарҙы шунда күсерәләр ине. Бер ваҡыт ҡатыны Айым да, бөтә бала-сағаны тейәп, шунда барҙы.

Алпар китте, улы ла бында килеп, шул яҡҡа киткән. Әҙерләрҙәр. Уның уйынса бара...

Улының Вознесенда булып китеүен белгәс, елкәнән ярты йөк төштө һымаҡ. Тимәк, имен-амандар, өйҙә лә, килене лә...

Ырғыҙ буйынан үттеләр. Унда Ҡара кеше тауы (хәҙер Пугачев тауы) ҡалды. Кинйә уңға ҡайырылып-ҡайырылып ҡараны.

— Унда ни бар?

— Атай ҡәбере.

Ләкин туҡтап, ҡөрьән уҡырлыҡ та ваҡыт юҡ.

Мәсетле (хәҙер Ҡотан) ауылында Ағиҙел аша сыҡтылар. Бында уларға ярҙам иттеләр. Бер аҙы ҡушылды. Юл ыңғай байтаҡ ҡушылдылар.

Тауҙар ашаһынан Нөгөш буйына тартылдылар.

Юл ауыр. Йонсотҡан. Кинйә Пугачевҡа ҡарап-ҡарап ала. Бирешмәй. Йоҡо, ял юҡ, эйәр өҫтөндә. Шулай ҙа һиҙҙермәй.

Ҡор яланына барғанда тауҙар араһы. Ҡояш.

Яланғас ағас ботаҡтары араһынан селтәр аша үткәндәй, нурҙары сағыу, йылы нурҙар уйнай.

Тик яҙғы көн – ярты аҡыл. Көн тиҙ боҙола. Әле генә нурға күҙ сағыла ине, бына болот килеп сыҡты ла, ҡар яуа, ел ҡуҙғалды, епшек ҡар йә боҙлауыҡ.

Тау битләүҙәре асылған. Пар.

Ул ваҡыт иҫәбе. Хәҙер уны иҫке стиль тип, яңыһы буйынса 27 апрель булыр. Был яҙ инде. Тик тау араһы. Урман араһында ҡар. Уяларҙа тәрән әле, шарлауыҡтар, йылғалар. Ҡар кәүшәк. Юлдар күпсегән. Бата. Аттар ҡорһаҡҡа тиклем бата. Кешегә лә ауыр. Ә сыҡтымы, ҡара ергә баҫа.

Сәскә ата тал көсөктәре, уҫаҡ сәскәһе. Ҡар-һыу, сәскә, умырзая...

Ҡоштар. Ҡор тубы, көртлөк, ҡурпысыҡ.

Донъяһын оноткандай, Пугачев һөйләнеп бара.

— Ана, йәшел үлән сыҡҡан. Цветень айы шул, — тине тау итәгенән үткәндә. — Элек шулай тигәндәр, хәҙер генә апрель. Был айҙа бит тәүге үлән, сәскәләр ҙә күренә, ағастарҙа бөрөләр асыла. Тупраҡта орлоҡ морон төртә.

— Ә беҙҙә был айҙы сәүер тиҙәр. Тәбиғәт уяна, — тине Кинйә, унын күңелен күтәрәм тигәндәй.

Пугачев башҡаса былай ғәмһеҙләнмәне. Юҡ, батша кешегә былай килешмәй, тигәндер. Әйтерһең, унын бүтән уйы юҡ. Үҙ өҫтөнә батша исемен дә алмаған, карателдәр ҙә эҙәрләп килмәй тиерһең.

Кинйә лә имән бөрөләрен ҡарар, тал көсөктәрен тотор ине. Ана бит, ҡайын башынан барҡылдаҡтар сыр-сыр килеп осто, шыршы итәктәре аҫтында — ҡуян балалары, өҫкө ботаҡтарҙа — тейендәр. Бер бөркөт осто шыҡыйып.

Батша тынды. Йонсоғандыр.

Асылда ул уйлана ине.

"Яҙмыш тағы бер Ырғыҙ буйына килтереп еткерҙе", — тине ул. Бында ла бар икән. Батша исемен алыу уйы тәү башлап ана тегендәге Ырғыҙ һыуы буйында килгәйне. Унда старовер игумены Филарет менән һөйләшкәндә бит ошо уйын нығытты. Аҡыллы ҡарт ине. Заманында Мәскәүҙең икенсе гилдиялы купецы. Әле лә Мәскәүҙә, Питерҙа, Ҡазанда дуҫтары күп. Таяныстары ҙур. Үҙе лә бөтә Волга буйы раскольниктарынын башлығы, күҙ терәп торғаны, алтын бағанаһы. Әле ни хәлдә икән? Уйландымы, элекке дуҫтары иҫкә төшә. Шундай бит, оло юл өҫтөндәге өмәт хужаһы Степан Оболяев.[1] Ерема тауығы... Былтыр ҙа, унан элгәргеһендә лә тәү башлап уға төштө. Шул Яйыҡ казактары менән осраштырҙы, шунда уны батша итеп ҡабул иттеләр. Ә ул әле ҡайҙа һун?

Һуңғы көндәрҙә, бер-бер артлы еңелеүгә дусар булып, элекке дуҫтарын юғалта башлағас, шулай үҙ-үҙенә һорау сәпәү ғәҙәтенә инеп китте.

Сөнки шулар ярҙам итеп күтәрҙе. Ихтимал, шулар, тик белгәне ҡаптырыр, батырыр.

Ул ҡасыр ине. Элек булмаһа, Ташлынан һуң. Йә... Юҡ, уны казактар ҙа, башҡорттар ҙа ебәрмәй. Баш йырыр әмәле юҡ. Ирекле түгел.

Ә кем һуң ярҙам итер? Кемгә таянырға? Ярандары бар ҙа ул. Төрлөһө төрлө төбәктә.

Ә бында? Бында ошо Кинйә!

Башҡалар ҡабып йоторға торғанда, уға Хоҙай ярҙам бирә генә күрһен.

Ул ҡапыл уянып киткәндәй:

— Кинзей!

— Тыңлайым, батшам! Әллә ауырмы?

Емельян йылмайғандай итте.

— Һинә лә, минә лә ауыр... һин янында ике йөҙ кеше тот. Минең гвардион яҡшы. Ауыр саҡта шулар эште еңеләйтер.

— Баш өҫтө, батша. Улар һәр ваҡыт әҙер булыр.

Әле лә бик һаҡ. Бигерәк тә алғынсы шәйләк, күс баштарын иҫкәртте. Артсы башҡа ла алмаш ебәрҙе.

Пугачев еңел бара. Шаяртып ала. Бара-бара ат алмаштырҙылар. Кинйә үҙенең дә тарпан тоҡомон етәккә алды. Дон аттарына күнеккән Пугачев шунда ғына иғтибар иткәндәй ҡараны. Бәләкәс.

— Һинең был тайың да килә бит әле.

— Килә ул.

— Ҡара әле, мундаһы.

— Унын өҫтөндә еңел.

---

[1] Оболяев Степан Максимович – пехотный һалдат, Таллы өмәтенең хужаһы.

Башҡорт аттары шәп. Һәйбәт йөҙә, тауға етеҙ менеп, тау-ташта яҡшы йөрөй.

Үҙҙәре түҙә. Батша ла түҙемле икән. Ҡапыл килеп сыға ҡалһалар. Унан юлды ла дөрөҫөн һайларға кәрәк.

Икенсе көндө Айыт ҡаршыланы. Һеләүһен ебәргән. Аҙыҡ-түлек, һоло ла бар. Юлды әйтте лә кире китте. Төштән һуң Төмтөк улы үҙе килде.

Еп осо ялғанған кеүек. Барып тупланыр урын бар. Әҙер.

Кинйә лә, Пугачев та шат.

Һеләүһен уларға Зарубиндың нисек ҡыйралыуын, Ҡасҡын Һамаровтың ҡайтыуын әйтте. Былар хаҡында төплө хәбәр ишеткәндәре юҡ ине әле.

Торнов, Ҡаранай Дим буйында бүленеп ҡалған.

— Ҡасҡынға ҡушылырҙар. Указ ебәрербеҙ.

— Ул баш һалған.

— Ай, Торновҡа ярҙам кәрәгер.

— Унда — Ҡыҙрас. Әле яңыраҡ Торновты, походный атаман Гавриил Давыдовты тотҡан.

— Ләғин! Депутат тип тормағандар бит әле. Бөгөлмәгә оҙатҡан.

— Кем ул? Ҡара Табын старшинаһы. Ул гел шулай. Ҡәнзәфәрҙе, Ҡаранайҙы тоторға вәғәҙә иткән. Ауылдан ауылға ил ҡыҙырып йөрөй.

— Хәбәрҙәрең күп.

— Шатлыҡлыһы юҡ, — ти Һеләүһен.

Байҙар шулай... Тәүге еңелеүҙе күреп, баш һалырға әҙер. Ул ғына түгел, карателдәр яғына сыға. Байҙар аумаҡай шул.

Кинйә үҙе лә ярлы түгел. Көрәш. Ирек. Выждан.

— Ә Салауат? — тип һораны Пугачев.

— Эйе, Юлай дуҫ?

Һеләүһенден улар хаҡында хәбәре аҙ ине.

— Михельсон шунда йүнәлгән.

— Ауыр буласаҡ уларға. Тиҙерәк бергә ҡушылырға кәрәк тә бит, — ти Пугачев.

— Эйе.

— Беҙҙең зауыдҡа Ивандан кеше килгән. Шул яҡтан бит, – тине Һеләүһен.

— Шунан?

— Степан знакумды күрә алманым. Барҙым — өйҙә юҡ ине.

Былары ҡыҙыҡтыра ине.

Шунан бер арала Әлибай хаҡында һорашты: ҡайтҡан, Юлдаш та йортта. Яманһары тип һорағас, Һеләүһен ҡул һелтәне лә көлдө, унан тешен ҡыҫты, төкөрҙө. Ни бар? Алай туплап эҙгә төшөргә маташыуына эсе күмһейме? Уныһы бер хәл икән, ә бына Буранбикәне аманат итергә тырышыуы... Атаһы ла асыуланды.

Тауҙан туғайға төштөләр. Нөгөштә кисеү әтмәлләнгән. Ҡор яланы. Бер нисә ыҙма. Ергә соҡоп яһалған. Арлы-бирле кәртә-ҡура. Йән бар. Мал-тыуар. Аттар бәйләүле. Төтөн сыға.

Алпар килеп сыҡты. Айыт кешеләре йөрөп ята. Икеһенең дә ҡасҡындары яуҙа... Хәҙер ҡасҡын тип әйтмәҫлек. Үҙҙәре ул саҡтарын онотҡандар. Һындарын турайтып, хужа һымаҡ йөрөйҙәр. Ҡайһыһының ҡулында һөңгө, ҡайһыһы яурынына уҡ-һаҙаҡ аҫҡан. Дан егеттәр, тип уйланы Кинйә.

Батша һарайы ла әҙерләгәндәр. Ниңә һарай булмаһын, ти? Үҙенә күрә балаҫтар, келәмдәр йәйелгән. Түр башына ҡатлап мендәр һалынған.

Уны Һеләүһен алып керҙе.

— Бына, батша, һиңә тәхет кенә юҡ бында... Хәҙергә мине дежур-майорың ит.

Үҙе һаҡҡа баҫты.

— Бул, әйҙә, йәнһаҡсым. Хеҙмәт ит. Онотмам, ҙурлармын!

***

Мәрзиә аласыҡта. Ҡаҙан янында. Ҙур түгел, тегеләйерәк ҙурыһы ла бар. Мәрзиә Кинйә абыҙға, батшаға бишбармаҡ яраштыра. Ул бешерә. Батшаға?.. Ышанырлыҡмы был? Төш кеүек. Был ни ғәйеш? Батша янына килдеме, юҡ, батша үҙе уның янына килде. Улы ла ҙур түрә кеүек йөрөй, яуҙар артылып ҡайтты.

Ул аңына килә алмай. Ғүмер буйы хитланып йәшәп, бында ҡыуғы булып йәшәүҙән ҡотолоп, әҙерәк тыныс торһа ла, хәсрәт... Шунан биттәре сорошоп бөткән. Улы өсөн... Ҡайтты. Еңелде, тиҙәр, унһыҙ ҙа булмайҙыр, күрәһең. Килене... Уның өсөн дә бер ҡыуана, бер ҡайғыра... Бәй, уның килене лә баһа...

Аҡҡалпаҡ уны йоҡоһонан уятып, берсә татлы, берсә шикле төшөнән уятып өндәште.

— Ҡәйнәм!

— Ә-ә-ә?

— Бишбармаҡ әҙер буламы?

— Ә-ә... Бишбармаҡмы?.. Әҙер, әҙер, килен.

Үҙе төш күрә, ҡулы эштә икән дә баһа. Бөтәһен таярлаған.

Ә бына был ҡасан ғына... ҡыҙ бала. Һис ҡаушамай, һис ҡурҡмай. Сапсаҡ хәрәкәт менән эшен атҡара, әле тегеләй, әле былай йүгергеләп. Кинйә абыҙ менән йөҙгә-йөҙ осрашҡанда ғына боҙауҙап ҡыҙарып, башын түбән эйә.

Табаҡҡа бишбармаҡ һоҫтолар. Алпар уны тотоп батша һарайына алып инде. Аҡҡалпаҡ туҫтаҡтар килтерҙе. Ҡунағына күрә ҡалаҡтар, сәмерле аяҡтар[1] ҡуйырға ла онотманы.

Егеттәр бөтәһен табып килтергән бит әле.

Былай әҙерләй алыуҙарына Кинйә бик ҡәнәғәт ине.

Өйҙәрен, тирмәләрен йыйыштырыу – бер хәл, аҙыҡ-түлеген дә тапҡандар.

Әле бөтә сиреүҙе һыйларлыҡ тана-торпа һуйғандар.

Алпарҙың әсәһе тик ятмаған. Айымбикә ҡушыуы буйынса ҡаҙыһын тултырған, итен ҡаҡлаған, майын ирекән. Эркет әсетеп, ҡорот һарҡытҡан, ылашҡа йәйеп ыҫлағандар. Көн-төн ағытмай һауып, һаба-һаба ҡымыҙы ла бешеп еткән. Әҙер торһон тип, турһыҡтарҙың тегеүселәре лә бар.

Аштан һуң батша менән Кинйә һауаға сыҡты. Һалҡынайта башланы. Аяҡ аҫтары тундыра. Һауа саф. Рәхәт. Һа-ай, шулай ғына йәшәйһе лә бит.

Кинйә, ҡул йәйеп, үҙ ерҙәрен күрһәтте.

— Ер-һыуҙарыбыҙ оҡшаймы, батша?

— В-о-о, йәмле! Но маҡтама... Маҡтағанды батша тартып ала.

— Һиңә йәл булмаҫ. Үҙебеҙ — һинең ҡолдарың. Бына тауҙарыбыҙ, бына йылғаларыбыҙ. Һыуҙары көмөш кеүек. Бөркөтө юҡмы, ыласыны юҡмы? Йүгерек төлкөләр ҙә, байпаҡларға айыуҙар ҙа күп. Әммә ирек юҡ. Ҡышларлыҡ урында. Тынyслап ҡышлай алмайбыҙ, йәйен йәйләргә ирек юҡ.

— Ул яуызлыҡ бөтөр. Булдырмам.

Батша йоҡларға ятты. Йоҡлаһын, йоҡлаймы-юҡмы, үҙе белә. Ә Кинйә йоҡламай. Ул һаҡларға тейеш. Хәҙер өс көн, өс төн. Үҙе генә булһа, ат өҫтөндә лә йоҡлар ине. Әле юҡ. Юлда ла, әле лә ул яуап бирә.

Бағауылдар бар. Ләкин тикшерә. Ҡараңғы төшкән, ул йөрөй. Бер урында быш-быш һөйләшәләр.

— Әй, батша йоҡлаймы икән?

— Йоҡлай инде.

— Ә Кинйә атаман Айымбикә янына ҡайтып килмәй.

— Ҡуйсы әле, һөйләшмәң! Ау һалғанда һөйләшһәң, ау алғанда тартыш була, тигәндәр. Беҙгә лә ярамай.

Кинйә боролоп үтеп китте.

*(Дауамы бар.)*

---

[1]*Аяҡ — ағастан эшләнгән ҡымыҙ эсә торған һауыт.*

*Публицистика*

# МИЛЛИ МӘҒАРИФ:
# ТӨП БУРЫС – ШӘХЕС ТӘРБИӘЛӘҮ

Ҡайһы ғына осорҙо алһаң да, мәғариф йәмғиәт алдында торған көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһе булып ҡала. Кешелектең бөгөнгөһө лә, киләсәге лә аң-белем тарата-ҡуллана алыуҙы ваҡытында, юғары кимәлдә хәл итеүгә туранан-тура бәйле. Аҡыл эйәләренең образлы билдәләүенсә, һуғышта һәр саҡ уҡытыусы еңеп сыға. Йәшәйештең һәр өлкә-йүнәлешендә өҙлөкһөҙ үҫеш-үҙгәреш бара икән, бындай ҙа ысынбарлыҡҡа махсус әҙерлекһеҙ яраҡлашыу мөмкинме?! Олораҡтарҙың: "Хәҙер балалар бөтәһен дә белеп тыуа... Хәҙергеләрҙең белмәгәне юҡ ул",– тиеүендә үк оло мәғәнә бар. "Һин элек тыуһаң, ул белеп тыуған",– тигән әйтемдең нығыныуы ла осраҡлы түгел. Эйе, бер быуат элгәре йәшәгән 2-3 йәшлек сабыйҙар менән хәҙергеләрен сағыштырып ҡарай алһаҡ, улар араһында айырманың шаҡтай ҙур булыуын күрер инек. Ә инде мәктәпкәсә йәштәге, мәктәп уҡыусыларының аң-белем даирәһенең киңәйә барыуы геометрик прогрессияны хәтерләтә. Был йәмғиәттең дөйөм мәҙәни кимәле, уҡытыусының ныҡышмалы хеҙмәтенә тығыҙ бәйле. Әгәр ҙә япондар кешелек цивилизацияһы үҫешен етәкләп бара икән, бының серен, иң элек, уҡыу-уҡытыуҙы үҙенсәлекле культҡа әйләндереүҙән эҙләргә кәрәк.

БДПУ профессоры Миҙхәт Саҙрыевтың "Ағиҙел"дең быйылғы 3-сө һанында баҫылған "Мәғариф философияһы" мәҡәләһе проблема ҡуйыуы менән әһәмиәтле. Автор аныҡ ҡына мәғариф философияһының булмауына баҫым яһай. Рәсәй мәғарифында һуңғы 20—30 йылда күҙәтелгән торғонлоҡтоң төп сәбәбе, ти ул, мәғарифтың "философик нигеҙҙәре билдәләнмәүҙә". Философик дөйөмләштереүҙәр өсөн теге йәки был өлкәгә ҡағылышлы фәндәрҙең үҫешкән булыуы – тәү шарт, әлеге осраҡта – педагогика, психология, социология, дөйөм тарих һәм ошо фәндәрҙең тарихы. Сөнки теге йәки был өлкәләге теорияның үҫеше уның тарихи юлы менән тығыҙ үрелештә бара. Н. Г. Чернышевскийҙың шундай фекере менән килешмәй мөмкин түгел: "Предметтың тарихынан тыш, уның теорияһы ла юҡ". Күренеүенсә, тикшеренеү объектын үҫеш-үҙгәрештә ҡарамайынса, йәғни ниндәйҙер дәрәжәлә уның тарихи юлын барламайынса тороп, уның бөгөнгө хәлен тәғәйен асыҡлау, иртәгәһенә йәки киләсәгенә бәйле фараз ҡылыуҙар бик сетерекле.

Башҡорттар араһына ислам диненең үтеп инә башлауы халыҡ араһында аң-белем таратыуҙы, уҡый-яҙа белеүҙе йәнләндереп ебәрә. Ҡөрьәндә "Уҡы!" һүҙе бер нисә тапҡыр тәкрарланыуы ла тәрән мәғәнәгә эйә. Тормош ихтыяждары мәғариф усаҡтары ойоштороу, уҡыу-уҡытыуҙы тәртипкә һалыу кәрәклегенә инандыра. XIV быуат урталарына инде шаҡтай нығынған ислам дине уҡыу-уҡытыуҙың йөкмәткеһенә лә, таратыу формаларына ла ныҡлы йоғонто яһай.

Атаҡлы Ҡарғалы, Стәрлебаш, Балыҡлыкүл мәҙрәсәләре лә юҡтан бар булмаған, йәғни уларға тиклем дә халыҡтың алдынғы ҡарашлы зыялылары йәш быуынға заман кимәлендәге белем биреүҙе хәстәрләгән. Мәҙрәсәләр Урта Азиялағыларҙың күсермәһе кеүек булып дини йөкмәтке менән һуғарылһа ла, халыҡты ағартыу эшендә ғәйәт ҙур роль уйнаған. Уларҙың йылдам арта барыуы ла йәмғиәттә мәктәп-мәҙрәсәләрҙең популярлашыуы, зарурлығы тураһында һөйләй.

Әгәр ҙә беҙҙең төбәктә 1865 йылда ошондай 600 уҡыу йорто иҫәпләнеп, уларҙа 20 мең самаһы бала уҡыһа, 1894 йылда иһә Өфө губернаһында 34177 уҡыусыһы булған 780 уҡыу йорто, Ырымбур биләмәһендә 41739 уҡыусыға 986 белем усағы эшләй. М. В. Лоссиевский билдәләүенсә, был осорҙа мәҙрәсәһе йә мәктәбе булмаған бер генә ауылды ла табыуы ҡыйын. Әлбиттә, хикмәт заманға ярашлы белем усаҡтарының күбәйеүендә генә лә түгел, ә уҡыу-уҡытыу сифатына етди талаптар ҡуйылыуында.

Был өлкәлә тәүге аҙымдар башланғыс мәктәптәрҙә уҡырға өйрәтеүҙе хәрефтәргә бәйләп кенә түгел, ә өндәргә иғтибар итеп алып барыуға ҡайтып ҡала. Йәҙитселәр (“йәҙит” ғәрәпсәнән — яңылыҡ) дини фанатизмды ҡаты тәнҡитләй, дин дәрестәрен донъяуи фәндәр менән алмаштырыу, фән, мәҙәниәт үҫешенә ынтылыу, матбуғат эштәрен юлға һалыу талаптарын ҡуя. Өфөлә “Ғосмания” мәҙрәсәһе (1890 йыл), Ырымбурҙа “Хөсәйениә” (XX быуат башы) эштә яңыса уҡыу-уҡытыу алымдарын ҡуллана. Ҡәҙимге мәктәптәрҙә балалар 3-4 йылда уҡырға-яҙырға өйрәнһә, йәҙитселек рухы менән һуғарылғандарында уға бер йылда өйрәтәләр.

Мәғрифәтселектә “уҡыу йылы” төшөнсәһе ныҡына, синыф-дәрес ғәмәленә күселә. Бер үк мәлдә Рәсәй солғанышы, башҡа халыҡтар мәҙәниәтен үҙләштереү ихтыяжы яңынан-яңы талаптар ҡуйыуы ла тәбиғи. Был инде иң элек урыҫ телен белеү кәрәклеген аңлата, шуға ла XVIII быуаттың 20-се йылдарынан уҡ урындағы халыҡ вәкилдәре өсөн урыҫ телле уҡыу йорттары асыла. Бынан тыш, Рәсәйҙең башҡа белем биреү йорттарында уҡыған башҡорт балаларының һаны ла арта. Башҡорт эшҡыуарҙары, махсус һөнәри белем ихтыяжын аңлап, был йүнәлештә лә маҡсатҡа ярашлы аҙымдар яһай. 1773 йылда Рәсәйҙә беренсе Тау училищеһын асыусы башҡорт булыуы ла (Исмәғил Тасимов) дөйөм белемгә ынтылыш тураһында ғына түгел, ә тормош талаптарына ярашлы белем кәрәклеген аңлау тураһында ла һөйләй.

Төбәктә асылған махсус уҡыу йорттарында ла башҡорт балаларына белем алыу мөмкинлеге киңәйә. 1825 йылда Ырымбурҙа асылған Неплюев хәрби училищеһында, мәҫәлән, башҡорт балаларының уҡыуы, уҡытыусылар араһында башҡорт зыялыларының да булыуы — мәғрифәтселек кимәлен билдәләгән күренеш. Мәғрифәтселек идеяларын күтәргән, халыҡты ағартыуға ныҡлы бирелгән, мәҙрәсәләр эшендә туранан-тура ҡатнашҡан алдынғы ҡарашлы шәхестәр күбәйә. Стәрлебаш мәҙрәсәһендә Биктимеровтар тоҡомо, суфый Шәмсетдин Зәки, “Ғосмания”ла тәрән белемле Еникеев, Тереғоловтар, “Ғәлиә”лә арыу-талыу белмәгән Зыя Камали, “Рәсүлиә”лә Зәйнулла ишан, “Хөсәйениә”лә Ризаитдин бин Фәхретдин һәм, әлбиттә, образлы телле, ҡанатлы һүҙле, үҙ исеме менән үк яҡтылыҡҡа әйҙәгән бөйөк Аҡмулла.

Даулы-ғәрәсәтле XX быуатҡа башҡорттар ошондай әҙерлек менән аяҡ баҫа. 1905—1907 йылдар инҡилабы йәмғиәттең артабанғы үҫешенә көслө йоғонто яһай. 1915 йылда хөкүмәт тарафынан урыҫ булмаған балалар өсөн асылған уҡыу йорттарының һаны, мәктәп, мәҙрәсәләрҙән тыш, 826-ға етә. Башланғыс синыф уҡыусыларының өстән бер өлөшө тиерлек урта йә махсус һөнәри белемгә эйә була. 1917 йылдың октябре ҡапма-ҡаршылыҡлы эҙемтәләргә килтереүенә ҡарамаҫтан, Рәсәйҙә генә түгел, ә бөтә донъяла боролош башы икәнлеге күптәрҙә шик тыуҙырмай. 15—20 йылда наҙанлыҡты бөтөрөү буйынса тиңдәшһеҙ эш башҡарылыуын да инҡар итерлек түгел. Шулай ҙа уҡый-яҙа белеүҙе кириллицаға ғына бәйләп ҡарау мәсьәләне бер яҡлы аңлауҙы күрһәтер ине. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөгөнгә тиклем мәҙәни кимәлде урыҫ телен үҙләштереүгә ҡайтарып ҡалдырыу ғәмәле йәшәп килә. Һүҙ ҙә юҡ, урыҫ теле, урыҫ мәҙәниәте бик күп милләттәргә, халыҡтарға донъя мәҙәниәтенә сығарған күпер ролен үтәне, үтәй. Әммә “күпер”ҙең маҡсатын, мөмкинлектәрен хаттин аштырырға ла, культҡа әйләндерергә лә ярамай. Төп хикмәт — күпер аша сығып, үҙеңде башҡаларға танытып, башҡалар менән типәтиң аңлашып, аралашып, үҙ бәҫеңде төшөрмәй, үҙең булып йәшәй алыуҙа.

Башҡорт милли мәғарифының уңыштары ла, юғалтыуҙары ла етерлек. Иң мөһиме – башҡортлоғоборҙо һаҡлап ҡала алдыҡ, милли мәғарифты нығытырға, артабан үҫтерергә тырыштыҡ. Әммә бөгөнгө баҙар шарттарында, бөтә Ер шарын глобаллаштереү сәйәсәте солғап алғанда, милли үҙлегебеҙҙе һаҡлап ҡала алыу еңелдән булмаясаҡ. Мәғариф тураһында ҡабул ителгән закондарға, программаларға ("2009 – 2013 йылдарҙа республикала мәғарифты үҫтереү" һ.б.), хөкүмәт ҡарарҙарына нигеҙләнеп бер нисә йүнәлештә эҙмә-эҙлекле эш алып барыу – милләт киләсәге өсөн иң көнүҙәк мәсьәлә. Һөҙөмтәләрҙең маҡсаттар аныҡлығын талап итеүе, моғайын, бер кемдә лә шик тыуҙырмайҙыр. Милли мәғариф философияһының булыу-булмауы тап ошонда үҙен һиҙҙерәсәк. Төптәнерәк уйлағанда, ғөмүмән, милли философияның тейешенсә эшкәртелмәүе асыҡлана. Беҙ белә тора йә аңһыҙ рәүештә дөйөм Рәсәй сәйәсәте, философияһы, Рәсәй менталитеты сиктәрендә йәшәргә, шул талаптарға яраҡлашырға күнеккәнбеҙ. Теләйбеҙме-юҡмы, был сикләнгән шарттарҙы, мөмкинлектәрҙе һәр саҡ иҫтә тоторға, иҫәпкә алырға тура киләсәк. Беҙгә энциклопедик ҡоласлы, киң танылған эшмәкәр, атаҡлы шәхесебеҙ Ризаитдин Фәхретдиновтың XX быуат башында уҡ әйтелгән фекерен иҫтән сығарырға ярамай. Алдынғы ҡәүемдәрҙән күп нәмәгә өйрәнгән хәлдә лә, уларҙың тәжрибәһенә ентекле, һаҡ ҡарарға кәңәш итә ғалим. "Европа мәҙәниәтенең файҙаһы һәм зыяны" тигән мәҡәләһендә ("Шура", 1917, № 13), мәҫәлән, ул былай ти: мосолмандар европалылар менән аралашыуҙан бик ҙур файҙа, бер үк мәлдә, әхлаҡи тотанаҡһыҙлыҡ рәүешендә, бик ҙур зыян күрҙе... Көнбайыш илдәрендәге кире күренештәрҙең төп сәбәбе – матди байлыҡты рухи ҡиммәттәрҙән өҫтөн ҡуйыуҙа булыуын Ризаитдин Фәхретдинов ышандырырлыҡ итеп дәлилләй. Күренеүенсә, милли мәғарифта тарихи үҫеште, нығынған ыңғай традицияларҙы, донъялағы, Рәсәйҙәге, республикалағы бөгөнгө хәлде фәнни яҡтан баһалап иҫәпкә алғанда ғына тейешле һөҙөмтәләргә ирешеп буласаҡ.

Бөгөн милли мәғариф ниндәй мөмкинлектәргә эйә һуң? Уҙған уҡыу йылында Башҡортостандың 2615 дөйөм белем биреү мәктәбендә 64343 педагог эшләне (шул иҫәптән 52123 уҡытыусы, 7889 директор, уларҙың урынбаҫарҙары һ.б.), 458528 бала уҡыны. Бер синыфҡа уртаса 13 бала тура килә. (Бөгөнгө норматив буйынса финанслау иһә бер синыфта 25 уҡыусы булыуын талап итә. Ә белгестәрҙең тәҡдиме буйынса, синыфта 14 бала булғанда ғына яҡшы белем бирергә мөмкин. Йәнә бер принципиаль күренеште иҫәпкә алайыҡ: беҙҙең ауыл шарттарында 8 бала уҡыған синыфты ҡәнәғәтләнерлек, нормаға ярашлы тип законлаштыра алғанда, милли мәғарифта иң мөһим мәсьәләләрҙе хәл итә алыр инек. Ни өсөн ? Сөнки беҙҙең ауыл мәктәптәрендә синыфтарҙа бөгөн уртаса 8 бала уҡый. Әгәр ҙә беҙ бер синыфта уҡыусылар һанын нормативҡа (25-кә) еткереү маҡсатын ҡуйһаҡ, ни килеп сығасаҡ?!)

Уҡытыусыларҙың уртаса йәше – 41 тирәһе (был йүнәлештә күрһәткестең, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, үҫә барыуы борсоуға һала), уларҙың 76 проценты – юғары белемле, әҙерлекле. Тикшеренеүҙәр раҫлауынса, юғары уҡыу йортонда алған белем ғәмәлдә дүрт-биш йылда юҡҡа сыға. Тимәк, уны тулыландырып, яңыртып тороу мотлаҡ. "Учительская газета"ның тәүге һаны сыҡҡанда билдәле дәүләт эшмәкәре, СССР-ҙың тәүге мәғариф халыҡ комиссары А. В. Луначарский былай тигән: "Уҡытыусы, үҙе лә уҡымаһа, үҫеүҙән, уҡытыусы булыуҙан туҡтай".

Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институты, үҙ исеменә ярашлы, республикала уҡыу-уҡытыу мәсьәләләренә ҡағылышлы күп яҡлы эш башҡара. Бөтә яңылыҡтар артынан эйәреүе ҡыйын, ҡатмарлы, шуға күрә институт тәү сиратта тап ошо йәһәттән ярҙам күрһәтергә бурыслы. Уҡытыусы абруйын хөрмәт итеү, тейешле юғарылыҡҡа күтәреү мөһим. "Уҡытыусыларҙың уҡытыусыһы" тигән дәрәжә, әлбиттә, иҫ киткес ҙур яуаплылыҡ өҫтәй. Алдынғы ҡарашлы, башҡаларҙы үҙ артынан эйәртә алған уҡытыусы ҡайҙа ғына булһа ла интеллигентлы, мәҙәни шәхес булып ҡала. Мәҫәлән, ауыл уҡытыусыһы колхоз рәйесенә, агрономға, зоотехниктарға ҡарағанда үҙенең кешелеклелек сифаттары менән айырылып тора. Шуға күрәлер ҙә, ниндәй заманда йәшәүебеҙгә ҡарамаҫтан, ауыл уҡытыусыһын

төрлө йәмәғәт эштәренә ылыҡтырырға тырышалар. Уҡытыусы бындай эштәрҙән, әлбиттә, ситтә ҡалмай. Был юғарылыҡ, бәлки, барса уҡытыусыларға ла хас түгелдер, әммә беҙ уға ынтылырға бурыслыбыҙ.

Элеккеләрҙән айырмалы, хәҙерге уҡытыусы үҙе генә мәғлүмәт сығанағы булып тормай, сөнки уҡыусылар радио-телевидение, гәзит-журналдар, интернет аша ла байтаҡ мәғлүмәт ала. Ә бит совет мәктәбе ойоша башлаған осорҙа яңы матбуғат ҡына түгел, ғөмүмән, уҡыу әсбаптары ла булмаған, күп осраҡта белем һәм мәғлүмәт биреүсе берҙән-бер сығанаҡ уҡытыусы һаналған. Бөгөнгө уҡытыусы иһә, вазифаһына ярашлы, һәммә яҡтан да алдынғы ҡарашлы булырға бурыслы. Бының өсөн уға хөкүмәтебеҙ, йәмғиәтебеҙ бар мөмкинлектәрҙе булдырырға тейеш тә бит. Заман уҡытыусыһы үҙенең эш хаҡына рухи талаптарын ҡәнәғәтләндерә аламы һуң? Интернет системаһын ҡулланамы, мөмкинлеге, ваҡыты бармы? Бер эш хаҡы менән генә йәшәй алмағанға, ауыл уҡытыусыһы, мәҫәлән, шәхси хужалыҡ менән дә шөғөлләнергә мәжбүр. Ҡала уҡытыусыһы иһә, ундай мөмкинлеге булмағас, асҡа ҡаҡланмаҫ өсөн дәрестәр һанын арттыра. Аҙнаһына 36 сәғәт уҡытҡан кеше (Өфө уҡытыусыларының, мәҫәлән, 16 проценты) ҡасан үҙе өҫтөндә эшләһен дә нисек белемен камиллаштырһын? Аҡса артынан ҡыуып, дәрес сифаты ла юғала, уҡытыусы роботҡа әүерелә башлай. Һәр уҡыусыға шәхсән мөнәсәбәт талабы юғалыу арҡаһында уҡыусылар ҙа үҙ нәүбәтендә дәрес алыусы машинаға әйләнә. Проблемалар йылдар буйына туплана...

Әйтәйек, ир уҡытыусылар эш хаҡы күберәк булған урынға китергә мәжбүр, сөнки ғаиләһен аҫрау улар елкәһендә. Мәктәптә, шулай итеп, энтузиастар ғына тороп ҡала. Аҙ ғына эш хаҡына ла уҡытырға ризалар икән, тимәк, уларҙы мәктәптә тоторлоҡ юғары ҡиммәттәр бар. Ләкин, мәктәптә энтузиастар ғына эшләй, тип уйларға ярамай, был күренештең кире яҡтары ла аҙ түгел. Әйтәйек, ни өсөн ул аҙ ғына эш хаҡына ла эшләргә мәжбүр? Тимәк, башҡа эшкә урынлаша алмай. Был күренеш белгес юғары уҡыу йортон тамамлағансы уҡ башлана. Педагог һөнәрен, йәшерен-батырыны юҡ, башҡа урынға инә алмаған абитуриенттар һайлай. Ләкин уҡытыусы дипломы алғандарҙың бөтәһе лә мәктәпкә бармай. Тимәк, мәктәптә энтузиастар һәм аптырағандың көнөнән уҡытырға мәжбүр ителгәндәр эшләй. Мәғариф өлкәһендә күпселекте ҡатын-ҡыҙҙар тәшкил итеүе лә ошоға бәйле.

Уҡытыуҙың социаль проблемалары тәрбиәне лә урап үтмәй. Балалар баҡсаһынан юғары уҡыу йорттарына тиклем уҡытыу-тәрбиә эше менән ғәмәлдә ҡатын-ҡыҙ шөғөлләнә. Ғаиләлә лә балаларҙы тәрбиәләү күпселектә әсәйҙәр елкәһендә. Йомшаҡ холоҡло, ихтыярһыҙ, ялҡау ир-егеттәр ошо мөхиттә ярала ла инде. Әлбиттә, ҡатын-ҡыҙҙарҙың власть даирәләрендә яуаплы вазифа биләүе насар хәл түгел, ләкин һәр күренеш гармониялы булыуы, камиллығы менән яҡшы. Беҙҙе илаһи көс шулай яратҡан: бер яҡта – ир-егет, икенсеһендә ҡатын-ҡыҙ тигеҙ нисбәттә булһа ғына, бер бөтөн хасил була.

Эш хаҡын хеҙмәтенә ҡарап билдәләү зарур. Ошоға тиклем ул уҡытыусының сәғәттәр һанынан, эш стажынан сығып ҡына билдәләнде. Дөрөҫ, хәҙер эш сифатына ла иғтибар ителә, әммә сифатлы уҡытыуҙы билдәләү алымдарын асыҡлайһы бар. Әйтәйек, уҡыусыларҙың юғары уҡыу йорттарына күпләп инеүе менән билдәләйек, ти. Бәлки, улар ата-әсәләренең мөмкинлегенән файҙаланып инәләр? Тимәк, был ғына әле төп күрһәткес була алмай. Кешене юғары белеменә генә ҡарап баһалау ҙа дөрөҫ булмаҫ. Өҫтөнлөклө “Мәғариф” милли проектында уҡытыусының эш хаҡын уның эш сифатына ҡарап билдәләүгә ынтылыш булыуы киләсәккә өмөт уята.

Уҡытыу – ижади эш. Һәр дәресте ижад өлгөһө тип ҡарағанда ғына, уҡытыусы ижадсы буларaҡ сығыш яһай ала. Ижади ҡарашлы уҡытыусы уҡыусыларын да ижади процесҡа йәлеп итә. Улар һәр асышты бергәләп таба, һәр яңылыҡты бергә ҡабул итә. Уҡытыусы әҙер күрһәтмәләр, әҙер инструкциялар буйынса ғына эшләй алмай. Мәҫәлән, бер дәрестәге материалды бөтөн кластарҙа ла бер ҡалыпҡа һалып биреү мөмкин түгел. Әйтәйек, уҡыусыларҙың өҫтәмә һорау биреүе

лә ихтимал. Дәрес темаһын киңәйтеп, уҡытыусы һорауҙарға яуап бирергә мәжбүр буласаҡ. “Дәрес планында ҡаралмаған”,– тип ҡотолорға тырыша икән, класс алдында абруйы юғаласаҡ. Ижади эшләгән уҡытыусылар, ғәҙәттә, сикләнеп ҡалмай, уҡыусыларҙың күңелен белеме менән генә түгел, ихласлығы, эскерһеҙлеге менән дә яулай. Әлбиттә, мәктәп һәр яңылыҡҡа, төрлө һынап ҡарауҙарға асыҡ булырға, тәжрибә үткәрергә бурыслы, әммә быны менән артыҡ мауығырға ярамай: уҡытыусы шәхесе күҙ уңынан ысҡынмаһын. Ҡыҫҡаһы, ҡағыҙ эшенә әүрәп, йәнле эш туҡтамаһын. Тормош даими үҫеш-үҙгәрештә, беҙ уға яраҡлашырға, уға яуап бирерлек кимәлдә һаҡларға тейешбеҙ. Йәмғиәт үҫеше мәғариф үҫеше менән туранан-тура бәйле.

Башҡорт телен генә түгел, ғөмүмән туған телдәрҙе өйрәнеү мәсьәләһе 90-сы йылдарҙа ныҡлы иғтибарға алынды. “Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында”ғы закон (1999 й.) башҡорт телен дәүләт теле итеп иғлан иткәндән һуң мәктәптәрҙә ул дәүләт теле булараҡ өйрәнелә башланы. Әммә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеү БР-ҙың “Мәғариф тураһында” законының 7-се статьяһына үҙгәрештәр индергәндән һуң ғына тулыһынса законлаштырылды. Шулай итеп, 2006 – 2007 уҡыу йылынан дәүләт теле булараҡ башҡорт теле бөтә уҡыу йорттарында мәжбүри уҡытыла. Ләкин, эштәр яйлы, бөтәһе лә беҙ уйлағанса ғына бара, тип уйларға ярамай. Ата-әсәләр, бала урыҫ телен ныҡлы белмәһә, юғары уҡыу йортона инә алмай, тигән фекерҙә. Ә икенсе милләт кешеләрендә быны бөтөнләй кәрәкмәгән өҫтәлмә мәшәкәт тип иҫәпләү таралған. Был, төптән уйламай, бер проблеманы икенсеһе иҫәбенә хәл итергә маташыуҙан килә. Дөрөҫ, бөгөнгө балаларға көсөргәнешле шарттарҙа формалашырға тура килә, уның көндәлек эш режимы ифрат тығыҙ. Әммә беҙ был ауырлыҡтарҙы туған тел, мәҙәниәт, ғөмүмән, гуманитар предметтар иҫәбенә еңеләйтергә тырышабыҙ икән, ҙур хата ебәрәбеҙ. Сөнки милләтте берләштереү-ойоштороуҙа әҙәбиәт, мәҙәниәт кеүек дәрестәрҙең әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Үҙ халҡының лайыҡлы вәкилен туған тел аша ғына тәрбиәләргә мөмкин. Ошо ерҙә йәшәйһең икән, уны бар иткән кешеләрҙең тарихын да, мәҙәниәтен дә, телен дә белергә бурыслыһың. Кешегә ҡуйылған төп талаптарҙың береһе был. Әгәр ҙә унда ошондай ҡараш тәрбиәләнмәгән, титуллы милләткә хөрмәт юҡ икән, был кеше үҙе өсөн күп нәмәнән мәхрүм.

Башҡорт ғаиләләрендә телебеҙҙе, тарихыбыҙҙы белмәгән балалар үҫә икән, нисек итеп улар башҡа халыҡтарҙы хөрмәт итә алһын? Иң башта кеше үҙен, үҙенең әсәһен хөрмәт итергә бурыслы. Ә инде телде хөрмәт итмәү шул уҡ әсәйеңде хөрмәт итмәүгә тиң, сөнки ул – әсәң теле. Был – әсә һөтө менән инергә тейешле булған күренештәрҙең береһе. Шуға ла ҡайһы бер ата-әсәләр, бала иң элек урыҫ телен белергә тейеш, ә аҙаҡ, үҙе кәрәк тип тапһа, туған телен өйрәнер әле, тип хаталана. Хәҙер шундай быуын барлыҡҡа килде: улар үҙ милләтенән айырылған, ләкин башҡа милләткә лә ҡушылып етмәгән. Улар ике яр араһында әйләнә-тулғана, тормош юлынан аға, ләкин ҡәнәғәтләнеү юҡлығы нимәгә бәйле булыуын үҙҙәре лә аңламай, сөнки ҡан, ген менән бирелә торған бәйләнеш өҙөлгән. Әлбиттә, закон ҡабул ителгән икән, уны үтәргә кәрәк. Ләкин уны төбөнә төшөп аңламай тороп, закондың үтәлешенә яуап биргән кешеләр (дәүләт, хөкүмәт эшмәкәрҙәре, урындағы уҡытыусылар) уны исем өсөн генә үтәйәсәк. Әйтәйек, сәғәт бүленгән икән, кемгәлер шул сәғәттәрҙе үткәреп ебәреү генә мөһим. Уның йөкмәткеһе, һөҙөмтәһе тураһында улар артыҡ уйланып тормай. Былдай дәрестәрҙең файҙаһы, әлбиттә, юҡ дәрәжәһендә. Тыштан ҡарағанда, нимәлер эшләнгән һымаҡ, әммә йөкмәткеһе самалы. Үҙенең тарихын, телен, мәҙәниәтен яҡшы белгән кешенең йәшәүе мәғәнәле. Төрлө яҡтан алып ҡарағанда ла, ул үҙенең ата-бабалары менән ниндәй бәйләнештә тороуын белә. Үҙенең шул нәҫелдең дауамы икәнен һиҙә, шуға ла унда яуаплылыҡ тойғоһо көслө.

Юғары аң тарафынан һәр бер милләткә ниндәйҙер тәғәйенләнеш, бурыс ҡуйыла. Бына ошоно үтәүгә ул үҙ өлөшөн индерәсәк, сөнки унда яуаплылыҡ тойғоһо

көслө. Былдай кеше ниндәйҙер мауыҡтырғыс уйындарға ла, эскелеккә лә, наркоманияға ла бирелмәйәсәк, сөнки уның үҙе, яҡындары, халҡы алдында ҡуйылған бурысы бар. Беҙ мәктәптә бына ошоға өлгәшеүҙе төп бурыс итеп ҡуйырға тейешбеҙ. Дәреслектәр, уҡытыусылар етешмәй, тибеҙ. Әлбиттә, бөтә проблемаларҙы ла бер юлы хәл итеп булмай. Ләкин ошо мәсьәләгә комплекслы ҡараш мәсьәләләрҙең ҡатмарлылығын, күплеген, нимәне иң тәүҙә хәл итеү зарурлығын асыҡларға ярҙам итә. Шул проблемаларҙың берәүһен тап бөгөн хәл итергә кәрәк, юҡһа беҙ ҡараңғыла һәрмәнеп эшләгән кеүекбеҙ. Нимәгә барып төртөләбеҙ – шуны яйға һалырға тырышабыҙ, проблемаларҙың мөһимлеге, үҙ-ара бәйләнеше тураһында уйлап еткермәйбеҙ. Һәйбәт дәреслектәр, яҡшы уҡытыусылар, заманса йыһазландырылған кабинет, интернетҡа тоташтырылған компьютерҙар булыуы мөмкин, ләкин уҡыусы телде өйрәнеүҙең маҡсатын белмәй икән, ул сифатлы белем ала алмаясаҡ. Белем алыуҙың маҡсаттары үҙен аҡларлыҡ, үҙенә ылыҡтырырлыҡ булырға тейеш. Мәҫәлән, ҡыҙыҡлы осрашыуҙар... Тормошта үҙ юлын, үҙ урынын тапҡан кешеләр менән асыҡтан-асыҡ һөйләшеүҙәр... Бөгөнгө тормош менән тығыҙ бәйләнеш... Хеҙмәт күнекмәләре алыу һ.б., һ.б. Шул осраҡта ғына сәбәп була, белемдең ни өсөн кәрәклеге асыҡлана, алға оло маҡсат ҡуйыла. Ысынлап та, кеше төрлө яҡлап асылһа ғына, тулы ҡанлы тормош менән йәшәй аласаҡ. Белемле кеше бер ваҡытта ла юғалып ҡалмай. Ғаиләһенә генә түгел, йәмғиәт өсөн, хатта кешелек өсөн файҙалы буласаҡ.

Титуллы милләт телен дәүләт теле итеп иғлан иткәндән һуң Өфөлә бөгөн йыш ҡына башҡортса иркен аралашыуҙың шаһиты булырға тура килә. Әммә әле хушһынырға иртәрәк, сөнки ҡалалағы башҡорт ғаиләләренең күпселегендә балалар урыҫ һәм башҡорт телдәрен ҡушып, бутап һөйләшә. Был да йәнле һөйләш даирәһен ҡыҫырыҡлай. Бала, бәлки, ысынлап та урыҫ телендә үҙ фекерҙәрен тулыраҡ әйтә алалыр. Фекерен башҡортса сағылдыра белмәү уның фекерләй белмәүе тураһында һөйләмәй бит, туған телендә һүҙ байлығының етмәүе генә уны ҡауша-та. Дөйөм алғанда, бала башҡорт телен дә яҡшы беләлер, диктанттарҙы ла хатаһыҙ яҙалыр, әммә йәнле аралашыу етмәгәнлектән, ул ҡатнаш телдә һөйләшергә мәжбүр. Был, иң тәү сиратта, халыҡ ижады әҫәрҙәрен яҡшылап белмәүҙән килә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡатнаш телдә һөйләшеүҙе башҡорт теле уҡытыусылары араһында ла осратырға мөмкин. Хатта "башҡорт гимназияһы" исемен йөрөткән уҡыу йорттарында ла йәнле һөйләште тик дәрестә генә ишетәһең. Ғәжәп, әммә башҡортса һөйләшмәгән башҡорт мәктәбе директорҙары ла бар. "Дәүләт ойошмаларында эшләүселәр дәүләт телдәрен белергә бурыслы" тигән закон XX быуаттың 20-се йылдарында уҡ ҡабул ителеп, дәүләт телдәрен белгәндәргә өҫтәлмә эш хаҡы ла түләнгән. Матди яҡтан ҡыҙыҡһындырыу арҡаһында башҡорт телен ҡулланыу даирәһе киңәйә башлаған. Ләкин 1937 йылдағы Конституциянан һуң ул бөтөнләй юҡҡа сыға. Ыңғай яҡҡа үҙгәрештәр бөгөн дә бик һүлпән бара. Мәҫәлән, БР Мәғариф министрлығында ла республика дәүләт телен белмәгән белгестәр бар. Ысынлап та, телдең ҡулланыу даирәһен киңәйтергә тырышабыҙ икән, планлы, ныҡышмалы эш алып барырға кәрәк. Закон ҡабул ителеү – бер, уны ғәмәлләштереү өсөн ҡарарҙар ҡабул итеү, шарттар булдырыу – икенсе эш.

Теге йәки был мәсьәләләрҙе хәл иткәндә һәр халыҡтың үҙенсәлекле юлы булыуын күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай. Милләт алдында торған проблемаларҙы башҡаларҙың мәнфәғәте иҫәбенә түгел, ә үҙеңдең эске мөмкинлектәреңде эшкә егеп хәл итеү маҡсатҡа ярашлы.

Төп бурыс – туған телен, халҡы тарихын яҡшы белгән, уның менән ғорурланған, тормошта тәбиғи һәләтенә ярашлы үҙ урынын таба алырлыҡ шәхес тәрбиәләү. Милләттең киләсәге милли мәғариф торошо менән тығыҙ бәйле. Тимәк, мәғарифҡа ҡағылышлы проблемаларҙың тормош талап иткәнсә, үҙ мәлендә сиселеүе мотлаҡ.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ,**
**Башҡортостан мәғарифты**
**үҫтереү институты ректоры.**

# ҺУҢҒЫ БАШҠОРТ ХАНЫ *йәки* АҠАЙ – ҠАРАҺАҠАЛ ЯУЫНА ЯҢЫ ҠАРАШ

*Үҙ тарихын белмәгән, тарихи хәтерен,*
*милли үҙаңын юғалтҡан халыҡтың киләсәге юҡ.*

Башҡорт дәүләтселеге, хандары хаҡында бер яҙып сыҡҡайным инде: “Ҡан тамырҙарыбыҙ ҡайҙан? Ҡасандан?” (“Ағиҙел”, 2007, № 10). Төрлө сығанаҡтарға таянып, халҡыбыҙҙың, сама менән 4000 йыл элек, үҙ дәүләте булғанын, башҡорттарҙың бик борон, ә XVI быуатта түгел, үҙ аллы халыҡ булып ойошҡанын күрһәтергә тырышҡайным.

Баҡтиһәң, халҡыбыҙҙың дәүләтселеге төрлө тарихи дәүерҙәрҙә төрлө формала булып, шул иҫәптән IX-X быуаттарҙа көслө Хәзәр ҡағанаты составында ла, киң автономия хоҡуғына эйә булып йәшәгән. X быуат аҙағында – XI быуат башында Хәзәр ҡағанаты хәлһеҙләнеп, уғырҙарҙан да ҡотолғас, башҡорттар XIII быуат башына, йәғни татар-монгол илбаҫарҙары баҫып ингәнгә тиклем, үҙ аллы йәшәгән, илгә 300 йылдан ашыу башҡорт хандары идара иткән. Ошо дәүерҙә халҡыбыҙ үҙ байлығына, еренә хужа булып, тыныс көн күрә, көнкүрешен яҡшырта, мал-тыуарын ишәйтә, хәрби хәлен нығыта алған. Һөҙөмтәлә халҡыбыҙ артҡан, мәҙәниәте, айырыуса йыр-моң, ҡурай сәнғәте алға киткән, сәсәндәр, уҡымышлы кешеләр күп булып, милли кейем-һалым традициялары нығынған. Шулай булмаһа, халҡыбыҙ 1214—1240 йылдарҙа татар-монгол яуҙарына ҡаты ҡаршы тора алмаҫ та ине.

Буйһондоролған халыҡтарҙан һалым, яһаҡ йыйыуҙы еңеләйтеү өсөн, татар-монголдар уларҙың ерҙәрен даруғаларға бүлгән. “Даруға”– монгол һүҙе. Ул – бей, вәзир, баҫҡаҡ, сәркәтип кеүек вазифа, вазифалы кеше. Даруға урындағы идара башлығы, теге йәки был төбәктә хан вәкиле булған. Ул халыҡтан һалым һәм яһаҡ йыйған, башҡа йөкләмәләрҙең үтәлеше өсөн яуап биргән. Һуңынан даруға ханлыҡтың территориаль бүленеше, “өлкә” мәғәнәһендә ҡулланыла башлай. Урыҫ телендәге тарихи яҙмаларҙа, дәреслектәрҙә “даруға” “дорога”ға әйләнгән. Ҡайһы бер тарихсылар “даруға”ның төп мәғәнәһен белмәй, урыҫтың “дорога”һын башҡортса “юл” тип тәржемә итә: “Нуғай юлы”, “Себер юлы”...

Монголдар башҡорт ерҙәрен дүрт даруғаға (өлкәгә) бүлгән: Ҡазан, Уса (бәлки, “Юса”, “Юша”), Себер һәм Нуғай. Төньяҡ-көнбайыш, көнбайыш башҡорттар – Ҡазан, төньяҡ – Уса, үҙәк, көньяҡ-көнбайыш, көньяҡ-көнсығыш – Нуғай һәм төньяҡ-көнсығыш, көнсығыш башҡорттар Себер даруғаһына ҡараған. Үҙ сиратында даруғалар улыҫтарға бүленгән. XVIII быуат башында Ҡазан даруғаһы – 12, Нуғай – 20, Себер – 24, Уса даруғаһы дүрт улыҫтан тороп, был бүленеш XVIII быуат аҙағынаса һаҡлана.

Татар-монголдар хакимлыҡ иткән дәүерҙә лә халҡыбыҙҙың ниндәйҙер өлөшөнә Кесе хан дәрәжәһендәге башҡорт хандары етәкселек иткән. Шулар араһында Башҡортостан тарихында билдәле Байтүрә хан, Туғаш хан, Әсән хан бар.

Улар улыҫтарҙан һалым йыйған, Кесе урыҫ кенәздәре кеүек, бәлки, даруғалар һәм баҫҡаҡтар менән бергә йә үҙ аллы башҡорттарҙан яһаҡ йыйып тапшырған. Башҡа вазифалар, мәҫәлән, ҡоралды, атлы һәм аҙыҡ-түлек запастары булған башҡорт егеттәрен татар-монгол ғәскәренә әҙерләп оҙатыу ҙа улар ҡарамағында булған.

XV быуат урталарында Алтын Урҙа айырым ханлыҡтарға тарҡалғас, башҡорт ерҙәре Ҡазан, Нуғай, Себер ханлыҡтарына бүленеп, халыҡ ошо хәлдә XVI быуат уртаһына тиклем көн күрә. Әммә был дәүерҙә башҡорттарҙың өстән ике өлөшө хоҡуҡтары бик ныҡ сикләнгән үҙ хандары тарафынан идара ителгән. Мәскәү дәүләтенә ҡушылыр алдынан Көньяҡ һәм Үҙәк Башҡортостанда йәшәгән башҡорттарға Бусай хан, ә көнбайыштағыларына урындағы улыҫ башлығы кимәлендә Дауыт, Килек хандар идара иткән. Уларҙан тыш ошо осорҙа төрлө төбәктәр менән тағы биш башҡорт ханы хакимлыҡ итеүе билдәле. Күренекле тарихсы, дәүләт эшмәкәре Сәғит Мираҫ ошо хаҡта бына нимәләр яҙып ҡалдырған: “Русияға табиғ булған (буйһонған. – **Ә.Й.**) ваҡытта Йүрүҙән буйында Ураз хан, Дим менән Яйыҡ араһында Йәнебәк хан, Ҡара Иҙелдең Ағиҙелгә ҡойған тамағында Ҡара хан, Ырымбурҙан алты саҡрым Аҡтүбә тигән ерҙә Басман хан, Ағиҙел һәм Яйыҡ баштарында уның туғаны Шиғай хан, хәҙерге Өфө урынында Түрә һәм Юлғотло исемле хандар торалар ине”.

XVI быуаттың икенсе яртыһында йәшәгән нуғай хандары нәҫеленән булған Басман менән Түрәне иҫәпкә алмағанда, ҡалған бишәү – Кесе хан дәрәжәһендәге башҡорт хандары. Ләкин тарихи хеҙмәттәрҙә, дәреслектәрҙә уларҙың исемдәрен осратырға тура килмәне. Ҡыҙғаныс, яҙмыштары әле лә билдәһеҙ.

Бөгөн билдәле башҡорт хандарының исемлеген XVII быуат аҙағында – XVIII быуаттың тәүге яртыһында булып үткән башҡорт ихтилалдары, Урыҫ дәүләтенә ҡаршы ҡоралды күтәрелештәр ваҡытында килеп сыҡҡан башҡорт хандары дауам иткән. Һуңғы башҡорт ханының сығышы, ҡылған эштәре башҡорттарҙың Урыҫ дәүләтенә ҡушылыуы, 1735–1740 йылдарҙағы ихтилал менән тығыҙ бәйле.

Был күтәрелеш башҡорттарҙың Урыҫ дәүләтенә ҡушылғандан һуңғы ун икенсе ҡоралды ихтилалы була. Тимәк, ата-бабаларыбыҙ ябай ғына ҡоралы менән Рус дәүләтенә ҡаршы сама менән 15 йыл һайын баш күтәргән, регуляр ғәскәрҙән һәм яҙалау командалары тарафынан аяуһыҙ ҡырылған. Ихтилалдар барышында, уларҙы аяуһыҙ баҫтырғандан һуң, меңәрләгән башҡорт һәләк булған, язалап үлтерелгән, һөргөнгә һәм һалдатҡа оҙатылған. Меңәрләгән башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары, балалары ихтилал баҫтырыусыларға таратып бирелгән, ә күбеһе Рус дәүләтенең үҙәк губерналарына ҡоллоҡҡа оҙатылған, башҡорт ауылдары аяуһыҙ үртәлгән.

Урыҫ дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылғас, ни өсөн башҡорттар, еңелеүҙәрен белә тороп, уҡ-һаҙаҡ, һөңгө менән генә шулай йыш баш күтәргән һәм XVII быуат урталарында уҡ айырылырға ҡарар итеп, үҙ дәүләтен ҡороу өсөн аяуһыҙ көрәшкән? Хатта үҙ хандарын һайлаған, шул иҫәптән 1740 йылдың ғинуарында – һуңғы башҡорт ханын. Яуап ябай: Рус дәүләтенә 1557 йылда бөтә башҡорттар ҙа үҙ ирке менән ҡушылмаған. Был – тарихи факт. Халҡыбыҙҙың күпмелер өлөшө ҡотолғоһоҙ хәлгә ҡалып, ирекһеҙҙән, сараһыҙҙың көнөнән, XVI быуаттың икенсе яртыһынан XVII быуаттың беренсе яртыһына ҡәҙәр төрлө юл менән барып эләккән. Тимәк, башҡорттарҙың Рус дәүләтенә инеүе сама менән 100 йылға һуҙылған. Быныһы ла – тарихи факт.

1552 йылдың 2 октябрендә Иван Грозный 150 меңлек ғәскәр менән оҙайлы ҡамауҙа тотҡандан һуң Ҡазан ҡалаһын яулап алып, Ҡазан ханлығын тар-мар итә. Ошонан һуң Мәскәү дәүләтенә төньяҡ-көнсығыш, көнсығыш тарафтарға юл асыла. Заманына күрә күп һанлы, яҡшы ҡоралланған сиреүгә ҡаршы тора

алмаясағын аңлап, эргә-тирәлә йәшәгән халыҡтар Иван Грозныйҙың Мәскәү дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылырға саҡырыуына ризалаша. Беренселәрҙән булып удмурт, мари, аҙаҡ сыуаш һәм мордвалар. 1554—1560 йылдарҙа башҡорттарҙың бер өлөшө, иң элек көнбайыш, төньяҡ-көнбайыш ҡәбиләләр: байлар, юрмыйҙар, бүләрҙәр, ирәктеләр, йәнәйҙәр, гәрәләр, бәлки, ҡырғыҙҙар, йыландар, йәлдәктәр, ғәйнәләр Рус дәүләтенә инергә ризалыҡ белдереп, Ҡазанға үҙ бейҙәренән торған һәйәт (делегация – **Ә. Й.**) ебәрә. Ғәйнәләрҙең етәксеһе Айсыуаҡ бейҙән башҡаларҙың исеме әле лә билдәһеҙ. Фәндә, атап үткән ҡәбиләләрҙән һуң Ҡазанға меңдәрҙең һәм юрматыларҙың һәйәте барған, тигән фекер йөрөй. Ләкин бөйөк ғалимыбыҙ Әхмәтзәки Вәлидиҙең белдереүенсә, рус хакимлығын юрматылар 1554—1555 йылдарҙа түгел, ә 1649 йылда ғына ҡабул иткән. 1554—1555 йылдарҙа Ҡазанға бөрйәндәр, тамъяндар, ҡыпсаҡтар, үҫәргәндәр, түңгәүерҙәр барып, Мәскәү дәүләтенә ҡушылыу шарттары хаҡында Ҡазан воеводаһы кенәз П. Шуйский менән һөйләшеп килешкән. Һуңыраҡ Мәскәүҙән Рус дәүләтенә инеү шарттары яҙылған “Жалованная грамота” алып ҡайтҡандар. Ғөмүмән, тарих фәнендә Ҡазанға һәм Мәскәүгә 40-тан ашыу башҡорт ҡәбиләһенән һәм ырыуынан ни бары 22 илсенең барыуы һәм грамота алып ҡайтыуы билдәле.

Бынан Мәскәү дәүләтенә ҡушылған халыҡтарҙың Ҡазан татарҙары көнөнә ҡалырға теләмәүе асыҡ күренә. Ҡалған башҡорт ҡәбиләләре һәм ырыуҙары вәкилдәре Ҡазанға йәки Мәскәүгә барыуы тураһында бер ниндәй ҙә тарихи мәғлүмәт юҡ. Тик шуныһы билдәле: Себер даруғаһы башҡорттары, Әхмәтзәки Вәлидиҙең яҙыуынса, Рус дәүләте власын танымаған, уға буйһонмаған, яһаҡ та түләмәгән. Мәскәүгә башҡорт ҡәбиләләре араһында иң ҙуры һәм ҡеүәтлеһе булған Табын ҡәбиләһенән Ағиҙел буйында көн күргән Кәлсер-табын һәм Йомран-табын ырыуҙарының вәкиле, Майҡы бей нәҫеленән булған Күрпәс бей генә бара. Ҡара-табын, Барын-табын, Ҡыуаҡан, Һырҙы, Теләү, Күбәләктәр үҙ хандары һәм солтандарын, Себер ханын һәм солтанын ғына таный, 1665 йылға ҡәҙәр уларҙың етәкселегендә Себер ханлығын яҡлауҙа әүҙем ҡатнаша. Мәҫәлән, 1608 йылда Себер ханы Ғәли үҙ ғәскәре менән Өфөгә һөжүм яһай, ләкин ҡаланы яулап ала алмай. “Янындағы ғәскәре,– тип яҙа Әхмәтзәки Вәлиди,– Барын-табын ырыуынан ине”. Ғәли хан һәләк булғандан һуң, 1616 йылда Өфөнө Ишем хан яулап ала. Янындағы ғәскәре тик табын ырыуынан булған, тип раҫлай Әхмәтзәки Вәлиди. Урыҫтарҙың ғәскәри төркөмдәренә ҡаршы, Себер ханлығын яҡлап табындарҙан тыш, һалйоттар, һеңрәндәр, терһәктәр, ҡатайҙар, бәкәтәндәр һәм Урал арьяғында йәшәгән башҡа башҡорт ҡәбиләләре лә өҙлөкһөҙ һуғыша. Ете ырыуҙан торған иң боронғо, иң ҡөҙрәтле Әйле ҡәбиләһенең шәжәрәһендә Рус дәүләтенә ҡушылыу тураһында иҫкә алынмай. Тимәк, улар Ҡазанға ла, Мәскәүгә лә бармаған. Ләкин был турала дәреслектәрҙә, ғилми хеҙмәттәрҙә бер һүҙ ҙә юҡ. Бына ни өсөн Себер даруғаһы башҡорттары бөтә башҡорт ихтилалдарында, шул иҫәптән 1735 – 1740 йылдарҙағыһында ла актив ҡатнаша. Һуңғы башҡорт ханын да улар һайлай.

Иван Грозный тарафынан ҡул ҡуйылған Грамоталарҙа батша башҡорттарҙың үҙ ерҙәренә аҫабалыҡ хоҡуғын танып, улар ерендә ҡала, ҡәлғә, сиркәүҙәр төҙөмәҫкә, башҡорттарҙы икенсе дингә көсләмәҫкә, йәғни суҡындырмаҫҡа, урындағы хакимиәтте башҡорт бейҙәре һәм тархандары ҡулында ҡалдырырға, халыҡтың эске тормошона ҡыҫылмаҫҡа вәғәҙә биргән. Үҙ сиратында, башҡорт бейҙәре Рус дәүләтенә хәрби хеҙмәт итергә һәм яһаҡ түләргә ризалашҡан. Батшаға ышанып башҡорт бейҙәренең асылда алданғаны Иван Грозный тере саҡта уҡ асыҡлана. Башҡорт бейҙәренә биргән Грамоталарҙы инҡар итеп һәм башҡорт ерҙәрен дәүләттеке итеп һанап, Иван Грозный урыҫтарға башҡорт ерҙәрен һорауһыҙ тартып алып, ҡалалар, ҡәлғәләр, башҡа нығытмалар төҙөргә бойора.

Мәсәлән, 1557 йылда уҡ (ҡайһы бер сығанаҡтарҙа 1591 йылда – **Ә. Й.**) Ғәйнә башҡорттарының иң боронғо ауылы – Юса Уса ҡәлғәһенә әүерелә. 1574 йылда Иван Грозный әмере менән борон Ҡаратау, һуңынан Имән ҡала, Иҫке Өфө тип аталған урында яңы ҡәлғә барлыҡҡа килеп, 1586 йылда ҡала булып китә. 1584 йылда Йәнәй башҡорттары ерендә – Минзәлә, 1588 йылда Сарапул ҡәлғәләре ҡалҡып сыға. XVI быуаттың беренсе яртыһында көнбайыш башҡорттар ерендә Иҫке Шешмә, Яңы Шешмә, Аҡ Яр, Йырыҡлы, Биләр һ.б. ҡәлғәләр төҙөлә. Улар, бигерәк тә Минзәлә ҡәлғәһе, Башҡортостанды яулап алыу өсөн төп терәккә әйләнә. XVIII быуат башына Рус дәүләте Башҡортостанда 31 нығытма төҙөтә, ә 50-се йылдарға ҡәҙәр батша кешеләре тарафынан 145 ҡала, ҡәлғә һәм төрлө нығытма, шул иҫәптән 13 ҡала: Өфө, Минзәлә, Бөгөлмә, Бөрө, Быҙаулыҡ, Силәбе, Бәләбәй, Стәрлетамаҡ һ. б. ҡалҡып сыға. Ҡала һәм ҡәлғәләр тирәһендәге башҡорт ерҙәре дворяндарға, төрлө чиновник, офицер, һалдат, казак, драгун, сауҙагәр, ваҡ хеҙмәт кешеләренә, һөнәрмәндәргә, урыҫ һәм урыҫ булмаған крәҫтиәндәргә бүлеп бирелә.

XVII быуат аҙағында Рус дәүләте башҡорт ерендә тау заводтары төҙөргә тотона. Тәүге тимер иретеү заводы – 1682, икенсеһе 1697 йылда төҙөлә. XVII быуат башына 15 суйын ҡойоу һәм тимер эшкәртеү, баҡыр иретеү заводтары төҙөлһә, XVIII быуат аҙағында Башҡортостанда эшләгән заводтар 102-гә етә. Петр I ҡушыуы буйынса уларҙың күбеһе Себер даруғаһында була. Меңәрләгән башҡорт төрлө рудниктарҙан ошо заводтарға үҙ аты менән руда ташырға мәжбүр ителә, күмер әҙерләй. Был заводтар дәүләткә, хужаларына иҫ киткес ҙур байлыҡ килтергән. XVIII быуат аҙағында башҡорт ерендә төҙөлгән заводтар дәүләттә етештерелгән суйындың 42 процентын бирә. XVIII быуатта ғына башҡорт ерендә 86 млн. 383 мең 962 тонна таҙа баҡыр етештерелгән. Заводтар, унда эшләүселәрҙе ер менән тәьмин итеү өсөн батша хөкүмәте башҡорттарҙың 5,7 млн. дисәтинә ерен бик түбән хаҡҡа һатып алған. Был сама менән Башҡортостан биләмәләренең 16 проценты.

Ҡазан ханлығы ҡолағандан һуң яҡын ерҙәрҙән урыҫ, татар, мишәр, сыуаш, мордва, мари һ.б., артабан үҙәк губерналарҙан урыҫ крәҫтиәндәре Башҡортостанға күпләп ағыла. XVII быуат башында улар 117 мең булһа, быуат аҙағына иһә 332 меңдән ашып китә. Улар ҙа башҡорттарҙан тартып алынған ер менән тәьмин ителә. Ата-бабаларыбыҙҙың ҡырҡа ҡаршылығына ҡарамаҫтан, Рус дәүләте XVI быуаттың икенсе яртыһында уҡ бында монастырь, сиркәүҙәр төҙөй. Өфөлә Сергей һәм Успение, Уса ҡәлғәһендә Преображение, һуңыраҡ Табын ауылы янында Вознесение, Өфөлә Христо-Рождественский, Ҡазан, Минзәлә өйәҙендә Богородский һәм Рождественский монастырҙары, Бөрө өйәҙенең Николо-Березовка ауылында Николай, Өфөлә һәм Верхотор ауылында Ҡазан сиркәүҙәре һалына. 1913 йылда Башҡортостанда 526 сиркәү иҫәпләнә. Бынан тыш, батша хөкүмәте тартып алынған башҡорт ерҙәре менән хатта Үҙәк һәм Волга буйы губерналарындағы монастырь һәм сиркәүҙәрҙе лә тәьмин иткән. Тәүге осорҙа үҙ ирке менән христиан динен Өфөгә күсеп килгән хеҙмәтсе татар, сыуаш, мордва, мариҙар ҡабул итә. Һуңынан урыҫ булмаған башҡа халыҡтарҙы, шул иҫәптән башҡорттарҙы ла көсләп суҡындырыу башлана.

Шулай итеп, башҡорттарҙың Урыҫ дәүләтенә ҡушылыу шарттарының иң мөһимен боҙоп, батша хөкүмәте XVI быуаттың икенсе яртыһында, Мәскәүҙән Грамота алып ҡайтҡан башҡорт бейҙәре иҫән-һау саҡта уҡ, аҫаба халыҡтың ерҙәрен күпләп баҫып алған. Ә инде XVIII быуат аҙағында, йәғни 250 йыл эсендә, Рус хөкүмәте башҡорттарҙың 15,4 млн. дисәтинә, йәғни 55 процентын үҙ белдеге менән биләгән. Шуға күрә башҡорттар ҡорал алып, бик йыш колонизаторҙарға ҡаршы күтәрелергә мәжбүр булған. Үҙҙәренең аҫаба ерҙәрен юғалтҡан халҡыбыҙ

көнсығышҡа – тау-таш, ҡуйы урман араһына, хужалыҡ итергә уңайһыҙ ерҙәргә күсенергә йә көньяҡҡа, төньяҡ-көнбайышҡа ҡасып китергә мәжбүр булған. Унда ҡаҙаҡтар, ҡалмыҡтар ҡулына эләгеп ҡырылған, мал-тыуарҙары тартып алынған, ҡатындары һәм балалары әсир ителгән. Бөтә башҡорт ихтилалдарының төп сәбәбе ерҙәрҙе һаҡлап ҡалыу, ер мәсьәләһе булған.

Башҡорттарға яһаҡ, һалым һәм йөкләмәләр, шул иҫәптән ылау һалымы, үҙ иҫәбенә атҡарған хәрби йөкләмәһе лә артҡандан-артҡан. Ҡоралды һалым йыйыусылар яһағын ваҡытында түләмәгән башҡорттарҙы халыҡ алдында таяҡ менән туҡмаған, унан бик һирәктәр генә иҫән ҡалған. Ерҙәрҙе аяуһыҙ тартып алыу, һалым һәм йөкләмәләрҙең арта барыуы, яһаҡ һәм һалымдарҙы йыйғандағы башбаштаҡлыҡ золом, көсләп суҡындырырға маташыу башҡорттарҙа тәрән ризаһыҙлыҡ тыуҙырған. Айырым ырыу бейҙәре һәм дин әһелдәре башта Өфө воеводаһына, Өфө мәхкәмәһенә, һуңынан Рус хөкүмәтенә өҙлөкһөҙ ғарызнамәләр, төрлө үтенес ҡағыҙҙары менән мөрәжәғәт иткән. Ләкин уларға иғтибар булмаған, мәхкәмә ҡарарҙары ла күп осраҡта башҡорттар файҙаһына сығарылмаған. XVI быуаттың икенсе яртыһында улар – биш, XVII быуатта ла биш (1616, 1645, 1652–1664, 1677 һәм 1681–1684 йылдар) һәм XVIII быуатта дүрт тапҡыр (1704–1711, 1735–1740, 1755–1756 һәм 1773–1775 йылдарҙа) баш күтәргән. XVI быуаттың II яртыһындағы, 1616 йылдар ихтилалдары башҡорттарҙың үҙ аллы түгел, ә Ҡазан татарҙары, хант, манси, мари, сыуаш, удмурт халыҡтары менән берлектә булған. Уларҙа үҙ ерҙәрен һаҡлап ҡалыу өсөн көнбайыш, төньяҡ-көнбайыш башҡорттары ҡатнашҡан. 1616 йылғы ихтилалды Ҡазан татарҙары, сыуаш, мари, удмурттар башлауы билдәле. Башҡорттар уға әүҙем ҡушылып китеп, баш күтәреүселәр Ҡазанды ҡамай, Уса, Сарапул ҡалаларына һөжүм итә.

Беренсе үҙ аллы башҡорт ихтилалы итеп тарихсылар көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш башҡорттар башлап ебәргән 1645 йылғы күтәрелеште иҫәпләй. Яуҙың төп сәбәбе башҡорт ерҙәрен күпләп тартып алыу, Минзәлә ҡәлғәһен ҡалаға әйләндереп, уны башҡорт ерҙәренә эскәрәк үтеп инеү өсөн төп тераккә әйләндереү була. Баш күтәреүселәр Минзәләне ҡамай, бер нисә мәртәбә ҡулға төшөрөп, яндырырға тырышып ҡарай, ләкин еңелә. Яуҙы аяуһыҙ баҫтыралар, иҫән ҡалған ихтилалсылар, уларҙың етәкселәре язалап үлтерелә. Нәҡ ошо ихтилал барышында һәм унан һуң да башҡорт бейҙәре, тархандары, батырҙары һәм дин әһелдәрендә урыҫ хакимлығынан баш тартыу, үҙ аллы дәүләт төҙөү фекере уянып, ихтилалдан ихтилалға нығына бара.

Боронғо башҡорт дәүләтен тергеҙеүҙе маҡсат итеп ҡуйған1681–1684 йылдарҙағы ихтилал 1682 йылдың йәйендә хәҙерге Әбйәлил районындағы Сұртанды күле янында булып үткән йыйындан һуң башлана. Ошо ҡоролтайҙа башҡорттар үҙҙәре араһынан хан һайлай. Ихтилалдың төп етәксеһе булып Себер даруғаһының Ҡара-табын улыҫы старшинаһы, 54 йәшлек мулла Сәйет Йәғәфәр (ҡайһы бер тарихи әҙәбиәттә – Сәйғәфәр) һайлана. Ошо хаҡта бөйөк мәғрифәтсебеҙ Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев түбәндәгеләрҙе яҙып ҡалдырған: “Шул арала башҡорт халҡы араһында бер мосолман хан пәйҙә булды. Рус тәүарихында Сәйет старшина аталалыр. Халыҡты дингә өндәр ине”.

1682 йылдың йәйендә ихтилалсыларҙың күп һанлы отрядтары Өфөнө ҡамай, яҡын-тирәлә ауылдарҙы яулай. Өфө өсөн барған алыштарҙа Сәйет хан ҡаты яралана. Сәғит Мираҫ был хаҡта: “Уның һуңғы көнө – ҡулға алынғанмы-юҡмы йәки ҡасып ҡотолғанмы – мәғлүм түгел”,– тип яҙған. Сәйет, тимәк, табындарҙың ғына түгел, бөтә халҡыбыҙҙың ханы булған.

1704 – 1711 йылдарҙағы башҡорт ихтилалы етәкселәре Петр I ышанысын юғалтып, Рус дәүләтенән айырылырға, үҙ аллы дәүләтте аяҡҡа баҫтырырға кәрәк, тигән ҡарарға килгән. 1705 йылдың йәйендә улар Бәләкәй тархан (бәлки, старшиналыр) Хажи Аҡкусҡаровты һайлаған. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Хажи хандың да

һуңғы көндәре билдәһеҙ. 1708 йылдың ғинуар-февралендә Ҡазан ҡалаһы тирәһендә барған ҡаты һуғыштарҙа һәләк булғандыр, тип уйларға нигеҙ бар. Хажи хан һәләк булғандан һуң, ихтилалды дауам итеү өсөн, уның башлығы Алдарбай тархан Иҫәнгилдин, союздаш эҙләп һәм ярҙам һорап, Ҡарағалпаҡ ханы Ҡәйепкә мөрәжәғәт иткән. Хан ярҙам итергә ризалашҡан, ләкин ике шарт ҡуйған: Рус дәүләтенән айырылып, Башҡортостанды үҙ аллы дәүләт итеп иғлан итергә һәм уның ханы итеп ҡустыһы Ырыҫмөхәмәт солтанды һайларға. Ихтилал етәкселәре тәҡдимгә ризалаша. 1709 йылдың февралендә Ырыҫмөхәмәт солтан 2 меңлек ғәскәре менән Башҡортостанға килә һәм Юрматы улыҫындағы Ырғыҙаҡ күле буйындағы Хажи Мәсете тигән ерҙә башҡорт бейҙәре, тархандары, старшиналары, батырҙары, дин әһелдәре һәм бөтә ихтилал етәкселәре ҡатнашлығындағы Оло ҡоролтайҙа башҡорт ханы итеп һайлана. Әхмәтзәки Вәлидиҙең фекеренсә, был ваҡиға 1709 йылдың февралендә түгел, ә шул йылдың 27 июнендә була. Үҙ ғәскәре һәм башҡорттар менән Ырыҫмөхәмәт хан Себер даруғаһында хәрәкәт итә. 1709 йылдың көҙөндә башҡорттар менән ҡарағалпаҡтар араһы нindәйҙер сәбәп арҡаһында боҙолоп, Ырыҫмөхәмәт үҙ ғәскәре менән иленә ҡайтып китә. Унан һуң тағы өс йыл, йәғни 1712 йылдың көҙөнә ҡәҙәр, башҡорттар көрәште үҙ көстәре менән дауам итә.

XVIII быуаттың 30-сы йылдары башына башҡорттарҙың иҡтисади, сәйәси хәле ҡырҡа насарая. Ерҙәрҙе тартып алыу дауам итә, һалымдар арта, асыҡтан-асыҡ талау, көсләп суҡындырыу сәйәсәте лә көсәйә. 1734 йыл башында (бәлки, 1733 йылдың аҙағындалыр) Сенаттың өлкән сәркәтибе Иван Кирилов Сенатҡа 22 пунктлы ҙур лаихә (проект, план) менән мөрәжәғәт итә. Лаихәнең төп маҡсаты – Рәсәй империяһының тышҡы сәйәсәтенә үҙгәреш-өҫтәмәләр индереү, атап әйткәндә, Петр I-нең Ҡаҙағстанды, Урта Азияны, һуңынан Һиндостанды баҫып алыу хыялын тормошҡа ашырыу.

Кирилов был сәйәсәтте Башҡортостандан башларға, тәүҙә Яйыҡ йылғаһына ҡойған Үр йылғаһы тамағында ҙур ғәскәри гарнизон торорлоҡ Ырымбур ҡалаһын төҙөргә кәңәш бирә. Ҡала, бер яҡтан, Ҡаҙағстанды, Урта Азияны, артабан Һиндостанды баҫып алыуҙа төп терәк булырға тейеш булһа, икенсе яҡтан, Ырымбур һәм Башҡортостанда төҙөлгән башҡа ҡала, ҡәлғәләргә таянып, көнсығыш, көньяҡ-көнсығыш һәм көньяҡ тарафтарында яңынан-яңы ҡәлғә, редут, форпостар төҙөргә мөмкинлек бирә. Лаихә Башҡортостанды Рәсәй империяһының эске өлкәһенә әйләндереп, үҙәк губерналарҙан урыҫ крәҫтиәндәрен, башҡа халыҡтарҙы күпләп күсереп, башҡортто ҡырҡа кәметеп, көсләп суҡындырып, хәрби, иҡтисади һәм сәйәси яҡтан тамам хәлһеҙләндереп, ҡаршылыҡ күрһәткәндәрҙе аяуһыҙ ҡырып, башҡорт ерҙәрен тартып алыуҙы алға һөрә. Бынан тыш, Башҡортостанда мәғдән эҙләүҙе көсәйтеү, тиҙ арала яңы заводтар төҙөү ҙә тәҡдим ителә. Кирилов тиҙ арала башҡорт халҡының йәлләде булып китәсәген, теүәл өс йылдан, 48 йәшендә башҡорт ерендә үләсәген белмәй әле.

Императрица Анна Иоанновнаға лаихә оҡшай, һәм ул 1734 йылдың 1 майында уны раҫлай. Планды бойомға ашырыу өсөн махсус хәрби, сәйәси һәм иҡтисади ойошма – Ырымбур экспедицияһы ойошторорға ҡушыла. Уның башлығы итеп батша Кириловты, ярҙамсыһы итеп суҡынған татар Алексей (Ҡотломөхәмәт) Тевкелевты тәғәйенләй. Тәүгеһенә – статский советник, икенсеһенә полковник дәрәжәһе бирелә.

Экспедиция 1734 йылдың 15 июнендә Петербургтан сығып, 10 ноябрҙә Өфөгә килә. Ул 3500 һалдат, 130 офицер, төрлө һөнәр эйәләре: топограф, картограф, геодезист, төҙөүсе, мәғдән белгестәре, сауҙагәрҙәрҙән тора. Экспедиция 35 пушка менән ҡораллана. Был турала башҡорттарға Петербургта йәшәгән мулла Туҡсура

Түләкәев аша билдәле була. 1734 йылдың йәйендә хәҙерге Ишембай районының Хажы ауылында Юрматы улыҫы старшинаһы Килмәк абыҙ Нурышев, Тамъян ырыуы бейе Аҡай Күсем етәкселегендә ашығыс йыйын үткәреп, Ырымбур экспедицияһын Үр йылғаһы тамағына үткәрмәҫкә, тигән ҡарарға киләләр. Нуғай даруғаһына ҡараған Мең, Кұл-Мең, Юрматы, Тамъян, Меркет, Кесе Табын һәм башҡа башҡорт улыҫтарында тиҙ арала 200 – 300-әр атлы ғәскәри төркөм ойошторола. Уларҙы ҙур ғәскәри төркөмгә берләштергәс, 1735 йылдың йәйендә Килмәк абыҙҙың ҡулы аҫтында 3 меңдән ашыу, бер йылдан һуң 8 меңлек атлы ғәскәр туплана.

1735 йылдың 27 мартында Ырымбур экспедицияһы Ағиҙел аша сығып, Чесноковка ауылы эргәһендә ҙур лагерь ҡора һәм юлдар кибеүен көтөп 15 июнгә тиклем шунда тора. Экспедицияла бик күп керәшен, ҡалмыҡ, татар, 600 мишәр, 150-160 ихтилалда ҡатнашмаған башҡорт та була. Улар юлға сығыу менән Килмәк абыҙ һәм Аҡай Күсем (Аҡай Күсмөхәмәтов – **Ә.Й.**) Ҡаратун тауы итәгендә (хәҙерге Чесноковка тауы) үткән ҙур йыйында экспедицияны Үр йылғаһы тамағына үткәрмәҫкә, Ырымбур ҡалаһын төҙөтмәҫ өсөн ҡаты ҡаршылыҡ күрһәтергә ҡарар итәләр. Июнь аҙағында хәҙерге Көйөргәҙе районының Бөгөлсән тип аталған урынында Килмәк абыҙ етәкселегендәге өс меңдән ашыу атлы ғәскәр Кирилов экспедицияһын ҡамауға алып, һөжүм башлай. Әммә ныҡ ҡоралланған батша командаһы көслө ут асҡас, баш күтәреүселәр сигенергә мәжбүр була. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уларҙың тубы ла, мылтығы ла булмай. 1735 йылдың 1 июлендә Кимәк абыҙ яугирҙары Мәләүез районындағы Ергән тауы янында экспедицияға ҡушылырға барған Вологда атлы полкын ҡыйрата. Ләкин ярҙамға килгән Кирилов кешеләре туптарҙан ҡаты ут асып, полктың иҫән ҡалған өлөшөн ҡотҡара. Экспедиция артабан Үр йылғаһы тамағына барып етеп, 15 августа Ырымбур ҡалаһына нигеҙ һала.

1735 йылдың июлендә Юрматы, Меркет, Кесе Табын башҡорттары Табын ҡәлғәһен яндыра. Мең һәм Кұл-Мең башҡорттары Өфө тирәһендәге мишәр һәм яуҙа ҡатнашмаған башҡорт, Өфө дворяндарының ауылдарын туҙҙыра, Өфөнө ҡамай. Шул айҙа уҡ Ҡазан даруғаһы башҡорттары Аҡай Күсем, уның улы Абдулла Аҡаев, Ғүмәр Туктаров етәкселегендә 6 меңдән ашыу ғәскәр менән Сарапул, Минзәлә ҡалаларын, Биләр, Яңы Шешмә, Зәй, Кисәй ҡәлғәләренә һөжүм итә. Августа улар Сулман (Кама) йылғаһы буйында урынлашҡан урыҫ биҫтәләрен һәм монастырь ауылдарын туҙҙыра, Сулманды аша сығып, Алабуға ҡалаһы тирәһендә күренәләр. Ҡазан губернаторы Платон Мусин-Пушкин 1 сентябрҙә Сенатҡа шундай хәбәр ебәрә: “Подъехав под Мензилинск, башкирцев скопясь сборище великое из-за Ику реки, на город напали. От города их отбил, и был с ними бой от утренний зари до вечера... Понеже оные воры стоят от Елабуги верстах в двадцати”. Ғәйнә һәм Уран ырыуы башҡорттары Атъетмәҫ Абдалов (ҡайһы бер документта Абдулов) һәм старшина Яраҡкол Сурышин етәкселегендә башҡорттар килмешәктәр ауылдарын һәм биҫтәләрен ҡыйрата.

Себер даруғаһынан Барын-табын улыҫы старшинаһы Йосоп Арыҡов һәм Байрас Йәнырыҫов етәкселегендәге башҡорттар июль аҙағында Тинес биҫтәһенән Ырымбурға аҙыҡ алып барған меңдән ашыу ылауҙы ҡыйратып, Үрге Йайыҡ ҡәлғәһен ҡамай. Себер яғынан полковник Арсеньев ғәскәре килеп, көслө ут асҡас ҡына, улар сигенергә мәжбүр була. Сентябрь баштарында Килмәк абыҙ менән Аҡай Күсемдең өс меңдән ашыулыҡ ғәскәре Өфө тирәһендәге бер нисә урыҫ, мишәр, татар һәм яуҙа ҡатнашмаған башҡорт ауылдарын баҫып ала. Өфөнө ҡамаһалар ҙа, яулай алмайҙар. Ихтилал тиҙ арала Башҡортостанды солғап ала.

1735 йылдың йәйендә үк ҡайһы бер башҡорт тархандары, старшиналары, йөҙ

баштары, дин әһелдәре хәлде аҡыл менән баһалап, ихтилал етәкселәренә: “Рәсәй дәүләтенә, уның ғәскәренә ҡаршы тороуҙың мәғәнәһе юҡ”— тип яуҙы туҡтатырға тәҡдим итә. Улар араһында тархандарҙан: Нуғай даруғаһынан Алдарбай Иҫәнгилдин, Мираҫ Юлымбәтов, Ҡыҙрас Муллаҡаев, Бирҙеғол Теләүкәев, Себер даруғаһынан Таймаҫ тархан Шәимов, Байым Ҡыҙрасов, Асай Ҡарабаев, Исмәғил Миңлейәров, Зәйсән Ҡарабашев, Ҡазан даруғаһынан йөҙ башы Нәзир Уразмәтов, Себер даруғаһы старшиналары Арыҡ Иҫәнбаев, Шығанай Бурһыҡов һ.б. була. Ләкин яугир холҡло башҡорт ир-егеттәренең күбеһе уларҙың өгөтөнә ҡолаҡ һалмай.

Башҡорттар, ҡеүәтләнеп алған дәүләткә ҡаршы сыҡмай, ихтилалды туҡтатһа, 1735—1740 йылдарҙағы иҫәпһеҙ-һанһыҙ юғалтыу-ҡырылыуға, геноцидҡа дусар ителмәҫ ине. Тарих шаһит: Рәсәй дәүләте барыбер ерҙәребеҙҙе тартып ала, ҡәлғә, завод, монастырь, сиркәүҙәрен төҙөй торған, ҡыйратылған ҡәлғә, завод, монастырь, сиркәүҙәр, яндырылған ауылдар аяҡҡа баҫтырылған. Теге йәки был ихтилалда артыҡ батырайып китеү халҡыбыҙға зыян ғына килтереүгә ҡарамаҫтан, ата-бабаларыбыҙ ҡулдарына ҡорал алмайынса булдыра алмаған.

1735 йылдың 16 авгусында Кирилов Сенатҡа “О мерах к скорейшему прекращению башкирского бунта” тигән тәҡдим менән мөрәжәғәт итә. “Сил для подавления восстания есть,— тип яҙа ул,— надо только их разумно использовать, направить их в основные улусы восставших... Итак со всех сторон окружая воров и их жен и детей, и пожитки их, и лошадей, и скот отбирать, а дома вовсе разорить, и которые пущие заводчики, тех по указам на страх другим казнить, а не пущих и детей мужеска полу, годных в ссылку, в Остзею послать, а жен и детей, девок развесть во внутренние городы, и раздать, кто взять похочет, чтобы корень их был вовсе вырван”. Башҡорт ерҙәрен ул тиҙ арала килмешәктәргә, айырыуса татар, мишәрҙәргә бушлай таратып бирергә кәңәш итә. “Отписывая воровские земли,— тип яҙа Кирилов,— раздавать в раздачу русским и служилым татарам, мещерякам, которые служили и служат верно”. Кириловтың тәҡдимдәрен батшабикә Анна хуплай, улар башҡорттарҙы ҡырыу буйынса ҡулланмаға әүерелә.

Тарихсылар ихтилалды ҙур булмаған өс дәүергә бүлә: 1735—1736, 1737—1738 һәм 1739—1740 йылдар. Ихтилалдың икенсе, бигерәк тә өсөнсө дәүерҙәрендәге ваҡиғаларҙы, халҡыбыҙ күргән ҡот осҡос михнәттәрҙе аңлау һәм дөрөҫ баһалау өсөн 1735—1736 йылдар ваҡиғаларына күҙ һалайыҡ. Әбей батшаның фатихаһын алғандан һуң, урындағы язалаусылар яңы походҡа әҙерләнә, көс туплай. Бының менән ике язалау органы шөғөлләнә: Ырымбур экспедицияһы менән Минзәлә ҡалаһындағы 1735 йылдың 5 авгусында ойошторолған Башҡорт эштәре комиссияһы. Комиссияның төп бурысы — ихтилалды тиҙ арала баҫтырыу, унда ҡатнашҡан башҡорттарҙы язаға тарттырыу. Бынан тыш, комиссияға административ һәм хужалыҡ-сәйәсәт бурыстарын үтәү ҙә йөкмәтелә. Комиссия башлығы итеп генерал-лейтенант Александр Румянцев тәғәйенләнә. Ырымбур комиссияһы иһә үҙ штабының урынын йыш алмаштыра: башта Өфөлә урынлаша, һуңынан — Һаҡмарҙа, Ҡыҙыл Һаҡмарҙа, Сембер ҡалаһында, Һамарҙа. Ихтилал барышында Ырымбур экспедицияһының (1737 йылдан — Ырымбур комиссияһы) һәм Башҡорт комиссияһының бишәр начальнигы алмашына.

1737 йылдың апрелендә, Кирилов үлгәндән һуң, Ырымбур комиссияһы начальнигы итеп уның ҡайныһы Петр Бахметьев ҡуйыла. Ике айҙан властар комиссия начальнигы итеп йәшерен советник, Нуғай мырҙалары нәҫеленән булған керәшен Василий Татищевты тәғәйенләй. Әхмәтзәки Вәлиди уның тураһында: “Татищев — иҡтисадсы, индустрия үҫтереүсе... татар нәҫеленән киләлер”,— тип яҙып ҡалдырған. 1739 йылдың ғинуарында Татищевты Ырымбур коменданты, майор Григорий Останков алмаштыра. Шул йылдың авгусынан 1741 йылдың

июленә ҡәҙәр комиссия начальнигы булып Нуғай урҙаһының һуңғы ханы Ырыҫ (Урус) нәҫеленән булып, христиан диненә күскән, суҡынған кенәз Василий Урусов тора. Башҡорт эштәре комиссияһы башлығы генерал Румянцевты 1736 йылдың сентябренән 1737 йылдың февраленә ҡәҙәр бригада генералы Михаил Хрущев алмаштыра. Унан һуң ике ай был вазифаны полковник Иван Бардукович үтәй. 1737 йылдың 24 апрелендә Минзәләгә Әстерхандан яңы Башҡорт эштәре комиссияһы начальнигы, суҡынған татар мырҙалары нәҫеленән генерал-майор Леонтий Соймонов килә. Был хаин да, Кирилов, Тевкелев, Урусов кеүек, ҡанһыҙ булып таныла.

Ихтилалды баҫтырыу өсөн тағы бер үҙәк булдырылып, ул Урал аръяғындағы ҡәлғәләрҙә урынлаша: Мейәс, Сыбаркүл, Силәбе ҡәлғәләрендә, Өфөлә һәм Екатеринбургта. Был төбәктәрҙә язалау полктары һәм отрядтары менән төрлө йылдарҙа Башҡорт комиссияһының тәржемәсеһе, Тевкелевтың ике туған ҡустыһы керәшен Роман (Рамаҙан) Уразлин, капитан Стрижевский, майор Языков, подполковниктар Путятин һәм Павлуцкий, полковниктар Арсеньев, Тевкелев, Андрей Хрущев етәкселек итә. Уларҙың барыһын да башҡорт халҡын юҡ итеүҙә актив ҡатнашып, карьера эшләү берләштерә.

Бынан тыш, ихтилалды тиҙерәк баҫтырыу, башҡорттарҙы ҡурҡытыу өсөн, бөтә Башҡортостанда мишәр, мари, урыҫ, сыуаш һәм татарҙарҙан торған "ирекле" хәрби төркөмдәр ойошторола. Документтарҙа "отряды вольницы" тип аталған төркөмдәрҙең күпме башҡорт ауылын талап яндырғанын, башҡорттарҙы үлтергәнен тарихсылар белмәй. Рус хөкүмәте ихтилалсыларға ҡаршы ҡаҙаҡ һәм ҡалмыҡтарҙы ла оҫта файҙалана. Башҡорттарҙы бигерәк тә ҡаҙаҡтар яфалай, улар башҡорт ауылдарына өҙләкһеҙ сапҡын яһап тора.

Ихтилал башланыу менән командаһын Ырымбурҙа ҡалдырып, ҡалған кешеләре менән Кирилов 7 сентябрҙә Өфөгә юллана. Юл ыңғайында ул ун көндә 21 башҡорт ауылын яндыра. Килмәк абыҙ менән Аҡай Күсем ғәскәре Кириловҡа ҡаршы сыға һәм Ашҡаҙар йылғаһы тамағында уға һөжүм итә. Бер аҙна барған алышта башҡорттар бик күп яугирҙәрен юғалтып, сигенергә мәжбүр була. Октябрь урталарында Кирилов төркөмө Өфөгә килеп етә. Урал аръяғында башҡорт ауылдарын яндырыу менән полковниктар Мартаков менән Иван Арсеньев полктары шөғөлләнә. Уларға Йосоп Арыҡов менән Төлкөсура Аллағолов ҡаршы тора. Декабрҙә Арыҡов төркөмө Тинес биҫтәһенән Ырымбурға аҙыҡ алып барған ҙур ылауға һөжүм яһап, уның кешеләрен юҡ итә, ярҙамға килгән Себер атлы полкын да ҡыйрата. 1736 йылдың ғинуарында Йосоп Арыҡов менән Төлкөсура Аллағолов яугирҙары Үрге Яйыҡ ҡәлғәһен баҫып алып яндыра.

1736 йылдың ғинуары урталарында "Ихтилалсы башҡорттарҙы баҫтырырға!" тигән бойороҡ алып, Тевкелев Бөрө ҡалаһынан Башҡортостандың төньяғына юл тота һәм 19 ғинуарҙа элекке Балыҡсы улыҫының (хәҙер – Ҡариҙел районы) Һөйәнтүш (ҡайһы бер сығанаҡтарҙа Һөйәнтөҫ, Сөйәнтүз, Зыятүш – **Ә. Й.**) ауылына барып етә. Тевкелев күрше Ҡундыш ауылы мишәрҙәренән хәбәр ала: имеш, башҡорттар Әй йылғаһы буйындағы ике оло тау араһындағы соҡорҙа Тевкелев командаһын ҡыйратырға йыйына, ихтилалсылар араһында Һөйәнтүш ауылыныҡылар ҙа бар. Хәбәрҙе ишетеү менән хаиндың асыуы ҡабара һәм ул ауыл кешеләренән үс алырға ҡарар итә. Шул уҡ кисте Тевкелевтың һалдаттары бөтә ауыл халҡын – бер меңгә яҡын кешене – ҡатын-ҡыҙ, бала-саға, оло йәштәгеләрҙе сатнама һыуыҡта штыктар менән тышҡа ҡыуып сығара ла мылтыҡтан атып, штык һәм һөңгөләр менән сәнсеп үлтерә. Ҡулға алынған 105 ирҙе һарайға бикләп, тереләй яндыралар. Ҡот осҡос енәйәт шаһиты, аҙаҡ "тарихсы, ғалим, Башҡортостан тарихын беренсе өйрәнеүсе" булып киткән суҡынған немец сауҙагәре улы,

бухгалтер-капитан Петр Рычков ошо хаҡта бына ниҙәр яҙа: “Уларҙың (һарайға бикләнгәндәрҙең – **Ә.Й.**) үҙәк өҙгөс ҡысҡырышыуы һәм мылтыҡ тауыштары яңғыраны. Унда йән тетрәткес мәхшәр булды. Иң ғәжәбе шул: бурҙарҙың (йәғни башҡорттарҙың – **Ә.Й.**) күбеһе утта янған көйө, яман һүҙҙәр менән әрләшеп, амбар (һарай) эсендәге һөңгөләрҙе шунда торған драгундарға ташлап, бер нисәһен яраланы”.

Башҡорттарҙың ҡотон алыу өсөн, Тевкелев Һөйәнтүш “тәжрибәһе”н башҡа улыҫтарҙа ла ҡуллана. Полковник Мартаков менән берлектә, ул Балыҡсы, Уннар, Ҡыр-Танып, Дыуан, Сырҙалар, Ҡыр-Күҙәй һәм башҡа улыҫтарҙа 51 башҡорт ауылын үртәй, 2 меңдән ашыу башҡортто, шул иҫәптән бала-сағаны, үлтерә. Тарихсыларҙың фекеренсә, улар үҙ отчеттарында язалап үлтерелгән башҡорттарҙы һәр ваҡыт ныҡ кәметеп күрһәтә. Төркиәлә эмиграцияла йәшәгән күренекле татар тарихсыһы Ғабдулла Баттал үҙенең “Ҡазан төрөктәре” тип аталған хеҙмәтендә Тевкелев тураһында: “Урыҫ хеҙмәтендә булған был хаин һәм ҡәбәхәт мырҙаның байлыҡ һәм дәрәжә ҡаҙаныу өсөн ил һәм йортобоҙға килтергән золомоноң иҫәбе юҡ. Ул әҙәмдең исеме тарихыбыҙҙың ташына урыҫҡа ялсы булып һатылған Ҡазан ханы Шаһ-Ғәли менән йәнәшә уйылып яҙылыуға лайыҡлы”, – тип яҙған.

Тевкелев менән Мартаковтың яуызлыҡтары тураһында башҡорттар тиҙ ишетә. Уға яуап итеп, бөтә ил, бигерәк тә Урал аръяғы башҡорттары күпләп күтәрелә. Улар Ҡундышлы ауылынан алыҫ түгел Багдан Кошо тигән мишәр ауылы эргәһендә бер атлы ротаны юҡ итә. Тевкелев менән Мартаков төркөмдәренә бер нисә тапҡыр һөжүм итеп, бик күп кешеләрен үлтерәләр. Төлкөсура Аллағоловтың дүрт меңлек атлы ғәскәре Өфөнө ҡамап, яҡын-тирәләге урыҫ, мишәр ауылдарын туҙҙыра, Ҡыбау ауылы янында поручик Аничков, капитан Каругер, майор Радищев, Өфө атаманы Кадомцевтарҙың язалау командаларын тар-мар итә. 14 февралдә улар Өфө дворяндары һәм казактарының 450 кешелек төркөмөн ҡыйрата.

Тевкелевты Башҡортостандың төньяғына ебәреп, Кирилов үҙе Петербургҡа отчет менән китә. Ихтилалды тиҙерәк баҫтырыу өсөн ул хөкүмәттән 1736 йылдың 11 һәм 16 февралендә ике указ ҡабул иттерә. Беренсе указда ихтилал башлыҡтарына үлем язаһы биреү, ҡалғандарынан мотлаҡ штраф аты түләтеү ҡарала. Язалап үлтерелгән йә тотҡонға эләккән башҡорт ғаиләләрен ситкә ебәреү, ҡоллоҡҡа һатыу, көсләп суҡындырыу ҡарала. Улыҫ старшиналарын һайлап ҡуйыу бөтөрөлөп, старшина итеп властарға “тоғро” булған башҡорттарҙы ҡуйыу тәртибе индерелә. “Тоғролар” өҫтөнән дә күҙәтеү ныҡ ойошторола: һүҙ еткереп тороу өсөн улар эргәһенә писарь итеп мишәр йә татарҙар ҡуйыла. Бынан тыш, башҡорттар йыйыны тыйыла, урындағы властарға ата-бабаларыбыҙҙың көндәлек тормошон ныҡ күҙәтеү аҫтына алырға ҡушыла. Указ халҡыбыҙҙың үҙ идараһын юҡҡа сығара.

Мәсеттәр, мәктәптәр төҙөү ҙә тыйыла. Ислам дине, дин әһелдәре, бөтә уҡымышлы башҡорттар өҫтөнән көслө күҙәтеү ойошторорға, уларҙан тоғролоҡ анты алырға бойорола. Указда “ундай мосолман уҡымышлылары һәм дин кешеләре – иң яман бур һәм яуыз кеше”,– тип әйтелә. Халҡыбыҙҙы ҡырыуҙа әүҙем ҡатнашҡан мишәрҙәргә башҡорт ерҙәрен бушлай таратыу, типтәр һәм әтәмбәйҙәрҙе ер һалымынан азат итеү индерелә, башҡорт ерҙәрен теләһә кем тартып йә һатып алыу хоҡуғы бирелә. Указ башҡорттарға тимерселек менән шөғөлләнеүҙе лә тыя.

Башҡорттарҙы иленән ситкә таратып, хәрби хеҙмәттә, хәрби походтарҙа файҙаланып, аяуһыҙ ҡырыу маҡсаты ҡуйыла. “Боласыларҙы,– тип әйтелә 16 февраль указында,– һәр төрлө юл менән ҡырырға, йорт-ҡаралтыларын ҡыйратырға, тотолған бурҙарҙы, бигерәк тә башлап йөрөүселәрен, бүтәндәргә фәһем булһын өсөн, язалап үлтерергә, башҡаларын... һөргөнгә ебәрергә, бәләкәй бала-саға һәм

ҡатын-ҡыҙҙарын үҙ илдәренә кире ҡайтармау шарты менән урыҫ ҡалаларына таратып, алырға теләгән кешеләргә ҡоллоҡҡа бирергә, ҡаралты һәм игендәрен, мал-тыуарҙарын тартып алып, ғәскәргә һәм мөгәзәйҙәргә тапшырырға, аттарын драгун полктарына ебәрергә". Указдарҙа "казнить башкирцев смертью" тигән һүҙҙәр алты мәртәбә ҡабатлана.

Ошонан һуң язалаусылар бөтә Башҡортостанда йәлләд Тевкелев алымдарын киң ҡуллана: башҡорт ауылдарын яндыра, яугир башҡорттарҙы күпләп ҡыра. Үҙ илендә азатлыҡ, ерен һаҡлап алып ҡалыу өсөн көрәшкән халҡыбыҙға ҡарата ихтилалды баҫтырыу аяуһыҙ геноцид формаһын ала. Төрлө язалау операциялары үткәреү өсөн Башҡортостан дүрт районға бүленә: Румянцев – Ҡазан, Кирилов менән майор Останков – Нуғай, Тевкелев – Уса һәм Себер даруғаларында, Татищев менән полковник Андрей Хрущев Урал арьяғында хәрәкәт итергә тейеш була. Ихтилалсыларға ҡаршы 22 меңлек ғәскәр туплана. Уға, регуляр полктарҙан тыш, казак, айырым урыҫ крәҫтиәндәре һәм башҡа килмешәктәрҙән торған отрядтар ҙа инә.

1736 йылдың март – майында ғына карателдәр 3042 башҡортто үлтереп, 503 ауылды яндыра. "Ирекле" командаларҙың күпме кешене үлтереүе, күпме ауылды яндырыуы бер рәсми документта ла сағылмаған. Ҡазан һәм Себер даруғаларында ғына язалаусылар башҡорттарҙың 3200 атын, 1000 һыйырын, меңәрләгән һарыҡ-кәзәһен алып китә. Башҡорттарҙың һаҡлыҡ аҙыҡтары, бесәндәре лә яндырыла. Тартып алынған малды карателдәр урыҫ ауылдарына, биҫтә, ҡәлғәләргә таратып бирә. Вологда полкы менән походҡа сығып, Кирилов подполковниктар Брянский, Аксаков, полковник Працев командалары менән берлектә Ағиҙел, Нөгөш, Төр, Һәләүек, Өршәк йылғалары буйындағы 200 ауылдағы 4 мең йортто үртәй, Хажи Мәсете ауылын яндыра, 158 кешене язалап үлтерә. Бәрелештәрҙә 700 башҡорт һәләк була, 160-е әсиргә эләгә, 99-ы Балтик диңгеҙе буйына һөргөнгә ебәрелә. Румянцев төркөмө Дим буйындағы яуҙа ҡатнашмаған 100-ҙән ашыу башҡорт ауылын яндыра, кешеләрен ҡыра. Апрелдә ошо төркөм Урманай (бәлки, Үрмәкәй – Баҡалы районы) тип аталған мишәр ауылы эргәһендә туҡтап, лагерь ҡороуы була, Килмәк абыҙҙың 8 меңлек ғәскәре ҡапыл һөжүм итеп, 300-ҙән ашыу карателде юҡ итә, 60-ҡа яҡынын яралай. Башҡорттар 40 кешеһен юғалта. Ошо ваҡиғалар тураһында бер дәреслектә лә әйтелмәгән.

Тағы бер йәлләд, Ырымбур ҡәлғәһе коменданты майор Григорий Останков Яйыҡ казактары менән ихтилалда ҡатнашмаған Яйыҡ, Һаҡмар йылғалары буйындағы 113 башҡорт ауылын яндыра, 600 ир-атты, бик күп ҡатын-ҡыҙҙы үлтерә. Июлдә Һаҡмар буйынан Табын ҡәлғәһенә үткән юлдағы 12 башҡорт ауылын да үртәй, 200-ҙән ашыу башҡортто юҡ итә. Әсир алынған 30 башҡорт ир-егетен казактар ҡылыс менән сапҡылап, осло тимер ҡаҙыҡҡа элеп язалай. 2 августа Табындан Мәнәүез йылғаһы тамағына килеп еткән Кирилов Мәскәүҙән ебәрелгән полковник Протасов полкы менән берлектә Ағиҙел буйындағы 29 башҡорт ауылын талай, яндыра. Һәр ауылда 100 генә кеше йәшәһә лә, йәлләд Кирилов күпме башҡортто йорт-ерһеҙ ҡалдырған! Юса һәм Себер даруғаларында – Тевкелев, Урал арьяғында Татищев шундай уҡ яуызлыҡтар ҡыла. Татищевтың бойороғо буйынса 90 башҡорт ауылы яндырыла, 2 меңдән ашыу ат һәм һыйыр ҡыуып алып кителә, һарыҡ-кәзәне штыктар менән сәнскеләп үлтерәләр.

Был яуызлыҡҡа яуап итеп Себер даруғаһы батырҙары Төлкөсура Аллағолов, Ҡотлоғужа, Ҡотоҡай, Йосоп Арыҡов, Иҫәнғол Мәмбәтов, Аҡҡужа, Һәүбән тархан Һөйәрғолов, старшиналарҙан Ҡыуаҡан улыҫынан Бәпәнәй Төрөпбирҙин, Дыуандан Миңлейәр Ҡарабаев, Ҡыр-Күҙәйҙән Юлдаш мулла Һөйәрембәтов һ.б. етәкселегендә Исәт, Тинес, Мейәс, Тубыл йылғалары буйындағы урыҫ ауылдарын,

биҫтәләрен яндыра, ҡәлғәләргә, заводтарға һөжүм итә. Июндә Төлкөсура батырҙың ғәскәре Ҡыҙыл Яр ҡәлғәһе янында Мартаковтың полкын ҡырып һала. Ә Юса даруғаһында ихтилалсылар Атъетмәҫ Абдулов етәкселегендә 800 кешелек ике "ирекле" команданы, Строгановтарҙың мең ярым крәҫтиәндән торған "ирекле" төркөмөн ҡыйрата.

Ата-бабаларыбыҙ ҡаты ҡаршылыҡ күрһәтә башлағас, Кирилов сентябрь-октябрҙә Мәскәүҙән тағы өс атлы полк һоратып ала. 1736 йылдың көҙөндә таланған, ҡыйратылған башҡорт ауылдарында аслыҡ башлана. Карателдәрҙең береһе Кириловҡа аслыҡҡа дусар ителгән башҡорттар тураһында бына нимә яҙып ебәргән: "астан ҡырылалар, ҡалғандары эт-бесәй ашай, уныһы ла етешмәй. Малын ғына түгел, аяҡ кейемдәрен ашап бөттөләр, бик күбеһе үлә". Ихтилалдың байтаҡ етәкселәре, шул иҫәптән Аҡай Күсем, Йосоп Арыҡов, Иҫәнғол Мәмбәтов, Һәүбән Һөйәрғолов һ. б. карателдәр ҡулына эләгә. 1736 йылдың июле башына ҡәҙәр, бик кәметеп күрһәтелгән мәғлүмәттәр буйынса, 15 мең башҡорт үлтерелә. Октябрҙә башҡорттар яуҙы туҡтатырға ҡарар итә.

Ләкин властар яңы ҡәлғә, редут, завод, монастырь, сиркәүҙәр төҙөүҙе дауам иттерә. Төрлө губерналарҙан Башҡортостанға күсеп килеүселәрҙең ағымы көсәйә. Башҡорт ерҙәрен дворян, офицер, казак, хеҙмәтсе татарҙарға һ.б. таратыу туҡталмай. 1736 йылдың 11 февралендәге указға таянып, мишәрҙәр, татарҙарҙың һ.б. башҡорт ерҙәрен тартып алыуы ла дауам итә. Өҫтәүенә, карателдәр башҡорт ауылдарынан "штраф аты" йыя. Быларҙың барыһы ла 1737 йылдың яҙында халҡыбыҙҙы йәнә ҡулына ҡорал алырға мәжбүр итә.

Ихтилал яңы хәрби етәкселәрҙе күтәреп сыға. Старшиналарҙан – Түңгәүер улыҫынан Көҫәп Солтанғолов, Тамъяндан Сәйетбай Алкалин, Бөрйәндән Ырыҫымбай Игембәтов, Ҡарағай-Ҡыпсаҡтан Сәйет Үтәшев, Ҡара-Табындан Аҡкужа Ҡоломбәтов, Барын-Табындан Уразай Абыҙанов (документтарҙа – Абзанов, Авзянов), Ҡыр-Табындан Мәсәғүт Кәбәсов, Мырҙаларҙан Усман, Әйленән Бәҙеғол Ҡарағужин, батырҙарҙан: Үҫәргән ырыуынан Ишмәк Тәләшев, Ҡара-Табындан Хөсәйен Таймасов һ. б. Әйткәндәй, документтарҙа, ғилми хеҙмәттәрҙә, дәреслектәрҙә Бәҙеғолдо Аланяҙғол, йә Алан Ейәнғол, йә Аланзыянғол, йә Алан Йыһанғол тип хата яҙалар. Бәҙеғолдоң тәне ала-ҡола булғанға, уны Алабәҙеғол, Аланбәҙеғол тип йөрөткәндәр.

Ихтилалдың икенсе дәүерендә язалаусыларҙың башлыҡтары алмашына. Башҡорт эштәре буйынса комиссия етәксеһе М. Хрущевты 1737 йыл башында армияға алалар. Уның урынын генерал Соймонов биләй. Апрелдә Ырымбур комиссияһы башлығы Кирилов үлгәс, урынына Татищев тәғәйенләнә, ярҙамсы итеп полковник Андрей Хрущевты ҡуялар. Улар Мәскәүҙән тағы өс полк һорай. Татищев тәҡдиме буйынса, башҡорт ерҙәрен бирергә вәғәҙә итеп, татар, мишәр, мари, сыуаш, удмурт, мордваларҙы башҡорттарға һөсләтеп, уларҙан торған отрядтарҙы ҡоралландыралар. Ләкин ихтилалсылар был отрядтарҙы ҡыйрата, ауылдарын яндыра. Мәҫәлән, июль башында Көҫәп батыр төркөмө Мәнәүез тамағынан алып Минзәләгә тиклемге юлда карателдәргә ярҙам иткән ауылдарҙы үртәй. Артабан Нуғай даруғаһына ҡайтып, 11 сентябрҙә Алатау итәгендә Юрматы улыҫындағы башҡорт ауылдарын яндырырға әҙерләнгән генерал Соймоновтың отрядын ҡыйрата.

Себер даруғаһында башҡорттар Красноуфимск, Көнгөр һәм Бөрө ҡалалары тирәһендәге, Танып йылғаһы буйындағы урыҫ, мишәр, сыуаш ауылдарына һөжүм итә, Синар йылғаһы буйындағы, Ҡатай ҡәлғәһе янындағы урыҫ, мишәр ауылдарын туҙҙыра. Июль аҙаҡтарында – август башында Юса даруғаһы башҡорттары урыҫ, татар ауылдарын ҡыйрата. Карателдәрҙең ихтилалды баҫтыра алмауын

күреп, властар Петербургтан Татищевҡа тағы бер указ ебәрә. “Было ему, тайному советнику,– тип яҙған Петр Рычков,– накрепко подтверждено крайнейшее прилагать старание о конечном прекращении еще не успокоенных башкирцких замешаний, чтоб оная так однажды пресечь дабы впредь никакой искры к тому не осталось”.

Бөтә даруғаларға ла яңынан-яңы язалау командалары ебәрелә, башҡорт ауылдарын аяуһыҙ яндырыу башлана. Ихтилалда ҡатнашыу-ҡатнашмауына ҡарамай, улар башҡорттарҙы күпләп ҡыра, мал-тыуарҙарын алып китә һ.б. 1738 йылдың май – сентябрендә генерал Соймонов төркөмө Нуғай даруғаһында 32 башҡорт ауылын яндыра, һуғыштарҙа һәм язалап 881 башҡортто үлтерә, 3 меңгә яҡын йылҡы, 138 һыйырҙы ҡыуып алып китә. Соймонов 143 башҡорт ҡатынын бала-сағаһы менән һөргөнгә ебәрә, 79 ҡатын-ҡыҙҙы бала-сағаһы менән үҙ кешеләренә таратып бирә. Әҙерләгән бесәндәрен тотош яндырыу арҡаһында, башҡорттарҙың ҡалған мал-тыуары ла күпләп ҡырыла. 1738 йылдың көҙөндә аслыҡ көсәйә барып, ҡурҡыныс төҫ ала, бик күп башҡорт ауылдары бөтөнләй буш ҡала. Ҡайһы бер ауылдарҙа хатта үлгәндәрҙе ерләрлек тә кеше ҡалмай. Полковник Иван Бардукович сираттағы отчетында бына ниҙәр яҙған: “башкирцы, живущие по реке Ик от голоду мрут, а оставшиеся кошек и собак едят, да и того им не достает, и за безсилием и отчаянием принуждены мертвых бросать”.

Шул уҡ хәл Себер даруғаһында ла күҙәтелә. Тевкелевтың шымсыһы Ҡазан татары Ҡорманай Красноуфимск ҡәлғәһендә башҡорттар тураһында бына нимә һөйләгән: “малдарын ашап бөткәндәр, күбеһе астан үлә, ҡалғандары ташландыҡ тире-ярыны ашай”. Астан үлмәһен өсөн башҡорттар балаларын һатырға мәжбүр була. Мәҫәлән, Өфөлә һәм Табын ҡәлғәһендә балалар 30 һәм 50 тингә һатыла. Түңгәүер башҡорттарының ғорурлығы Көҫәп Солтанғолов, Ҡотоҡай, Айыҡкол Ямантаев, ғәйнәләрҙең батыры Атъетмәҫ Абдулов, Килмәк абыҙ Нурышев, Бәпәнәй Төрөпбирҙин һ. б. эҙһеҙ юғала. Килмәк абыҙ, Аҡай, Күсем, Йосоп Арыҡов, Һәүбән Һөйәрғолов кеүектәр, властар менән һөйләшеүҙәр алып барыу өсөн Табын ҡәлғәһенә килгәс, 1737 йылдың 5 февралендә ҡәлғә коменданты Иван Утятников тарафынан ҡулға алына. Аҡай Күсемде, Йосоп Арыҡовты, Килмәк абыҙ Нурышевты ҡаты ҡарауыл аҫтында башта Минзәләгә, һуңынан Петербургҡа алып китәләр. Уларҙың артабанғы яҙмышы билдәһеҙ. Ҡалған ихтилал башлыҡтары язалап үлтерелә.

Аяуһыҙ ҡырылыу арҡаһында, башҡорттарҙың ҡаршы торорлоҡ көсө ҡалмай. Иҫән ҡалған яу башлыҡтары 1738 йылдың көҙөндә көрәште туҡтатырға була. Министрҙар кабинетына ебәргән отчетында, бөтә яуызлыҡтарын йомғаҡлап, Татищев былай яҙа: “Иң хәүефле Ҡазан менән Нуғай даруғалары шул тиклем ҡыйратылды, хатта (башҡорттарҙың) яртыһы ғына ҡалды, ә бүтәндәре, Уса менән Себер даруғалары халҡы, ул хәтле үлмәһә лә, барыһының аттары һәм малы бөттө, ауылдары яндырылды, ашар аҙыҡтары булмағандан бик күбеһе астан үлде... Башҡорттар ҡабат баш күтәрә алмаҫ инде”.

Халҡыбыҙға ҡарата геноцид бына шулай мылтыҡ һәм ҡылыс, штык һәм ут, аслыҡ ярҙамында ғәмәлгә ашырыла.

*(Аҙағы бар.)*

**Әхмәт-Гәрәй ЙӘНҒӘЛИН,**
**тарих фәндәре кандидаты.**

*Әҙәби-мәҙәни мөхит*

***

Республика мәктәптәрен тамамлаған 120 егет һәм ҡыҙ маҡсатлы йүнәлеш буйынса Рәсәйҙең абруйлы уҡыу йорттарында белем аласаҡ. БР Хөкүмәте Премьер-министры Р.С. Сарбаев, Премьер министр урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры И.Ғ. Илешев, БР мәғариф министры З.А. Аллаяров, БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтайҙың Мәғариф, фән, мәҙәниәт, спорт һәм йәштәр комитеты рәйесе Р.Т. Бикбаев һәм башҡа рәсми вәкилдәр Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларына юлланасаҡ I курс студенттары менән осрашты. Унда билдәләнеүенсә, Башҡортостандың фән, сәнәғәт, ауыл хужалығы һәм башҡа өлкәләрендә бай потенциал тупланған. Республиканың артабанғы үҫешен тәьмин итеү, тормош сифатын күтәреү маҡсатында матди шарттар тыуҙырыла. Мәктәпте уңышлы тамамлаған уҡыусыларға Мәскәү, Санкт-Петербург кеүек ҙур ҡалаларҙа белем алыу мөмкинлеген тыуҙырыу – алда торған бурыстарҙы тормошҡа ашырыуҙа төп йүнәлештәрҙең береһе. БР Хөкүмәте талантлы, эшһөйәр йәштәргә Бөйөк Британия, Германия, Голландия һәм башҡа Европа илдәрендә уҡыу өсөн дә гранттар булдырҙы. Быйыл уларға кәмендә 30 кеше эйә буласаҡ. Был маҡсатҡа республика бюджетынан 30 миллион һум аҡса бүленә.

***

З. Биишева исемендәге «Китап» нәшриәте Башҡортостан Республикаһының Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы тыл хеҙмәткәрҙәренә арналған “Тыл батырҙары” күп томлы йыйынтығының тәүге өс китабын сығарҙы. Уларҙа «1941–1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышындағы намыҫлы хеҙмәте өсөн» миҙалы менән наградланған хеҙмәтсәндәр исемлеге бирелә. Беренсе томда республиканың Әбйәлил, Әлшәй, Архангел, Асҡын райондары, Ағиҙел ҡалаһы халҡы тураһында мәғлүмәттәр бар. Артабанғы томдарҙа исемлектәр алфавит буйынса баҫыласаҡ.

Китап ҡулъяҙмаларын әҙерләүсе төркөм етәксеһе, I ранг капитаны Рафиҡ Вәлиевтың белдереүенсә, ошондай 19 том сығырға тейеш.

***

22 августа Стәрлетамаҡ төбәк яҙыусылар ойошмаһы ҡаланың Ю. Гагарин исемендәге ял паркында йыл һайын үткәрелә торған "Йәйҙең йәмле кистәре" тигән шиғриәт кисәһе уҙғарҙы.

Быйыл был сара яҙыусылар ойошмаһының 25 йыллығына арналды. Ойошманың яуаплы секретары шағир һәм драматург Кәбир Аҡбашев баш һүҙ менән сығыш яһаны. Кисәлә шағирҙар Элмира Сәсәнбаева, Рима Ғәлимова, сатира һәм юмор оҫтаһы Рәшит Заһиҙуллин, Сулпан Миңлебаева, Кәрим Булат, Асия Басирова, Динә Хәйруллина, рус телле шағирҙар Вера Никитина, Гүзәл Арытҡолова, сыуаш шағиры Геннадий Тимофеев-Челпир һ. б. сығыш яһаны.

Йырсылар Фәтих Кәлимуллин, Рәшиҙә Үтәкәева, Гөлфара Латипова, Гөлсирә Нәжметдинова, Наил Халиҡов Стәрлетамаҡ шағирҙары һүҙҙәренә яҙылған йырҙарҙы башҡарҙы. Тамашасыларға әҙәби викторина ла тәҡдим ителде.

***

М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының мәҙәни үҙәгендә яҙыусы Камил Зиганшин менән осрашыу уҙҙы. Ҡәләмдәшебеҙ – А. Толстой, Э. Володин, Н. Рубцов исемендәге Рәсәй, С. Злобин исемендәге республика әҙәби премиялары лауреаты, рус һәм башҡорт телдәрендә сыҡҡан ете китап авторы. Уның тарафынан ойошторолған Башҡортостан ҡырағай йәнлектәрҙе һаҡлау фонды ла һөҙөмтәле эшләп килә.

Эшҡыуар һәм йәмәғәт эшмәкәре булараҡ та, халыҡ-ара турист-сәйәхәтсе

булараҡ та танылыу яулаған шәхес бихисап һорауҙарға төплө һәм фәһемле яуаптар бирҙе.

***

Яҙыусылар союзы идараһының август айы ултырышында төрлө мәсьәләләр ҡаралды. Шулай ҙа көн тәртибенең үҙәгенә ике юбилей: Башҡортостан Республикаһы Яҙыусылар союзы ойошторолоуға – 75, Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тыуыуына 90 йыл тулыуҙы лайыҡлы билдәләү ҡуйылды. Был ике ҙур сара ла октябрь айында уҙасаҡ. Идара рәйесе Рауил Бикбаев әйтеүенсә, Өфөлә уҙасаҡ Рәсәй Федерацияһы Яҙыусылар союзы секретариатының күсмә ултырышын да ошо юбилейҙарға бағышлау планлаштырыла.

***

«Башинформ» мәғлүмәт агентлығында спорт журналистарының республика конкурсы еңеүселәрен БР йәштәр сәйәсәте, спорт һәм туризм министры Александр Никерин менән БР Хөкүмәте ҡарамағындағы Матбуғат, нәшриәт һәм полиграфия эштәре буйынса идаралыҡ начальнигы Эдуард Юлдашев тәбрикләне.

«Иң яҡшы спорт күҙәтеүсеһе» номинацияһында – Рәшит Әйүпов («Вечерняя Уфа»), «Иң яҡшы спорт фоторепортеры» – Виктор Лушкин («Октябрьский нефтяник»), «Иң яҡшы спорт телекомментаторы» – Максим Балобанов («Башҡортостан» телерадиокомпанияһының «Юлдаш» каналы), «Спорт һәм туризм буйынса башҡорт телендә яҙған иң яҡшы журналист» – Булат Хәйретдинов («Йәншишмә»), «Иң яҡшы спорт журналисы» – Надежда Тюнева («Республика Башкортстан»), «Электрон киң мәғлүмәт сараларында иң яҡшы спорт күҙәтеүсеһе» – Николай Ермоленко («Башинформ» агентлығы), «Сәләмәт тормош, физик культура, спорт һәм туризмды пропагандалаусы иң яҡшы журналист» номинацияһында Вил Килмөхәмәтов («Спортивная газета Башкортостана») дипломға һәм бүләктәргә лайыҡ булды.

***

Башҡортостан Республикаһы дәүләт архивы хеҙмәтенә – 90 йыл. Ул 1919 йылдың 11 августында, РСФСР дәүләт архивының бүлеге булараҡ, Өфө губерна архивы ойошторола. Әхмәтзәки Вәлиди тырышлығы менән БАССР архивына нигеҙ һалына. 1922 йылда иһә ике ойошма БАССР дәүләт архивы булып берләшә. Өс йылдан һуң барлыҡҡа килгән кантон башҡарма комитеты янындағы кантон архивтары район һәм ҡала архивтарына әйләндерелә. Улар бөгөнгө көндә муниципаль архивтары тип йөрөтөлә. БР архив фондында 4,3 миллион самаһы материал тупланған, ә архив учреждениелары хеҙмәткәрҙәренең һаны 300-ҙән ашыу. Архив структураһында эшләйәсәк белгестәрҙе Өфө китапхана колледжы, Өфө дәүләт технология һәм дизайн колледжы, Өфө сәнәғәт-иҡтисад колледжы, БР Президенты ҡарамағындағы Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһы, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты әҙерләй.

***

Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, данлыҡлы ҡурайсы Мөхәммәт Түләбаев (Белорет районы Шығай ауылында биология уҡытыусыһы) Ҡаҙағстандың баш ҡалаһы Астанала уҙған "Астана – Арҡау" төрки музыкаһы фестивалендә ҡатнашып ҡайтты.

Ошоғаса илебеҙҙең күп төбәктәрен, йәнә Франция, Германия, Италия, Сирия, Төркиә, Швейцария, Бельгия, Япония, Ғәрәбстан илдәрен ҡурай моңдарына урап йөрөгән мәшһүр яҡташыбыҙ К. Байсеитова исемендәге Опера һәм балет милли театрында һәм Үҙәк паркында мәшһүр "Урал", "Ҡаһым түрә" көйҙәрен уйнап финалға сыға, алҡыштар ҡаҙана.

***

Өфө ҡалаһының Максимовка микрорайонында "Китап" мәҙрәсәһе нигеҙендә мосолман реабилитация үҙәге асылды. Ҡәтғи тәртип, хеҙмәт тәрбиәһе, доғалар уҡыу, дин әһелдәренән һабаҡ алыу һ.б. реабилитация программаһына инә.

«Исламда эсеү һәм тәмәке тартыу тыйыла, ә наркомания оло гонаһ һанала. Мосолман реабилитация үҙәге наркотикка бәйле кеше үҙ-үҙенә ышанһын һәм вәсүәсәгә ҡаршы торорлоҡ көс тапһын өсөн уға ислам нигеҙҙәрен еткереү бурысын ҡуя»,– ти Нурмөхәмәт хәҙрәт Ниғмәтуллин.

Үҙәктең ишеге тәүлек буйы асыҡ.

(**Телефон:** 8 901 442 10 80.)

## БАШ МӨХӘРРИР ҺҮҘЕ

### *Бергәлеккә ни етә!*

*Яңы уҡыу йылы башланған айҙа гәзит-журналдарға яҙылыу ҙа башлана. Көндәлек тормошобоҙҙоң ошо ике мөһим сараһы бер ҙә юҡҡа тап килмәй. Уйлап ҡараһаҡ, уларҙа ниндәйҙер уртаҡлыҡ, дөйөм башланғыс бар. Был — уҡыу, белем эстәү, донъяны киңерәк асыу, яңылыҡҡа, мәғлүмәтлелеккә ынтылыш. Тимәк, ике мөһим сара — бер бөтөн, ғөмүми маҡсат, һәм уларҙың шулай йәнәш ҡолас йәйеүе һис тә осраҡлы түгел.*

*Сентябрь тыуыу менән 1923 йылдан нәшер ителә килгән "Ағиҙел" журналына ла яҙылыу кампанияһы йәйелдерелде. Әлбиттә, ул еңел генә бармай, бының үҙ объектив һәм субъектив сәбәптәре бар. Ләкин әҙәбиәтебеҙ менән ҡыҙыҡһынған, уны уҡып барған һәм ошонан оло кинәнес, илһам, рухи аҙыҡ ала белгән, һәр хәлдә, юғары мәҙәниәткә ынтылған кешегә баҫмаға яҙылыу хаҡы ла, башҡа сәбәптәр ҙә ҡамасау була алмай. Ғөмүмән, журналдың төп тиражы шундай энтузиастар — илһөйәрҙәр, телһөйәр фанаттар арҙамында йыйыла, һәм беҙ киләһе йылда ла уларҙың арҙамына таянабыҙ, теләктәшлегенә ныҡ ышанабыҙ. Ә яңы дуҫтарыбыҙ — бигерәк тә йәш подписчиктар табылһа, бигерәк тә ҡыуанабыҙ.*

*2010 йылдың тәүге яртыһында ниндәй әҫәрҙәр менән таныштырмаҡсыбыҙ һуң һеҙҙе? Әлегә теүәл генә әйтеүе ҡыйын, шулай ҙа бер нисә йүнәлеште атарға мөмкин. Төп темаларҙың береһе — Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығы. Фронтовик әҙиптәрҙең художестволы йә документаль әҫәрҙәре, тыл ветерандарының иҫтәлек-хәтирәләре баҫмаға әҙерләнә. Һуғышта ҡатнашыусыларҙың һаны йылдан-йыл һирәгәйә, шуға ла уларҙың һәр һүҙе, һәр әҫәре беҙҙең өсөн ҡәҙерле.*

*Фольклорға, сатира-юморға иғтибар артасаҡ, сәнғәт материалдары олоһона ла, кесеһенә лә оҡшаясаҡ, тип өмөтләнәбеҙ. Элеккесә, мауыҡтырғыс романдар, фәһемле повестар, замана хикәйәләре, уҡымлы очерктар һәм әңгәмәләр менән осрашыуҙар көтә һеҙҙе, ҡәҙерле дуҫтар! Бергә-бергә йәшәйек әле... Әлбиттә, илдең ҡото, өйҙөң йәме, күңелебеҙ илһамы — "Ағиҙел" менән.*

**Әмир ӘМИНЕВ**.